МӨХТӘР САҒИТОВ

Борондо башҡорт ҡобайырҙары

МӨХТӘР
СӘҒИТОВ

Боронғо башҡорт ҡобайырҙары

ӨФӨ
БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
1987

82. 3 Баш
С 91

«Боронғо башҡорт ҡобайырҙары» китабы СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми советы тарафынан баҫырға раҫланды.

Профессор **Ғ. Б. Хөсәйенов** редакцияһында

Сәғитов Мөхтәр
С 91 Боронғо башҡорт ҡобайырҙары. Монография. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1987 й. — 224 бит.

Арабыҙҙан иртә киткән ғалим Мөхтәр Сәғитов был хеҙмәтендә боронғо башҡорт ҡобайырҙарының тарихи үҫеш юлдарын һәм уларҙың халыҡ тормошо менән тығыҙ бәйләнешен өйрәнә һәм ҡыҙыҡлы һығымталар яһай.

Китап халыҡ ижады менән шөғөлләнеүсе ғалимдар һәм студенттарға, шулай уҡ киң ҡатлам уҡыусыларға файҙалы ҡулланма буласаҡ.

$С\frac{4603000000-172}{М121(03)-87}116-87$ 82.3 Баш

© Башкортостан китап нәшриәте, 1987 й.

ИНЕШ ҺҮҘ

Минең халҡыма тарихи яҙмыш ике ҡитға — Европа менән Азия сигендә урынлашырға яҙған. Был ҡәҙимге ике материк сиге генә түгел, ә ике культура, ике яҙмыш — Европа менән Азия яҙмышы сиге ул.

Мостай Кәрим

Көньяҡ Уралда һәм Евразия далаларында йәшәүсе башҡорттар, айырым халыҡ булараҡ, X быуат башында уҡ Ибн Фаҙлан юлъяҙмалары буйынса тарихта билдәле [1]. Ибн Фаҙландан да алдараҡ башҡорттарҙы күреп белгән ғәрәп сәйәхәтселәре һәм, ошо сәйәхәтселәрҙең әлегә беҙгә билдәһеҙ яҙмаларына таянып, Ибн Русте, Масуди, Гардизи, Идриси, В. Рубрук, П. Карпини һ. б. ғалимдар башҡорттар хаҡында мөһим мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырғандар [2]. Ә инде XI быуаттың мәшһүр лексикографы Мәхмүт Ҡашғари башҡорт телен төрки телдәр системаһындағы айырым тел итеп ҡараған [3].

Башҡорттар араһынан сыҡҡан айырым әҙиптәрҙең урта быуат төрки яҙма әҙәбиәтен тыуҙырыуға мөһим өлөш индергәнлектәре лә мәғлүм. Мәҫәлән, XIII быуат башында төрки телендә ижад ителгән данлыҡлы «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы авторы Ҡол Ғәлиҙең әйле ырыуы башҡорто икәнлеге билдәле [4].

Башҡорт халҡының этник составы ифрат ҡатмарлы. Уның халыҡ булып ойошоуында боронғо иран, фин-

---

[1] Путешествие Ибн-Фадлана на Волгу. / Перевод и комментарии под редакцией И. Ю. Крачковского. М.-Л.: Изд. АН СССР, 1939, 66—67-се б.

[2] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа, М.: Наука, 1974, 17-се б.

[3] Махмуд Кошгарий. Девону луғотит түрк. Тошкент, 1960, 1-се том, 65-се б.

[4] Әй башҡорттарының нәсәбнамәһе. — Өмөтбаев М. Йәдкәр. Өфө, 1984, 231-се б.

угыр телле ырыуҙар, бик күп һанлы төрки ырыу-ҡәбиләләре, монгол ырыуҙары ҡатнашҡандар һәм халыҡтың физик тибына, материаль һәм рухи культураһына йоғонто яһағандар. Был ҡатмарлы тарихи-этник процесста Үҙәк Азия, Алтай яҡтарынан яңы эра башынан Көньяк Уралға килеүсе боронғо төрки телле ҡәбиләләрҙең роле ҙур[1].

Башҡорт халҡының этник составы ҡатмарлы булған кеүек, уның фольклоры ла шунса ҡатмарлы, бай һәм күп ҡырлы, сағыу биҙәкле. Уның художестволы ижад традициялары ла үҙенең байлығы, үҙенсәлеге менән айырылып тора. Башҡорт халыҡ этносына ингән һәр бер ырыу, ҡәбиләнең дөйөм милли рухи культураға индәйҙер кимәлдә өлөш индергәнлеге шикһеҙ. Шуның өсөн дә дөйөм милли рухи культураның бер өлөшөн тәшкил иткән башҡорт фольклорының ҙур фәнни ҡыҙыҡһыныуы тыуҙырыуы бер ҙә ғәжәп түгел.

Башҡорттар ысын мәғәнәһендә ҙур һәм күп төрлө фольклор мираҫына һәм художество традицияларына эйә.

Күп быуатлы, ҡатмарлы тарих юлы үткән башҡорт халҡының фольклорында эпос, әкиәт, легендалар һәм риүәйәттәр, йыр, бәйет, көләмәстәр, таҡмаҡ, мәҡәл, йомаҡ, йола поэзияһы һ. б. традицион жанрҙар ныҡлы үҫеш алған. Боронғоно сағылдырыр мифологик ҡараштар ҙа һаҡланып ҡалған.

Башҡорт халҡының рухи культураһында һәм боронғо тормошонда фольклор, донъяны белеү, төшөнөүҙең актив формаһы булараҡ, айырата ҙур һәм мөһим роль уйнаған: уның ярҙамында халыҡтың күп быуаттар буйына тупланған аҡылы, тормош тәжрибәһе, донъяға ҡарашы, матурлыҡты, батырлыҡты тойоу, ғәҙеллекте аңлау кеүәһе, кешеләр, ырыуҙар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе, ижтимағи тормошто яйға һалыу, йәштәргә тәрбиә биреү — бөтәһе лә халыҡ ижады аша тормошҡа атҡарылған.

Профессор Ж. Ғ. Кейекбаев халыҡ ижадының ижтимағи, тәрбиәүи әһәмиәте хаҡында шулай ти:

«...Халыҡ ижады жанрҙарына теркәлгән әхлаҡ нормалары көнкүрештә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе билдәләү өсөн халыҡ тарафынан ҡабул ителгән нормаларға әүерелгән.

---

[1] Народное искусство башкир. Л., 1968, 4—5-се б.

Башкорт халык ижады жанрҙары әйтелгәндәрҙең бөтәһенә лә бик асыҡ миҫал була ала. Башҡорт героик эпосы һәм легендаларын, классик халыҡ йырҙарын, мәҡәл, ҡобайыр һәм башҡа жанрҙарҙы халыҡ фәҡәт күңел асыу, тарихи ваҡиғаларҙы тасуирлау, шуның менән рухи ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереү йәки ҡыҙыҡ булһын өсөн генә һөйләмәгән һәм йырламаган. Улар эсендә башҡорт халҡының бөтә рухи байлығы, тормош-көнкүреш философияһы, тарихи һәм өгөт-нәсихәт маҡсатын күҙәткән практик педагогикаһы тупланган. Халыҡ ижады жанрҙарының өгөт-нәсихәт йәки дидактик йөкмәткеһе боронғо башҡорт йәмғиәтендә айырыуса ҙур урын тотҡан»[1].

Борон фольклор халыҡтың яҙылмаган тормош китабы функцияһын башҡарган. Һуңыраҡ яҙма әҙәбиәт һәм сәнғәт үҫешендә ижади шишмә сығанағы хеҙмәтен дә үтәгән. Яҙыусылар, ғалимдар, сәнғәт эшмәкәрҙәре, грек мифологияһындағы ерҙән көс алған Антей кеүек, халыҡ ижадына, бигерәк тә уның мифтарына, эпосына мөрәжәғәт итәләр.

Башҡорт фольклорында эпос жанры — батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар һәм көнкүреш ҡобайырҙары — ҙур урын биләй. Эпик жанрҙың тыуыу һәм үҫеү процессы уны ижад иткән халыҡтың тарихына, тормошона, ижтимағи аң-фекеренең үҫеш эволюцияһына нык бәйләнгән.

Героик эпостың тыуыуы һәм жанр булараҡ нығыныуы ырыу ҡоролошоноң иң үҫкән һәм әкренләп емерелә башлаған дәүеренә тура килә. Уның барлыкҡа килеүе өсөн үҙенсә «героик осор» кәрәк булган. Героик эпос ғәҙәттә геройҙың, халыҡтың сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшен һүрәтләгән, ҡаһарманлыҡты, илһөйәрлекте данлаған. Б. Н. Путиловтың фекеренсә, «эпик осор» тип беҙ халыҡ тормошондағы «эпик» характер менән бәйләнешле халыҡ героик эпосының продуктив үҫеш осорон аңлайбыҙ.

Көнбайыш Европа илдәренең байтағында эпостың продуктив үҫеш осоро ғына түгел, хатта телдән телгә һөйләнелеп йәшәү рәүеше күп быуаттар элек туҡтаған.

---

[1] Киекбаев Ж. Ғ. Әсә теле — мәктәптә тәрбиә ҡоралы. — Тыуган тел — белем һәм тәрбиә ҡоралы. Өфө, 1966, 3—4-се б.

һәм был халыҡтарҙың эпосы беҙгә тик төрлө яҙмалар аша ғына үҙгәрә-үҙгәрә килеп еткән»[1].

Башҡорт халҡының «эпик осоро» ла ырыу ҡоролошо емерелеп, синыфлы йәмғиәткә күсә башлау осоронан алып Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәр урынлаша башлаған ваҡытҡа тиклемге ҙур дәүер арауығын ала. Хәҙерге көндә билдәле эпик сюжеттар нигеҙҙә быуа оһо аралыҡта тыуғандар һәм беҙҙең көндәргә тиклем быуындан быуынға йырауҙар, сәсәндәр һөйләүе аша килеп еткәндәр. Йыраусылыҡ, ҡобайырсылыҡ, сәсәнлек, һүҙ сәнғәте традициялары башҡорт эпосы менән тығыҙ бәйләнгән. Үкенескә ҡаршы, боронғонан изге мираҫ булып ҡалған эпик ҡомартҡыларҙы йыйыу, туплау һәм өйрәнеү эштәре эпостың продуктив ижад ителеү ваҡытынан, йәғни «эпик осор»ҙан, күп һуңлап, нигеҙҙә XX быуат башында ғына, башланған. Шул арҡала байтаҡ эпик ҡомартҡылар онотолоп, юғалып ҡалған. Башҡорт эпосы репертуарының сағыштырмаса аҙ өлөшө генә теүәл көйө һаҡланған, ә байтаҡ сюжеттар бөтөнләй халыҡ хәтеренән сыҡҡан, бик күптәренең тик фабулаһы, айырым өҙөктәре генә ҡалған.

Шулай ҙа һаҡланған тиклемендә лә башҡорт эпосының сағыштырмаса репертуар байлығын, төрлөлөгөн, художество кимәлен асыҡ тойорға мөмкин. Мәҫәлән, быуаттар төпкөлөндә мифологик ҡараштар нигеҙендә тыуған монументаль «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайырҙары башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларының ышаныуҙарын, донъя яралыу, тереклек һәм үлем, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ хаҡындағы ҡараштарын, уй-тойғоларын поэтик сағылдырыуҙары менән ҡиммәтле. Ә инде «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙары быуаттар буйы йылҡысылыҡ, малсылыҡ һәм һунарсылыҡ менән көн иткән халыҡтың тотемистик ҡараштарын, мал культын яҡшы тойомлата.

Башҡорттар, Көньяҡ Уралда һәм Евразия далаларында айырым халыҡ булып ойошоу, үҙ аллы бай рухи культура тыуҙырыу менән бергә, уның төп ҡәбиләләре Үҙәк Азия, Алтайҙа йәшәгән бик алыҫ дәүерҙәренән мираҫ итеп алған иң яҡшы матди һәм рухи ҡомартҡыларын, традицияларын хәтер һандығында һәм көнкүрешендә шаҡтай тотороҡло һаҡлай алғандар. Ҡай-

[1] Путилов Б. Н. Героический эпос черногорцев. Л.: Наука, 1982, 6-сы б.

һы бер боронғо төрки осоро эпик ҡомартҡылары, быуаттар аша үтеп, башҡорт фольклорының алтын фондына ингәндәр. Шундайҙар иҫәбенән «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ише ҡомартҡыларҙы атап әйтергә мөмкин.

Академик В. М. Жирмунский «Алпамыша»ны VI—VIII быуаттарҙа төрөк ҡағанлығы осоронда уҡ билдәле булған эпик сюжет тип ҡарай. Уның фекеренсә, төрки ҡәбиләләрҙең Алтайҙан Европаға күсеүҙәре һөҙөмтәһендә эпос Алтайҙан алып Волгаға, Кесе Азияға тиклемге ҙур территорияла бер нисә версияла таралған. Һәр милли версия яңы йөкмәткә менән байыҡҡан, үҙгәрештәргә дусар булған, милли колорит алған [1].

Башҡорт халҡының эпик мираҫында бик күптәнге ваҡыттарҙа булып үткән ырыу-ара ҡанлы көрәш ваҡиғаларын, тартышыуҙарҙы һүрәтләүсе «Күсәк бей», «Бала бәшнәк» («Бала печенег») һымаҡ уникаль ҡобайырҙар бар. Был ҡобайырҙар IX—XII быуаттарҙа тыуған эпик ҡомартҡыларға ҡарай.

Татар-монгол баҫҡынсыларына ҡаршы аяуһыҙ көрәш ваҡиғаларын хикәйәләүсе ҡобайырҙар башҡорт эпик мираҫының иң ҙур ҡатламын тәшкил итә («Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Таргын менән Ҡужаҡ», «Мәргән менән Маянһылыу», «Ек Мәргән» һ. б.). Шулай уҡ батша самодержавиеһының колониаль һәм социаль иҙеүенә ҡаршы башҡорт халҡының көрәшен һүрәтләүсе ҡобайырҙар циклы эпик жанр репертуарында ҙур урын тота («Ҡараһаҡал», «Батырша», «Байрамбикә менән Татлыбай», «Юлай менән Салауат»). Быларҙан тыш, Көнсығыш әҙәбиәте, баҫма китаптар аркылы үҙләштерелгән «Йософ — Зөләйха», «Таһир — Зөһрә», «Сәйфелмөлөк», «Буҙйегет» һ. б. эпик сюжеттар башҡорттар араһында популярлыҡ алғандар. Улар, ҡулдан ҡулға күсерелеп, ҡулъяҙма рәүешендә лә, шулай уҡ телдән телгә күсеп тә таралғандар.

Шулай итеп, башҡорт халҡы тарафынан эпик ҡомартҡыларҙың бай фонды тупланған. Унда башҡорт эпосының боронғо төрки халыҡтарҙың эпик традициялары нигеҙендә тыуғанлығы һәм артабан яңы ерлектә, яңы тарихи шарттарҙа үҙ аллы үҫеш алғанлығы күренә. Шулай уҡ ҡатмарлы тарихи юл үткән башҡорт халҡының эпосында, мифологияһында билдәле дәрә-

---

[1] Жирмунский В. М. Тюркский героический эпос. Л., 1974, 218—219-сы б.

жәлә монгол, һинд-иран, фин-угыр халыҡтары эпик традициялары һәм мифологияһы йоғонтоһо күҙәтелә.

Уҡыусыларға тәҡдим ителгән монографияла башҡорт халҡының бөтә эпик репертуарын байҡап сығыу, тикшереү күҙ уңында тотолмай, ә тик уның иң боронғо ҡатламын тәшкил иткән ҡобайырҙарҙы, йәғни халыҡтың боронғо тотемистик, мифологик ҡараштары һәм уның айна, көндәлек тормошона үтеп ингән мал культы нигеҙендә тыуған архаик эпосы хаҡында һүҙ бара.

Билдәле булыуынса, барлыҡ халыҡтар ҙа «балалыҡ» дәүерен, «мифтар ижад итеү» осорон кисергән. Кешеләр донъяны, тәбиғәт күренештәрен төшөнөргә, белергә һәм башҡаларға ла был хаҡта төшөндөрөргә, белгертергә тырышҡандар. Шул ихтыяждан мифтар тыуған.

М и ф — грек һүҙе, ғәҙәттә риүәйәт, хикәйәт мәғәнәһендә ҡулланылып йөрөй. Элек мәктәп дәреслектәрендә нигеҙҙә боронғо грек, рим, библия (йәһүд) аллалары һәм геройҙары, уларҙың эшмәкәрлектәре хаҡындағы хикәйәттәрҙе, риүәйәттәрҙе, әкиәттәрҙе мифтар тип йөрөтөр булғандар [1]. Ғалимдар мифтарҙың уйҙырмаға ҡоролған булыуын, уларҙа раҫланған мәғлүмәттәр дөрөҫлөккә тап килмәгән хәлдә лә, уларҙы тыуҙырыусы кешеләрҙең был мәғлүмәттәргә ныҡ ышанғанлыҡтарын, уларҙы дөрөҫ тип ҡарағанлыҡтарын билдәләйҙәр. Әлбиттә, мифтар, боронғо кешеләрҙең ҡараш системаһы булараҡ, ҙур үҫеш эволюцияһын үткән. Элек сер һаналған тәбиғәт йәки ижтимағи күренештәр ваҡыт үтә асыла килгән һәм яңы аңлатма алған, ә ҡайһы берҙәре яңы дәлилдәр менән ныҡытылған. Шулай уҡ мифтарҙы өйрәнеү фәне лә бер урында туҡтап ҡалмаған.

Нигеҙҙә XIX быуат аҙаҡтарында иғтибар үҙәгенә күскән мифологияны өйрәнеү эштәре һуңғы йылдарҙа беҙҙең илдә лә, сит илдәрҙә лә киң ҡолас алды, һәм был фән буйынса ифрат ҙур әҙәбиәт хасил булды. Шуның менән бергә ...

[1] Т р е н ч е н и-В а л ь д а п ф е л ь И м р е. Мифология. М., 1959, 17-се б.; Мифы народов мира. М.: Советская энциклопедия, 1980, том 1, 11-се б.; Мифологический словарь. Л., 1969, 118—119-сы б.; П а р а н д о в с к и й Я н. Мифология. М., 1971, 21-се б.; С т е б л и н-К а м е н с к и й. Миф. Л.: Наука, 1976, 4-се б.

раһы, әҙәбиәте, һынлы сәнғәте үҫешкән, юғары цивилизацияға күтәрелгән халыҡтар мифологияһы ғына, мәҫәлән, боронғо грек һәм Рим антик мифологияһы, дәүләт сиктәре аша сығып, бөтә Европаға һәм башҡа ҡитғаларға таралған, күп халыҡтарҙың культураһына йоғонто яһаған. Төрки халыҡтарҙың тормошонда һәм культураһында ҙур роль уйнаған бай мифологияны өйрәнеүгә тик һуңғы йылдарҙа ғына иғтибар арта төштө. Ә инде төрки культураһының бер өлөшөн тәшкил иткән үҙенсәлекле башҡорт мифологияһы әлегә тиклем махсус рәүештә өйрәнелмәне.

К. Маркстың «Грек мифологияһы грек сәнғәтенең арсеналы ғына түгел, ә уның нигеҙе лә булып тора»[1] тигән тапҡыр характеристикаһы башҡорт мифологияһына ҡарата ла тура килә. Мифологияның халыҡтар культураһында, кешелек йәмғиәте тормошонда тотҡан роле ғәйәт ҙур. Боронғо мифтар телдән телгә һөйләү буйынса ла, хореография, музыка, һынлы сәнғәт аша ла сағылған һәм йәшәгән. Мифология нигеҙендә донъя динләре, фольклор, әҙәбиәт, һынлы сәнғәт культураһы үҫеп сыҡҡан.

Советтар Союзында һәм сит илдәрҙә мифологияны өйрәнеү буйынса ҙур эштәр алып барылыуға ҡарамаҫтан, әлегә тиклем ғалимдар тарафынан берҙәм ҡабул ителгән дөйөм миф теорияһы юҡ. Күпселек ғалимдар мифты айырым фольклор жанры тип ҡарайҙар[2]. Ҡайһы бер ғалимдар уны һүҙ сәнғәте жанры тип танымайҙар. Миф — төрлө формала донъяны тойоу факты; уны йыр, йола үтәү, әкиәт, повесть һамаҡлау аша тойорға һәм башҡаларға еткерергә мөмкин, тип уйлаусы ғалимдар ҙа бар[3].

Мифологияға һәм эпос жанрына арналған ғилми хеҙмәттәрҙә синыфһыҙ тәүтормош-община ҡоролошо осоронда уҡ тыуған һәм артабанғы үҫеш стадияһын

---

[1] Маркс К. и Энгельс Ф. Соч., т. 12, ч. 1, 203-сө б.

[2] Мифы народов мира. М.: Советская энциклопедия, 1980, том 1, 11-се б.; Большая Советская Энциклопедия. М., 1974, том 16, 340-сы б.; Шахнович М. И. Первобытная мифология и философия. Л.: Наука, 1971, 21-се б.

[3] Дьяконова Н. М. Введение. — Мифология древнего мира. М.: Наука, 1977, 17-се б.

кисергән мифтарҙың үҙ дәүеренең идеологияһы, кешеләрҙең донъяға дөйөм ҡарашы булыуы һәм уларҙың тормоштағы ҡатмарлы мәсьәләләрҙе, тәбиғәт донъяһындағы серле күренештәрҙе белергә теләү һәм аңлатырға тырышыу функцияларын үтәгәнлектәре һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Шулай уҡ фольклор жанрҙарының, бигеүәк героик эпос жанрының барлыҡҡа килеүендә һәм формалашыуында, әҙәбиәт һәм сәнғәт үҫешендә мифтарҙың мөһим роль уйнағанлыҡтары мәғлүм.

Был хеҙмәттә беҙ башҡорт эпосы жанрының боронғо мифологик, тотемистик ҡараштар нигеҙендә, дөрөҫөрәге шул ҡараштарҙың көслө тәьҫире аҫтында, донъяға килеүен һәм үҫеп китеүен билдәләйбеҙ. Әммә мифты билдәләүҙә мифология фәнендә йыйылған традицион ҡараштарҙан башҡа позицияла торабыҙ. Ул мифты фольклор жанры тип түгел, ә боронғо кешеләрҙең, айырым ырыу-ҡәбиләләрҙең, халыҡтарҙың донъяға, тәбиғәт һәм йәмғиәт тормошо күренештәренә ҡарата универсаль ҡараш системаһы тип иҫәпләйбеҙ һәм ошо билдәләмәгә таянып фекер йөрөтәбеҙ. Мифологик ҡараштар кешелек йәмғиәтенең үҫеш эволюцияһына ярашлы рәүештә төрлө осорҙа төрлө кимәлдә фольклорҙың төрлө жанрҙарында (эпос, әҙәбиәт, легенда, риүәйәт, мәҡәл, әйтем һ. б.) сағылыуы мөмкин. Шулай уҡ мифологик ҡараштарҙың халыҡ хореографияһында, һынлы сәнғәтендә ҡатнашҡанлығы һәм йәшәгәнлеге бер кемдә лә шик тыуҙырмай. Мифик ҡараштар кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәббәттәрендә, гәҙәт-йолаларында бигерәк тә асыҡ сағыла һәм тотороҡло һаҡлана.

Мифология — кешелек тарихындағы универсаль, синкретик күренеш. Халыҡ мифологияһы нигеҙендә тыуған донъя диндәрен (йәһүд, будда, христиан, мосолман һ. б) фольклор жанры тип ҡарап булмаған кеүек, мифологияны ла фольклор жанры тип иҫәпләү дөрөҫ түгел. Әлбиттә, рәсми диндәр менән мифология араһында айырмалар байтаҡ. Дин — тотороҡло үтәлергә тейешле ритуал-йолаларға бәйле һәм рәсми төҫ алған идеологик күренеш. Ә диндән дә боронғораҡ осорға ҡайтып ҡалған мифологик ҡараштар, халыҡтың аңында, көндәлек тормошонда йәшәһәләр ҙә, улар мәжбүри үтәлә торған тәртип ҡағиҙәһенә әйләнмәгәндәр, рәсми төҫ алмағандар. Ата-бабаларыбыҙҙан бик боронғо дәүерҙәрҙән үк мираҫ булып ҡалған һәм тормош тәжрибәһе, рухи культура байлығы булған мифо-

логия бөгөнгө көндә лә беҙҙең тормошобоҙҙа, йырҙарыбыҙҙа, бейеүҙәребеҙҙә, йолаларыбыҙҙа, һынлы сәнғәтебеҙҙә, әҙәбиәтебеҙҙә, мәңге шиңмәҫ фольклорыбыҙҙа йәшәүен дауам итә һәм халҡыбыҙҙың ҡабатланмаҫ рухи культура хазинаһы булып ҡала.

Беҙ уҡыусыларҙы башҡорт халҡының боронго ҡобайырҙары һәм ул әҫәрҙәрҙең сюжет туҡымаһында ынйы бөртөктәре кеүек һибелеп ятҡан мифологик ҡараштар, мотивтар һәм образдар менән таныштырып китеүҙе үҙебеҙҙең төп бурысыбыҙ итеп һанайбыҙ.

Беренсе бүлек

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫ ҺӘМ УНЫ ӨЙРӘНЕҮ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

Эпос — ул халыҡ ижадының боронғо эпик төрҙәренең һәм жанр формаларының береһе. Боронғо ырыу ҡоролошо тарҡала башлаған дәүерҙәрҙә үк барлыҡҡа килгән был жанр кешеләрҙең тәбиғәт һәм тормош хаҡындағы ҡараштарын, ышаныуҙарын сағылдырған. Ул тора-бара халыҡтың тормошон, тарихын, рухи донъяһын поэтик рәүештә һынландырған киң пландағы эпос булараҡ үҫеш алған һәм формалашҡан.

Башҡорт халыҡ эпосы ла, сығышы һәм тәбиғәте менән ошо типта булып, дөйөм халыҡ, кешелек донъяһы өсөн әһәмиәтле темаларҙы, идеяларҙы күтәреүе һәм уларҙы нигеҙҙә героик планда һүрәтләүе, эпик киңлек, масштаблылыҡ менән характерлы. Уның халыҡ мифологияһына нигеҙләнеп тыуған боронғораҡ формаларына мифологизм һәм фантастика хас. Һуңғыраҡ осорҙарҙа тыуған эпик ҡомартҡыларҙа реалистик һүрәтләү элементтары көсәйә бара.

Башҡорт эпосы йәки, халыҡса әйткәндә, ҡобайыры идея-тематик йөкмәтке-

һе һәм жанр формалары яғынан ифрат бай һәм төрлө-төрлө.

Ҡобайырҙар борон йырау һәм сәсәндәр тарафынан сығарылып, һөйләү аша телдән телгә, быуындан быуынға күсә килгән. Уларҙың төп йәшәү формаһы телдән һөйләү, һамаҡлап әйтеү (речитатив) рәүешендә булған, һүҙ оҫталары тарафынан отоп алынып, уларҙың хәтерҙәрендә һаҡлап киленгән. Һуңғы дәүерҙәрҙә, XVII—XVIII быуаттарҙан башлап, уларҙы ҡағыҙға күсереп ҡулъяҙма хәлендә һаҡлау ҙа ғәмәлгә ингән.

Һөйләү, әйтелгәнде яҙып алыу, күсереп ҡуйыу рәүешендә беҙҙең көндәргә ике формала килеп еткән был эпик ҡомартҡылар — ҡобайырҙар араһында меңдән алып дүрт-ете меңгә тиклем шиғри юлдан торғандары ла, шиғыр менән проза аралаш килгәндәре лә, күберәк сәсмә форма алғандары ла бар.

Башҡорт эпосының атамаһын баштан уҡ асыҡлап китергә кәрәк. Эпик ҡомартҡының ҙур һәм бәләкәй күләмдә булыуы, теҙмә һәм сәсмә формаларҙың аралашып китеүе тикшеренеүселәр араһында төрлө ҡараш тыуҙырған, жанр атамаһының да төрлөсә исемләнеүенә килтергән.

Мәғрифәтсе, ғалим һәм яҙыусы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев 1876 йылда яҙған «Башҡорттар» тигән хеҙмәтендә башҡорт халыҡ ижадына, уның эпос төрөнә лә туҡталып китә. «Башҡорттарҙың боронғо йыры өләң тип атала, — ти ул. — Өләң — ул хикәйәт (сказание), йәғни эпос, ләкин власть нығынып урынлашҡан һәм башҡорттар төрлө халыҡтар менән аралашҡан ваҡыттан алып өләң йырҙары дүртәр юллыҡ лирик рифмаларға әүерелде.

Уларҙа мөхәббәт, ҡунаҡтарға маҡтау, рәхмәт йырлана.

...Өләң йырҙарында батырҙарҙың ҡаһарманлығы һәм хандарҙың уландарына өгөт-нәсихәттәре йырланған»[1].

Өләң термины һәм шиғыр формаһы ҡаҙаҡ фольклорында бигерәк тә нык таралған булһа ла, ул эпос мәғәнәһендә ҡулланылмай, ә ғөмүмән «шиғыр», «халыҡ шиғыры» рәүешендә йөрөй. Тик был термин «эпос» мәғәнәһендә башҡорт фольклористикаһында нығына алмаған.

Башҡорттар араһында эпос мәғәнәһендә иң киң таралғаны «ҡобайыр» атамаһы булған. 20—30 йылдарҙағы хеҙмәттәрҙә ҡобайыр эпос мәғәнәһендә ҡулланыла. Мәҫәлән, сәсән һәм фольклорсы-ғалим Мөхәммәтша Буранғолов «Аҡбуҙат», «Мәргән менән Маянһылыу» «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» эпик әҫәрҙәре индергән йыйынтыҡты «Батырҙар хаҡында ҡобайырҙар» тип атаған[2]. Уның «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосын да жанр яғынан ҡобайыр тип исемләгәне мәғлүм.

Башҡорт халҡының эпик ижадын өйрәнеүгә күп көс һалған күренекле ғалим Ҡирәй Мәргән шулай уҡ ҡобайыр атамаһының киң мәғәнәһендә эпос төшөнсәһен биреүен билдәләне. «Элек ҡобайыр төшөнсәһе Көнсығыштағы дастан төшөнсәһе, йәки рус фольклоры ерлегендә тыуған былина кеүек ҡабул ителгән. Беҙгә килеп еткән ҡайһы бер эпик әҫәрҙәр әле

---

[1] Өмөтбаев М. Йәдкәр. Өфө, 1984, 189—190-сы б.

[2] СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы ғилми архивы (артабан — Ғилми архив), ф. 3, оп. 12/297, 27-се б.

лә ҡобайыр исеме аҫтында йөрөтөләләр. Шулай итеп, ҡобайыр ул традицион эпик поэма формаһы булып киткән, сәсәнлек сәнғәтенең традицион формаһына әүерелгән» [1], —» тип яҙҙы ул.

Профессор Ғ. Б. Хөсәйеновтың «ҡобайыр» термины тураһында фекере етди иғтибарға лайыҡ. Ул башҡорт эпосының алтын фондын тәшкил иткән «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Күсәк бей» ҡомартҡыларын «ҡобайыр-эпос» тип атай [2].

Ҡобайыр мәсьәләһендә профессор Әхнәф Харисов башҡасараҡ фекерҙә торҙо. Был терминды ул үҙенең тәүҙәрәк яҙылған хеҙмәттәрендә шау шиғыр юлдарынан торған ҙур эпик әҫәр өҙөктәренә, әйтеш, һамаҡ, әйтемдәргә ҡарата ҡулланды. Ғалим башҡорт эпик поэзияһының боронғо бер генә формаһын, йәғни строфаһы икенән алып иллегә һәм унан да күберәк теҙмә юлдарҙан торған поэтик әҫәрҙәрҙе генә ҡобайыр тип атаны һәм ул әҫәрҙәрҙең ҡайһы бер өлгөләрен баҫып сығарҙы [3]. Әйтергә кәрәк, «ҡобайыр» терминын һәм жанрын ошо рәүешле тар мәғәнәһендә аңлатыу байтаҡ йылдар буйы мәктәп дәреслектәрендә һәм юғары уҡыу йорттары программаһында ла урын алып килде.

60—70-се йылдарҙа башҡорт халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу, баҫтырып сығарыу һәм

---

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961, 73—74-се б.

[2] Хөсәйенов Ғ. Б. Заман. Әҙәбиәт. Әҙип. Өфө, 1978, 61се б.

[3] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. / Төҙөүсеһе, редакция, кереш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә. И. Харисов. Өфө, 1954, 11—18, 55—71-се б.

ғилми яҡтан өйрәнеү эштәренең киң йәйелдереүе эпик жанрҙарҙың, шул иҫәптән «ҡобайыр» атамаһының, жанр үҙенсәлеген аныҡ билдәләүгә алып килде. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты сығарған «Башҡорт халыҡ ижады» тигән күп томлыҡ баҫмала башҡорт эпосы үҙенең халыҡсан исеме менән «ҡобайыр» тип аталды, был терминға уның боронғо киң мәғәнәһе һалынды [1].

«Ҡобайыр» һүҙе башҡорт телендә маҡтау, данлау йыры тигәнде аңлата. «Ҡоба» һүҙе күп кенә төрки халыҡтарҙа яҡшы, һәйбәт, маҡтау мәғәнәһендә йөрөй. Мәҫәлән, һары уйғыр телендә ул бәхет, маҡтауҙы аңлата [2]. Тағы шуныһын да иҫтә тотмай мөмкин түгел: «ҡоба» төрки халыҡтарҙа, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, хайуан, ҡош-ҡорт төҫөн (ҡоба һыйыр, ҡоба ҡош һ. б.) белгерткән һәм был төҫ изге төҫ һаналған. Шулай итеп, ҡобайырҙың «изге йыр» мәғәнәһен йөрөтөүе лә ихтимал.

С. И. Руденко «Башҡорттар» тигән тарихи-этнографик хеҙмәтендә ҡобайырҙы башҡорт поэзияһының боронғо эпик төрҙәренә индерә [3].

Шуныһын да әйтергә кәрәк: әҙәби сығанаҡтар аша килеп еткән йә булмаһа ҡулъяҙма рәүешендә йәшәгән «Таһир — Зөһрә», «Йо-

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Беренсе китап. / Төҙөүсеһе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсеһе Мөхтәр Сәғитов. Өфө, 1972 (артабан — БХИ. Эпос, 1972), 198, 306-сы б.

[2] Малов С. Е. Язык желтых уйгуров. Алма-Ата, 1957, 56-сы б.

[3] Руденко С. И. Башкиры. Историко-этнографический очерк. М.—Л., 1955, 309-сы б.

соф — Зөләйха», «Сәйфелмөлөк», «Буҙйегет» кеүек эпик әҫәрҙәр әүәл ҡ и с с а тип аталып йөрөтөлгәндәр. Профессор Ҡирәй Мәргән тексы шиғыр менән проза аралаш килгән йә булмаһа күпселек өлөшө прозанан торған эпик әҫәрҙәрҙе и р т ә к тип атаны [1]. Әммә был термин башҡорт фольклористикаһында нығына алманы. Бындай хәлдәр башҡа төркн халыҡтар эпик традицияһында ла осрай.

Алтайҙар эпосты к а й л а п а й д а р ч ө р ч ө к, йәғни к ө й л ә п ә й т е л ә т о р ғ а н ә к и ә т, тип йөрөтәләр [2].

Хәҙерге көндә башҡорт фольклористикаһында, героик йөкмәткеле булыуына ҡарамаҫтан, тексының күпселек өлөшө прозанан йә шаҡ сәсмә юлдарҙан торған эпик әҫәрҙәрҙе х и к ә й ә т термины менән атап йөрөтөү бар.

Тормош-көнкүреше, рухи культураһы яғынан башҡорттарға бик яҡын торған ҡаҙаҡ халҡының фольклорында эпос мәғәнәһендә ж ы р атамаһы ҡулланылып килә. Башҡорт фольклорында ла эпос жанрын ҡ о б а й ы р тип атау — тәбиғи күренеш, һәм был термин башҡорт эпосы жанрының дөйөм милли атамаһы булып ҡалырға хаҡлы.

Ҡобайырҙы йырау һәм сәсәндәр көйләп әйтер булғандар. Хәҙер ҡулланыуҙан сыҡһа ла, элек ҡобайырҙар йыш ҡына думбыра сиртеп, шуның тауышына ҡушылып көйләп башҡарылған. Был хаҡта башҡорт эпостарының үҙҙәрендә үк мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, 1909 йылда халыҡ шағиры Мәжит Ғафури Асылы-

---

[1] Ҡ и р ә й М ә р г ә н. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 316-сы б.

[2] М а а д а й - Ҡ а р а. Алтайский героический эпос. М.: Наука, 1973, 22-се б.

гүл буйы башҡорттарының «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын көйләп башҡарыуҙарын ишеткән. Ә уның 1910 йылда баҫып сығарған «Заятүләк берлә Сусулу» китабында эпостың төп геройы Заятүләктең өләңгә, думбыраға оҫта икәнлеге әйтелә[1]. «Алпамыша» эпосында дошман ҡулына әсирлеккә эләгеп, ер аҫты зинданында ятыусы Алпамыша ел осортоп төшөргән таҡтанан, үҙенең сәсенән думбыра яһап уйнай. Үҙенең оҫта уйнап йырлауы менән батша ҡыҙҙарының күңелен арбай һәм уларҙың ярҙамы менән әсирлектән ҡотола[2].

XIX быуат аҙағында башҡорт музыка фольклорын йыйыусы рус ғалимы С. Г. Рыбаков башҡорттарҙа думбыра тигән музыка ҡоралы булыуы хаҡында мөһим мәғлүмәт ҡалдырған[3].

Әммә, ниндәйҙер сәбәп арҡаһында, XIX быуат аҙаҡтарында — XX быуат баштарында башҡорттар араһында думбырала уйнаусылар һирәгәйгәндән-һирәгәйә барып, аҙаҡ һүнеп үк ҡала. Думбырасылыҡ сәнғәтенең шулай һүнеүе ҡобайырсылыҡ традицияһының әкренләп һүрелеүенә ниндәйҙер дәрәжәлә йоғонто яһаған булһа кәрәк. Был иһә ҡобайырҙы ярым көйләп әйтеүҙән уны һөйләүгә күсеүҙе, йәғни поэтик текстың проза менән алмашыуын, тиҙләткәнгә оҡшай.

Ғайса Хөсәйенов үҙенең йырау һәм сәсән-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 198, 306-сы б.

[2] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Икенсе китап. / Төҙөүсеһе, баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсеһе Мөхтәр Сәғитов (артабан — Эпос, 1973). Өфө, 1973, 326—327-се б.

[3] Рыбаков С. Г. Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта. СПб., 1897, 113-сө б.

[illegible] хаҡында яҙған мәҡәләһендә думбырала йырлаусы башҡорт культураһы тормошонда булған боронғо йыраусылыҡ сәнғәтенә бәйләй. «Йырау — асылда боронғо халыҡ шағиры һәм йырсыһы ул. Тәғәйене, унда импровизаторлыҡ менән йырсылыҡ һәләте бергә ҡушыла. Ул ғәҙәттә тотҡарлыҡһыҙ шиғыр сығара бара, шуны думбыраһында сиртеп, ярым көйләп, һамаҡлабыраҡ әйтә, йырауға әүерә. Уның исеме лә ошо башҡарыу рәүеше менән бәйле. Хәҙер ҙә Ҡарағалпаҡ, Алтайҙағы төрки йыраусылар ошо рәүешле ижад итәләр [illegible]»[1]. Ғалим артабан «йыраусы» атамаһының боронғо мәғәнәһе онотолоп, хәҙер телдә «йырсы» рәүешендәге тар мәғәнәһе генә ҡалыуын билдәләй.

Башҡорт халыҡ эпосын йыйыу һәм өйрәнеүҙең оҙайлы ғына тарихы бар. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем рус халҡының алдынғы ҡарашлы ғалимдары, шулай уҡ башҡорттарҙың үҙҙәре араһынан сыҡҡан айырым һәүәҫкәрҙәр фольклор әҫәрҙәрен йыйыу, донъяға сығарыу буйынса байтаҡ эш башҡарғандар һәм ҡайһы бер ғилми күҙәтеүҙәр ҙә яһағандар.

Туранан-тура башҡорт эпосын яҙып алмаһа ла, шуны һаҡлаусы һүҙ оҫталары, йырсылар хаҡындағы тәүге мәғлүмәттәрҙе XVIII быуат аҙаҡтарында Көньяҡ Урал байлыҡтарын өйрәнгән рус ғалимы И. И. Лепехиндың юл яҙмаларында осратабыҙ[2]. Башҡорт эпо-

---

[1] Хөсәйенов Ғ. Б. Заман· Әҙәбиәт. Әҙип, 46-сы б.

[2] Лепехин И. И. Дневные записки путешествия по разным провинциям Российского государства в 1770 г., ч. 2, СПб., 1802, 11-се б.

сын беренсе булып яҙып алыусы һәм баҫып сығарыусы итеп хаҡлы рәүештә Тимофей Беляевты күрһәтергә мөмкин. Ул халыҡтан яҙып алынған «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының башҡортса ҡулъяҙмаһы менән таныша һәм, 1809 йылда уны руссаға тәржемә итеп, 1812 йылда Ҡазан университеты типографияһында баҫтырып сығара[1].

Китапта Т. Беляев «мин... был әҫәрҙең икенсе киҫәген дә табып, тәржемә итә башланым. Был киҫәктә ҡурайсы, башҡорт ҡәбиләһенең ырыу башлығы хаҡында хикәйә итеүҙе тамамлап, уның тоҡомдары тураһында һөйләүен дауам итә» тип иҫкәрмә яһаған. 60-сы йылдарҙа Ленинградта табылған «Алдар менән Зөһрә» хикәйәте Т. Беляев әйткән ана шул әҫәрҙең икенсе киҫәге булыуы мөмкин.

Күренекле рус ғалимы һәм яҙыусыһы В. И. Даль 1833—1841 йылдарҙа Ырымбур губернаһында хеҙмәт иткәндә башҡорт фольклоры менән ҡыҙыҡһына һәм беренсе башлап «Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәрен яҙып алып, «Башкирская русалка» исеме менән 1843 йылда «Москвитянин» журналында рус телендә донъяға сығара[2]. Баш һүҙендә ул Дим буйы башҡорттарына, уларҙың тарихына, йолаларына, шулай уҡ ер-һыу исемдәренә бәйле легендалар хаҡында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын башҡа ғалимдар ҙа яҙып алған.

---

[1] Беляев Т. Куз-Курпяч. Башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долине гор Рифейских, 1809 года. Казань, 1812.

[2] «Москвитянин», 1843, № 1, 97—119-сы б.

Көнсығыш халыҡтары фольклорының белгесе Г. Н. Потанин үҙенең «Дала эпосында диңгеҙ ҡыҙы»[1] тигән хеҙмәтендә «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙы башҡа төрки, шулай уҡ монгол халыҡтарының эпик әҫәрҙәре менән сағыштыра, ҡыҫҡаса уның сюжетына, типологик оҡшашлыҡтарына туҡтала. Ғалимдың был тикшеренеүе ҙур иғтибарға лайыҡ. Шулай ҙа хеҙмәтен ул асылда «күсеп йөрөмәле сюжеттар» позицияһынан сығып яҙған. Һыу аҫты донъяһы, диңгеҙ ҡыҙы тураһындағы сюжетты ул, ниндәйҙер тарихи сәбәптәр арҡаһында бер халыҡтан икенсеһенә күскән булырға тейеш, тип аңлата. Оҡшаш тормош ҡоролошо кисергән халыҡтарҙың рухи культураһында ла оҡшаш моменттарҙың булыуын Потанин иҫәпкә алмай, төрлө халыҡтар фольклорында осраған типологик сюжеттарҙы тик бер-береһенән үҙләштереүгә генә ҡайтарып ҡалдыра.

XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында башҡорт фольклорын йыйыуҙа А. Г. Бессоновтың эшмәкәрлеге мөһим урын алып тора. Башҡорт телен яҡшы белгән А. Г. Бессонов, күп йылдар буйына Өфө, Пермь, Ырымбур губерналарындағы башҡорт ауылдарында булып, ҙур һәүәҫлек менән әкиәттәр, легендалар, шулай уҡ «Алпамыша менән Барсынһылыу» тигән эпик әҫәрҙең бер вариантын яҙып ала һәм уларҙы русcаға тәржемә итә. Әммә А. Г. Бессонов йыйған башҡорт әкиәттәре ул үҙе иҫән саҡта донъя күрә алмай, бик күп йылдар үткәс кенә айырым

[1] Потанин Г. И. Дочь моря в степном эпосе. — Этнографическое обозрение, 1892, № 1—4, 38—69-сы б.

китап булып баçыла[1] «Алпамыша менән Барсынһылыу» әçәре лә шул китапҡа ингән.

XIX быуат аҙағында — XX быуат баштарында башҡорттар араһынан халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһыныусы айырым ғалимдар, мәғрифәтсе яҙыусылар, һәүәçкәр эшмәкәрҙәр күтәрелеп сыға. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев 1897 йылда Ҡазанда сыҡҡан «Ядкар» китабында «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосынан бер өҙөк урынлаштырған. 1902 йылда Сәлимгәрәй Солтанов Һамар ҡалаһында сыҡҡан «Самарская газета»ның 83-сө һанында «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының бер вариантын рус теленә тәржемә итеп баçтырған. Ошо әçәрҙең икенсе вариантын 1909 йылда Мәжит Ғафури ҙа Асылгүл буйында яҡын-тирә ауылдарҙан килгән башҡорт ҡурайсыларынан яҙып ала һәм 1910 йылда Өфөлә «Заятүләк беләң Сусылу» тигән исем менән айырым китап итеп сығара. Фазыл Туйкин үҙенең 1915 йылда Өфөлә сыҡҡан «Нардуған» тигән шиғырҙар, йырҙар йыйынтығына «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының бер өҙөгөн «Боронғо башҡорт йыры Мораҙым» исеме менән индергән. 1916 йылда Фәйзи Вәлиев «Аң» журналының 14-се һанында «Ек Мәргән» әçәренең бер вариантын бер аҙ эшкәртеп баçтырған.

XX быуат башында башҡорт эпосы әçәрҙәрен яҙып алыуҙа Мөхәммәтша сәсән Буранғоловтың хеҙмәте бик ҙур. Ул 1910 йылда Ырымбур губернаһы Этҡол волосы Иҙрис

---

[1] Башкирские народные сказки. / Составление и перевод А. Г. Бессонова· Под редакцией Н. К. Дмитриева. Уфа, 1941.

ауылының мәшһүр ҡурайсыһы, бөрйән ырыуы башҡорто Ғәбит Арғынбаев сәсәндән һәм шул уҡ волостың Бәләкәй Этҡол ауылы ҡурайсыһы Хәмит Әлмөхәмәтов сәсәндән «Урал батыр» ҡобайырын яҙып ала. 1907 йылда М. Буранғоловтың көньяҡ Башҡортостанда киң таралған «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр буға» көйҙәрен табып, ҡағыҙға теркәп ҡуйыуы билдәле. 1917 йылда ул хәҙерге Күмертау районы Бабалар ауылы сәсәне Ғәтиәтулла Биҡҡужиндан «Аҡбуҙат» эпосын яҙып алған.

Шулай итеп, Октябрь революцияһына тиклемге үк рус ғалимдары һәм башҡорттар араһынан күтәрелеп сыҡҡан эшмәкәрҙәр тарафынан башҡорт эпик фольклорының байтаҡ гүзәл өлгөләре яҙып алына, һәм уларҙың ҡайһы берҙәре баҫылып та сыға. Әммә был осорҙа әле халыҡ ижады ҡомартҡыларын йыйыу һәм өйрәнеү күбеһенсә осраҡлы рәүештә башҡарылған айырым һәүәҫкәрҙәр эшенә ҡайтып ҡала. Поэтик мираҫты фәнни өйрәнеү эше иһә башланғыс хәлендә генә була.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң халыҡ ижадын йыйыу һәм фәнни нигеҙҙә өйрәнеү системалы төҫ ала. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы төҙөлөү менән Мәғариф халыҡ комиссариаты эргәһендә халыҡ ижадын йыйыу һәм өйрәнеү бүлеге ойошторола, 1922 йылдың башында башҡорттарҙың культураһын һәм көнкүрешен өйрәнеү буйынса Башҡортостанды өйрәнеү мәркәзе төҙөлә. Был мәркәз тарафынан байтаҡ ҡына эпик фольклор материалы туплана, һәм уның органы булған «Башҡорт аймағы» журналында, шулай уҡ «Яңы юл»,

«Сәсән» журналдарында ауыҙ-тел ижады өлгөләре баҫыла [1].

Халыҡтың этнографияһын, поэтик ижадын өйрәнеүҙә Х. Ғәбитов, Ғ. Дәүләтшин кеүек эшмәкәрҙәр ҙур көс һалалар. Фольклорҙы ғилми нигеҙҙә системалы йыйыу өсөн ҡулланмалар баҫып сығарыла [2].

30-сы йылдарҙа, бигерәк тә СССР яҙыусыларының беренсе съезында М. Горькийҙың халыҡ ижадын юғары баһалап, уны тупларға, өйрәнергә саҡырған сығышынан һуң, бөтә илдә фольклорҙы йыйыу һәм баҫып сығарыу эштәре киң йәйелдерелә. Башҡортостан Милли культура институты тарафынан республиканың төрлө райондарына ғилми экспедициялар ойоштороло, урындарҙа һәүәҫкәр корреспонденттар менән даими элемтә булдырыла. Фольклор дөйөм милли культура байлығы тип баһалана, уны туплау бөтә халыҡ эше тип иғлан ителә.

Башҡорт фольклорын ғилми нигеҙҙә йыйыу һәм өйрәнеү эшен яйға һалыуҙа Мәскәү ғалимдарының, яҙыусыларының ярҙамы ҙур булды. 1938 йылда билдәле рус фольклорсыһы Ю. М. Соколов, СССР яҙыусылар союзының фольклор секцияһы ултырышында башҡорт халыҡ ижадына баһа биреп: «Беҙҙең ал-

---

[1] Башҡорт ҡашҡалары. — «Башҡорт аймағы», 1925, № 1; Башҡорт әкиәттәренән берәүһе. — Шунда уҡ, 1927, № 3; Ҡобайырҙар. — Шунда уҡ, № 4; Дәүләтшин Ғ. Мәсем хан. — Шунда уҡ, 1929, № 7; Башҡорт бейҙәре һәм хандары миҙгелендәге матур әҙәбиәттән үрнәктәр. — «Сәсән», 1928, № 11—12.

[2] Бәхтияров М. Халыҡ әҙәбиәтен йыйыусыларға.— «Башҡортостан хәбәрләре», 1921, № 8; Наушируан З. Халыҡ әҙәбиәге материалдарын йыйнау тураһында. — «Башҡорт аймағы», 1927, № 4.

да бай халыҡ поэзияһы асылды. Был поэтик байлыҡты башҡорт халҡына ғына түгел, ә рус халҡына, шулай уҡ Советтар Союзының бөтә халыҡтарына, хатта бөтә донъя халыҡтарына еткереү өсөн, башҡорт работниктарына һәр яҡтан ярҙам итеү һәм үҙебеҙгә лә ошо юлда бар көстө һалыу — беҙҙең изге бурысыбыҙ», — тине [1].

Мәскәү ғалимдарының практик ярҙамы, Милли культура институты хеҙмәткәрҙәренең ҙур тырышлығы менән 30-сы йылдарҙа бик күп фольклор материалдары, шул иҫәптән эпик әҫәрҙәр, тупланды. Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә үткәрелгән ғилми экспедициялар ҡиммәтле һөҙөмтәләр бирҙе. Башҡорт фольклорының эре жанрҙарын, йолаларын, йырҙарын туплауҙа фольклорсы һәм халыҡ сәсәне Мөхәммәтша Буранғолов ҙур тырышлыҡ күрһәтте. Халыҡ ижадының уникаль эпик үрнәктәренең һаҡланып ҡалыуында беҙ иң беренсе сиратта М. Буранғоловҡа бурыслыбыҙ. 30-сы йылдарҙа урындағы корреспонденттарҙан Әхмәт Исламғоловтың (элекке Йомағужа районы), Хәҙим Ҡәнзәфәровтың (Балтач районы) эшмәкәрлеге һөҙөмтәле булды. Йыйыу эшендә шулай уҡ Али Карнай, Ғәйнан Әмири, Ғәлимов Сәләм кеүек яҙыусылар активлыҡ күрһәттеләр. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә һәм айырым йыйынтыҡтарҙа халыҡ эпосына ҡараған байтаҡ материал баҫылып сыҡты [2].

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/274, 42-се б.

[2] Заятүләк. — «Октябрь», 1938, № 6; «Ҡараһаҡал менән Ҡара ат» көйөнөң тарихы һәм йырҙары. — «Октябрь», 1939, № 8; Аҡбуҙат. — «Октябрь», 1940, № 5; Юлай менән Салауат. — «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1940; Иҙеүкәй менән Мораҙым. — «Октябрь», 1940, № 6—8.

Халыҡ ижады әҫәрҙәрен туплау, өйрәнеү, нәшер итеү эштәре 40-сы йылдарҙа ла. илебеҙ өсөн иң ауыр һуғыш осоронда ла, унан һуң да интенсив дауам итте. Ҡобайырҙар, шулай уҡ һуғыш фольклоры өлгөләре йыйылды һәм нәшер ителде. 1943 йылда Мөхәммәтша Буранғолов тик ҡобайырҙарҙан ғына торған йыйынтыҡ әҙерләп баҫтырҙы[1]. 1951 йылда Өфөлә СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолғандан һәм 1957 йылда Башҡорт дәүләт университеты асылғандан һуң халыҡ ижадын, бигерәк тә эпос жанрын, систематик рәүештә туплау һәм нәшер итеү масштабы күпкә киңәйә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм Башҡорт дәүләт университеты йыл һайын даими фольклор экспедициялары ойоштора башлай. 50-се йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты башҡорт фольклорының традицион жанрҙарының иң яҡшы өлгөләрен эсенә алған 3 китаптан торған ғилми баҫмаһын әҙерләп сығарҙы[2]. Был башҡорт эпостарын баҫтырып сығарыу һәм фәнни өйрәнеү өлкәһендә етди аҙым булды.

СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты 60-сы, 70-се йылдарҙа Башҡортостандың төрлө райондарында, шулай уҡ Курган, Силә-

---

[1] Буранғолов М. Батырҙар хаҡында эпос. Өфө, 1943.

[2] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. / Төҙөүсеһе, кереш мәҡәлә яҙыусыһы һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә. И. Харисов. Өфө, 1954; Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том / Төҙөүсеһе, баш һүҙ яҙыусы һәм иҫкәрмәләр биреүсеһе Ә. И. Харисов. Өфө, 1959; Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. / Төҙөүсеһе. баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар биреүсеһе Ҡирәй Мәргән. Өфө, 1955.

бе, Пермь, Свердловск, Ырымбур, Куйбышев, Саратов өлкәләрендә йәшәүсе башҡорттар араһында фольклор экспедициялары үткәрҙе. Ошо экспедициялар тарафынан хәҙергәсә фәнгә билдәһеҙ ҡалған байтаҡ эпик ҡомартҡылар табылды, билдәле булғандарының әһәмиәтле варианттары яҙып алынды. Тупланған бай материал башҡорт эпосы хаҡында төплөрәк фәнни эштәр алып барырға киң мөмкинлек бирҙе. Шуның бер һөҙөмтәһе булараҡ, Кирәй Мәргәндең «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» (Өфө, 1961) тигән монографияһы донъя күрҙе. Унда башҡорт эпосының социаль-тарихи нигеҙе, милли ерлектә тыуған, шулай уҡ ситтән үҙләштерелгән сюжеттар тикшерелә. Эпик жанрҙың фольклорҙың башҡа жанрҙарына мөнәсәбәте, үҙ-ара тоҡсире хаҡында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирелә.

Кирәй Мәргәндең был китабының рус телендә лә баҫылыуы [1] башҡорт эпосы хаҡындағы фәнни мәғлүмәттәрҙе Союз һәм донъя аренаһына алып сығыуға, башҡорт эпосын киң масштабта пропагандалауға булышлыҡ итте.

Эпик ҡомартҡылар хаҡында тағы байтаҡ ғына ғилми китаптар, мәҡәләләр сыҡты. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының рус телендә баҫылыуына 150 йыл тулыу айҡанлы 1962 йылда Өфөлә ғилми сессия уҙғарылды, һәм уның материалдары айырым йыйынтыҡ итеп баҫылды [2].

Башҡорт эпосын өйрәнеүгә Ә. И. Харисов

---

[1] Киреев А. Н. Башкирский народный эпос. Уфа, 1970.

[2] Народный эпос «Кузый-Курпес и Маян-хылу». Материалы научной сессии. / Под редакцией А. Н. Киреева и А. И. Харисова. Уфа, 1963.

етди хеҙмәт һалды. Уның айырым мәҡәләләрендә, бигерәк тә 1965 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы» тигән китабында, традицион жанрҙарҙың йөҙөн билдәләүгә, тәбиғәтен асыуға, айырым эпик әҫәрҙәрҙе конкрет анализлауға, уларҙың поэтикаһын, тарихи ерлеген өйрәнеүгә ҙур урын бирелә[1].

Эпик мираҫты йыйыу, фәнни өйрәнеү шаҡтай интенсив рәүештә алып барылыуға ҡарамаҫтан, уны тулыраҡ баҫып сығарыу, халыҡҡа еткереү эше арттараҡ ҡала килде. Башҡорт фольклорының академик баҫмаһы булмауы халыҡтың поэтик ижадын, шул иҫәптән уның эпос төрөн, киң планда өйрәнеү өсөн тейешле мөмкинлектәрҙе сикләберәк торҙо.

Элегерәк, бигерәк тә 60—70-се йылдарҙа, тупланған бай фольклор фонды ғилми-тикшеренеү һәм текстологик эштәрҙе киң йәйелдереү мөмкинлеген асты. Нәҡ ошо ерлектә 70-се йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Башҡорт дәүләт университеты фольклорсылары ҡатнашлығында «Башҡорт халыҡ ижады»ның күп томлыҡ ғилми баҫмаһын әҙерләне һәм нәшер итте.

Был ғилми баҫмала традицион һәм хәҙерге фольклорҙың төп жанрҙарына айырым китап сериялары бағышланды. Шуның өс томы — башҡорт эпостары. Эпостың беренсе китабына боронғо дәүерҙә мифология һәм хайуандар культы нигеҙендә тыуған «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһы-

[1] Харисов Әхнәф. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Өфө, 1965, 72—110-сы б.

лыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» эпик әҫәрҙәре ҡайһы бер варианттары менән индерелде. Икенсе китапта феодализмдың тәүге осорона ҡараған «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә», «Ҡусәк бей» кеүек популяр эпостар тупланған. Өсөнсөһөнә феодализм осорон һүрәтләүсе социаль-тарихи йөкмәткеле ҡобайырҙар, лиро-эпик поэмалар («Йософ — Зөләйха», «Таһир — Зөһрә», «Буҙйегет») алынды [1]. Өс китапта эпостар хаҡында тулы мәғлүмәттәр биргән, һәр эпик әҫәрҙең тәбиғәтен, идея-тематик йөкмәткеһен һәм художество үҙенсәлектәрен яҡтыртҡан инеш мәҡәлә һәм тулы аңлатмалар менән тәьмин ителгән. Был китаптарҙы Мөхтәр Сәғитов менән Нур Зарипов әҙерләне.

Был күп томлыҡ серия башҡорт фольклористикаһын, шул иҫәптән эпик ижадты, өйрәнеүҙе артабан үҫтереүгә булышлыҡ итте. Һуңғы йылдарҙа эпик ижад хаҡында байтаҡ мәҡәләләр баҫылып сыҡты. Улар хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе С. Ә. Галин менән Н. Т. Зариповтың «Совет Башҡортостанының фольклористикаһы» мәҡәләһенән алырға мөмкин [2].

* * *

Халыҡтың боронғо гүзәл һүҙ сәнғәтен, бигерәк тә уның эпик ижад өлгөләрен — ҡобайырҙарын, әйтештәрен, тарихи йырҙарын, әйтемдәрен, һамаҡтарын, тыуҙырыусылар һәм

---

[1] БХИ. Эпос, 1972; Эпос, 1973; Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өсөнсө китап. / Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Н. Т. Зарипов. Өфө, 1982.

[2] Фольклористика в Советской Башкирии. Выпуск I. Уфа, 1974, 5—18-се б.

быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргә тиклем еткереүселәр, киләсәк быуындарға боронғоларҙың изге аманаты итеп һаҡлап килеүселәр — улар йырау һәм сәсәндәр.

Йырауսылыҡ сәнғәте борон байтаҡ ҡына төрки халыҡтарына хас булған. Сәсәнлек тә киң билдәле. «Сәсән» атамаһы, сәсәнлек сәнғәте элек төрки-монгол халыҡтарында шаҡтай киң таралған булған.

Яҡут мифологияһы буйынса, олонхоны беренсе ижад итеүсе һәм халыҡҡа еткереүсе Сээркээн Сэсэн исемле аҡыл эйәһе, йор һүҙле кеше булған. Яҡуттарҙа сәсән кеше — эпосты ижад итеүсе һәм һаҡлаусы, шул уҡ ваҡытта төп геройҙың аҡыллы кәңәшсеһе ролен үтәүсе олонхо персонажы ла. Аҙаҡ, ваҡыт үтә килә, Сээркээн Сэсэн олонхоны ижад итеүсе һәм халыҡҡа еткереүсе — олонхосуттарҙың тоҡомон башлаусы изге образға әүерелгән [1].

Буряттарҙа — чечен, үзбәктәрҙә — чечан, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡтарҙа шишен тип йор һүҙле, эпик ижадҡа һәүәҫ, импровизаторлыҡ ҡеүәһенә эйә булған кешеләргә әйтер булғандар. Ҙур тормош тәжрибәһе туплаған йырау, сәсәндәр йыш ҡына һынсылыҡ һәләтенә лә эйә булғандар һәм хандарҙың, бейҙәрҙең кәңәшсеһе вазифаһын үтәгәндәр, илселәрҙе һынағандар, мал һайлағандар, тәбиғәт күренештәренә ҡарап юраусылыҡ менән шөғөлләнгәндәр.

IX—XV быуат оғуз төрки ҡәбиләләренең яҙма ҡомартҡыһы булған «Деде Ҡорҡут китабы»нда данлыҡлы урта быуат йырауы Ҡор-

---

[1] Илларионов В. В. Искусство якутских олонхосутов. Якутск, 1982, 14—15-се б.

..ут телгә алына. Ул оғуздарҙың кәңәшсеһе лә, ..ынсыһы ла, дастан әйтеүсе йырау итеп тә һүрәтләнә. Данлыклы Ҡорҡут йырау хаҡында үзбәк, ҡаҙаҡ, башҡорт халыҡ эпик поэзияһында ла әҫәрҙәр тыуған һәм уның образы һынландырылған.

Ҡаҙаҡ фольклорсылары һәм әҙәбиәтселәре үҙҙәренең урта быуат йырауҙарын һәм уларҙың ижадын халыҡ ижады менән профессиональ әҙәбиәтте бәйләп тороусы күренеш һәм әҙәби процестың бер тәбиғи формаһы тип ҡарайҙар. Башҡорт сәсәндәренең эшмәкәрлеген дә халыҡ әҙәбиәте менән профессиональ әҙәбиәтте бәйләүсе еп, әҙәбиәт үҫеше ҡанундарының бер күренеше тип ҡарау бик тәбиғи.

Мөхәммәтша Буранғолов «Башҡорт халыҡ поэзияһы» тигән хеҙмәтендә башҡорт сәсәндәре ижадына беренсе башлап тигәндәй иғтибар итә һәм уларҙың тормошо, ижады хаҡында байтаҡ материалдар, мәғлүмәттәр туплай, үҙенең фекерҙәре менән уртаҡлаша [1]. Һуңғы йылдарҙа сәсәнлек институтына, ғөмүмән сәсәндәр ижадына, төрлө аспекттан ҡарап яҙылған етди мәҡәләләр, күҙәтеүҙәр барлыҡҡа килде [2]. Был эштәр нигеҙҙә М. Буранғоловтың әлеге ҡулъяҙма хеҙмәтенә таянып яҙылдылар.

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445.

[2] Ҡирәй Мәргән. Эпик традицияларҙы йөрөтөүселәр тураһында бер нисә һүҙ. — Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961, 69—90-сы б.; Зарипов Н. Т. Образы сэсэнов в башкирской эпической поэзии. В сб.: Фольклористика в Советской Башкирии. Уфа, 1974, 83—95-се б.; Сагитов М. М. Башкирские сказатели и их эпический репертуар. В кн.: Башкирский народный эпос. М.: Наука, 1977, 483—493-сө б.; Хөсәйенов Ғ. Б. Йырау һәм сәсәндәр. — Заман. Әҙәбиәт. Әҙип. Өфө, 1978, 43—61-се б.

М. Буранғолов эпик әҫәрҙәрҙе, һүҙ сәнғәтен тыуҙырыусы һәм йөрөтөүселәр менән музыкаль фольклор ижадсылары, халыҡ музыканттарының айырмаһы хаҡында мөһим фекерҙәр әйтә. Ул: «Элек һамаҡсыны, ҡобайырсыны сәсән тип, ә йырсыны, ҡурайсыны, ҡумыҙсыны аһын тип йөрөтөр булғандар»[1], — тип аңлата.

Героик поэмаларҙың, ҡобайырҙарҙың үҫеше иң элек сәсәнлек сәнғәте менән бәйләнгән. Сәсәндәр халыҡтың ижтимағи тормошонда ҙур роль уйнағандар. Илгә яу килгәндә, улар халыҡты дошманға ҡаршы көрәшкә өндәгәндәр. Ил эсендә тыуған бәхәсле мәсьәләләр ҙә уларһыҙ хәл ителмәгән. Элек-электән үткәреләкилгән йыйындар, һәр төрлө мәжлестәр сәсәндәр, аһындар ҡатнашлығынан тыш үтмәгән. Сәсәндәр ғәҙәттә халыҡ мәнфәғәтен күҙәтеп, уны яҡлап сығыш яһағандар, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы сыҡҡандар. Шул сәбәпле тел оҫталарының халыҡ араһында дан алғандарын ғына сәсән исеме менән йөрөтөр булғандар.

Сәсәндәр үҙҙәренең халыҡ алдындағы изге бурысын түбәндәгесә аңлатҡандар:

Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшыны һөйәр, ҡаныҡмаҫ,
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул.

Яҙма ҡомартҡыларҙа боронғо сәсәндәр хаҡында мәғлүмәттәр бик аҙ. Әммә халыҡ хәтере байтаҡ легендар сәсәндәр исемен һаҡ-

[1] Буранғолов М. Башҡорт халыҡ поэзияһы.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 1-се б.

лаған. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында, мәҫәлән, йәше йөҙҙән ашҡан данлы Һабрау сәсән бар. Халыҡ хәтерендә шулай уҡ үҙенең зирәклеге менән теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтан еңел ҡотолоп сығыр үткер телле, йор һүҙле Ерәнсә сәсән һаҡланған һәм киң билдәле фольклор образына әүерелгән. Ерәнсә сәсән образы ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ фольклорында ла популяр.

Риүәйәттәрҙә ҡайһы бер сәсәндәрҙең ниндәй ырыу-ҡәбиләгә ҡарағанлығы хаҡында әйтелә. Мәҫәлән, Ҡобағош сәсәндең үҫәргән ҡәбиләһе батыры булыуы һәм уның XVI быуат урталарында йәшәгәнлеге беленә. Икенсе бер легендала ул мең ҡәбиләһе батыры итеп күрһәтелә. Ҡобағош сәсәндең ябай халыҡ ҡатламынан сыҡҡанлығы билдәле. Ул үҙе тураһында ошолай тигән:

Түрә түгел, ҡарамын,
Түрә түгел, ҡарамын,
Толпар менгән хандарға
Яуға ҡаршы барамын, ау,
Яуға ҡаршы барамын[1].

Ҡобағош сәсәндең даны ҡаҙаҡтар араһында ла таралған була. Ул ҡаҙаҡ аҡындары менән әйтештәрҙә ҡатнашҡан.

Тарихи риүәйәттәргә ҡарағанда, XVIII быуаттың тәүге яртыһында тиләү ҡәбиләһенең Ҡарас исемле сәсәне һәм ғәскәр башлығы булған. Уның хаҡында «Ҡарас сәсән» исемле ҡобайыр бар. Унда Ҡарас сәсәндең ҡаҙаҡ феодалдары ойошторған сапҡындарға ҡаршы батырҙарса көрәше һүрәтләнә. XVIII быуат сәсәндәренән Башҡортостандың хәҙерге Уча-

[1] «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсән әйтеше».

лы районы Әүешкүл һәм Яугүл йәйләүҙәрендә йәшәгән Мәхмүт сәсән хаҡында байтаҡ легендалар һаҡланған. Ул яҡшы ҡурайсы һәм әкиәтсе лә булған, Ҡараһаҡал, Батырша восстаниеларында ҡатнашҡан. Уның хаҡында «Йәйәүле Мәхмүт» исемле йыр, «Мәхмүт сәсән» тигән ҡобайыр сығарылған.

XVIII быуатта һәм XIX быуат башында Байыҡ исемле сәсән йәшәгән. Ул Златоуст өйәҙе Мырҙалар волосы Мәхмүт ауылында тыуып үҫкән. Уның сәсәнлек даны Башҡортостанға ғына түгел, ә алыҫ ҡаҙаҡ далаларына ла таралған. Заманында ул бик күп ярыштарҙа, бәйгеләрҙә ҡатнашҡан. Хатта ҡаҙаҡ далаларына сығып, Аблай хандың Бохар исемле атаҡлы аҡынын әйтештә еңеүгә өлгәшкән. Байыҡ сәсәндең 1773—1775 йылдарҙа Салауат восстаниеһында ҡатнашыуы, хөкүмәт властары тарафынан эҙәрләнеүе тураһында, шулай уҡ уның 1812 йылда 102 йәшкә етеп, француз яуынан ҡайтҡан башҡорт һалдаттарын ҡурай тартып ҡаршы алыуы билдәле. Байыҡ сәсән бер үк ваҡытта аһын да булған, ҡурайҙа көй сығарған. Француз яуынан ҡайтыусы яугирҙарҙы ҡотлап ул сығарған көй аҙаҡ «Байыҡ», «Ҡарт Байыҡ» исеме менән ҡурайсылар репертуарына ингән.

Халыҡтың эпос әҫәрҙәрен киләсәк быуынға еткереүҙә ҙур роль уйнаған элекке Тамъян-Ҡатай кантоны Тиләү волосы (хәҙерге Әбйәлил районы) Яңы Балапан ауылында йәшәгән Ишмөхәммәт Мырҙаҡаев (1781—1878) оҫта сәсән дә, аһын да булған һәм башҡа байтаҡ ҡына сәсәндәр ижадына йоғонто яһаған. Ул Тамъян-Ҡатай кантоны башлығы Ҡаһарман Ҡыуатовта (1766—1868) ҡурайсы булып йө-

рөгән. «Урал батыр» эпосын башҡарыусы Ғәбит Арғынбаев сәсән дә (1856—1922) осталыҡҡа ана шул Ишмөхәммәт сәсәндән өйрәнгән, уның репертуарын үҙләштергән.

Эпик әҫәрҙәрҙе башҡарыусылар сәсәнлек менән бергә йыш ҡына аһынлыҡ сәнғәтенә лә эйә булғандар. Мәҫәлән, XX быуат башында йәшәгән Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтов (Баймаҡ районы), Сабирйән Мөхәммәтҡолов, Хәйрулла Ишмурзиндар (Бөрйән районы) бер үк ваҡытта сәсән дә, ҡурайсы ла булғандар.

Башҡорт сәсәндәре ғәҙәттә хеҙмәтсән халыҡ вәкиле булып сығыш яһағандар. Әммә арала талантын феодаль аристократияға хеҙмәт итеүгә биреүселәр ҙә булғылаған. Билдәле, халыҡ ундай сәсәнде үҙһенмәгән. Мәҫәлән. «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтеше»ндә бейгә тоғро хеҙмәт иткән, халыҡ аңын томалап, илде йоҡоға талдырған Аҡмырҙа сәсән тәнҡитләнә. Халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы Ҡобағош сәсән Аҡмырҙаға былай ти:

Ябалаҡтай ҙур ханға,
Йөндәй осор юҡ данға
Илен ҡоштай бәйләгән,
Тотоп ханға һыйлаған —
Илендәге бей булһа;
Төндәй илде ҡаплатҡан,
Тирбәтеп илде йоҡлатҡан,
Ант итеп ханға бирелгән,
Теле яндай кирелгән
Аҡмырҙа булмай, кем булһын, ау,
Аҡмырҙа булмай — кем булһын!

Һәләтен иҙеүселәрҙе данлауға биргән сәсәндерҙең ижады үҙҙәре менән бергә, хатта үҙҙәренән дә алда үлер һәм онотолоп ҡалыр

3*

булған. Халыҡ мәнфәғәтен күҙәткән сәсәндәрҙең исеме иһә күнел түрендә һаҡланған һәм байтағы беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән. Сәсәндәр йыйындарҙа, туйҙарҙа, һүҙ ярыштарында — әйтештәрҙә сығыш яһағандар, шунда үҙ һөнәрҙәрен күрһәтеп хөрмәт тапҡандар.

Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң да сәсәнлек сәнғәте үҫешен дауам итте. Әммә ул бөтөнләй яңы йөкмәтке һәм форма алды. 1944 йылда Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Указы менән «Башҡорт халыҡ сәсәне» тигән маҡтаулы исем булдырылды. Мөхәммәтша Буранғолов, Фәррәх Дәүләтшин, Сәйет Исмәғилев (Йәрми Сәйете) халыҡ сәсәне тигән ҙур исемгә лайыҡ булдылар.

Яҙма һәм фольклор сығанаҡтарға ҡарағанда, сәсәнлек сәнғәтенә ирҙәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа эйә булған. М. Буранғолов мәғлүмәттәре буйынса, XVI быуат уртаһында Бөрйән ырыуында Ғилмияза исемле данлыҡлы сәсән йәшәгән. Ул бигерәк тә ҡобайыр әйтеүе, оҫта йырсы булыуы менән тирә-яҡта дан тотҡан. Ғилмияза хаҡында төрлө легендалар, йырҙар таралған. Ғилмияза үҙенең оҫталығы, ғәҙеллеге менән ике ырыу — бөрйән менән үҫәргән — араһында ер өсөн барған оҙайлы һуғышты туҡтата, ер бәхәсен тыныс хәл итә алған[1].

Беҙҙең заманда, мәҫәлән, Бәҙерниса Әфләтунова (Курган өлкәһе, Сафагүл районы), Рәхилә Теләкәева, Хәтирә Селәүсинова Ырымбур өлкәһе, Александр районы), Өммөхаят Ҡолдәүләтова (Бөрйән районы), Хәҙисә

---

[1] Буранғолов М. Башҡорт халыҡ поэзияһы, 134—135-се б.

Күсәбаева (Миәс ҡалаһы) һ. б. — эпик әҫәрҙәрҙе оҫта башҡарыуҙары менән танылған сәсәндәр.

Сәсәндәр репертуары быуындан быуынға, оҫтанан оҫтаға күсә килгән. Сәсәндәр бер-береһенән ижади оҫталыҡҡа өйрәнгәндәр, эпик сюжеттарҙы отоп алғандар һәм үҙ йөрәгендә ҡайнатып, үҙенә хас поэтик биҙәктәргә байытып һөйләр булғандар. Ғәбит сәсән хәтерендәге әҫәрҙәр Мөхәммәтша Буранғоловтың күсереп алыуы арҡаһында яҙма көйө һаҡланып ҡалған. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡобайырсылыҡ, сәсәнлек оҫталығы атанан улға күсер булған. Мәҫәлән, Сабирйән Мөхәммәтҡолов оҫталыҡҡа үҙ атаһы Мөхәммәтзәкир Мөхәммәтҡоловтан өйрәнгән, уның репертуарын ятлап алған.

Быуындан быуынға, телдән телгә күсә килгән башҡорт эпик ҡомартҡылары күп быуаттар буйына шымара, үҙгәрә, яңы мотив, деталдәр менән байый һәм төрлө быуын сәсәндәренең коллектив ижад емешенә әүерелә килгән.

Йәнле телдә йөрөү эпик жанрҙың берҙән-бер йәшәү формаһы түгел. Әйтеп үткәнебеҙсә, ул ҡулъяҙма рәүешендә лә таралған. Һуңғыраҡ дәүерҙә айырым уҡымышлы сәсәндәр, һәүәҫкәрҙәр теге йәки был поэтик әҫәрҙе ҡағыҙға төшөрөп ҡуйыр һәм күсереп таратыр булғандар. Мәҫәлән, XIX быуат башында Ырымбур губернаторында хеҙмәт иткән суҡындырылған башҡорт чиновнигы Тимофей Беляев, Ҡонҡас исемле уҡымышлы башҡорт сәсәнен һәм ҡурайсыһын осратып, уның хаҡтан яҙып алған «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маяңһылыу» эпосы ҡулъяҙмаһы менән таныша.

Үрҙә телгә алынғанса, Т. Беляев был ҡулъяҙма эпосты рус теленә тәржемә итә һәм 1812 йылда Ҡазан университеты типографияһында баҫтырып сығара. Башҡорт эпосының рус телендә донъя күреүе Россия һәм Башҡортостан культураһы тормошонда мөһим яңылыҡ була.

Фольклорсыларҙың раҫлауҙарына ҡарағанда (С. Ә. Галин, М. Г. Рәхимҡолов һ. б.), «Алдар менән Зөһрә» — Т. Беляев әйткән «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосының икенсе киҫәге.

XX быуат башында Сабирйән Мөхәммәтҡолов тарафынан яҙып алынған «Ҡусәк бей» эпосының да халыҡ араһында ҡулъяҙма рәүешендә таралып йөрөүе билдәле.

Октябрь революцияһына тиклемге уҡымышлыларҙың нигеҙҙә мәҙрәсә тамамлаған кешеләр, муллалар булыуы сәбәпле, ҡулъяҙма хәлендә таралған эпик сюжет туҡымаһына ҡайһы бер дини идеялар, мотивтар килеп инеүе һиҙелә. Бындай күренештәр «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Ҡусәк бей» эпостарының ҡайһы бер ҡулъяҙма варианттарында осрай.

Эпик әҫәрҙең тулылығы, сюжетының төҙөклөгө, композицион яҡтан йыйнаҡлығы, гөмүмән, уның бөтә поэтик сифаты сәсәндәрҙең индивидуаль һәм коллектив ижад һәләтенә бәйләнгән. Сәсәндәр башҡарған эпик әҫәрҙәр ғәҙәттә һирәкләп проза аралашҡан шиғри юлдарҙан йәки шау шиғри текстан торған. Һәр кешенең башҡарыу һәләте, һөйләү оҫталығы ул хикәйәләгән әҫәрҙең поэтик тәбиғәтендә сағыла. Бер үк әҫәр, бер кешенән яҙып алынғанда, ҙур күләмле булыуы, шиғри юлдарҙың

әçтөнлөк итеүе, ә икенсеһенән яҙылғанда, күләме бәләкәйерәк, шиғри юлдары аҙыраҡ булыуы, ә өсөнсөһөнән яҙып алынған шул уҡ әçәрҙең инде шау прозанан ғына тиерлек тороуы, бөтәһенән дә элек, сәсәндәрҙең индивидуаль һәләтенә, уларҙың башҡарыу үҙенсәлегенә бәйләнгән.

Башҡорт эпосы күбеһенсә ырыу-ҡәбилә тормошон, феодализм осорон сағылдыра. XIX быуатта Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәрҙең формалаша башлауы, ығыныуы сәсәнлек сәнғәтен әкренләп һүнеүгә килтерә. Боронғо эпик форма һәм традициялар яңы тормош талаптарына яуап бирмәй, яңы йөкмәткене сағылдыра алмай башлайҙар. Яңы тормош шарттарында сәсәндәр асылда боронғонан мираç булып ҡалған әçәрҙәрҙе башҡарыусы һәм һаҡлаусылар булып ҡына ҡалалар.

* * *

Башҡорт эпосының репертуары шаҡтай бай. Унда, «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға», «Ҡусәк бей», «Алдар менән Зөһрә», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек башҡорт халҡына ғына хас әçәрҙәр менән бергә, йөкмәткеһе һәм сюжеты яғынан башҡа төрки халыҡтар ижады менән уртаҡ әçәрҙәр — «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», шулай уҡ Көнсығыш әҙәбиәте аша ингән «Йософ — Зөләйха» «Буҙйегет», «Сәйфелмөлөк» һ. б. эпик ҡомартҡылар бар.

Башҡорт эпостарын төркөмдәргә бүлеүҙә,

классификациялауҙа бер нисә төрлө ҡараш йәшәй.

Ҡирәй Мәргән үҙенең 1961 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» монографияһында эпостарҙы сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы йүнәлдерелгән сюжеттарға («Жик Мәргән, «Тарғын менән Ҡужаҡ»), батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарға, әҙәби сығанаҡтар аша ингән сюжеттарға бүлә. Шулай уҡ «Таныш сюжеттар» башы аҫтында тағы ла бер нисә әҫәрҙе һанай («Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр буға» һ. б.)[1].

Юғары уҡыу йорттарында башҡорт халыҡ ижадын уҡытыу программаһында икенсе төрлөрәк классификация осрай. Бында эпик ҡомартҡылар, идея-тематик принципҡа нигеҙләнеп, түбәндәге төркөмдәргә бүленә: батырҙар тураһындағы эпик әҫәрҙәр («Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Алпамыша менән Барсынһылыу», «Ҡусәк бей» һ. б.); көнкүреш тематикалы әҫәрҙәр («Заятүләк менән Һыуһылыу», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға»); сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәште һүрәтләүсе әҫәрҙәр («Ек Мәргән», «Тарғын менән Ҡужаҡ»); әҙәбиәт аша ингән әҫәрҙәр («Таһир — Зөһрә», «Йософ менән Зөләйха» һ. б.)[2].

Шуныһын әйтергә кәрәк: тик тематик принципҡа ғына ҡоролған классификация

---

[1] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 93—299-сы б.

[2] Башҡорт халыҡ ижады курсы программаһы (Башҡорт дәүләт университеты һәм педагогия институттары өсөн). Өфө, 1967, 21—22-се б.

башҡорт эпосының тәбиғәтен, эпик жанрҙың эволюцияһын төҙөк система итеп күрһәтеп еткерә алмай. Беҙҙеңсә, башҡорт халҡының эпик ижадын хронологик-тематик принцип буйынса төркөмләү эпик жанрҙың эволюцияһын, шулай уҡ уны ижад иткән халыҡтың аң кимәле, художество-эстетик ҡараштары үҫешен асығыраҡ тойорға мөмкинлек бирә. Идея-тематик йөкмәткеһенә ҡарап, беҙҙең эпосты шартлы рәүештә ике төп төркөмгә бүлергә мөмкин: героик йөкмәткеле эпос һәм социаль-көнкүреш эпосы. Беренсе төркөмгә «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Алпамыша», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Ҡусәк бей», «Ҡарас менән Аҡша» һ. б. героик йөкмәткеле ҡобайырҙар инә. Икенсе төркөмгә «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә» һ. б. ҡобайыр һәм хикәйәттәр ҡарай.

Әлбиттә, эпостың был ике төркөмө араһына ныҡлы бер кәртә үткәреү мөмкин түгел. Әҫәрҙең ҡайһы төркөмгә инеүен билдәләр өсөн тәүҙә унда ниндәй теманың өҫтөнлөк алыуын, уның ниндәй планда хәл ителеүен асыкларға кәрәк. Героик йәки батырҙар тураһындағы эпоста көрәш темаһы өҫтөнлөк итә. Ә социаль-көнкүреш эпосында башлыса мөхәббәт, ғаилә, кәсеп, көнкүрештәге хайуандар һәм улар менән кешеләрҙең мөнәсәбәте темалары сағыла.

Ҡайһы осраҡта бер үк әҫәрҙә тыуған ил өсөн көрәш героикаһы мөхәббәт, ғаилә өсөн көрәш менән бергә үрелеп китә. Шуға күрә ул әҫәрҙең ҡайһы төркөмгә ҡарауын да ҡырҡа ғына билдәләүе ҡыйын була. Мәҫәлән, Тимо-

фей Беляев версияһындағы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәренең варианттарында ғаилә, мөхәббәт өсөн көрәш темаһы батырҙың мифик яуыз көстәргә, илбаҫарҙарға ҡаршы героик көрәше менән аралаша. Был версияла асылда көрәш героикаһы өҫтөнлөк ала, тип әйтергә мөмкин. Әммә күпселектә, йәғни Ҡоншаҡ версияһына ҡараған варианттарҙа, көнкүреш тематикаһы үҙәктә торғанлығын, ул әҫәрҙе башлыса көнкүреш эпосы итеп ҡарау дөрөҫөрәк.

Башҡорт эпосы нигеҙҙә ике ижтимағи формация ысынбарлығын — община-ырыу ҡоролошоноң емерелеү осорон һәм феодализм дәүерен сағылдыра. Хронологик-тематик йәһәттән килгәндә инде, башҡорт эпосы буйынса яҡынса ошондай бүленеш тәҡдим итеп булыр ине.

1. Ырыу ҡоролошо йәмғиәтенең емерелеү осорон сағылдырған эпос:

а) мифология, хайуандар культы нигеҙендә тыуған героик йәки ҡаһарманлыҡ ҡобайырҙары — «Урал батыр», «Аҡбуҙат»;

б) мифология, хайуандар культына бәйле социаль-көнкүреш ҡобайырҙары — «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», Ҡуңыр буға» һ. б.

2. Феодализмдың башланғыс осорон сағылдырған эпос:

а) ырыу-ара көрәште сағылдырған героик ҡобайырҙар — «Алпамыша», «Күсәк бей», «Бала Бәшнәк» һ. б.;

б) ырыу-ҡәбилә татыулығы, берҙәмлеге идеяһын үткәргән, шул фонда социаль-көнкүреште һәм ғаилә мөнәсәбәттәрен һүрәтләгән ҡобайырҙар һәм хикәйәттәр — «Ҡуҙыйкүрпәс

менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә» һ. б.

3. Феодализмдың үҫеү осорон һурәтләгән ҡобайырҙар:

а) татар-монгол иҙеүенә ҡаршы көрәште сағылдырған героик ҡобайырҙар — «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Тарғын менән Ҡуйаҡ», «Ек Мәргән», «Мәргән менән Маян» һ. б.;

б) көнкүреш ҡобайырҙары — «Йософ — Зөләйха», «Буҙйегет», «Таһир — Зөһрә», әйтештәр, тыуған ил хаҡындағы ҡобайырҙар һ. б.

4. Феодализмдың һуңғы осорона ҡараған эпос:

а) героик ҡобайырҙар — «Ҡарас менән Аҡша», «Ҡараһаҡал», «Батырша», «Юлай менән Салауат» һ. б.;

б) социаль-көнкүреш ҡобайырҙары — «Һуңғы йыр» («Байрамбикә менән Татлыбай») һ. б.

Әлбиттә, башҡорт халҡының эпик осоро ырыусылыҡ ҡоролошо тарҡала башлауҙан алып илдә капиталистик мөнәсәбәттәр урынлаша башлағанға тиклемге бик күп быуаттарҙы үҙ эсенә ала.

Икенсе бүлек

МИФОЛОГИЯҒА НИГЕҘЛӘНГӘН ГЕРОИК ҠОБАЙЫРҘАР

Фольклористика фәнендә эпостың, ғөмүмән, сәнғәттең боронғо мифология нигеҙендә барлыҡҡа килеүе һәм үҫеүе тураһындағы фекер ныҡлы урынлашҡан. Башҡорт эпосының да мифология нигеҙендә тыуыуы һәм үҫеп китеүе асыҡ күренә. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек героик ҡобайырҙар һәм хайуандар культына бәйле тыуған эпик ҡомартҡылар — быға төплө дәлил.

Боронғо мотивтарҙы, мифологик ҡараштарҙы сюжет туҡымаһында нығыраҡ һаҡлау яғынан «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» ҡобайырҙары башҡорт халҡының эпик репертуарында үҙенсәлекле урын тота. Был ике әҫәр идея-тематикаһы, сюжет үҫеше, образдар бирелешенең динамикаһы яғынан үҙ-ара тығыҙ бәйләнгән. Улар нигеҙҙә көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда, бигерәк тә бөрйән ырыуы башҡорттарында, киң таралған. Уларҙың героик эпос булып ойошоуында бөрйән ырыуы сәсәндәренең роле ҙур булған, тип уйларға кәрәк.

«Урал батыр» — халыҡтың боронғо аң кимәлен, ҡараштарын, хыялын, бай фантазияһын, бөтә кешелек донъяһы әһәмиәтендәге те-

маларҙы сағылдырыусы монументаль поэтик ҡомартҡы. Унда изгелек менән яуызлыҡтың мәңгелек көрәше, кешелек һәм тәбиғәттең үлемһеҙлеге ҙур поэтик оҫталыҡ менән һүрәтләнә.

«Урал» батыр» ҡобайырының яҙып алыныу һәм өйрәнелеү тарихы ҙур түгел. Беҙҙең быуат башында ғына Мөхәммәтша Буранғолов уны яҙып алыу бәхетенә ирешә. Ул 1910 йылда Ырымбур губернаһы Этҡол волосы (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ районы) Иҙрис ауылында Ғәбит Арғынбаев һәм Бәләкәй Этҡол ауылында Хәмит Әлмөхәмәтов исемле ике ҡурайсынан яҙып алған [1]. Әммә ҡулъяҙманың төп нөсхәһе һаҡланмаған. Латин хәрефле машинкала баҫылған текст СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы ғилми архивында һаҡлана [2].

---

[1] Үкенескә ҡаршы, һуңғы йылдарға ҡәҙәр ике ҡурайсы-сәсәндең дә фамилиялары, аталарының исемдәре билдәле булманы. Авторҙың үтенесе буйынса, Институттың ғилми сотруднигы Б. С. Байымов 1983 йыл Баймаҡ районында булды һәм Ғәбит менән Хәмит хаҡында уларҙы күреп белгән кешеләрҙән бер аҙ мәғлүмәттәр йыйҙы. Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында Сәйетов Әнеүәр Ғабдулла улынан (1888 йылғы) һәм шул уҡ райондың Түбәнге Иҙрис ауылында Бурһыҡбаев Муса Мәжит улынан (1907 йылғы) яҙып алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Ғәбиттең олатаһы Арғынбай хәҙерге Бөрйән районына ҡараған Янһары (Яңы Собханғол) ауылынан Иҙрис ауылына килеп йәшәгән. Арғынбайҙың Абдулманат, Ҡаһарман, Мәҙәт, Бикмөхәмәт, Әбйәлил, Йомағужа исемле алты улы булып, Бикмөхәмәтенән Ғәбит тыуған. Ғәбит белемле, ҡурайға оҫта булған. Ә Бәләкәй Этҡол ауылы ҡурайсыһы Әлмөхәмәтов Хәмит Хужа улы 1861 йылда тыуған һәм 1923 йылда үлгән. Ул заманының уҡымышлы кешеһе булған, мировой судья булып та йөрөгән.

[2] Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/233.

Әҫәрҙе яҙып алғанда, М. Буранғолов унын тел үҙенсәлектәрен мөмкин тиклем һаҡларға тырышҡан, ул ике сәсәнден дә данлыҡлы ҡурайсы һәм йырсы булыуын әйтә. Ғилми архивта һаҡланған «Башҡорт халыҡ поэзияһы» исемле хеҙмәтендә М. Буранғолов Ғәбит сәсән Арғынбаев хаҡында ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр ҙә биргән [1]. Ул сама менән 1856 йылда тыуған, 1921 йылда үлгән, халыҡ ижадынын бик күп өлгөләрен, бигерәк тә эпик поэмаларҙы, яттан белгән һәм уларҙы ҙур оҫталыҡ менән башҡарған. 1910—1920 йылдарҙа М. Буранғолов Ғәбит сәсәндән «Урал батыр»ҙан башҡа «Иҙел менән Яйыҡ», «Аҡбуҙат», «Ҡусәк бей», «Тамъян», «Батырша», «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат», «Һары мулла» тигән ҙур-ҙур эпик әҫәрҙәр яҙып алғанлығын әйтә. Ғәбит сәсән Ырымбурҙа, шул уҡ губерналағы Яҡуп ауылында 1912 йылда уҙғарылған йырсылар, ҡурайсылар ярышында беренселекте алған. Өсөнсө тапҡыр ул 1920 йылда Башҡортостандың элекке баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта үткәрелгән ярышта беренсе урынға сыға һәм хөкүмәт наградаһы менән бүләкләнә. Ғәбит сәсән оҫталыҡҡа бигерәк тә ҡурайсы Ишмөхәммәт сәсән Мырҙаҡаевтан (1781—1878) өйрәнгән булған.

М. Буранғолов 1941 йылда «Урал батыр» эпосын матбуғатта баҫып сығарыу өсөн әҙерләгән, ләкин ул, ни сәбәптәндер, донъя күрмәй ҡалған.

«Урал батыр» эпосы хаҡында Ҡаҙаҡ ССР-ы Фәндәр академияһынын президенты, академик Қ. И. Сатпаевтын юғары баһалап

[1] Шунда уҡ, ф. 3, оп. 12/445, 261—264-се б.

әйткән фекере бар. Ул 1943 йылда әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең кинематографистар менән берлектә Алма-Атала үткәрелгән бер кәңәшмәһендә «Урал батыр»ҙы һиндтарҙың мәшһүр «Махабхарата», осетиндарҙың «Нарттар», ҡаҙаҡ халҡының «Ер-Төстек» эпостары менән бер тәңгәлгә ҡуйып һөйләй, Урал батыр образына һоҡлана. «Башҡорттарҙың кешеһөйәр Урал батырын хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ. Ул үлемһеҙлек һыуын таба, ләкин үлемһеҙ булырға теләһә лә, уны үҙе эсмәй, ә һыуһыҙлыҡтан интеккән тыуған тупрағына бөркә. Башҡорт легендаһында, Урал батыр үҙ ирке менән үлемһеҙлектән баш тартҡандан һуң, уның һөйәктәре — аҫыл хазиналарға һәм алтынға, ә ҡаны ер майы — нефткә әйләнә, тиелә.Был, — ерҙең үҙе кеүек үк, бик боронғо легенда. Башҡорт халҡы уны күп быуаттар элек, фән нефтте Көньяҡ Урал тирәһендә асҡанға тиклем үк, ижад иткән. Ошонан һуң фольклор әҫәрҙәрендә халыҡ аҡылы һәм халыҡтың тормош ысынбарлығы ятҡанлығын кире ҡағырға мөмкинме?»[1] — тип, Ҡ. И. Сатпаев ул ваҡытҡа тиклем бер тапҡыр ҙа матбуғатта баҫылмаған башҡорт эпосын һоҡланып телгә ала. Күрәһең, академик Ҡ. И. Сатпаевҡа был әҫәрҙе берәй сәсән ауыҙынан ишетергә тура килгәндер.

«Урал батыр»ҙың тағы бер әкиәтләшкән варианты 1956 йылда Силәбе өлкәһе Троицк ҡалаһында тороусы (1944 йылға тиклем Башҡортостандың Учалы районы Иманғол ауылында йәшәгән) Исмәғил Рәхмәтуллиндан Әхнәф

---

[1] Джумалиев Қ. Замечательные люди. Воспоминания. Алма-Ата, 1970, 145—146-сы б.

Харисов тарафынан яҙып алынған һәм, шул яҡтарҙа башҡа кешеләрҙән дә ишеткән ҡайһы бер мотивтар менән тулыландырылып, беренсе тапҡыр 1956 йылда «Әҙәби Башҡортостан» журналының 5-се һанында баҫылған, Артабан был вариант бер нисә тапҡыр баҫылып сыға [1].

«Урал батыр» эпосын баҫып сығарыу һәм өйрәнеү эштәре 60-сы йылдарҙан алып йәнләнә төшә. Ҡирәй Мәргән башҡорт эпостарын тикшереүгә арналған монографияһында «Урал батыр» ҡобайырына, уның башҡа эпик сюжеттар менән бәйләнешен билдәләгән мотивтарға, тыуыу ерлегенә туҡталып китә [2]. Был эпик ҡомартҡының бөтөн бер поэтик әҫәр булып ойошоуында төрлө мифик заттарға ҡаршы көрәште һүрәтләгән легендаларҙың роле ҙур булғанлығын, тасуирланған эпизодтарҙың, мотивтарҙың башҡорт легендаларында параллелдәре барлығын билдәләй. Теүәлерәк итеп әйткәндә, ул XIX быуат рус ғалимдары И. И. Лепехин, В. И. Даль, М. В. Лоссиевский һ. б. тарафынан башҡорттарҙан яҙып алынған байтаҡ мифологик легендалар менән эпостағы оҡшаш йәки уртаҡ мотивтарҙы күҙәтеп үтә. Ҡ. Мәргән «Урал батыр»ҙы башҡорт халыҡ ижадында «эпик репертуарҙы башлап ебәреүсе әҫәрҙәрҙең береһе» тип ҡарай.

М. Буранғолов варианты беренсе тапҡыр 1968 йылда «Ағиҙел» журналының 8-се һанында Әхнәф Харисов менән Баязит Бикбай тарафынан ҡыҫҡартылып һәм әҙәби яҡтан

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады, 2-се том. Өфө, 1959, 13—19-сы б.; БХИ. Эпос, 1972, 135—144-се б.

[2] Ҡирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. 93—100-сө б.

эшкәртелеп баҫыла. Был эпик әҫәрҙең ғилми баҫмаһы тик 1972 йылда ғына күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» серияһында тейешле аңлатмалар һәм инеш һүҙ менән донъя күрә [1].

Һуңғы йылдарҙа был әҫәргә иғтибар арта төштө. 1975 йылда «СССР халыҡтарының героик эпосы» серияһының 1-се томында «Урал батыр» ҡобайырының ҙур өлөшөнөң урын алыуы уның бөтә донъя культураһы хазинаһына инерлек әҫәр булыуын раҫланы [2]. Томды төҙөүсе, СССР халыҡтары эпосы белгесе А. А. Петросян баш мәҡәләлә «Урал батыр» әҫәренең бөйөклөгө, уның тәрән гуманистик идеяһы хаҡында бик йылы фекерҙәр әйтте. Ул «Урал батыр» эпосын беҙҙең эраға тиклем 2 мең йыл элек яҙып ҡалдырылған шумер героик эпосы «Гильгамеш» менән сағыштырып, был ике эпос араһында уртаҡ мотивтар, сюжет оҡшашлыҡтары булыуын билдәләй.

1977 йылда СССР Фәндәр академияһының А. М. Горький исемендәге Донъя әҙәбиәте институты СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән берлектә башҡорт эпосының академик баҫмаһын башҡорт һәм рус телдәрендә «СССР халыҡтары эпосы» серияһында нәшер итте [3]. Был томда башҡорт халҡының иң популяр «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Зая-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 33—134-се б.

[2] Библиотека Всемирной литературы. Героический эпос народов СССР, т. 1. / Вступительная статья, составление и примечания А. А. Петросян. М., 1975, 67—114-се б.

[3] Башкирский народный эпос. / Составители тома А. С. Мирбадалева, М. М. Сагитов, А. И. Харисов. М.: Наука, 1977.

5 Заказ 100

түләк менән һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуныр буға» эпик ҡомартҡылары баҫылды. Шулай итеп, СССР халыҡтары уҡыусылар ҡатламына, ғалимдар даирәһенә башҡорт халҡының бай эпик мираҫын еткереүҙә был академик баҫманың роле ҙур булды.

70-се йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәте рус телендә башҡорт эпосының иң һәйбәт өлгөләр серияһын сувенир баҫма рәүешендә сығара башланы[1]. Һәр китаптың инеш һүҙ, шулай уҡ иҫкәрмәләр менән биреләүе ғилми йәһәттән дә уның әһәмиәтен күтәреүгә булышлыҡ итте.

Башҡорт эпосы, рус теленә тәржемә ителеүе һөҙөмтәһендә, беҙҙең илдә генә түгел, сит илдәрҙә лә популярлаша башланы, уның таралыу сфераһы киңәйҙе. Мәҫәлән, «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпик ҡомартҡыларының 1980 йылда Чехословакияла словак телендә айырым китап булып баҫылып сығыуы мөһим ваҡиға булды. Уны словак шағирәһе Елена Крижанова-Бриндзова тәржемәләп баҫтырған, китапҡа инеш мәҡәлә аҙған, аңлатмалар биргән.

«Урал батыр» һәм уның логик дауамы булараҡ тыуған башҡа эпик ҡомартҡылар әлегә ҡәнәғәтләнерлек өйрәнелгән тип әйтеп булмай. Уның яңы варианттарын халыҡтан яҙып

---

[1] Акбузат. Башкирский народный эпос. / Подготовка текста, редакция, предисловие, комментарии М. М. Сагитова. Уфа, 1976; Урал-батыр. Башкирский народный эпос. / Подготовка текста, редакция, предисловие, комментарии М. М. Сагитова. Уфа, 1977; Былых времен сказанья. / Редакция, составление, предисловие, комментарии М. М. Сагитова. Уфа, 1979.

...лы һәм башҡа халыҡтар эпосы менән са-...тырып өйрәнеү кеүек мәсьәләләр хәл ите-...е көтә.

«Урал батыр»ҙың сюжеты нигеҙҙә боронғо ...ос өсөн характерлы мотивтарҙан һәм детал-...рҙән тора. Әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғалар Урал тауы һәм Ағиҙел, Нөгөш, Яйыҡ, Һаҡмар йылғалары буйында, Шүлгән күле тирәһендә бара. Унда өс быуын геройҙар яҙмышы тасуир ителә (Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡар-сыҡ, уларҙың улдары Шүлгән менән Урал һәм ей...ндәре — Яйыҡ, Иҙел, Нөгөш, Һаҡмар) һәм, ...ға ярашлы, өс өлөштән ойоша.

«Урал батыр» — күп планлы, ҡатмарлы ҡобайыр. Уның идея-тематик йөкмәткеһендә тәбиғәт донъяһының үлемһеҙлеген, кешелекте ...ның яуыз дошмандарынан аралау, изгелектең ...ыҙлыҡтан өҫтөнлөгөн раҫлау тора.

Ҡобайырҙың беренсе киҫәге Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ тормошон һүрәтләү-...н, кешелек тарихының иң боронғо осорона хас күренештәрҙе хикәйәләүҙән башланып китә:

Борон-борон борондан
Кеше-маҙар булмаған,
Килеп аяҡ баҫмаған
(Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән),
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын.

Унда булған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ,
Ҡайҙа барһа, уларға
Ул урында юл асыҡ [1].

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 23-сө б.

4*

Ҡобайырҙа Йәнбирҙе менән Йәнбикә, ғөмүмән, кешелек тоҡомон башлап ебәреүселәр итеп күрһәтелә. Хатта исемдәре үк уларҙың тәүге кешеләр, ырыу башлаусылар, икәненә ишара яһай: Йәнбирҙе, Йәнбикә — йән өрөүсе, биреүсе. Боронғо легендалар буйынса, Әҙәм менән Һауа — кешелекте башлап ебәреүселәр булһа, мифология ерлегендә тыуған «Урал батыр» эпосында Йәнбирҙе менән Йәнбикә башҡорт ырыуҙарын башлап ебәреүселәр ролендә сығыш яһайҙар. Улар ауырыу-һыҙлау, үлемде белмәйҙәр. Әммә сюжеттың артабанғы үсешендә Йәнбикә, Йәнбирҙенән башҡа кешеләрҙең дә булыуы асыҡлана. Улар элек йәшәгән ерҙә үлем булғанлығы, дейеүҙәрҙең кешеләрҙе ашағанлығы, туфан ҡалҡып, ҡоро ерҙе һыу ҡаплап бөтөүе, шул арҡала үлем, дейеүҙән ҡасып, уларҙың кеше аяғы баҫмаған ергә ҡасып китеүҙәре әйтелә. Бында донъя халыҡтары фольклорында киң таралған бөтә донъяны һыу баҫыу, туфан ҡалҡыу мотивы сағылып ҡала.

Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең ҡартайған көндәрендә ике улы тыуа. Оло улына — Шүлгән, кесеһенә Урал тип исем ҡушалар. Эпик геройҙарҙың ҡарт ата-әсәнән тыуыуы — төрки халыҡтарҙың эпос традицияһына хас күренеш.

Йәнбирҙе менән Йәнбикә ғаиләһенең тормошо — кешелек тарихының тәүтормош-община ҡоролошо осоронда булған ҡәҙимге көнкүреш: унда кешеләр һунар итеү менән көн күрәләр, сей ит ашайҙар. Малсылыҡ, игенселектең ни икәнен дә белмәйҙәр.

Ғаиләнең көнкүреше, боронғо тормош уклады өсөн характерлы йолалары хаҡында ҡобайырҙа былай әйтелә:

Бүтән кеше күрмәйенсә,
Тик йәшәгән дүртәүһе.
Донъя-мал̦ар йыймаған,
Ҡашығаяҡ тотмаған,
Ҡал̦ан аҫып, ут яғып,
Улар донъя көтмәгән.
Ауырыу-һыл̦лау күрмәгән,
Үлем барын белмәгән,
Барлыҡ нәмәгә үлем —
Үл̦ебел̦ тип һанаған.
Һунарл̦а ат менмәгән,
Ҡулға һал̦аҡ тотмаған;
Менәренә — арыҫланды,
Балығына — сутанды,
Ҡошҡа сөйгән шоңҡарл̦ы,
Ҡан һурырға һөлөктө
Үл̦ иштәре яһаған.
Бик борондан булғанмы,
Йәнбирл̦е үл̦е ҡылғанмы,
Бара-тора шул ерл̦ә
Йола булып киткәнме, —
Йыртҡыс йәнлек тоттониһә,
Йәнлек иркәк булдыниһә,
Ирле-бисәле икәүһе
Башын сәйнәп ашаған,
Шүлгән менән Уралға,
Эте менән арыҫланға,
Шоңҡар менән суртанға
Бүтән һанын ташлаған;
Йыртҡыс йәнлекте тотһа,
Йәнлек орғасы булһа,
Ирле-бисә икәүһе
Йөрәгене һайлаған.
Үлән емшәр йән тотһа,
Ҡара һөлөк ҡал̦аған,
Һөлөгөнән һурл̦ырып,
Ҡанды һыуһын яһаған.
Бала үҫеп еткәнсе,
Үл̦е йәнлек тотҡансы,
Баш-йөрәкте ашаул̦ан,
Һыуһынға ҡан эсеүл̦ән
Уландарын тыйғандар,
Һис ярамай, тигәндәр [1].

[1] БХИ. Эпос, 1972, 33—34-се б.

Эпостың икенсе өлөшө икенсе быуын геройҙары — Шүлгән менән Уралдың тормошон, эшмәкәрлеген һүрәтләүҙән ғибарәт. Урал кесе йәштән үк ғәҙел, аҡыллы бер батыр була. Ата-әсәһе улдарына ир еткәнгә тиклем ҡабырсаҡта һаҡланған ҡырағай йәнлек ҡанын эсеүҙән тыялар. Шүлгән тыйыуҙы боҙа — ҡан эсә һәм аҙғын, яуыз тәбиғәтле булып ҡала. Урал ныҡышып һораганлыҡтан, Йәнбирҙе улдарына донъяла тереклекте һәлак итеүсе яуыз йән — Үлем барлығын һөйләй һәм унан тик Йәншишмә һыуын эскән кеше генә ҡотола алыуын әйтә.

Урал Үлемде табып, уны юҡ итергә ҡарар итә. Йәнбирҙе ҡарт бөтә «ҡош-ҡорт, йәнлекте» кәңәшкә йыя һәм Үлемде көреүсе бармы-юҡмылығын һораша, унан ҡотолорға кәрәклеген әйтә. Әммә был мәсьәләнең хәл ителеүендә берҙәм фекергә килә алмайҙар. Берҙән-бер көн Йәнбирҙе ҡарт ғаиләһе менән бик күп ҡош аулай. Шулар араһында бер аҡҡош та була. Аҡҡош һунарсыларға үҙенең күк батшаһы Самрау ҡыҙы булыуын әйтә. Әгәр ҙә уны ирекккә ебәрһәләр, Йәншишмә һыуына юл өйрәтәсәген белдерә. Шүлгән — аҡҡошто ашау, ә Урал — ирекккә ебәреү яғында. Былар ял итергә ултырғас, ҡош һау ҡанатын һелкә һәм ҡанатынан төшкән өс ҡауырһын өс аҡҡошҡа әүерелеп, Самрау ҡыҙын күтәреп алып китәләр.

Йәнбирҙе ҡарттың кәңәше буйынса, Урал менән Шүлгән ҡоштар осоп киткән яҡҡа Үлемде эҙләп юлға сығалар. Шул эпизодтан һуң «Урал батыр» эпосы беренсе быуын геройҙары — Йәнбирҙе менән Йәнбикә тормошон һүрәтләүҙән туҡтай.

Артабан ҡобайыр сюжеты Урал батыр ме-

нән Шүлгәндең Үлемде үлтереү һәм Йәншишмәне табыу өсөн сәйәхәтен, юл мажараларын, уларҙың эшмәкәрлеген хикәйәләүҙән тора.

Урал батыр яуыз Ҡатил батша иленән үтә, Ҡатилды һәм унын ярандарын тар-мар итә, Ҡаһҡаһәнең йылан батшалығын ҡыйрата, күк һәм ҡоштар батшаһы Самрауҙың ҡыҙҙарын яуыз дейеүҙәрҙән ҡотҡара, дейеүҙәр батшаһы Әзрәҡәне юҡ итә, дейеүҙәр яғына күскән ағаһы Шүлгән менән көрәшә, Йәншишмәне таба, уны бөркөп тәбиғәтте үлемһеҙ яһай, үҙе эсеүҙән баш тарта һәм тәбиғәттең мәңгелеге өсөн һәләк була.

Эпостың өсөнсө киҫәге Урал батыр улдарының тыуыуын, уларҙың батыр булып үҫеп етеүҙәрен һәм ул башлаған изге эштәрҙе дауам итеүҙәрен хикәйәләй. Улар Урал батырға ярҙамға баралар һәм, ул үлгәндән һуң, һыуһыҙлыҡтан интеккән халыҡҡа йылға йыралар, халыҡҡа бәхетле тормош көтөргә мөмкинлек тыуҙыралар.

Ырыу ҡоролошоноң емерелеүе осоронда тыуып, күп быуаттар, төрлө ижтимағи формациялар аша беҙҙең көндәргә тиклем йәшәү дәүерендә «Урал батыр» ҡобайыры бик күп үҙгәрештәр кисергән, шулай уҡ төрлө осор идеяларын, мотивтарын поэтик сюжет туҡымаһына һеңдергән. Ул үҙендә бик күп боронғо мотивтарҙы, элементтарҙы һаҡлаған.

Бына шундай боронғо һәм мәңгелек мотивтарҙың иң мөһиме — тәбиғәттең һәм кешелектең үлемһеҙлеге, мәңгелеге өсөн көрәш темаһы.

Әйтергә кәрәк, үлемһеҙлеккә ынтылыу, тереклек һыуын эҙләү — башҡорт әкиәттәрендә, шулай уҡ донъя фольклорында ла киң тарал-

ған күренеш. Әкиәттәрҙә ғәҙәттә дошман ҡулынан һәләк булған геройҙы уның тоғро ярҙамсылары, дуҫтары йә изгелекле йәнлектәр тере һыу бөркөп йә эсереп терелтәләр. Әммә бындай типтағы экиәттәрҙә, легендаларҙа һәләк булған, йә иһә сихыр көсө менән ташҡа йәки берәй йән эйәһенә әүерелдерелгән геройҙы элекке хәленә ҡайтарыу мотивы «Урал батыр»ҙағы кеүек кешелек һәм тәбиғәт донъяһы мәңгелегә өсөн көрәш темаһы юғарылығына күтәрелә алмай.

Тере һыуҙы эҙләү һәм уның ярҙамында мәңгелек булып ҡалырға теләү мотивы донъя халыҡтары эпик ижадында ла осрай. Мәҫәлән, бынан дүрт мең йылдан ашыу ваҡыт элек ижад ителгән һәм балсыҡ плиталарға яҙып ҡалдырылған шумер эпосы «Гильгамеш»та Гильгамеш батыр, Урал батыр кеүек, мәңге йәшәү ҡеүәте биреүсе Йәншишмә һыуын эҙләй. Айырма шунда: Гильгамеш быны үҙенең һәм дуҫының мәңгелеге өсөн эшләһә, Урал батыр кешелекте, тәбиғәт донъяһын мәңгелек итеүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Боронғо кешеләр өсөн көн менән төндөң, йыл миҙгелдәренең алмашынып тороуы, кейек-йәнлектең тыуыуы һәм үлеүе, үҫемлектәрҙең үҫеүе һәм юҡҡа сығыуы, яңырыуы, кешеләрҙең ҡартайып үлеүҙәре ғәжәйеп бер сер, аңлайышһыҙ бер көс итеп ҡабул ителгән һәм төрлө хөрәфәттәр, ышаныуҙар тыуҙырған. Кешеләр үлемде күҙгә күренмәҫ яуыз бер йән (Әжәл) эшмәкәрлеге тип ҡарағандар һәм уны юҡ итергә, еңеп, мәңгелек йәшәү мөмкинлеге алырға хыялланғандар. Бына ошо хыял «Урал батыр» эпосында поэтик сағылыш тапҡан һәм уның төп лейтмотивын тәшкил итә. Кешелек

йәмғиәте үҫешенең тәүге ҡырағайлыҡ осорон-да, шул иҫәптән боронғо төрки ырыуҙарҙа ла, үлем кешенең фани донъянан икенсе донъяға күсеү акты тип ҡаралмаған. Был тәүтормош кешеләренең материаль-етештереү кимәленең һәм шуға бәйле аң-ҡараш кимәленең дә әлегә түбән булыуынан килгән. Кешелек йәмғиәте-нең, ырыу ҡоролошоноң артабанғы үҫеш ста-дияһында үлем актына ҡараш үҙгәрә, ул ҡа-раш буйынса, кеше йәне мәңгелек, тик ул бер донъянан икенсеһенә генә күсә, тип уй-ланылған. Шуның өсөн уны иҫән ҡалған ту-ғандары теге донъяла ла кәрәк булырға те-йешле һауыт-һаба, һунарсылыҡ, яу өсөн һу-ғыш ҡоралдары, кейем-һалым менән бергә күмгәндәр. Уның ҡәберен, йәғни икенсе донъ-яла йәшәйәсәк өйөн дә үҙе иҫән саҡта йәшә-гән өйгә, аласыҡҡа, тирмәгә оҡшатып яһаған-дар. Кешелек йәмғиәте, ырыу ҡоролошо үҫә килгән, социаль дифференциация ныҡынған һайын, үлгән кеше ҡәберлегенә һалынған әй-берҙәр һаны һәм ассортименты, ҡәберлектәр-ҙең күләме лә стадиаль рәүештә артҡандан-арта барған. Мәҫәлән, яңы эраның 6—7-се бы-уаттарында төрки ҡәбиләләрҙә үлгән ырыу баш-лыҡтарын, кагандарҙы «икенсе донъя»ға тиҫ-тәләгән йылҡылары, ҡоралдары, кейем-һалы-мы, көймәләре, хеҙмәтселәре менән бергә ги-гант убалар яһап күмер булғандар. Ҡәберлек-тәрҙә әйберҙәрҙең артыуы боронғо төрки ха-лыҡтарҙа «кеше йәне үлмәй, ул — мәңгелек, кеше тик донъя ғына алмаштыра» тигән ҡараш, фәлсәфәнең ныҡлы урынлашҡанлығын аңла-та. Ә «Урал батыр» эпосындағы кешелеккә, тәбиғәткә үлемһеҙлек, мәңгелек эҙләү идеяһы мотивы — ана шул «кеше үлмәй, ул тик бер

донъянан икенсе донъяға ғына күсә» тигән ышаныу таралған дәүерҙән күп алда тыуған ҡараштың, хыялдың сағылышы. Урал батырҙың ҡоралһыҙ, атһыҙ-ниһеҙ ерләнеү йолаһы ла — был фекерҙе дәлилләүсе фактор.

«Урал батыр» ҡобайырында тағы ла бер ҙур тема күтәрелә: ул — яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш. Яуызлыҡ ни тиклем көслө, мәкерле булмаһын, ул барыбер изгелектән, ғәҙеллектән еңелә тигән идея үткәрелә әҫәрҙә. Ғәҙеллек менән яуызлыҡ көрәше боронғо кешеләр йәмғиәтендә хөкөм һөргән дуалистик ҡараштың эпик ижадҡа үтеп инеүен һәм төп темаға әүерелеүен күрһәтә.

Ҡобайырҙа тағы бер мөһим идея үткәрелә. Ул — кеше көсөнөң, аҡылының тәбиғәт көстәренән, хайуандар донъяһынан өҫтөнлөгөн раҫлау. Быныһы инде «ҡырағайлыҡ» стадияһын артта ҡалдырған, тәбиғәт көстәренә ҡаршы көрәштә үҙенең ниндәйҙер кимәлдә өҫтөнлөгөн һиҙә башлаған кешелек йәмғиәтенең һуңғыраҡ үҫеш дәүеренә хас идея. Ул, һис шикһеҙ, — эпос туҡымаһына һеңгән һуңғыраҡ осор ҡатламы. Боронғо әҫәргә ингән яңы идея һәм мотивтар быбың менән генә сикләнмәй. Мәҫәлән, эпоста Урал батыр ауыҙынан, яуыз дошмандарға ҡаршы яңғыҙ түгел, ә бергәләп, күмәкләп көрәшергә кәрәк, тигән фекер әйтелә. Хәйер, бындай фекер әйтелһә лә, ул декларатив рәүештә тороп ҡала, әҫәр сюжетында үҫтерелмәй.

«Урал батыр»ҙа боронғо эпос өсөн характерлы бик күп мотивтарҙы, деталдәрҙе, ышаныуҙарҙы, йолаларҙы, тормош күренештәрен күҙәтергә мөмкин. Кешеләр йәшәүе өсөн

донъя яратылыуы, тауҙар, туғайҙар барлыҡҡа килтереү, йылғалар йырыу, хайуандарҙы ҡулға эйәләштереү, ҡоштарҙы, йәнлектәрҙе изгеләштереп ҡарау һ. б. — тап бына эпостың боронғолоғона ишара яһаусы мотивтар.

Билдәле, эпоста күтәрелгән идеялар һәм темалар образдар аша тормошҡа ашырыла. Эпостағы образдарҙы, фольклорҙың эпик жанрҙарына хас булғанса, традицион бүленеш буйынса ыңғай һәм кире образдарға айырып ҡарарға мөмкин. Ыңғай образдар галереяһына Йәнбикә ҡарсыҡ менән Йәнбирҙене, Урал батыр менән улдары Яйыҡ, Иҙел, Һаҡмар, Нөгөштө, мифик Аҡбуҙатты һ. б. индерергә кәрәк. Әҫәрҙең кире образдары йәки персонаждары булып Урал батырҙың яуыз дошмандары, башҡорт мифологияһында киң таралған аждаһа, дейеү, ендәр, йыландар һәм уларҙың батшалары — Ҡатил, Әзрәҡә, Зәрҡум, шулай уҡ кешелектең яуыз дошмандары яғына күскән Шүлгән батыр һ. б. сығыш яһайҙар. Ҡобайырҙа икенсел планда һүрәтләнгән ыңғай мифик образдар ҙа бар: күк һәм ҡоштар батшаһы Самрау, уның ҡатындары — Ҡояш менән Ай, ҡыҙҙары — Һомай менән Айһылыу, күк аттары һ. б.

Һәр образ, һәр персонаж эпоста билдәле бер функция үтәй, ниндәйҙер идея үткәреүгә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, ҡобайыр һәм уны ижад итеүсе сәсәндәр Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ образдарына мөһим функция йөкмәткәндәр. Иң беренсе, улар кешелекте, ырыуҙы башлаусылар, конкрет алғанда, башҡорт ырыуын башлаусылар итеп һүрәтләнәләр. Йәнбикә менән Йәнбирҙе эпос геройҙарын — батырҙарҙы тыуҙыралар. Шул уҡ ва-

ҡытта был ике образға тағы ла бер мөһим функция йөкмәтелә: улар кешелекте яҡлар, ил мәнфәғәте менән йәшәр идеаль Урал батырҙың ата-әсәһе генә түгел; уларҙан кешеләрҙең дошманына әйләнер яуыз Шүлгән дә тыуа. Бына ошо ике бер туғанда ғәҙеллек һәм яуызлыҡ образдарын һүрәтләүҙә халыҡтың боронғо дуалистик ҡарашы сағыла. Дуалистик ҡараш буйынса, донъя яратылғандан алып ике көс — изгелек менән яуызлыҡ ғүмер баҡый бер-береһе менән көрәшә. Шүлгән менән Урал — ана шул ҡарашты кәүҙәләндереүсе ҡапма-ҡаршы образдар.

Бер туғандарҙы антипод образдар рәүешендә һүрәтләү — халыҡ ижадына хас художество алымы. Халыҡ аңы яуызлыҡ бөтмәгән хәлдә лә уның изгелекте еңә алмауын күрергә тырышҡан һәм уны үҙенең ижадында сағылдырған. Тәүге кешеләр итеп һүрәтләнгән Урал менән Шүлгән донъя яралтыу, кешеләр тормошон ҡороу кеүек эштәр менән мәшғүл. Урал батыр донъяны туфан һыуы баҫыуҙан ҡотҡара, тауҙар яһай, кешеләрҙе яуыз йылан, аждаһаларҙан арсалап көрәшә. Ә уның ағаһы гел киреһен эшләй, яуызлыҡты үҙенә иш яһай. Донъя фольклорында, бигерәк тә мифологияла, былдай миҫалдарҙы күпләп осратырға мөмкин. Мәҫәлән, грек мифологияһынан ошондай уҡ классик миҫал — Прометей менән Эпиметей образдарын килтерергә мөмкин. Прометей Олимп тауынан кешеләргә ут урлап алып килә, уларҙы ут менән эш итергә, донъя көтөргә өйрәтә. Ул кешеләргә ярҙам итеү өсөн Олимп аллаларын алдай һәм шуның өсөн ҡаты язаға тарттырыла. Ә уның игеҙәк туғаны Эпиметей кешеләрҙе йәшәү шарттарынан мәхрүм итә,

уларҙың һалҡындан һаҡлаған йылы тиреләрен, көслө, үткер тырнаҡтарын алып китә.

Тунгус һәм Себерҙәге башҡа халыҡтар фольклорында ағалы-энеле Нуми-Торум менән Хуль-Отыр образдары киң таралған. Нуми-Торум гел генә игелекле эштәр эшләй, ә уның ағаһы, киреһенсә, көнләшеп, гел энеһе эшләгәнде боҙоп, яуызлыҡ ҡылып йөрөй [1]. Бындай миҫалдар төрлө ҡитғаларҙа йәшәүсе башҡа халыҡтар ижадында ла бар.

Иран халҡының мәшһүр «Авеста» эпосында ла дуалистик ҡараш һөҙөмтәһендә тыуған Агура Мазда менән Ангра Майню — донъяны яратыусы аллалар образдарын күрергә мөмкин. «Авеста» эпопеяһының бер өлөшө булған «Видевдата» поэмаһының беренсе фаргардында изгелек аллаһы Агура Мазда кешеләр тормошо өсөн уңайлы ун алты ил, ҡалалар төҙөй, йылғалар, үйһыулыҡтар барлыҡҡа килтерә. Ә Ангра Майню Агура Мазда эшләгәндең киреһен эшләй: кешеләргә тыныс йәшәргә мөмкинлек бирмәҫ йыландарҙы, игенде ашаусы ҡырмыҫҡа һәм малды тешләп һәләк итер бөжәктәрҙе барлыҡҡа килтерә. Ул кешеләргә төрлө ауырыуҙар, насар ғәҙәттәр тарата, кешеләрҙә бер-береһенә ҡарата ышанмаусылыҡ тыуҙыра [2].

Ҡобайырҙа Урал батыр менән уның ағаһы Шүлгәндең үҙ-ара мөнәсәбәтен һүрәтләүгә ҙур урын бирелә. Шүлгән, ағай булыуынан файҙаланып, ике юл сатына еткәс, үҙенә еңел юлды һайлай, Урал батырҙан алмас ҡылысты,

---

[1] Мелетинский Е. М. Поэтика мифа. М.: Наука, 1976, 187—192-се б.

[2] Маковельский А. О. Авеста. Изд-во АН Азербайджанской ССР. Баку, 1960, 52—55-се б.

тылсым көсөнә эйә булған ынйы башлы таяҡты, Аҡбуҙатты, күк батшаһы ҡыҙы Һомайҙы тартып алмаҡсы була, атаһы-әсәһе алдында Урал алдын сығыр тип көнләшә, уны юҡ итергә уйлай. Әммә Урал батыр Шүлгәндең бөтә мәкерлектәрен юҡҡа сығара, үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтә. Ҡобайырҙы ижад итеүсе сәсәндәрҙең дә бөтә уй-теләктәре, үҙ итеп яратыуҙары кесе ул — Урал батыр яғында. Бына ошо бер туған улдар көрәшен һүрәтләүҙә боронғо дәүерҙә үк башҡорттар тормошонда хөкөм һөргән минорат йолаһының поэтик сағылышы күренә. Минорат — билдәле тарихи осорҙа тыуған ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе сағылдырыусы йола. Был йола буйынса, кесе ул ғаиләлә ағалары алдында билдәле өҫтөнлөктәр менән файҙаланған, атаһының йорт-ҡаралтыһын мираҫ итеп алған. Атаһының эшен туранан-тура дауам итеүсе, хужалыҡты алып барыусы кесе, төпсөк ул булған [1]. Минорат оло улдың өҫтөнлөгөн раҫлаусы майорат социаль институтына ҡаршы булған һәм үҙ мәнфәғәтен яҡлап көрәшкән. Минорат — патриархаль ғаилә общинаһы емерелеп, оло ғаиләнән бәләкәй ғаиләгә күсеү осоронда тыуған йола һанала. Был йола ғаиләлә кесе улдың өҫтөнлөгөн нығытҡан. Минорат күренеше фольклорҙа, бигерәк тә әкиәттәрҙә, нык сағылыш тапҡан. Башҡорт әкиәттәрендә ағалары тарафынан йәберләнгән кесе ул тураһындағы сюжеттар байтаҡ. Күпме генә йәбер-золом күрһә лә, кесе ул һәр ваҡыт еңеп сыға, ата-әсәһенең, халыҡтың яҡлауын таба.

[1] Бикбулатов Н. В. Отражение минората и майората в башкирских народных сказках. В сб.: Фольклор народов РСФСР. Выпуск 1. Уфа, 1974, 52—53-сө б.

Урал батыр — эпостың баш ҡаһарманы. Урал — халыҡ күрергә теләгән идеаль-батыр образы. Был образды һүрәтләүҙә ырыу ҡоролошо осорона хас һыҙаттар өҫтөнлөк алһалар ҙа, башҡорт халҡының һуңғыраҡ дәүерҙә халыҡ батырҙарына ҡарата ҡуйған юғары талаптары, теләктәре сағылмай ҡалмаған. Уралдың бөтә эштәре, батырлыҡтары кешелеккә үлемһеҙлек эҙләү мотивы менән бәйле. Ул, беренсе сиратта, бөтә ырыуҙы символлаштырыусы ата-инә һүҙен тотҡан, йолаларҙы ихтирам иткән батыр. Урал кесе йәштән ырыу йолаларын тайпылышһыҙ үтәй, билдәле бер йәшкә етеп, үҙ ҡулы менән йәнлек тотмайынса, атаәсәһе аулап килтергән йәнлектәрҙең йөрәген, башын ашамай, ҡабырсаҡҡа һалынған ҡанды ауыҙ итмәй, бөтә тыйыуҙарҙы теүәл үтәй. Урал ғәҙеллекте, ярҙамсыллыҡты алға ала, ырыу, кешеләр мәнфәғәтен үҙ мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуя, ҡыйырһытылғандарҙы, иҙелгәндәрҙе яҡлап көрәшә. Ҡобайыр Уралды ҙур физик көскә эйә, шул уҡ ваҡытта баҫалҡы, ябай, аҡыллы батыр итеп һүрәтләй. Ул хатта дошмандарын да ҡапыл ғына үлтереп бармай, уларға уйларға, ҡылған ҡылыҡтарын үлсәп ҡарарға, төҙәлергә форсат бирә. Урал батыр Ҡатил батшаны ла, уның ярандарын да кешеләрҙе һәләк итеүҙән баш тарттырырға өгөтләп ҡарай. Тәкдимдәре кире ҡағылғас ҡына, ул дошмандарын аяуһыҙ юҡ итә. Урал батыр борондан йәшәп килгән «ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ» тигән принцип буйынса эш итә. Ул Шүлгәнде лә тура юлға баҫтырырға тырышып ҡарай, халыҡҡа ҡаршы сыҡмаҫҡа өндәй, әммә Шүлгән яуызлыҡтан арына алмай. Урал батырҙың эпоста көслө титан итеп һүрәтләнеүе ғәжәп тү-

гел, сөнки уның дошмандары ла — иләмһеҙ ҙур, имәнес аждаһа, дейеү, йыландар һәм башҡалар. Уралдың улдары ла ғәжәп көслө, ҙур кәүҙәле батырҙар. Боронғо архаик эпос геройҙарының алып кәүҙәле, ҙур физик көслө булыуҙары — ғәҙәти күренеш. Уның сере шунда: эпос һәм уны ижад итеүсе халыҡ үҙ батырын яман көслө, ғәләмәт ҙур яуыз дошмандарға ҡаршы торорлоҡ, уларҙан өҫтөнөрәк ҡаһарман итеп күрергә теләгән. Дошманды хәйлә менән еңергә тырышыу архаик эпосҡа хас түгел.

Төрки-монгол халыҡтар эпосында геройҙың үҙенә кәләш эҙләп сәйәхәткә сығыуын һәм юлда бик күп ҡыйынлыҡтар, ҡаршылыҡтар үтеп кенә үҙ теләгенә ирешеүен хикәйәләү — традицион сюжет. Эпик ижадтағы был күренеш ырыу тормошонда булған реаль экзогамия йолаһының художестволы сағылышы булып тора. Был йола буйынса егет кәләште фәҡәт сит ырыуҙан ғына ала алған. «Урал батыр»ҙа ла геройҙың кәләш эҙләп юлға сығыуы һәм юлда ҡыйынлыҡтар аша үтеүе, ҡаһарманлыҡтар күрһәтеүе һүрәтләнә.

Әммә кәләш эҙләү мотивы ҡобайырҙа икенсе планда тора, беренсе планға кешеләргә үлемһеҙлек эҙләү сыға. Үлемһеҙлек эҙләү сәйәхәтендә Урал батыр ҙур еңеүҙәргә өлгәшә һәм һәр бер еңеү һайын тип әйтерлек кәләш ала, туй яһай. Ул Ҡатил батша ҡыҙына, Алғыр ҡыҙы Гөлөстанға, күк һәм ҡоштар батшаһы Самрау ҡыҙы Һомайға өйләнә. Уның өс ҡатын алыуында боронғо кешелек йәмғиәтендә йәшәгән полигамия — бер нисә ҡатын алыу йолаһының поэтик сағылышы күренә.

Ҡобайырҙа Урал батырҙың ағаһы Шүлгән менән бергәләп, арыҫландарға атланып, үлем-

һеҙлек килтереүсе Йәншишмә һыуын эҙләп сәйәхәткә сығыуҙары ентекле хикәйәләнә. Улар ике юл сатында ултырыусы ҡартты осраталар. Аҡ һаҡаллы ҡарт уларға был юлдарҙан китеүҙең мәғәнәһен аңлата. Бындай изгелекле ҡарт — төрки халыҡтар фольклорында киң таралған образ. Боронғораҡ дәүергә ҡараған башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ халыҡтары эпик ижадында ул Баба Төкләç, ә азербайжан, төрөк, төрөкмән фольклорында Ҡорҡут ата йә иһә Сәсле Азиз (Чачли Азиз) исеме менән йөрөй. Аҡ һаҡаллы ҡарт ғәҙәттә яңғыҙ юлаусыларҙы, бәләгә тарыған батырҙы, ҡыйырһытылған етемдәрҙе ҡурғап йөрөүсе әүлиә итеп һүрәтләнә.

«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосында «Баба Төкләç — туғыҙ йәшендә үк Тәңренән әүлиәлек бирелгән Баба Ғәзиздең иң кинйә улы» тип әйтелә [1]. Һуңыраҡ тыуған фольклор әçәрҙәрендә изгелекте ҡарт функцияһын ислам динендә киң таралған аҡ сәллә, йәшел сапан кейгән, оҙон йәшел таяҡҡа таянған Хызыр (Хызыр Ильяс) образы үтәй башлай.

Урал менән Шүлгән, йәрәбә һалышып, кемгә ҡайһы юлдан китеүҙе билдәләйҙәр. Шүлгәнгә илау-һыҡтау, кешеләрҙең аһ-зарын көндәр буйына тыңлап, ҡыйынлыҡтар күреп бара торған юл сыға, ә Уралдың юлы шатлыҡ, бәхет, иркенлек иленә алып барырға тейеш була. Әммә Шүлгән ғауғалашып, ағай булыуынан файҙаланып, Урал бараһы юлдан китергә теләй. Олоно оло тип таныған, баçалҡы тәбиғәтле Урал ағаһы теләгенә ҡаршы сыҡмай һәм үҙе ауыр юлдан китә. Артабан эпос уның юл сә-

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/232, 15-се б.

фәре, донъя менән танышыуы, ғәҙеллек яҡлап ҡаһармандыҡтар эшләүе хаҡында хикәйәләүгә күсә.

Урал, оҙаҡ йылдар бара торғас, ҡасып-боҫоп йөрөүсе ҡарсыҡ менән бер ҡыҙҙы осрата һәм уларҙан яуыз Ҡатил батшалығына килеп еткәнлеген белә.

Ҡатил батша иле — яуызлыҡ иле. Ҡобайырҙа Ҡатил төрлө башҡорт ырыуҙарын буйһондороп, иҙеп, йәберләп йәшәүсе, яуыз сит батша рәүешендә күҙ алдына баҫа. Ул, иҫке йолаларҙы тотоп, төрлө ҡорбандар ҡыла. Ҡатил батшалығында мәжүсилек, күп аллаға табыныу (политеизм) хөкөм һөргәнлеге, тәңрегә, ҡоҙғонға, күлгә, утҡа, ата-бабалар рухына табыныу һәм ҡорбандар килтереү күренә. Урал батыр өсөн кеше һуйыу — вәхшилек, ят йола.

Батша ҡыҙы Урал батырҙы үҙенә йәр итеп һайлай. Әммә Урал уның артынан һарайға бармай. Уның был ҡылығына асыуы килгән Ҡатил батша Уралды йола боҙоуҙа ғәйепләй. Урал Ҡатилға:

— Батша тигән нәмәне,
Кеше һуйыр йоланы
Ишетеп тә, күреп тә,
Нисә йылдар йөрөп тә,
Һис бер ерҙә күрмәнем,
Барлығын да белмәнем.
Үлем тигән яуызды
Үлтерергә эҙләйем.
Йоланан да ҡурҡмайым,
Үлемдән дә өркмәйем,
Кеше түгел ҡошто ла,
Үлем килә ҡалдыниһә,
Килеп ҡулын һалдыниһә,
Уны бирең Үлемгә
Ҡул ҡаушырып тормамын [1]! —

[1] БХИ. Эпос, 1972, 54-се б.

тып куап бирә. Ул үҙенең һүҙенә тоғро булып әлдә, үлемгә дусар ителгәндәрҙе яклап көрәшкә сыға. Урал батырҙың ҡаһарманлығы өҫтө батшалыҡта һынала. Ул Ҡатил батшаның тау кеүек ҙур, ғәйрәт сәсеп килгән үгеҙен еңә, ләкин уны бөтөнләй һәләк итмәй. Тик уға «кеше көсөнөң өҫтөнлөгөн», ә үгеҙҙең һәм уның тоҡомонаң «кешегә хеҙмәт итәсәген» киҫәтеп ҡуя. Урал батыр Ҡатилдың дүрт бәһлеүәнен, Ҡатил батшаның үҙен, барлыҡ ярандарын үлтерә. Ҡатил батша золомонан яфа сиккәндәрҙе, ҡорбанға әҙерләнгән кешеләрҙе азат итә. Уларҙың араһынан береһен баш итеп һайлата. Урал, Ҡатил батша ҡыҙын алып, туй яһай.

Урал батырҙың юлы артабан йылан, аждаһа иле аша үтә. Ҡаһҡаһә — аждаһа, йыландар батшаһы. Уның аждаһалары кешеләргә йәшәргә ирек бирмәйҙәр, ил батырҙарын йотоп, баш үҫтерәләр. Эпос Ҡаһҡаһәнең аждаһа-йылан илен сит ырыу иле тип һүрәтләй. Унда ла батырҙар, халыҡ бар. Әммә был илдә яуызлыҡ, тупаҫ көс өҫтөн сыҡҡан, кешеләрҙең намыҫы тапалған. Күп батырҙарҙы аждаһалар йотҡан, күп халыҡ зинданға ябылған. Был илгә килеп етер алдынан Урал батыр Ҡаһҡаһәнең улы Зәрҡумды үлемдән ҡотҡарып алып ҡала. Зәрҡум өйрәтеүе буйынса ул Ҡаһҡаһәнең сихри көскә эйә булған мөғжизәле ынйы башлы таяғын алырға уйлай. Ҡаһҡаһә мәкерлек менән Уралды юҡ итергә самалай. Ләкин Урал батыр Ҡаһҡаһәнең аждаһа, йыландарын тармар итә. Кеше йотоп баш үҫтергән аждаһаларҙың башын киҫеп, батырҙарҙы ҡотҡара. Зинданда бикле кешеләрҙе иреккә сығара. Иреккә сыҡҡан халыҡ: «Инде, егет, ни эшләйек, ниндәй бүләк бирәйек? Тәңре тиһәк, кешеһең,

ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?» — тип әйтеүҙәренә былай тип яуап бирә:

— Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй,
Ил батыры шул булыр —
Ҡеше һөйәр ир булыр.
Һеҙҙең шатлыҡ — минеке,
Минең шатлыҡ — һеҙҙеке.
Илдең барын йыяйыҡ,
Ҡүмәкләп туй ҡылайыҡ.
Арағыҙҙан берәүҙе
Башлыҡ һайлап ҡуяйыҡ [1].

Ул ил батырының ғүмере лә, эше лә илдән, халыҡтан айырылғыһыҙ булыуын әйтә һәм үҙенең кеше һөйәр батыр булыуы менән ғорурлана. Күп йылдар буйына аждаһа, йыланға ҡаршы һуғышҡан, аҡылы, ғәҙеллеге менән башҡаларҙан айырылып торған Алғыр ҡартты ул Ҡаһҡаһа иленә баш ҡыла. Иреккә сыҡҡан халыҡ Урал батырға рәхмәт йөҙөнән Ҡаһҡаһала ҡоллоҡта булған Алғыр ҡарттың ҡыҙы Гөлөстанға өйләнеүен, туй яһауын һорай. Урал батыр аждаһа, дейеүҙәрҙе тамам еңмәй тороп туй яһауҙы иртә һанай. Шул ваҡыт күпте күргән бер ил ҡарты:

— Һәр йыл ғүмер бер батыр
Иле өсөн яратыр.
Быуын-быуын үтер ул,
Киләсәк быуын етер ул,
Һинең даның ҡалһа ла,
Ҡулда ғәйрәт бөтөр ул.
Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,
Ил батыры — батырҙан
Батыр ирҙән тыуыр ул;
Атанан күреп, уҡ юнып,
Өлкәндән күреп, яу ҡыуып,
Ил эсендә үҫер ул.

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 69—70-се б.

Батырҙан батыр тыуғанда,
Атаһындай булғанда,
Бер быуын тип һаналған
Илдә ғүмер үтер ул.
Батыр атанан ҡот йәйгән,
Матур әсәнән һөт имгән, —
Һыңә тиңдәш булыр ҡыҙ,
Батырға әсә булыр ҡыҙ [1], —

тигәс, Урал батыр, карттың мәғәнәле һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, Гөлөстанды алып туй яһай. Ҡарт, батырҙы — батыр, быуынды быуын алмаштыра, тигән тәбиғәт заңын әйтә, батырҙан батыр тыуасаҡ, тигән фәлсәфәне Уралдың аңына һеңдерә.

Артабан Урал батыр күк һәм ҡоштар батшаһы Самрау иленә килә, Һомай менән осраша. Һомай, Урал батыр «бөтә донъя ҡош төҫөн үҙ өҫтөндә биҙәгән бер ҡошто табып алып ҡайтһа», уға Йәншишмәнән һыу алыу юлын өйрәтәсәген әйтә. Урал батыр был шартты үтәй. Һомай иленә бер үк ваҡытта тигәндәй Шүлгән дә килеп етә, ләкин уның уй-хыялдары бөтөнләй икенсе төрлө: Самрау илен баҫып алыу, Аҡбуҙат менән булат ҡылысты ҡулға төшөрөп, бөтә донъяға баш булыу. Ул Самрау иленә килгәнгә тиклем бәхет, тиңлек, ғәҙеллек хөкөм һөргән илдә, шулай уҡ, Зәрҡумға юлдаш булып, Әзрәҡәнең дейеүҙәр илендә була, байлыҡҡа, данға алданып, халыҡҡа, Урал батырға ҡаршы көрәшмәк була. Ул Һомайҙы ла кәләш итеп алырға ниәт итә. Шүлгәндең мәкерле уйын белгән Һомай үҙе өсөн кейәүҙе Аҡбуҙатына һайларға ҡуша. Аҡбуҙат үҙенә батырҙы, ә Һомайға кейәүҙе тик етмеш бот ауырлығындағы ташты һауаға ата

[1] БХИ. Эпос, 1972, 70-се б.

алған кешене генә һайлаясағын әйтә. Был бәйгелә Урал батыр еңеүсе булып сыға һәм Һомайға өйләнә. Самрау батша Айһылыуҙы Шүлгәнгә кейәүгә бирә һәм туй яһай. Алдыҡ юлы менән ынйы башлы таяҡты эләктергән Шүлгән туфан ҡалҡыта һәм дейеүҙәр иленә ҡасып китә.

Урал батыр Әзрәҡәнең дейеүҙәренә, Ҡаһҡәһәнең аждаһаларына, ағаһы Шүлгәнгә ҡаршы аяуһыҙ һуғыш аса. Урал батыр, Аҡбуҙатты йөҙҙөрөп, диңгеҙ эсендә булат ҡылыс менән дейеү-аждаһаларҙы турай. Имәнес дейеүҙәрҙең үлек кәүҙәләренән тауҙар ҡалҡып сыға. Ҡаһҡәһәне, Зәрҡум, Әзрәҡәне алышып еңә. Уларҙың кәүҙәләренән бейек тауҙар яһала. Урал батыр Аҡбуҙатта диңгеҙ ярып үткән юл аҙаҡ Урал тип аталған тауға әйләнә.

Урал батыр ярҙамға килгән улдары ярҙамында яуыз йәндәрҙе ҡыйрата, күҙгә күренер дошмандарҙы, үлем килтереүсе йәндәрҙе ҡыра. Үлемесле яраланған Урал батыр ҡыйынлыҡтар үтеп тапҡан Йәншишмә һыуын үҙе эсеүҙән баш тарта, уны һыуһыҙлыҡтан интеккән, шиңеп барыусы тәбиғәткә бөркә һәм уны мәңге үлемһеҙ яһай. Урал үлгәндән һуң, уның юлын уландары дауам итә.

Шуны айырата билдәләп үтеү мөһим, эпик жанрҙың тыуыу һәм формалашыуында, бигерәк тә уның башланғыс стадияһында, башҡорттарҙың мифологик һәм тотемистик аң-ҡараштары ҙур роль уйнаған. Мифологик образдар, кешеләрҙең донъяға, тәбиғәт күренештәренә һәм серҙәренә ҡараштары «Урал батыр» ҡобайырына үтеп ингән һәм уның художество туҡымаһына органик рәүештә үрелеп киткән. Боронғо башҡорттар донъя төп өс

өлөштән, йәғни ҡатлауҙан — күктән (һауа, йыһан), ерҙән, һыу йәки ер аҫтынан — тора тип күҙ алдына килтергәндәр. «Урал батыр» эпосында күктең (иң юғары ҡатлауҙың) күк аллаһы (батшаһы) Самрау биләмәһе икәнлеге күренә. Самрауға бөтә ҡоштар, йондоҙ юлаусы толпарҙар буйһона. Боронғо башҡорттар күк батшалығын да үҙҙәре күреп белгән кейекйәнлектәр менән тултырғандар. Күк аллалары ерҙәге кешеләр кеүек үк тормош алып баралар. Самрауҙың ике ҡатыны — Ҡояш менән Ай — бар. Уның Ҡояштан тыуған ҡыҙы — Һомай, ә Айҙан тыуған ҡыҙы Айһылыу исемле. Шуныһы характерлы, Самрау батша һәм уның ғаилә ағзалары, толпарҙары үлемде белмәйҙәр, улар алла рәүешендә тасуирланалар. Ер өҫтөндә ҡәҙимге кешеләр йәшәгәнлеге һәм уларҙың тормошо һүрәтләнә. Һыу һәм ер аҫты донъяһында дейеү, аждаһа, йыландар һәм башҡа яуыз йәндәр йәшәй. Башҡорт әкиәттәрендә ер аҫты үҙе генә ете ҡаттан тороп, уның етенсе ҡатында ғәҙәттә аждаһалар, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш иргәйел ҡарт ҡиәфәтендәге яуыз мифик йәндәр, иргәйелдәр тормошо һүрәтләнә. Ер һәм һыу аҫтының яуыз йәндәре — дейеү, аждаһа, йылан һ. б. — ерҙә йәшәүсе кешеләр, батырҙар менән дә, күктә йәшәүсе үлемһеҙ, алла затлы йәндәр менән дә көрәш алып баралар, уларға туҡтауһыҙ дошманлыҡ ҡылалар.

Донъяның өс ҡаттан тороуы, һәр ҡаттың үҙ йән эйәләре булыуы хаҡында башҡорт мифологияһында бер төрлөлөк, ҡәтғи бүленеш юҡ. Йыш ҡына донъяның юғары өлөшөндә — күктә йәшәүсе йәндәр ер кешеләре менән бәйләнешкә керәләр, ерҙә йәшәйҙәр. Шулай уҡ

өсөнсө ҡатта, ер аҫты йәки һыу аҫты йәндәре лә урта донъяла — ерҙә йәшәүсе кешеләр менән аралашып китәләр. «Урал батыр» эпосының логик дауамы булған «Аҡбуҙат» эпосында ер улы Һәүбән һыу аҫты донъяһы ҡыҙы Нәркәскә өйләнә һәм уны үҙ иленә алып ҡайта. Башҡорт космогоник легендаларының береһендә, үгәй инәһе тарафынан йәберһетелгән йәш ҡыҙҙы Ай йәлләй һәм уны төндә һыуға барған мәлендә көйәнтәһе-ние менән бергә күтәреп ала. Айҙағы ҡара таптар күнәктәр көйәнтәләгән етем ҡыҙ тип аңлатыла [1].

«Урал батыр» эпосында башҡорттарҙың боронғо космогоник ҡараштарына бәйләнгән образдар, йыһан күренештәре ҙур ғына урын ала. Бындай образдар рәтенә, әйтәйек, күк һәм ҡоштар батшаһы Самрау, уның ҡатындары — Ай менән Ҡояш, ҡыҙҙары — Һомай менән Айһылыу, йондоҙҙан йондоҙға атылып йөрөүсе Буҙат һәм Һарат толпарҙар, Самрауға буйһонған барлыҡ ҡоштар, йондоҙға әүерелеп күктә ҡалыусы дейеүҙәр һ. б. инә.

Самрау иле эпоста ер кешеләре тормошона оҡшаш итеп һүрәтләнә. Самрау ғаилә ҡороп йәшәй. Ул ҡатынды ерҙә лә эҙләгән, ләкин үҙенә тиң йәр тапмағас, күккә осоп, Ай менән Ҡояшты күҙләгән һәм уларҙы арбап алған, бар ҡоштарға баш булған. Самрауҙың йылҡы көтөүҙәре, ҡанатлы толпарҙары ла бар. Ул архаик эпоста күк донъяһындағы баш алла, батша рәүешендә, антропоморф итеп һүрәтләнә. Шуныһы ҡыҙыҡ: күктәге йән эйәләре, аллалар, ер кешеләренең тормошона, яҙмышы-

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980, 42-се б.

на вайымһыҙ түгел. Мәҫәлән, Самрау эпоста, шулай уҡ әкиәттәрҙә, мифтарҙа кешеләрҙе ҡурғаусы, хәүефтән һаҡлаусы булараҡ сығыш яһай. Ул хәүефкә төшкән батырға ярҙамға килә: мөғжизәле көскә эйә булған булат ҡылысын, Буҙ толпарын бүләк итә. Ҡыҙы Һомайҙы кейәүгә бирә. Шулай итеп, ул ерҙә изге Һомай тоҡомоноң, ырыуының таралыуына, шулай уҡ күктән төшкән изге йылҡы малының ишәйеүенә, Урал тауҙарында ҡош-ҡорттоң үрсеүенә булышлыҡ итә. Самрау ана шулай ер тормошон башлап ебәреүгә ярҙам итеүе, кешеләргә йәшәү өсөн кәрәк булған шарттар тыуҙырыуы менән төрки-монгол мифологияһында киң таралған икенсе бер күк аллаһы — Тәңрегә яҡын тора. Уларҙың ер тормошон ҡороуға булышлыҡ итеү, кешеләрҙе, батырҙы ҡурғау, хәүефтән һаҡлау, кешеләргә дошман аждаһа, дейеү кеүек функциялары нигеҙҙә тура килә. Самрау менән Тәңренең боронғо төрки-монгол ырыуҙарының аңында төрлө осорҙа тыуған, әммә бер-береһенең функцияларын үҙләштергән күк аллалары булыуы ихтимал. Самрау образы хатта Тәңренән дә элегерәк тыуған булыуы мөмкин.

Самрау ҡош — төрки-монгол, иран мифологияһында киң таралған образ. Иран мифологияһында дәү ҡош — Симург бар. Ул иран әкиәттәрендә, дастандарында мифик персонаж булып йөрөй. Был гигант ҡоштоң дошмандары — шулай уҡ гигант аждаһа-йыландар. Иран мифологияһында Симург бәләгә тарыған геройҙы ҡурғаусы рух булып та һүрәтләнә.

Ҡотолмаған яҙмыш арҡаһында ер аҫты донъяһында тороп ҡалырға мәжбүр булған

батыр егет дәү ағас башына оялаған Симургтың балаларын йоторға үрмәләгән аждаһаны тураҡлап өйә. Ояһына ҡайтып төшкән Симург егеттең изгелегенә изгелек күрһәтә — уны ер аҫтынан яҡты донъяға сығара. Ошо уҡ мотив һәм образ ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, төрөкмән, ҡарағалпаҡ, башҡорт фольклорында киң таралған. Ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ халыҡтарында «Ер-Төстек» дастаны ошо сюжетҡа ҡоролған. Башҡорт фольклорында ул «Аҡъял батыр», «Айыуғолаҡ» («Айыуғолаҡ-Аҡкүбәк») әкиәттәрендә бар.

Башҡорт әкиәттәрендә лә, иран мифологияһындағы кеүек үк, Сәмреғош балалары үҙҙәрен ҡотҡарыусы егеткә рәхмәт әйтәләр һәм, һунарҙан ҡайтыусы әсәләре ҡапыл йотоп ҡуймаһын тип, уны ҡанат аҫтына йәшерәләр. Хәлде төшөнгән Сәмреғош балаларын ҡотҡарыусы егетте ер өҫтөнә сығарып ҡуя. Шулай итеп, Самрау, Симург, Сәмреғош әкиәттәрҙә лә геройҙы ҡурғаусы, изгелекле ҡош рәүешендә һүрәтләнә.

Төрки, иран мифологияһында урын алған Самрау, Симург ҡошона оҡшаш образды боронғо һинд мифологияһын асыҡ сағылдырған мәшһүр «Махабхарата» эпосында ла күрергә мөмкин [1]. Һинд эпосында ул Гаруда тип атала. Гаруда күктәге ҡояшты кәүҙәләндереүсе, шул уҡ ваҡытта ҡоштарҙың тоҡомон башлаусыһы һәм батшаһы итеп һүрәтләнә. Һинд мифологияһында һәм эпосында гигант ҡош Гаруда менән йыландар ғүмер баҡый бер-береһе менән көрәшәләр һәм бер-береһенең антагонистары итеп бирeләләр. Гаруда ҡош үҙенең функ-

[1] Мифы древней Индии. М., 1975, 210-сы б.

цияһы, сифаттары менән башҡорт фольклорындағы Самрау батша, Сәмреғош образдарына яҡын.

Самрау боронғо башҡорттарҙың изге ҡошо һаналған һәм популяр фольклор образына, культына әүерелгән. «Урал батыр» эпосында ҡоштар батшаһы Самрау, уның ғаилә ағзалары, күктә йәшәүсе башҡа мифик заттар «ауырыу-һыҙлау күрмәүсе» үлемһеҙ йәндәр үтеп тасуирлана. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар кеше, ер батыры ярҙамына мохтаж булып ҡалалар. Мәҫәлән, Урал батыр Самрау илен Әзрәҡәнең дейеүҙәренән, Ҡаһҡаһәнең ажлаһа йыландарынан һаҡлай, уның дошман ҡулына эләккән ҡыҙҙарын ҡотҡара.

«Урал батыр» ҡобайырында тағы ла бер мифик ҡош — Һомай образы бар. Ул иң оло күк һәм ҡоштар батшаһы (аллаһы) Самрауҙың Ҡояштан тыуған ҡыҙы. Эпоста ул матурлыҡ, ғәҙеллек һәм тоғролоҡ символын кәүҙәләндерә. Башҡорттарҙың боронғо ан-ҡарашында Һомай изге, культҡа әүерелгән ҡош һаналған һәм «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙарына поэтик образ булып ингән. Һомай ер улы Урал батырға кейәүгә сыға һәм батыр ул таба. Унан тыуған Иҙел батыр Урал батыр һәм уның тоҡомдары хаҡындағы ҡобайырҙар циклында («Аҡбуҙат») ете башҡорт ырыуын башлап ебәреүсе, ырыу башы итеп хикәйәләнә. Шулай итеп, Һомай башҡорт ырыуҙарын ҡурғаусы һәм башлап ебәреүсе иҫәпләнә. Ул шул уҡ ваҡытта изге аҡҡоштар тоҡомон башлаусы ла. Һомай, Урал батыр үлгәндән һуң, иренә мәңгелеккә тоғро булып аҡҡош тунында ҡала. «Урал батыр» ҡобайырында Уралда йәшәүсе кешеләр үҙҙәрен Һомай ҡош тоҡомо тип

иҫәпләйҙәр һәм үҙ-ара һөйләшеп, ырыуҙаш (туғандаш) һанаған аҡҡоштарға һунар итмәҫкә, уларҙың итен ашамаҫҡа һүҙ ҡуйышалар. Урал батыр үлгәндән һуң, Һомай күк батшалығына китеп, юғалып тора. Байтаҡ йылдар үткәндән һуң, Һомайҙың Уралды һағынып ҡайтыуы хаҡында былай тиелә:

— Һомай Уралын һағынған:
Уның юлы буйынан
Осоп йөрөп, талпынған,
Тауға килеп, ҡаяла
Уралды уйлап, моң сәскән,
Аҡҡош булып, түл йәйеп,
Аҡҡош тыуын үрсеткән.
Быны бары белгән, ти,
Һомай тоҡомо ҡоштар, тип,
Бер туғандай күрешеп,
Ау аулауҙан тыйышып,
Аҡҡош тотоп еймәҫкә, тип,
Үҙ-ара һүҙ ҡуйышып, —
Аҡҡош үрсеп киткән, ти;
Аҡҡош ите кешегә
Шуға харам икән, ти[1].

Һомайҙан аҡҡоштар таралып киткән, тиелә. Боронғо башҡорттар аҡҡошто үҙҙәренә нәҫел күреп, изге ҡош, тотем һанағандар. Аҡҡошто атыу тыйылған булған, аҡҡош ояһын туҙҙырыу ҙур гөнаһ һаналған. Аҡҡоштың ҡарғышы ҡаты була, уны рәнйеткән кешегә ҡарғыш төшә, бәхетһеҙлек килә, тип ҡаралған. Был йәһәттән автор тарафынан 1983 йылда Башҡортостандың Мәләүез районы Йомаҡ ауылы юрматы ырыуы башҡорто Ихсанов Тәҡиулла Нәбиулла улынан яҙып алынған «Аҡҡош ҡарғышы ҡаты була» тигән легенда иғти-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 130-сы б.

барға лайыҡ. Асыҡлыҡ өсөн уны тулыһынса килтереү урынлы булыр.

«Аҡҡош — изге ҡош. Уны атыу, рәнйетеү тыйыла. Рәнйетһәң, аҡҡоштоң ҡарғышы ҡаты төшә. Беҙҙең күрше Низам Мәхмүтовтың атаһы һунарсы ла, балыҡсы ла булды. Ауыл тирәһендәге күлдәрҙә элек аҡҡоштар, йыл һайын килеп, бала сығара торғайнылар. Бер ваҡыт Низамдың атаһы ни эшләптер инә аҡҡошто атып йыҡҡан. Аҡҡоштоң балалары тайпылышып ҡасып ҡалғандар.

Һунарсы ағай өйөнә ҡайтып та еткән, артынса уҡ ата аҡҡош ҡаңғылдап осоп килеп тә еткән. Ул өй тирәләп ҡыскә тиклем осоп йөрөгән, ҡапҡа башына ла ҡунып киткән, ти.

Ҡарттар һунарсыға: «Һин ни эшләп изге ҡошҡа ҡул күтәрҙең, гөнаһынан ҡурҡманыңмы ни?» — тип үпкә һүҙҙәре әйткәндәр.

Һунарсы тышҡа сығырға ҡыймай, ҡурҡып өйҙә ултыра икән.

Аҡҡоштоң береһе үлһә, икенсеһе үҙен-үҙе һәләк итә ул.

Ҡыскә табан ата аҡҡош шәп итеп осоп барып бер йыуан ағасҡа һуғылып үлгән. Шул уҡ төндә һунарсының тап-таҙа, матур булып үҫеп килгән балаһы үлеп ятҡан. Баланың үлемен ауыл халҡы аҡҡош ҡарғышынан күрҙе».

Аҡҡошто рәнйетһәң, бәлә-ҡаза тарый, тигән ҡараш төрки-монгол халыҡтарында киң таралған. Мәҫәлән, сыуаштар, изге аҡҡошто үлтереү — кеше тормошондағы иң ҙур гөнаһ, тип һанағандар [1]. Яҡуттар аҡҡошто тотем ҡошо тип иҫәпләгәндәр һәм уға ниндәй ҙә булһа на-

[1] Родионов В. Г. К образу лебедя в жанрах чувашского фольклора. В сб.: Чувашский фольклор. Специфика жанров. Чебоксары, 1982, 152-се б.

сарлыҡ [illegible] итмәгәндәр [1]. Буряттар ҙа [illegible] тотем һанайҙар һәм үҙҙәренең [illegible] аҡҡошҡа бәйләйҙәр. Генеалогик [illegible] буйынса, Хоредой исемле мәргән [illegible] аҡҡошто — Хон (Хун) - Шубуунды то[illegible] ала һәм уға өйләнә. Уның аҡҡоштан ун бер улы тыуа. Ошо ун бер улдан хорин бурят ырыуы тарала [2].

Башҡорттар аҡҡошто тотем ҡош иҫәпләһәләр ҙә, ҡайһы осраҡтарҙа уның итен ашауҙан баш тартмағандар. Аҡҡош итен ашау йолаһы фольклорҙа ла сағылған. Мәҫәлән, «Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайырында Заятүләк, шонҡар сөйөп, ете аҡҡош тота һәм, уларҙы алып ҡайтып, атаһына (ханға) бүләк итә [3]. Элек һунарсылар һирәк-һаяҡ аҡҡош атҡандар һәм ырыу аҡһөйәктәренә, ҙур түрәләргә иң ҡәҙерле бүләк рәүешендә тапшырғандар. Аҡҡош итен ауыҙ итеү үҙҙәре изге һанаған тотем ҡоштоң иң һәйбәт сифаттарын, көсөн ҡабул итеү, шул илаһи көскә эйә булыу тип ҡаралған.

Аҡҡоштар тураһында тағы ла бер башҡорт легендаһын миҫалға килтереү урынлы булыр.

«Беҙҙең яҡтарҙа, — тиелә унда, — элек ҡыр ҡаҙҙары, аҡҡоштар була торғайны. Ҡинйәкәйҙән ете саҡрым ғына ары Ҭирмәнйылға ауылы быуаһына йыл һайын аҡҡоштар килеп, күҙгә тиклем шунда йөрөнөләр, бала сығарҙылар. Аҡҡошто изге ҡош һанап, уға һис кем зыян-

---

[1] Гуревич И. С. Космогонические представления населения Оленекского района. — «Советская этнография», 1948, 130-сы б.

[2] Михайлов Т. М. Из истории бурятского шаманизма. С древнейших времен по XVIII в. Новосибирск, 1980, 159-сы б.

[3] БХИ. Эпос, 1972, 199-сы б.

лыҡ килтермәне. Бала-сағаларға ла таш һелтәргә, аҡҡош ояһын туҙҙырырға ҡарттар ирек бирмәй торғайнылар. Ҡыр ҡаҙҙарын һунарсылар тотоп ашанылар. Аҡҡошто ашағандарын үҙем күрмәнем. Шулай ҙа: «Аҡҡош — изге ҡош, аҡҡош ите — изгеләр ашы», — тип әйткәндәрен ишеткәнем булды...»[1].

Тува халҡының ҡу (аҡҡош) ырыуы кешеләре үҙҙәрен аҡҡоштан таралған тоҡом һанайҙар. Туваларҙа ла аҡҡош изге, тотем ҡош һаналһа ла, уға һирәкләп һунар итеү йолаһы булған. Уларҙа ла аҡҡошто аулап, абруйлы түрәләргә ҡәҙерле бүләк рәүешендә килтереп биргәндәр[2]. Аҡҡошто изге ҡош, тотем итеп ҡарау, шул уҡ ваҡытта уны аулау һәм итен ашау йолаһы элек шор халҡы тормошонда ла булған[3]. Был йола ырыу аҡһөйәктәре, бай, түрәләр тарафынан үҙ ырыуҙаштары алдында абруй күтәреү, шул уҡ ваҡытта тотем сифаттарын үҙләштереү маҡсатында эшләнгән. Ошоға оҡшаш хәлде башҡа тотем йәнлектәргә ҡарата мөнәсәбәттә лә күрергә мөмкин. Мәҫәлән, себер халыҡтарының күбеһе айыуҙы тотем, изге һанай. Әммә уны аулап, итен ашау

---

[1] «Аҡҡош — изге ҡош» легендаһы автор тарафынан 1983 йылда Башҡортостандың Ишембай р-ны Ҡинйәкәй ауылы юрматы ырыуы башҡорто Лоҡманов Сәйфулла Муса улынан (1911 йылғы, колхозсы-пенсионер) яҙып алынды. Ҡыҫҡартып бирелә.

[2] Был мәғлүмәттәр 1979 йылда Тува АССР-ы Тодж районы Адыр-Ҡижиг ауылында йылға-тодж ырыуы һунарсыһы Максим Чигжиттан (1910 йылғы) яҙып алынды. Авторҙың ялан көндәлегенән.

[3] Мәғлүмәттәр 1979 йылда Ҡемерово өлкәһе Междуреченск ҡалаһы Ҡорай поселогында йәшәүсе данлыҡлы шор ҡайсыһы Турушпанов Дмитрий Ҡонстантиновичтан (1917 йылғы) яҙып алынды. Авторҙың ялан көндәлегенән.

йолаһынан баш тартмайҙар. Хатта айыу итен ашау ҙур йола байрамы — «айыу туйы»на әүерелгән. Сөнки һәр кешенең үҙенең туғаны һаналған айыу кеүек көслө, аҡыллы, изге булаһы килгән.

Аҡҡош культы башҡорт фольклорының бөтә жанрҙарына үтеп ингән.

Аҡҡош йөнө, тәпәйе һ. б. органдары кешене, ғаиләне бәлә-ҡазанан, төрлө ҡағымдарҙан һаҡлай, тип ҡаралған һәм халыҡ медицинаһында, төрлө ырымдарҙа ҡулланылған.

«Урал батыр»ҙа боронғо эпос өсөн характерлы булған персонаждарҙың төрлө төҫкә, һүрәткә әйләнеү хәлдәре бар. Мәҫәлән, Һомай берсә һылыу ҡыҙ, берсә аҡҡош төҫөнә керә. Айһылыу бөтә донъяла булған ҡош төҫтәрен бер үҙенә йыйған ҡош сүрәтенә әйләнә. Аждаһа-йылан иле батшаһы Ҡаһҡаһәнең улы Зәрҡум егет төҫөнә лә, имәнес йылан, көшөл ҡиәфәтенә лә еңел күсә ала. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ, был йәһәттән «Урал батыр» эпосы менән ҡалмыҡ халҡының «Джангар» эпосы араһында оҡшашлыҡ ҙур. «Джангар»ҙа күк аллаһы Тәңре ҡыҙы Герензал аҡҡошҡа әүерелә һәм хәүефкә тарыған Хонгор батырҙы төрлө бәләләрҙән йолоп ала. Был эпик поэмала Герензал, Һомай шикелле, эпос геройын, ҡалмыҡ ырыуын ҡурғаусы ролендә һүрәтләнә [1].

Һомай — боронғо төрки халыҡтар мифологияһында Умай исеме менән киң таралған из-

---

[1] Сагитов М. М. О некоторых сходных мотивах и образах в башкирском и калмыцком народном эпосе. В сб.: «Джангар» и проблемы эпического творчества тюрко-монгольских народов. Элиста, 1978, 51-се б.

ге йән, ҡатын алла образы[1]. Төрки халыҡтар Умайҙы ғаиләгә, ырыуға ырыҫ, муллыҡ, үрсем, уңдырышлыҡ килтереүсе, балаларҙы ҡурғаусы изге йән итеп ҡабул иткәндәр һәм уға табынғандар. Изге Умай образы бурят, монгол, тибет халыҡтары мифологияһында ла бар. Тибет телендә у м а һүҙе әсәйҙе аңлата. Умай XII—XIII быуаттарға ҡараған боронғо төрки руник яҙмаларҙа осрай, изге аллалар — күк Тәңреһе, Ер-һыу менән бер тиң иҫкә алына һәм борон киң таралған муллыҡ, уңдырышлыҡ культы менән бәйләнә[2]. Ҡырғыҙҙар Һомайҙы Умай-эне (Умай инә) тип атағандар һәм уны балаларҙы, йортто һаҡлаусы, түл килтереүсе изге йән тип ҡабул иткәндәр һәм хөрмәтләгәндәр. Умай-эне ҡырғыҙ халҡының «Манас» эпопеяһында ла сағылған. Унда Умай, кендексе әбей сифатында буласаҡ батырҙың тыуыуына ярҙам итә[3]. Оғуз халыҡтары фольклорында ла Умай балаларҙы һаҡлаусы, имләүсе изге ҡатын рәүешендә һүрәтләнә[4]. Һомай иран, шулай уҡ Яҡын Көнсығыш халыҡтары ышаныуҙарында һәм фольклорында ҙур популярлыҡ алған. Боронғо төрки халыҡтарҙың ышаныуҙарын һәм фольклорын өйрәнеүсе ғалимдар Умайҙы иран мифологияһындағы Бәхет ҡо-

---

[1] Потапов Л. П. Умай — божество древних тюрков в свете этнографических данных. В кн.: Тюркологический сборник. М., 1973, 265—286-сы б.

[2] Абрамзон С. М. Киргизы и их этнографические и историко-культурные связи. Л., 1971, 277—279-сы б.

[3] Кыдырбаева Р. З. Генезис эпоса «Манас». Фрунзе, 1980, 33—34-се б.

[4] Дыренкова Н. П. Умай в культе турецких племен. — Культура и письменность Востока, т. 3. Баку, 1928.

шо, Һумай менән генетик бәйләнгән тип фараз итәләр. Иран, шулай уҡ ғәрәп халыҡтары мифологияһы буйынса, Һомай ҡоштоң күктән осоп барғанын күргән йәки ул ҡоштоң күләгәһе төшкән кеше бәхетле була, тип ҡаралған. Шуның өсөн Һомайҙы Бәхет ҡошо тип тә атап йөрөткәндәр. Шулай итеп, Һомай, Умай, Ымай бик киң регионда йәшәүсе халыҡтарҙа культҡа әүерелгән мифологик образ булып йөрөй.

Күреүебеҙсә, башҡорт мифологияһында ла, архаик «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарында ла Һомай образы функцияһы ифрат киң. Ул башҡорт ырыуҙарын башлаусы ла, ғаиләне дауам итер килен дә, ырыуҙы ҡурғаусы һәм түлләндереүсе лә һ. б. Ошо йәһәттән дә боронғо төрки халыҡтарындағы Һомай культын өйрәнеүселәр өсөн башҡорт фольклоры бай һәм мөһим сығанаҡ була ала.

Боронғо башҡорттар ҡарашында һәм тормошонда ҡоштар культы ҙур урын тотҡан. Ул халыҡ ижадында, халыҡ хореографияһында («Ҡәкүк», «Бөркөттәр бейеүе», «Ҡара тауыҡ» һ. б.), йыр һәм көйҙәрендә («Сыңрау торна», «Ҡәкүк», «Аҡ яурын сал бөркөт» һ. б.), шулай уҡ биҙәү сәнғәтендә киң сағылыш тапҡан. Башҡорттарҙың культҡа әүерелгән изге ҡоштар пантеонында мифик Самрау, Һомай, Саҡ-Суҡтан башҡа аҡҡош, торна, ҡарағош, бөркөт, ҡарсыға, ыласын, кәкүк һ. б. ҡоштар культы ла популяр булғанлығы, уларҙың халыҡ йолаларында, фольклорҙа һаҡланғанлығы билдәле. Боронғо башҡорттарҙа ҡоштар культы ырыу атрибуттарында ла ныҡлы урын алған һәм оҙаҡ йылдарға тиклем һаҡланып килгән. Һәр ырыуҙың традицион атрибуттары — изге ырыу ағасы, ораны, изге ҡошо, тамғаһы бул-

ған, һәм һәр ырыу кешеһе уларҙы мотлаҡ белергә тейеш, тип һаналған. Мәҫәлән, мең ҡәбиләһе яйыҡçыбы ырыуының ағасы — ҡайын, ораны — алас, тамғаһы — ҡуш ҡабырға, ҡошо — ҡарсыға. Табын ырыуы шәжәрәһендә ырыу башы легендар Майҡы бейгә Сыңғыҙ хандың ил, оран (Салауат), ағас (ҡарағас), ҡош (ҡарағош) биреүе хаҡында әйтелә [1]. Ә ҡаңлы ырыуының ағасы — ерек, ораны — Тәңре, ҡошо — ҡарға. Әйтергә кәрәк, «Урал батыр» эпосында ҡоҙғон культы хаҡында мәғлүмәттәр бар. Бында ҡоҙғон — халыҡты иҙеүсе Ҡатил батшаның ырыу ҡошо. Ҡатил ырыуының «тыу биҙәге ҡоҙғон» булыуы, ошо ырыу ҡошо өсөн йыл һайын кеше ҡорбаны килтерелеүе хикәйәләнә, был иһә ҡырағай, сит йола рәүешендә күрһәтелә.

Башҡорттарҙа ҡоҙғондоң да ырыу ҡошо булып йөрөүе, изге һаналыуы бик ихтимал. Ундай күренеште башҡа халыҡтар тормошонда осратырға мөмкин. Мәҫәлән, элек буряттар ҡоҙғонды изге ҡош һанағандар һәм уны төрлө һәберләүҙән һаҡлағандар [2].

Ҡоҙғон культы хаҡында һөйләүсе бер мөһим фактҡа иғтибар итәйек: сығышы менән Алтай төркиҙәренә бәйле боронғо ҡатай ырыуы башҡорттарында ҡоҙғон-ҡатай араһы барлығы мәғлүм [3].

---

[1] Башкирские шежере. / Составление, перевод текстов, введение и комментарии Р. Г. Кузеева. Уфа, 1960, 155—156-сы б.

[2] Михайлов Т. М. Из истории бурятского шаманизма..., 77-се б.

[3] Киреев А. Н. Башкирский народный эпос, 25-се б.

Изге, тотем һаналған ҡоштарҙың суҡыштары, тырнаҡтары, ҡанаты, йөнө, бөрләтәүенән сыҡҡан таштары магик көскә эйә тип ҡаралған һәм халыҡ медицинаһында, им-том итеүҙә ҡулланылған. Ошо ҡоштар культы, тотемизмы башҡорттарҙа ғына түгел, ә күп кенә бүтән төрки халыҡтар фольклорында ла художестволы сағылыш тапҡан.

Бик борондан уҡ күсмә малсылыҡ тормошо менән көн күргән башҡорт халҡының фольклорында боронғо этиологик, тотемистик ҡараштар нигеҙендә тыуған хайуандар образдары ҙур урын алған. Шулар араһында төрлө ҡиәфәткә инә, кешесә һөйләшә алған, ҙур ҡыйынлыҡтарҙы тиҙ еңеп сығыуға һәләтле, геройҙың иң яҡын дуҫы булған мифик толпар иң популяр образ һанала. Урал батыр һәм уның тоҡомдары хаҡында ижад ителгән эпик ҡомартҡыларҙа («Урал батыр», «Аҡбуҙат») башҡорттарҙа борондан йәшәп килгән йылҡы культы мөһим урын тота. Изге хайуандар хаҡында башҡорт фольклорында айырым эпик ҡомартҡылар («Ҡара юрға», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр боға» һ. б.) циклы барлыҡҡа килгән. Әйтергә кәрәк, башҡорт фольклорының йыр, легенда, әкиәт жанрҙарында ла ҡанатлы толпарҙар, өлөшлө мал образдары киң таралған. Башҡорттарҙа йылҡы культының үҫешкән булыуы, ныҡлы урын алыуы хаҡында тарихи мәғлүмәттәр ҙә һаҡланған.

922 йылда Волга буйы Болғар ханлығына барышлай, башҡорттар араһында булып киткән Багдад хәлифе илсеһе Ибн-Фаҙлан башҡорттарҙың ун ике аллаға (эйәгә) табыныуы һәм шуларҙың береһе йылҡы булыуы хаҡын-

да яҙып ҡалдырған[1]. Йылҡы малына табыныу, уны изге һанау күренеше «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпосында асыҡ сағыла. Уларҙа Аҡбуҙат — күк батшаһы Самрауҙың Ҡояштан тыуған ҡыҙы Һомай толпары һәм Һарат — Ай ҡыҙы Айһылыу толпары бар. Был ике толпар «күктә тыуып, күктә үҫкәндәр» һәм күк аллалары дәрәжәһенә күтәрелгәндәр. Улар ҙа, башҡа аллалар кеүек, үлемһеҙ. «Урал батыр» ҡобайырында Һомай, Уралға Аҡбуҙаттың иң мөһим сифаттарын һанап, былай ти:

— Утҡа төшһә, янмаҫтай,
Һыуға төшһә, батмаҫтай,
Ел дә ҡыуып етмәҫтәй,
Тауҙан-таштан өркмәҫтәй,
Ир-егеттән бүтәнде
Үҙенә тиң күрмәҫтәй;
Типһә, тау-таш сорғотоп,
Сапһа, диңгеҙ ярырҙай,
Ауырлыҡта, тарлыҡта
Һиңә юлдаш булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән
Әҙрәҡәнең дейеүе
Мең йыл ҡыуып тотмаған,
Әсәйемдән бирелгән,
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем[2].

Эпоста Аҡбуҙатты һүрәтләүгә ҙур урын бирелгән. «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпик әҫәрҙәренең икеһендә лә Аҡбуҙат батырҙы һәр төрлө ауырлыҡтан, хәүефтән һаҡлаусы һәм ерҙә йылҡы тоҡомон башлап ебәреүсе, таратыусы итеп һүрәтләнә. Аҡбуҙат, Урал батыр үлгәндән һуң, күктән ергә төшә һәм Уралға күк аттарын ҡы-

[1] «Путешествие Ибн-Фадлана на Волгу», 66—67-се б.
[2] БХИ. Эпос, 1972, 85-се б.

уып килтерә. Шул күк аттарынан ер аттары тоҡомо тарала.

Буҙат менән Һарат культы боронғо башҡорттарҙың космогоник ҡараштарын сағылдырыусы легендаларҙа, эпоста күҙәтелә. Мәҫәлән, космогоник легендалар һәм «Урал батыр» эпосы буйынса, Оло Етегән йондоҙлоғоноң ситтәге ике йондоҙо — Буҙат менән Һарат исемен йөрөткән күк толпарҙары. Улар алтын сылбыр менән тимер ҡаҙыҡҡа бәйләп ҡуйылғандар. Төн буйына был аттарҙы «ете бүре» — Бәләкәй Етегән йондоҙҙары ҡыуа икән. Әммә таң атыу менән бүреләр ҡыуыуҙан туҡтайҙар, тиеләр. «Урал батыр» эпосында Аҡбуҙатты урларға барған ете дейеү, уны тота алмағас, дейеү батшаһы Әзрәҡәнән ҡурҡып, күктә ете йондоҙ булып ҡалалар. Ҡобайырҙа тағы ла бер ҙур һәм мөһим фәлсәфәүи идея күтәрелә. Ул — донъялағы барлыҡ тереклек, йән эйәһе тыныс һыйышып, татыу, бер-береһенә зыян килтермәйенсә йәшәргә тейеш, тигән идея. Ошо идея ҡобайырҙа хыяли Бәхет илен һүрәтләү аша үткәрелә. Бәхет иле — Самрау батша, йәғни ҡоштар, күк аллаһы иле. Яуыз Ҡатил башта илендә ҡан ҡойош, яуызлыҡ, ҡайғы, илау-һыҡтау, кеше намыҫын тапау хөкөм һөрһә, Самрау батша илендә бөтөнләй киреһенсә. Унда:

Уйын көлкө төн буйы,
Ҡайғы-этлек күрмәйенсә,
Рәхәт йәшәй байманда:
Бүре-һарыҡ яланда,
Төлкө-тауыҡ урманда
Бергә йәшәп, дуҫ булып,
Самрау ҡошҡа баш эйеп,
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис үлемгә юл ҡуймай...[1] —

тип әйтелә.

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 46—47-се б.

Донъяла бөтә йән эйәләренең татыулығы— бик борондан килгән хыял. Бөтә тереклектең гармонияһы мотивы донъя халыҡтары фольклорында ла бар, хатта ислам дине легендаларында ла урын алған. Мәҫәлән, «Урал батыр»-ҙағы кеүек идеаль бәхет иле алтай халҡының «Алтай-Бучай» эпосында ла (Чолтош Куранаков варианты) һүрәтләнә. Унда икенсе быуын геройы Ерке-Мондур кәләш эҙләп килгән илдә бер ниндәй ҙә һуғыш, дошманлыҡ, бер-береһен рәнйетергә, йәберләргә тырышыу юҡ, тип әйтелә. Был илдә бөтә тереклек татыу, тыныс йәшәй. Ул ил — Эрдине бейҙең бәхет иле [1].

«Урал батыр»ҙа кешеләрҙең үлемһеҙлеге өсөн көрәш, бөтә тереклекте һәләк итеүсе яуыз Үлемде юҡ итергә тырышыу әҫәрҙең лейтмотивын тәшкил итә. Урал батыр ошо изге теләкте тормошҡа ашырыу өсөн көрәшә. Ләкин ул кешеләрҙе, тереклекте үлемһеҙ яһау идеяһын бер аҙ үҙгәртергә мәжбүр була. Мәңге үлемһеҙ булып ҡалыуға тәүҙә йыртҡыс йәнлектәр ҡаршы сығалар. Батырҙың фекерен үҙгәртеүгә Йәншишмәнән һыу эсеп үлемһеҙ булған ҡарт менән осрашып һөйләшеүе төп сәбәпсе була. Ҡарт үҙенең үлә алмай интегеп йөрөүен һөйләп зарлана һәм Уралға үлемһеҙлектән баш тартырға кәңәш итә. Шунан һуң ғына Урал батыр кешеләрҙе үлемһеҙ итеү ниәтенән баш тарта һәм тәбиғәт донъяһын мәңге үлемһеҙ яһарға ҡарар итә. «Урал батыр» ҡобайырында айырым кешеләрҙең үлемһеҙлеге кире ҡағылһа ла, дөйөм кешелектең, тереклек донъяһының мәңгелеге раҫлана. Эпос һәм уны ижад итеүсе халыҡ, күп замандар элек Йәншишмә

[1] Маадай-Кара. Алтайский героический эпос. М.: Наука, 1973, 35-се б.

һыуын эсеп, үлемһеҙлекте татыған ҡарттың Урал батырға һөйләүе аша, йәшәү йәме, йәшәү мәғәнәһе, үлемһеҙлек төшөнсәһе хаҡында тәрән философик фекерҙәр үткәрә. Ҡарт Урал батырға былай ти:

Егет, һиңә килдем мин,
Килеп хәлем әйттем мин.
Ҡолаҡ һалһаң һүҙемә,
Әйтә торған һүҙем бар;
Илгә йола булырҙай
Һынап белгән заңым бар:
Донъяла мәңге ҡалам, тип,
Донъялай ғүмер һөрәм, тип,
Үлемгә буй бирмәҫкә,
Уны бер заң итмәҫкә
Йәншишмәнән эсмәгеҙ,
Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.
Донъя ул бер баҡ икән,
Йән эйәһе шул баҡта
Донъя быуынын һанаған,
Ҡайһы быуын аҡлаған,
Ҡайһы уны таплаған,
Төрлө төҫкә биҙәгән, —
Бары үҫемлек, гөл икән;
Беҙ Үлем тип һанаған,
Яуыз ул тип ҡараған —
Баҡтың туҙған үҫмерен
Йәки көнө тулғанын
Һүпләп, баҡты бушатҡан,
Унан донъя ташлатҡан
Бөтмәй торған заң икән.
Мәңге ҡалам тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ.
Донъяла мәңге ҡалыр эш —
Донъяны матур төҙөгән,
Баҡты мәңге биҙәгән —
Ул да булһа яҡшылыҡ.

Күккә лә осор — яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ — яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ — яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ — яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,

Үҙенә лә, кешегә
Мәңге йәшәр аш булыр [1].

Эпос быуындар алмашын, ғәҙеллектең, яҡшылыҡ эшләүҙең мәңгелек заң икәнен беренсе планға ҡуя.

Урал батыр, Үлмәҫ ҡарттың фекерен ишеткәс, бар халыҡты эйәртеп Йәншишмәгә бара һәм, унын һыуын уртлап алып, «үҙе сапҡан юлына, дейеүҙән өйгән тауына» бөркә.

Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Ил һөйөргә ил булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Балҡып торор ер булһын! [2] —

ти Урал.

Тәбиғәт донъяһына, кешелеккә мәңге үлемһеҙлек яулау идеяһы башҡорт халҡының шул боронго замандағы аңын, донъяға ҡарашын, хыялын сагылдыра. Әҫәрҙә, кеше донъялағы бар нәмәнән дә көслө, өҫтөн тора, тигән идея үткәрелә. Көнсөллөк, дан артынан ҡыуыу арҡаһында дейеү-аждаһалар яғына һатылып, Урал батырға, кешелеккә ҡаршы көрәшкән Шүлгәндең еңелеп ҡалыуын һүрәтләп, ҡобаяыр тик кешеләр бәхете, мәнфәғәте өсөн көрәшкән кеше генә маҡтауға, данға лайыҡлы, тигән фекерҙе раҫлай.

«Урал батыр» боронғолоғо, поэтикаһы, донъя әһәмиәтендәге ҙур темаларҙы күтәреүе

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 124-се б.
[2] Шунда уҡ, 125-се б.

менән башҡорт халҡының эпик ижадында айырым урын тота. Унда башҡорт халҡының боронғо тормошо, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, художество-эстетик ҡараштары, идеалдары, киләсәккә төбәлгән өмөт-хыялдары, ижтимағи тормошо асыҡ сағылыш тапҡан. Ул хәҙерге көндә лә тәрбиәүи, художество көсөн юғалтмаған, баһалап бөткөһөҙ ҡомартҡыларҙың береһе булып ҡала.

«Аҡбуҙат» ҡобайыры — «Урал батыр»ҙы үҙенсә дауам иттергән эпик ҡомартҡы, шулай уҡ башҡорт эпосының алтын фондына ингән героик әҫәр. Башҡорт халҡының һоҡланғыс хыялы, һәләте менән быуаттар төпкөлөндә ижад ителгән был ҡобайыр, быуындан быуынға күсеп, әле бөгөн дә боронғоларҙан ҡалған изге аманат булып йәшәүен дауам итә. Уны ижад итеүҙә һәм беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап килеүҙә халыҡ сәсәндәре мөһим роль уйнағандар. Әҫәрҙең ҙур поэтик оҫталыҡ, аһәңлек менән заманының иң алдынғы идеалдарын алға һөрөүе, кешенең тәбиғәт көстәренән өҫтөнлөгөн, ғәҙеллектең тантана итеүен раҫлауы, илһөйәрлеккә өйрәтеүе, башҡорттарҙың тормош-көнкүрешен, йолаларын сағылдырыуы уның популяр булыуына киң юл асҡан.

Сәсәндәрҙең ҡобайырсылыҡ традицияһында башҡорт халҡының поэтик тарихын монументаль эпопеяларҙа һүрәтләргә ынтылыу тенденцияһы йәшәгән. Улар, төп геройҙарҙың бер нисә быуынының билдәле бер эҙмә-эҙлелеген һаҡлап, айырым циклдан торған ҡобайырҙар ижад иткәндәр. Мәҫәлән, Урал батыр, уның улдары һәм тоҡомдары хаҡында «Урал ба-

тыр», «Иҙел менән Яйыҡ», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙар циклы барлыҡҡа килгән. Бындай миҫалдарҙы башҡа төрки халыҡтарҙың эпик традицияһында ла күрергә мөмкин. Мәҫәлән, ҡырғыҙ фольклорында Манас батыр һәм уның тоҡомдары хаҡында «Манас», «Семетей», «Сейтек» исемле мәшһүр дастандар циклы тыуған. Ә азербайжан ашугтары төп герой Кер-оглы һәм уның нәҫел-нәсәбәһен генеалогик планда эҙмә-эҙлекле һүрәтләүгә ҡоролған «Кер-оглы», «Раушан», «Оваз» кеүек эпик поэмалар циклын ижад иткәндәр.

Үкенескә ҡаршы, Урал батыр һәм уның нәҫелдәре тураһындағы циклдың икенсе быуынын тәшкил иткән «Иҙел менән Яйыҡ» әҫәренең М. Буранғолов тарафынан Октябрь революцияһына тиклем үк яҙып алынған берҙәнбер ҡулъяҙмаһының ҡайҙа һаҡланыуы әлегә билдәле түгел. Был ҡобайыр һәм уны яҙҙырыусы данлыҡлы Ғәбит сәсән хаҡында ҡайһы бер мәғлүмәттәр генә һаҡланып ҡалған.

«Иҙел менән Яйыҡ» сюжеты ниндәйҙер кимәлдә «Урал батыр» (һуңғы бүлектәрендә) менән «Аҡбуҙат»та (Һомай ҡоштоң үҙ әхүәлен Һәүбәнгә һөйләү эпизодында) сағылған.

Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алған «Урал батыр» ҡобайыры вариантында Яйыҡ — Урал батырҙың Ҡатил батша ҡыҙынан, ә Иҙел—Һомайҙан тыуған улы. Ике ул да, аталары Урал батыр кеүек, йәштән үк ғәйрәтле, ҙур кәүҙәле, ата-әсәһенә итәғәтле, ырыуына, халҡына тоғролоҡло батырҙар булып үҫәләр. Яйыҡ һигеҙ йәштә атҡа атланып яу сабырлыҡ егет ҡорона инә, атаһы тарафынан үлтерелгән Ҡатил батшаның ҡол батырҙарын терелтә, ошо батырҙар менән бергә Урал ярҙамға килә, дейеү-

ҙәрҙе ҡыйратыша. Иҙел батыр ҙа, бала булыуына ҡарамаҫтан, көслө, ҙур кәүҙәле була. Һомайҙы үлтереп, Уралдың көсөн алыу маҡсаты менән өйгә килеп ингән дейеүҙе йоҙроҡ менән һуғып юк итә. Ул оҙаҡ йылдар дейеүҙәр менән көрәшеп йөрөүсе Урал батырға ярҙамға килә, аяуһыҙ алышта күп батырлыҡтар күрһәтә. Урал батыр һәләк булғандан һуң, Яйыҡ менән Иҙел иҫән ҡалған дейеүҙәр, кешеләрҙең дошмандары менән көрәшәләр.

«Урал батыр»ҙа ла, «Аҡбуҙат» эпосында ла Яйык менән Иҙел донъя халыҡтарының мифологияһында һәм архаик эпосында һүрәтләнгән «аҫыл геройҙар» кеүек сығыш яһайҙар. Улар «донъя ҡороу», кешеләргә йәшәү шарттары тыуҙырыу менән мәшғүлдәр. Урал батырҙың диңгеҙҙән яулап алған ерҙәрендә, үлтерелгән дейеүҙәр тәненән ҡалҡып сыҡҡан Урал тауында кешеләргә иркенләп йәшәрлек матур донъя ҡоралар, ишәйгән халыҡҡа һыу етмәгәнлектән, Урал батырҙың алмас ҡылысы менән йылға йыралар. Ә. И. Харисов тарафынан яҙып алынған вариантта Урал батыр үҙе иҫән саҡта уҡ һыуһыҙлыҡтан интеккән халыҡҡа ярҙам итеү өсөн улдарын берәм-берәм йылға йырырға оҙата. Шарт буйынса, улар ҙур йылғаға ҡушылғанға тиклем арттарына әйләнеп ҡарамайынса барырға һәм кире ҡайтмаҫҡа тейеш була. Иҙел Ҡамаға барып ҡушыла. Яйыҡ көньяҡҡа табан китә, ә уның артынса юлға сыҡҡан Һаҡмар, яңғыҙ барыуҙан ялҡып, Яйыҡ ағаһына ҡушыла.

Шулай итеп, Урал батырҙың дүрт улы дүрт йылға йыра. Шуныһы мөһим: эпоста һәм башҡорт мифологияһында Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар батырҙар Уралдың алмас ҡылысын

Ирәмәл тауында ергә сабалар, һәм ҡылыс тейгән ерҙән дүрт йылға, урғып сығып, ағып китә. Һүҙ ыңғайында шуны әйтергә мөмкин: йылға йырыусы, һыу табыусы аҫыл геройҙар образы донъя халыҡтары фольклорында киң таралған, хатта дини мифологияла ла урын алған. Мәҫәлән, Алтай мифологияһы буйынса, Ҡатун менән Бий (Бия) йылғаларының барлыҡҡа килеүе һылыу ҡыҙ менән егет эшмәкәрлеге итеп ҡарала һәм ошо ике йылға егет менән ҡыҙ образында кәүҙәләндерелә.

Һыуһыҙлыҡтан интеккән халыҡҡа йылға барлыҡҡа килтереү мотивы ҡөрьәндең «Ҡаршылыҡ» тип аталған 7-се сүрәһендә бар. Унда Муса пәйғәмбәр халҡының ишәйеүе, уларға һыу етешмәүе әйтелә. Алланың ҡушыуы буйынса, Муса үҙенең халҡын ун ике ырыу-төркөмгә бүлә һәм шунан һуң пәйғәмбәрлек дәрәжәһен белдереүсе таяҡ менән ташҡа һуға. Таяҡ тейгән ерҙән ун ике йылға урғылып сығып, ағып китә. Барлыҡ кеше ҡайһы урында һыу эсергә кәрәклеген белеп ҡуя. Алла ул һыуҙарҙы болот менән ҡаплай, ҡоштар менән туйдыра[1].

«Аҡбуҙат» ҡобайырында Иҙел менән Яйыҡтың, башҡа туғандары һәм атаһы ҡатнашлығында, һыу батшаһы Шүлгәнгә ҡаршы көрәшеп йөрөүҙәре, аҙаҡ бала-сағалы булып, ҡартайып үлеүҙәре әйтелә.

«Урал батыр»ҙа төп образдар берелешендә сағылған дуалистик ҡараш «Аҡбуҙат» эпосында ла күҙәтелә. Мәҫәлән, Иҙел батырҙың улдары ҡайһы берҙәре ыңғай, ҡайһы берҙәре

---

[1] Коран. / Перевод и комментарии И. Ю. Крачковского. М.: Изд-во Восточной литературы, 1963, 137-се б.

кирс планда һүрәтләнәләр. Уның бер улы (Ҡаһҡаһа) халыҡ мәнфәғәтен алға алмай, Урал батырҙың дошмандары лагерына ҡушыла, аждаһа ҡиәфәтенә кереп, һыу аҫты батшаһы Шүлгәндә хеҙмәт итә, ер өҫтөнә сығып, кешеләргә яуызлыҡ ҡыла, Һомай ҡоштоң ҡыҙҙарын урлап йөрөй. Ә Иҙелдең башҡа улдары изгелекле ата юлын тоталар, ил, халыҡты яҡлап, кешелек дошмандары менән көрәшәләр, башҡорт ырыуҙарын башлаусы етс батырға ата булалар [1].

Шулай итеп, «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙарында ниндәйҙер кимәлдә «Яйыҡ менән Иҙел» эпик ҡомартҡыһы сюжеты сағылғанлығы күренә.

Иҙел менән Яйыҡ хаҡында тағы ла бер эпик ҡомартҡы барлығы мәғлүм. Әммә ул — башҡорт ерлегендә түгел, ә туғандаш ҡаҙаҡ халҡы ерлегендә тыуған «Едил—Жайыҡ» дастаны. Әҫәрҙә ваҡиғалар Урал тауы, Тубыл (Тоболь), Иртыш йылғалары буйында бара.

Ҡаҙаҡ ССР-ы Фәндәр академияһы Үҙәк ғилми китапханаһында һәм М. О. Ауэзов исемендәге әҙәбиәт һәм сәнғәт институтының ҡулъяҙма һәм текстология бүлегендә «Едил—Жайыҡ» дастанының төрлө райондарҙа яҙып алынған 4 варианты һаҡлана[2]. Был эпик ҡомартҡының әкиәтләшкән бер варианты, русса-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 182, 184-се б.

[2] Ҡаҙаҡ ССР-ы Фәндәр академияһы Үҙәк ғилми китапханаһы, 600-сө папка, 47—60-сы б.; шунда уҡ, 744-се папка, 65—114-се б.; Ҡаҙаҡ ССР-ы Фәндәр академияһы М. О. Ауэзов ис. әҙәбиәт һәм сәнғәт институтының ҡулъяҙмалар бүлеге, 105-се инв., 7-се том, 48-се б.; шунда уҡ, 744-се инв., 3-сө том, 7—27-се б.

ға тәржемә ителеп, әкиәттәр йыйынтығында баçылды [1].

Булған барлыҡ варианттарҙа ла ике батырҙың Ялмауыҙ-Еҙтырнаҡты көрәшеп еңеүҙәре, илен ташлап ҡасырға мәжбүр булған халыҡты был яуыз йәндән ҡотҡарыуҙары хикәйәләнә. Ҡайһы бер варианттарҙа Едил менән Жайыҡ ике бер туған тип, ә икенселәрендә — бер-береһен күреп белмәгән, аҙаҡ ҡына танышып, дуçлашҡан батырҙар тип әйтелә. Мәçәлән, 1951 йылда Жамбул өлкәһе, Октябрь районы, «Октябрь» колхозы колхозсыһы Муса аҡындан Бәдел Турсунбаев яҙып алған варианттың ҡыçҡаса йөкмәткеһе шуға ҡайтып ҡала:

Уралтау итәктәрендә йәшәгән халыҡҡа, дәү ҡара Еҙтырнаҡ килеп сығып, бала-сағаны, осраған бер кешене алып китеп ашай, ҡоллай башлай. Йөҙәрләгән кешеләр уға ҡаршы сыҡһалар ҙа, еңә алмайҙар. Ҡешеләр тау-таш араһына боçорга мәжбүр булалар. Зарыҡҡан халыҡ Урал тауында йәшәгән Едил батырҙы һәм Тубыл буйында донъя көткән Жайыҡ батырҙы ярҙамға саҡыралар. Едил менән Жайыҡ төштә күрешеп танышалар һәм бер-береһен эҙләп сығалар. Ике батыр ҙа, халыҡ һорауын тыңлап, бергәләп Еҙтырнаҡты үлтереү уйы менән оҙон юлға сығалар. Едилде үҙ халҡы: «Хәүефле юлга сығаһың», — тип илап оҙатып ҡала. Уның Бөртөш исемле яңы ғына тыуган улы була. Жайыҡ батыр Едилдән бер йәшкә оло була. Ул йоҡлаған ваҡытында дәү-дәү таштарҙы түшәк итеп түшәп, мендәр итеп яçтап

---

[1] Казахские народные сказки. В трех томах, т. 3 Алма-Ата, 1971, 83—86-сы б.

ятыр булған. Жайыҡ юлда төрлө сүрәткә инә торған яуыз Еҙтырнаҡты осрата, уның менән алышып, бер ҡулын яралай.

Едил эпоста ғәйрәтле, ҙур физик көскә эйә булған изгелекле батыр рәүешендә һүрәтләнә. Ул, ҙур-ҙур ағастарҙы төбө-тамыры менән йолҡоп алып, аҫтына түшәп, өҫтөнә ябынып ятып йоҡлай. Едил батыр юлда Еҙтырнаҡты тап итә, ҡаты алышта уны яралай.

Бөртөш бала саҡтан уҡ көслө була, бер аҙ буйға еткәс, атаһын эҙләп сығып китә. Ул юлда Еҙтырнаҡ менән алыша һәм уны үлтерә. Эпос, Бөртөш батырҙың Еҙтырнаҡты еңеп, халыҡҡа ирек, бәхет алып биреүе, Едил менән Жайыҡ батырҙарҙың исемдәре ике йылғаға бирелеүе менән тамамлана.

Ҡаҙаҡ эпосы «Едил — Жайыҡ»тың Урал батыр циклына ҡараған башҡорт эпостарына ниндәйҙер кимәлдә яҡынлығы, оҡшашлығы булһа ла, уның сюжеты икенсе йүнәлештә, икенсе пландараҡ үҫкәнлеге күренә. Әлбиттә, эре-эре таштарҙы яҫтыҡ итеп түшәп йөрөгән Жайыҡ батыр һәм «Ҡуңыр буға» эпосында күбә-күбә таштарҙы өҫтө-өҫтөнә ултыртып йөрөгән Урал батыр [1], шулай уҡ яуыз Еҙтырнаҡты үлтергән Бөртөш батыр менән «Ҡусәк бей»ҙә, дәү арыҫланды үлтереп, илде афәттән ҡотҡарған Бабсаҡ бей образдары араһында ҙур оҡшашлыҡ бар. Әммә ҡаҙаҡ халҡының эпик ижадында «Урал батыр», «Аҡбуҙат» сюжеттары осрамай. Шул уҡ ваҡытта «Едил — Жайыҡ» эпосы ла сағыштырмаса аҙ таралған. Был эпик ҡомартҡының ҡаҙаҡ фольклорында башҡорт эпосының, шулай уҡ Иҙел менән

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 280-се б.

Яйыҡ йылғаларының барлыҡҡа килеүе хаҡында таралған топонимик легендаларҙың тура-нан-тура йоғонтоһо нигеҙендә үҫеш алған булыуы бик ихтимал.

«Аҡбуҙат» ҡобайыры асылда «Урал батыр», «Иҙел менән Яйыҡ»тың логик дауамы булып тора.

Был эпик ҡомартҡы беҙгә тик бер генә яҙмала билдәле. Уны М. Буранғолов Башҡортостандың хәҙерге Күмертау районы Бабалар ауылында Ғәтиәтулла сәсән Бикҡужиндан 1917 йылда яҙып алған. Беренсе тапҡыр 1943 йылда М. Буранғолов тарафынан төҙөлгән «Батырҙар тураһында эпос» йыйынтығында баҫылған, ҡулъяҙмаһы СССР ФА Башҡортостан филиалы ғилми архивында һаҡлана [1]. «Аҡбуҙат» эпосы урта мәктәптәр өсөн сығарылған башҡорт әҙәбиәте хрестоматияларында даими баҫыла килде. Шулай уҡ уның башҡорт, рус телдәрендә бер нисә ғилми һәм популяр баҫмалары донъя күрҙе [2].

«Аҡбуҙат»та төп герой итеп Уралдан тыуған Иҙел батырҙың тороно — Һәүбән образы бирелгән. Шулай уҡ унда Иҙел улы Сура батыр ҙа хикәйәләнә. Һәүбән Урал батыр һәм уның улдары тормошҡа ашырып өлгөрмәгән эштәрҙе үтәй: яуыз дейеү-ендәрҙең, аждаһаларҙың һыу аҫты донъяһын һәм уларҙың батшаһы Шүлгәнде тар-мар итә. Әҫәрҙең мөһим

---

[1] Ғилми архив, ф. 3. оп. 12/2977, 1—67 се б.

[2] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. Өфө, 1954, 75—82-се б.; БХИ. Эпос, 1972, 145—188-се б.; Башкирский народный эпос. М., 1977, 162—205, 373—417-се б.; Аҡбуҙат. Башҡорт халыҡ эпосы. Өфө, 1971; Акбузат. Башкирский народный эпос. Уфа, 1976.

бер үҙенсәлеге шунда ла: һүрәтләнгән ваҡиғалар икеһе ике осорға ҡараған үҙ аллы ике сюжеттың бергә органик ҡушылышы планында бара. Шул сәбәпле эпик геройҙың көрәше лә ике йүнәлештә күрһәтелә.

Боронғо заманда тыуған «Аҡбуҙат» ҡобайыры беҙҙең көндәргә тиклем йәшәү дәүерендә байтаҡ ҡына үҙгәрештәргә дусар булған, уның сюжетына һуңғы осор ваҡиғалары, элементтары килеп ингән. Һәүбәндең ҡыҙ артынан һыу аҫты донъяһына сәйәхәте, Нәркәс ярҙамында Урал батырҙың дейеүҙәр тарафынан урланған Аҡбуҙатын, тылсымлы алмас ҡылысын ҡулға төшөрөүе һәм һыу аҫты батшалығын тар-мар итеүе, дейеү-аждаһаларҙы төрлө күл йәнлектәренә, ярғанаттарға әүерелдереүе, Шүлгән һарайындағы ҡол ҡыҙҙарҙы азат итеүе, дейеүҙәрҙән Аҡбуҙат өсөн, ҡаяны тиштереп, һарай эшләтеүе, Һәүбәндең Нәркәскә өйләнеүе — былар мифологияны сағылдырыусы боронғо сюжет һыҙығын тәшкил итә. Ә ул, үҙ нәүбәтендә, боронғо героик эпос өсөн характерлы булған төп мотивтарҙың берсһе — геройҙың, ҡатын эҙләп, сәйәхәткә сығыу мотивы менән тулылана. Был мотив тәүтормош (община-ырыу) ҡоролошоноң емерелә башлау осорон сағылдыра. Ырыу ҡоролошо дәүерендә үҙ ырыуҙашың менән ғаилә ҡороу йола буйынса тыйылған булған. Уны фольклор фәне ырыусылыҡ ҡоролошондағы экзогамия — фәҡәт сит ырыуҙан ғына ҡатын алыу йолаһының художестволы кәүҙәләнеше тип аңлата.

Әлбиттә, Һәүбән һыу аҫты батшалығына ҡатын алыу ниәте менән генә бармай. Ул унда Уралдың дейеүҙәр тарафынан урланған Аҡбуҙатын, «күл төбөндә мең йыл буйы тутыҡмай

ятҡан» алмас ҡылысын алырға һәм улар ярҙамында кешеләрҙе яуыз йәндәр йәберенән ҡотҡарырға, тигән изге маҡсаты менән бара.

Әҫәрҙең икенсе сюжет һыҙығы феодаль мөнәсәбәттәрҙең башланыу, синфи айырымлыҡтарҙың көсәйеү осорона тура килә. Унда Һәүбән батырҙың халыҡты иҙеүсе яуыз Мәсем ханға һәм уның бейҙәренә ҡаршы көрәше һүрәтләнә. Һәүбән батыр залим ханды юҡ итеп кенә ҡалмай, ә хан бойороғо менән ҡанаттары ҡырҡылған Һомай ҡошто (Урал батыр һәләк булгандан һун, мәңгегә аҡҡош булып ҡалған уның ҡатыны Һомай), диңгеҙ артындағы батшалыҡҡа ҡоллоҡҡа һатылған ете батырҙы — Урал батыр тоҡомдарын — ҡотҡара һәм уларҙы ете ырыуға баш итеп ҡуя.

Ҡобайырҙа икенсе сюжет һыҙығы үҫешендә реалистик һүрәтләү фантастик һүрәтләүҙән өҫтөнлөк алған. Ике сюжеттың бергә ҡушылыуы һөҙөмтәһендә ике осор идеяһы үрелеп китә. Идеаль герой — Һәүбән, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап, ерҙә лә, һыу аҫты донъяһында ла дошмандарын тар-мар итә, кешеләрҙе яуыз йәндәрҙән ҡотҡара.

«Аҡбуҙат» ҡобайырында Һәүбән батырҙың, Аҡбуҙатҡа атланып, алмас ҡылыс алып, Урал тоҡомонан булған ете батырҙы — Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Төкләҫ, Тамъян, Ирәндек, Юрматы, Табындарҙы ҡоллоҡтан ҡотҡарыуы һәм уларҙы ете ырыуға баш итеп ҡуйыуы ентекләп хикәйәләнә. Асылда һүҙ башҡорт халҡының формалашыуында мөһим роль уйнаған эре башҡорт ырыуҙары хаҡында бара. Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, IX—XIII быуаттарҙа, татар-монгол яуына тиклем үк, Башҡортостандың көньяғында Ете ырыу исемен йөрөткән башҡорт

ҡәбиләләре союзы һәм уның көнбайышында ла шулай уҡ эре ҡәбилә союзы булған. Бындай эре ҡәбилә-ырыу союздарының барлыҡҡа килеүен тарих фәне дәүләт төҙөлөүенең тәүге башланғысы тип ҡарай[1].

Ете ырыу союзы хаҡында көньяҡ Башҡортостанда халыҡ араһында бик күп легендалар таралған, «Ете ырыу» тип аталған йыр һәм көй тыуған.

«Аҡбуҙат»та уны «Урал батыр» ҡобайыры менән бәйләп, бер бөтөн итеп тороусы байтаҡ образдар, поэтик деталдәр бар. «Урал батыр»ҙа һүрәтләнгән Һомай, Аҡбуҙат, Ҡаһҡаһа образдары унда ла бирелгән. Ике әҫәрҙә лә геройҙар дошмандарына ҡаршы көрәшкәндә мифик Аҡбуҙ толпар менән алмас ҡылысҡа таяналар. Был образдар Урал батыр һәм уның тоҡомдары хаҡындағы ҡобайырҙар композицияһын ойоштороуҙа мөһим роль уйнайҙар.

Урал батырҙы һәм уның тоҡомдарын эпик жанрҙа һүрәтләү «Аҡбуҙат»та ғына тамамланмай. Башҡорт халҡының эпопеяһы сағыштырмаса һуңғы осорҙа тыуған «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» һәм уның логик дауамы булған «Алдар менән Зөһрә» ҡобайырҙарында ла дауам итә. Был ике ҡобайырҙа Һәүбән батыр ҡоллоҡтан ҡотҡарған, Урал батыр нәҫеленән булған ете батыр һәм уларҙың тоҡомдары — ете ырыу башҡорттарының артабанғы тормошо поэтик сағылыш тапҡан. «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат»тың тағы ла бер мөһим уртаҡлығы бар: был эпик әҫәрҙәрҙә ваҡиғалар реаль Урал тауы территорияһында һәм Шүлгән күле,

---

[1] Кузеев Р. Г., Юлдашбаев Б. Х. 400 лет вместе с русским народом. Уфа, 1957, 14-се б.

Шүлгән мәмерйәһе (Башҡортостандың хәҙерге Бөрйән районы) тирәһендә бара.

Башҡорт халҡы үҙенең үткән данлы тарихын, тыуған төбәге — Уралды поэтик эпопеяһында мәңгеләштергән. Ошо эпопеяның бер быуыны булған «Аҡбуҙат» ҡобайыры үҙе генә лә башҡорт халҡының бөйөк аҡылының, хыялының гүзәл поэтик үрнәге булып тора.

«Аҡбуҙат»ты иғтибар менән тикшереп ҡараһаң, уның нигеҙендә реаль тормош ваҡиғалары, башҡорт халҡының боронғо аң-ҡарашы, ыҙан-йолалары, киләсәк тормошҡа булған яҡты хыялдары, матурлыҡты, батырлыҡты аңлау ҡеүәһе ятҡанлығын күреү ҡыйын түгел. Мәҫәлән, әҫәрҙә башҡорттарҙың малсылыҡ, һунарсылыҡ менән көн иткәнлеге сағылған. Шулай уҡ был осорҙа феодаль мөнәсәбәттәрҙең ныҡлы ғына тамыр йәйгәнлеге, синфи айырымлыҡтарҙың көсәйгәнлеге, йәмғиәттең бай менән ярлыға бүленгәнлеге беленә. Ырыуҙар башында бейҙәр, аҡһаҡалдар тора. Улар үҙ сиратында ханға — Мәсемгә буйһоналар. Һыу аҫты батшаһы Шүлгән бер ҡарауҙа — һыу, күл эйәһе, икенсе ҡарауҙа ҡәҙимге феодаль хаким булып күҙ алдына баҫа. Уның йәшәгән күле «ҡанлы күҙ йәшенән бар булған», һарайы «тереләй һуйылған кешеләр һөйәгенән һалынған», «һарай тирә баҡсаһы, биҙәп торған сәскәһе һуғарылған ҡан менән», тиелә.

«Аҡбуҙат» эпосында башҡорттарҙың космогоник ҡараштары, айырыуса йылҡы малы культы айырым-асыҡ сағыла. «Урал батыр» эпосындағы төп мотивтар бында үҙенсә дауам итеп кенә ҡалмай, күпкә тәрәнәйә һәм байыға. «Аҡбуҙат»та, исеменән әйтеп тороуынса уҡ, мифик Аҡбуҙат образы ныҡ үҙәкләшеп ки-

тә. Ул образ ғәжәйеп бер тылсым эйәһе юғарылығын ала. Был Аҡбуҙат образына халыҡ үҙенең бик боронғо ҡараштарын, ышаныуҙарын, йылҡыны культлаштырыуын һалған.

Башҡорттарҙың космогоник ҡараштарына, мифик образдарына оҡшашлыҡтарҙы ҡәрҙәш халыҡтар, шулай уҡ борон культура бәйләнешенә кергән халыҡтар ижадында күрергә мөмкин. Мәҫәлән, Урал тауында һәм Уралға яҡын дала киңлектәрендә күктән төшкән йылҡыларҙың, башҡа ҡош-ҡорт һәм хайуандарҙың төйәк итеүе, тоҡом йәйеүе кеүек «Урал батыр», «Аҡбуҙат» эпостарында урын алған һүрәтләүҙәр ҡәрҙәш алтай халҡының «Алтын Бизе» эпосында бар. «Алтын Бизе»лә күктәге иң ҙур, баш алла Юч-Курбустан изге күк аттарын ергә төшөрә. Был аттар, ергә төшөү менән, әсәй тип аталған ике тирәк ағасын барлыҡҡа килтерәләр, шунан һуң бөтә Алтай мал менән тула [1]. Шулай итеп, алтай эпик ижадында ла йылҡының, мал-тыуар, ҡош-ҡорттоң ерҙә тоҡом йәйеп үрсеп китеүе күк аллалары эшмәкәрлеге итеп күрһәтелә. Һүҙ ыңғайында шуны әйтергә мөмкин: алтай халҡының эпик ижадында башҡорт эпосы менән оҡшаш моменттар, оҡшаш мифологик образдар, мотивтар, поэтик һүрәтләү саралары шаҡтай күп. Был уртаҡлыҡ, яҡынлыҡ боронғо башҡорт, алтай ырыуҙарының этногенетик, тарихи бәйләнештәре һөҙөмтәһе булыуы мөмкин. Мәҫәлән, шул билдәле: хәҙерге ҡатай, ҡара табын, ҡыуаҡҡан, ҡумырыҡ, күбәләк, мең башҡорт ырыуҙарының ата-бабалары яңы эраның тәүге мең

---

[1] Маадай-Кара. Алтайский героический эпос, 34-се б.

йылында Алтайҙа йәшәгәндәр. Ә боронғо найман, ҡыпсаҡ, меркет, ҡыштым, таҙ ырыуҙары башҡорт һәм алтай халыҡтарының этник составына ингән [1].

Алла рәүешендә һүрәтләнгән изге күк аты образы иран телле халыҡтарҙың эпик ижадында ла осрай. Мәҫәлән, осетин халҡының «Нарт» героик эпосында нарт Урузмагтың күктә болоттар өҫтөнән осоп йөрөүсе ғәйрәтле Арфан исемле яу толпары һүрәтләнә. Ҡош юлын осетиндар «Арфан юлы» тип йөрөтәләр. Башҡорт эпосында Урал тауы теҙеме «Урал батырҙың Аҡбуҙатта диңгеҙ ярып үткән юлы» тип аңлатыла.

Башҡорттарҙа йылҡы малының һыу аҫты донъяһынан сығыуы һәм кешеләр тарафынан ҡулға эйәләштерелеүе хаҡында бик күп легендалар йәшәй. «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырҙарында, шулай уҡ легенда, риүәйәттәрҙә йылҡының Шүлгән, Асылы, Аҡзират, Мауыҙлы һ. б. күлдәр төбөнән сығыуы хикәйәләнә. Был күлдәр барыһы ла Башҡортостан территорияһында. Риүәйәттәр һөйләүенсә, һыу аҫты донъяһынан, ошо күлдәр төбөнән сыҡҡан сысҡан һыртлы ҡола йылҡынан иң яҡшы башҡорт аттары тоҡомо йәйелгән.

Һыу аҫты донъяһынан, йәғни күл йәки диңгеҙ төбөнән сыҡҡан йылҡыларҙы ҡулға эйәләштереү мотивы төрки-монгол халыҡтары фольклорында киң таралған. Мәҫәлән, В. А. Гордлевскийҙың «Осман демонологияһы-

---

[1] Кузеев Р. Г. Происхождение башкирского народа. М., 1974, 574-се б.

Потапов Л. П. Этнический состав и происхождение алтайцев. Л., 1969, 196-сы б.

нан» тигән хеҙмәтендә диңгеҙ төбөндә көтөү-көтөү йөрөгән, ваҡыты-ваҡыты менән яр буйына сығып юшаған һыу айғырҙары хаҡында төрөктәрҙең ышаныуҙары һәм шуға бәйле тыуған легендалары тикшерелә [1].

Башҡорт эпосында һүрәтләнгән һыу аҫты донъяһын, изгеләштерелгән ат образдарын бурят фольклорында ла күҙәтергә мөмкин. Мәҫәлән, буряттарҙың мәшһүр «Абай Гэсэр» эпосында «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡбуҙат» эпостары менән аһәңдәш, оҡшаш моменттар бар.

Эпостан күренеүенсә, боронғо башҡорттарҙа йылҡы ырыу башы — тотем ролен үтәгән. Ошо ышаныуҙар, хөрәфәттәр әкиәттәрҙә сағылып ҡалған. Батырҙар тураһындағы ҡайһы бер әкиәттәрҙә герой бейәнән тыуа. Мәҫәлән, башҡорт халҡының популяр «Буҙансы батыр» әкиәтендә (АТ 513 А) герой буҙ бейәнән тыуа һәм уға Буҙансы батыр тигән исем бирелә [2]. Шундай уҡ миҫал венгр халҡының «Буҙат улы» («Сын белой лошади») әкиәтендә бар [3]. Был оҡшаш мотивтың боронғо башҡорт һәм мадъяр ырыуҙарының этногенетик бәйләнеше һөҙөмтәһе булыуы бик мөмкин. Тарихтан бил-

---

[1] Гордлевский В. А. Сочинения, т. 3. М., 1962, 321—322-се б.

[2] Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Өсөнсө китап. Өфө, 1978, 19-сы б.

[3] Венгерские народные сказки. / Составитель Анатоль Гидаш. М., 1952, 88-се б.; М. Х. Минһажетдиновтың «Башҡорт һәм венгр әкиәттәрендәге оҡшаш мотивтар» мәҡәләһен ҡара — Проблемы изучения финно-угорского фольклора. Саранск, 1972, 101—108-се б.; ҡара: Сәғитов М. М. Башҡорт-венгр фольклор бәйләнештәре. — Вопросы финно-угроведения. Сыктывкар, 1979, 104-се б.

дәле булыуынса, борон мадъяр ырыуҙары Урал буйҙарында йәшәгәндәр. Улар «халыҡтарҙың бөйөк күсенеү» дәүерендә (VII—VIII быуаттар) Поннонияға — хәҙерге Венгрия территорияһына күсенгәндәр һәм дәүләт ҡорғандар. Ҡайһы бер ғалимдар мадъярҙар менән бергә бер нисә башҡорт ырыуының да (юрматы, кесе, йәнәй һ. б.) күсеп киткәнлеген һәм венгр халҡының формалашыуында һиҙелерлек роль уйнағанлығын билдәләйҙәр. Ә икенсе бер ғалимдар, мадъяр ырыуҙарының бер өлөшө Уралда ҡалған һәм башҡорт халҡы эсендә иреп таралған, тип ҡарайҙар. Нисек кенә булмаһын, этногенетик бәйләнеш культура уртаҡлығында билдәле роль уйнаған булһа кәрәк. «Алтын һандуғас» исемле башҡорт әкиәтендә Аҡбуҙат толпар кәңәше менән батша һайлау эпизоды бар. Күмәк кешеләр төркөмө эсенән ул аҡыллы, батыр егетте табып ала һәм, уның янына килеп, башын эйә. Халыҡ Аҡбуҙаттың һайлауы менән килешә, һәм батыр батша итеп һайлана[1].

Боронғо башҡорттар тормошонда ат культының ҙур урын алғанлығын легендаларҙа һәм эпик ҡомартҡыларҙа һуғыш атын хөрмәтләп күмеү йолаһын һүрәтләү картиналарында яҡшы тойоп була. Мәҫәлән, халыҡ араһында киң билдәле «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында (Т. Беляев варианты) Ҡарабай батырҙың яу атын күмеү эпизоды ентекләп һүрәтләнә. Ҡарабай, улы менән ҙур соҡор ҡаҙып, аты менән ҡоралдарының һыныҡтарын бергә күмә. Уларҙы ерләгән саҡта Ҡарабай, һинең кеүек тоғро дуҫты, шундай ныҡ ҡорал-

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 63/6, 31—36-сы б.

ды ҡабат табалмам инде, тип һөйләпә-һөйләнә илап ала. Ҡәбер өҫтөнә, дала халыҡтары йолаһы буйынса, һәйкәл рәүешендә уба өйгәс, йәйләүҙәренә ҡайтырға ашығалар [1].

Ҡуҙыйкүрпәс батыр ҙа, ошоноң кеүек, яуыз бөркөттәр тарафынан өҙгөләнеп бөткән Йондоҙ юлаусы исемле атын бөтә эйәр-өпсөндәре менән бергә күмә һәм уларҙың өҫтөнә ҙур уба яһай [2]. Ошо типтағы эпизодтар легендаларҙа ла осрай. Мәҫәлән, «Таштуғай» легендаһында Ҡөтәр батыр, күп сабыуҙан янып үлгән атына оло хөрмәт күрһәтеп, уны тау башына мендереп күмә.

Ат культының башҡорттар тормошонда ни тиклем нык таралғанлығы боронғо йолаларҙа, фольклорҙа асыҡ сағылған. 1958 йылда Башҡортостандың Бөрйән районында билдәле сәсән Өммөхаят Ҡолдәүләтованан беҙҙең тарафтан яҙып алынған «Ҡусәк бей» эпосы вариантында ҡыпсаҡ ырыу батыры Бабсаҡ бейҙе аты менән бергә күмеү хаҡында әйтелә. Үле батырҙы уның үҙе һөйгән Ҡарагир атына атландыралар һәм, ялан уртаһына сығарып, өҫтәренә тупраҡ өйөп, төйә баралар, шулай икеһе лә юғалғансы уба яһап күмәләр [3].

Рус ғалимы Р. Г. Игнатьев 1881 йылда баҫылған бер мәҡәләһендә Башҡортостандағы курганда, уларға бәйле тыуған легендалар хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған: «Бәләбәй өйәҙендә кургандар, — ти ул, — Шатмаҡ-Таҡмаҡ, Исламғол, Елизаветино, Аҙнай, Ғәйнә-Ямаҡай ауылдарына яҡын ерҙә

[1] БХИ. Эпос, 1973, 72—73-сө б.
[2] Шунда уҡ, 104-се б.
[3] БХИ. Эпос. Беренсе китап, 1972, 358-се б.

һаҡланғандар. Шуларҙың иң мөһабәттәренең түңәрәк әйләнәһе 230—102 сажин, ә бейеклеге 44—30 сажин ҙурлыҡта булып, «батырҙар курганы» тип аталып йөрөтөлә. Башҡорттар һөйләүенсә, бында аттарына ултыртылған килеш батырҙар күмелгән. Ул аттар хужаларын күмгән саҡта үлтерелгәндәр. Батырҙар менән бергә уларҙың ҡоралдары, әйберҙәре лә күмелгән» [1]. Әйтергә кәрәк, кешене ат менән бергә ерләү йолаһы хаҡында хәҙерге көндә байтаҡ археологик һәм этнографик материалдар тупланған. Боронғо йылҡысылыҡ хужалығы, шуға бәйле ат культының донъя масштабында таралыу ареалы хаҡында һуңғы йылдарҙа дөйөмләштерелгән ғилми хеҙмәттәр баҫылып сыҡты [2].

Элек йылҡы культының башҡорттарҙың ҡарашында һәм тормошонда ныҡлы урын алғанлығын сағылдырған бик күп хөрәфәттәр, ышаныуҙар беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған.

Боронғо башҡорттарҙың ҡарашы буйынса, ат яуыз көстәрҙең, ен-пәрейҙәрҙең арбауына, күҙ бәйләүенә бирешмәгән. Ул кеше күҙенә күренмәгән яуыз йәндәрҙе лә яҡшы күрә, тип уйлағандар. Шул сәбәпле тынысһыҙ, ен эйәләгән тип уйланған өйгә яуыз, зыянлы йәндәрҙе ҡыуалап сығарыу өсөн ат индергәндәр. Ат-

---

[1] Записки Оренбургского отдела Русского географического общества. Вып. 4. Оренбург, 1881, 146—147-се б.

[2] Кузьмина Е. Е. Распространение коневодства у ираноязычных племен Средней Азии и других народов Старого Света. — Средняя Азия в древности и средневековье. М., 1977, 28—52-се б.; Ковалевская В. Б. Конь и всадник. М., 1977; Липец Р. С. Образы батыра и его коня в тюрко-монгольском эпосе. Новосибирск: Наука, 1984.

ты башҡорттар иң таҙа, изге йән һанағандар һәм таныш булмаған йылға йәки күлдән ат эсһә генә һыу алып эсер булғандар. Йылҡы малынан ен-шайтан ҡурҡа, тигән иҫке ҡараш им-томдарҙа, халыҡ медицинаһы «рецептарында» ҡулланылған. Өйәнәк тотоп ауырыған кешене, рахит ауырыуынан оҙаҡ ваҡыт атлай алмай ултырған сабыйҙарҙы, тапатырға теләгәндәй, ҡапыл ат менән сабып килеп, ҡурҡытып дауалағандар. Шулай итһәң, йәнәһе, кеше тәнендә йөрөгән ауырыу ҡағым ҡурҡышынан уны ташлап китергә тейеш булған. Бынан тыш, ауырыу кешене яңы һуйылған йылҡы тиреһенә урап дауалағандар. Башҡорттар үҙҙәре изге, тотем һанаған йылҡыны һуйып ашаһалар ҙа, уның һәр ағзаһы, һәр һөйәгенән үҙҙәренә файҙа, шифа, мәрхәмәт өмөт иткәндәр. Йылҡы башын — ҡыубашты умарта башына, кәртә бағанаһына элеп ҡуйыр булғандар. Ул йорт хужаһын, уның мал-тыуарын бәлә-ҡазанан, төрлө зәхмәттән, яман күҙҙән һаҡлай, тип уйлағандар. Ҡыубашты хатта ауыл ҡапҡаһы башына элеп ҡуйғандар. Йәнәһе, ул ауылды бәлә-ҡазанан, үләттән, ауырыуҙан һаҡлай.

Ҡаҙыҡ, бағана, кәртә башына ат ҡыубашын элеү йолаһы элекке замандарҙа төрки-монгол халыҡтарының күпселегендә булған. Был йола хатта славян халыҡтарында ла күҙәтелгән. Башҡорт, ҡаҙаҡ, төрөкмән, ҡырғыҙ һ. б. халыҡтарҙың ышаныуҙары буйынса, ат тире һеңгән ҡамсы йәки сыбыртҡы менән һуҡһаң, ағыулы йыландар үлә [1]. Ә ат ҡылынан ишел-

---

[1] Руденко С. И. Башкиры. Историко-этнографические очерки. М. — Л.: Наука, 1955, 316-сы б.

гән дилбегә, арҡандар, имеш, магик көскә эйә. Юлда йәки яланда, урманда ҡунған саҡта кешеләр үҙҙәренең йоҡлаған урынын ошо ҡыл дилбегә менән уратып ятһа, яуыз йән эйәләре, йыландар үтә алмай. Йоҡлаған саҡта ат тире һеңгән үндеккә ятһаң йәки башыңды эйәргә һалһаң, тыныс, хәүеф күрмәй йоҡларға мөмкин, тип уйлағандар. Төшөп ҡалған ат дағаһын ҡапҡаға, ишек тупһаһына йәки ишек башына ҡаҡһаң, ул йортҡа бәхет, ырыҫ килтерә, тигәндәр.

Үрҙә башҡорт эпосында, ғөмүмән, фольклорҙа геройҙың яу аты төрлө ҡиәфәткә керә алыуы хаҡында әйтелгәйне. Ҡайһы бер сюжеттарҙа, мәҫәлән, «Алтын ашыҡ» әкиәтендә, йәш егеттең аты сиҙәм булып түшәлеп ята йә булмаһа ҙур тирәк ағасына әйләнә. Яу атының ырыу ағасына әүерелеү мотивы төрки-монгол халыҡтарының эпик ижадында ла осрай. Мәҫәлән, ҡалмыҡ халҡының «Джангар» эпосында батыр ҡыйын хәлгә осраған мәлдә уның аты ырыу ағасы — сандал ҡиәфәтен ала.

«Урал батыр» менән «Аҡбуҙат»та боронғо башҡорттарҙың ҡояшҡа, айға, тау, йылғаларға, йәнлектәргә, ҡоштарға табыныуҙары, уларҙы изгеләштереүҙәре үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, Ибн-Фаҙлан башҡорттарҙың йыланға табыныуы хаҡында яҙа, һәм был фольклорҙа ла күҙәтелә. Боронғо ышаныуҙар буйынса, һирәк осрай торған аҡ йыланды үлтерергә ярамай, сөнки ул бәхетһеҙлек килтерә. Был йәһәттән Ырымбур өлкәһе Гай районы Иҫке Хәлил ауылында Ғәҙелша Мөлөков дәфтәренән Ғ. Б. Хөсәйенов күсереп алған легенданы килтереү урынлы булыр.

«Борон Хәлил ауылынан бер нисә кеше Һаҡмарға агасҡа барғандар. Майбуй тигән ерҙә ағас ҡырҡып йөрөгәндә, бер кешенең эргәһенән бер нәмә шыптырлап үтеп барған. Ҡараһа, бер аҡ йылан булған. Шул кеше ҡурҡышынан балтаһын төшөрөп ебәргән икән, балта тейеп, аҡ йылан үлеп ҡалган. Хосусан, ялан кешеһе урманға барһа, ҡурҡаҡ була. Аҡ йыланды үлтерерҙән ташламаған — ҡазағалыр, яңылыш булған. Шул көн кис был урмансы кешеләр, бер ергә йыйылып, ут яғып, тамаҡҡа бешереп ашағандар ҙа йоҡларға ятҡандар. Иртә берлән тороп ҡараһалар, быларҙы бик күп йыландар ҡамап алған. Был кешеләр бик ныҡ ҡурҡҡандар. «Был ни хәл? Әллә берәйһегеҙ аҡ йыланды үлтерҙеме?» — тип һорағандар. Берәүһе: «Кисәге көн мин бер аҡ йыланды үлтергәйнем», — тип яуап биргән.

Шунан һуң иптәштәре был кешене, ат тире һеңгән кейеҙ үңдеккә урап-сырмап, ағас ботагына үргә асып, бәйләп киткәндәр. Йыландар кешеләргә юл биргәндәр.

Был иптәштәре ағас ҡырҡып килһәләр, баяғы аҡ йыланды үлтергән кешене йыландар йөндәй тетеп бөткәндәр, ти.

Әгәр аҡ йылан күрһәгеҙ, үлтерергә ярамай. Мөмкин булһа, бер таҙа кейемегеҙҙе сисеп, аҡ йыландың алдына түшәргә кәрәк. Аҡ йыландың мөгөҙө була. Бәхетегеҙ төшөр булһа, мөгөҙөн һалып китә».

Йыйып әйткәндә, башҡорт эпосында йәшәүҙең мәғәнәһе, изгелек һәм яуызлыҡ, ғәҙеллек һәм ғәҙелһеҙлек мәсьәләләренә халыҡтың ҡарашы, мөнәсәбәте үҙенең поэтик сағылышын тапҡан.

Ҡобайырҙар тыуған ергә, тыуған төбәккә

мөнәсәбәт йәһәтенән дә ҡыҙыҡлы. Һыу аҫты донъяһы ни тиклем ғәжәйеп, хозур булмаһын, ер улы Һәүбән хандар иҙеүенән интеккән Уралын, халҡын өҫтөн күрә һәм үҙ иленә ҡайта. Ә инде үҙенә ауырлыҡ килгәндә, ул тыуған халҡына, Уралына таяна. Атаһының иҫәпһеҙ күп ғәскәре, көсө менән ҡурҡытырға тырышҡан Нәркәскә:

— Яңғыҙлатмаҫ үҙемде
Урал тигән илем бар! —

тип яуап бирә Һәүбән. Тимәк, халыҡ ижады әҫәрҙәре хәҙерге көндә лә уҡыусыла илһөйәрлек, ғәҙеллек, ҡаһарманлыҡ сифаттары тәрбиәләй.

Аҡбуҙат — башҡорт халҡының рухи донъяһында ныҡлы урын алған, уның музыка һәм һынлы сәнғәтенә үтеп ингән һоҡланғыс толпар образы. Халыҡ аңында монументаль һәйкәл булып һаҡланыусы был образ шағирҙар, әҙиптәр йөрәгенә лә яҡын булды һәм уларҙың ижадына илһам бирҙе.

Өсөнсө бүлек

МИФОЛОГИЯҒА, ХАЙУАНДАР КУЛЬТЫНА БӘЙЛЕ КӨНКҮРЕШ ҠОБАЙЫРҘАРЫ

Халыҡ ижадында көнкүреш эпосы мөһим урын биләй. Был жанрҙы совет фольклористикаһында лиро-эпик эпос, шулай уҡ романтик эпос тип атап йөрөтөү киң таралған. Героик эпоста беренсе планда көрәш темаһы, ырыу, ил мәнфәғәте өсөн сит дошмандарға ҡаршы көрәшеүсе батыр образы торһа, көнкүреш эпосында, ғәҙәттә, тормош-көнкүреш ваҡиғалары, төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, ырыу-ара мөнәсәбәттәр, мөхәббәт темаһы үҙәкләшә. Һуңғыларында батырлыҡты һүрәтләү булған тәҡдирҙә лә ул, ҡаһарманлыҡ эпосындағы кеүек үк, әҫәр йөкмәткеһенә, сюжетына героик характер бирерлек дәрәжәгә күтәрелмәй.

Башҡорт халҡының эпик репертуарында боронғо осорҙо сағылдырыусы байтаҡ көнкүреш эпосы әҫәрҙәре бар. Борон-борондан һунарсылыҡ, күсмә малсылыҡ хужалығы менән көн күргән башҡорттар материаль байлыҡ ҡына түгел, үҙенсәлекле рухи культура байлығы, шул иҫәптән эпик ҡомартҡылар ҙа, тыуҙырғандар. Үҙенсәлекле тормош уклады, ижтимағи мөнәсәбәттәр, күсмә халыҡтың ауыр көнкүреше, донъяға ҡарашы, ғөрөф-ғәҙәттәре,

йолалары, уй-фекерҙәре фольклорҙа ғына түгел, ә халыҡ музыкаһында, хореографияһында, биҙәү сәнғәтендә лә асыҡ сағылған.

Һунарсылыҡ, күсмә тормош, малсылыҡ менән көн итеү халыҡтың аң-ҡарашында ҡошҡорт, хайуандар культының урынлашыуына һәм уның оҙаҡ йылдар буйына халыҡ хәтерендә, аңында һаҡланып ҡалыуына килтергән.

Билдәле булыуынса, хайуандарҙы ҡулға эйәләштереү һәм үрсетеү кешелек цивилизацияһы тарихында бөйөк һынылыш булған. Йылҡы, һыйыр һәм башҡа малдарҙы ҡулға эйәләштереү кешеләрҙе ышаныслы аҙыҡ, материаль байлыҡ менән тәьмин иткән, тәүтормош-община ҡоролошонан синфи йәмғиәт ҡоролошона күсеүгә, етештереү көстәрен үҫтереүгә, ижтимағи-экономик мөнәсәбәттәрҙең үҙгәреүенә булышлыҡ иткән. В. Б. Ковалевская әйткәнсә: «Йылҡыны ҡулға эйәләштереү халыҡтарҙың беренсе ҙур күсенеүҙәренә килтергән. Кеше, ун тапҡырға артҡан тиҙлекте ҡулына эләктергәндән һуң, үҙ ихтыярына яңы белемәләрҙе, киңлектәрҙе буйһондора алған» [1]. Артабан ҡулға эйәләштерелгән ат яҙмышы кешелек тарихы менән айырылғыһыҙ рәүештә бергә үрелеп китә. Ул батырҙың, һуғышсының юлдашына, тоғро ярҙамсыһына әйләнә. Ҡеше тормошона еңеллек килтереүсе йылҡы малы бер халыҡтың икенсе халыҡты буйһондороуына, башҡа илдәрҙе яулап алыуға актив булышлыҡ итеүсе етди көскә әүерелә.

Батыр һәм уның һуғыш аты халыҡ ижадында иң ныҡ таралған образдар рәтенә инә.

---

[1] Ковалевская В. Б. Ҡонь и всадник. М., 1977, 3-сө б.

Йылҡы, һыйыр һәм башҡа кейек-хайуандарҙың ҡулға эйәләшеү дәүерендә башҡорттар араһында «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» кеүек уникаль циклды тәшкил иткән эпик ҡомартҡылар тыуған. Изгелекле хайуандар хаҡындағы быңдай үҙ аллы эпик сюжеттарҙың башҡа төрки халыҡтар ижадында булыуы әлегә билдәле түгел. Әммә оҡшаш мотивтарҙы, темаларҙы, деталдәрҙе башҡа төрки-монгол халыҡтары эпосының сюжет туҡымаһында күрергә мөмкин. Башҡорт эпик фольклорында изгелекле йылҡы һәм башҡа хайуандар хаҡында айырым сюжеттарҙың һаҡланыуы дөйөм төрки халыҡтар эпосын, рухи культураһын, мифологияһын өйрәнеүсе ғалимдар өсөн әһәмиәтле сығанаҡ булып ҡала.

Был эпик ҡомартҡылар араһында «Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайыры үҙенең йөкмәткеһе, поэтикаһы, образдарҙың бирелеше яғынан үҙенсәлекле. Уның үҙенсәлеге тағы шунда: әҫәрҙә батырлыҡ мотивтары менән көнкүреш тематикаһы бер кимәлдә тип әйтерлек. «Заятүләк менән Һыуһылыу» — асылда героик һәм көнкүреш эпос жанрҙары араһында торған поэтик ҡомартҡы. Был әҫәр халыҡ араһында ҙур популярлыҡ ҡаҙанған, Башҡортостанда ғына түгел, Ырымбур өлкәһе башҡорттары фольклорында ла киң таралған. Хәҙерге көндә СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ғилми архивында «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының төрлө йылдарҙа йыйылған утыҙлап яҙмаһы һаҡлана, шуларҙың байтағы Октябрь революцияһына тиклем үк яҙып алынған. Быларҙан тыш, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт

әҙәбиәте кафедраһы фольклор фондында ла эпостың байтаҡ яҙмалары һаҡлана. Уларҙың иң характерлылары «Башҡорт халыҡ ижады»-ның 2-се китабындағы аңлатмалар өлөшөндә күрһәтелгән [1]. Ғ. Ибраһимов исемендәге тел, әҙәбиәт һәм тарих институты архивында һәм Ҡазан дәүләт университеты ҡулъяҙмалар фондында башҡорт эпосының берәр данаһы һаҡлана [2].

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының тотороҡло, ҡалыплашҡан сюжеты бар. Ул ике киҫәктән тора. Күпселек яҙмаларҙың беренсе киҫәгендә Дим йылғаһы менән Асылыгүл аралығында йәшәгән Сәмәр хандың кесе улы (ҡайһы бер варианттарҙа — икенсе ҡатынынан тыуған яңғыҙ улы) Заятүләктең бала сағы, уның бөтә ярыштарҙа ла еңеп, беренсе булып ир ҡорона кереү дәүере һүрәтләнә. Заятүләк, ағаларының көнсөллөгө һәм ҡылған хаслыҡтары арҡаһында, күк толпарына менеп, аҡ шоңҡарын алып, ата йортон ташлап ҡасырға мәжбүр була. Әҫәрҙең беренсе киҫәге Заятүләктең Асылыгүл буйына килеп, ялға туҡтау эпизоды менән тамамлана. Әҫәрҙең икенсе өлөшө геройҙың һыу аҫты донъяһы хужаһының ҡыҙы Һыуһылыу менән осрашыуы, уның менән һыу аҫтына сәйәхәте, Һыуһылыуға өйләнеүе, ерҙе һағыныуы һәм йылҡы өйөрө эйәртеп күлдән сығыуы, уларҙың Балҡан тауында йәшәүҙәре, фажиғәле рәүештә һәләк булғаны-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 306—312-се б.

[2] Яҙма төрки телендә булғаны һәм бер данаһы Ҡазан дәүләт университеты фондында һаҡланғаны өсөн тарихсы М. Усмановтың «Заятүләк»те татар версияһы итеп күрһәтергә тырышыуының бер ниндәй фәнни нигеҙе юҡ.

нан һуң, Балҡантау башында ерләнеүе эпизодтарын һүрәтләүҙән тора. Әҫәр һыу аҫтынан сыҡҡан сыҫҡан һыртлы ҡола йылҡынан иң яҡшы башҡорт аты тоҡомоноң таралыуы, ә Заятүләк менән Һыуһылыу күмелгән Балҡантауҙың изге тауға әйләнеүе тураһында хәбәр итеү менән тамамлана.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының барлыҡ варианттарында ла тип әйтерлек ошо сюжет тотороҡло һаҡлана. Айырмаларҙы, үҙенсәлектәрҙе, нигеҙҙә, тик айырым образдар, эпизодтар бирелешендә, ҡайһы бер мотивтарҙа, деталдәрҙә, персонаждарҙың телдәрендә генә күрергә мөмкин.

XIX быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур губернаһына килгән атаҡлы рус лексикографы В. И. Даль «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын, шулай уҡ ошо эпос сюжетына бәйле риүәйәттәрҙе яҙып ала һәм 1843 йылда «Москвитянин» журналында «Башкирская русалка» исемендә ҙур булмаған инеш һүҙ менән бергә баҫтырып сығара[1].

В. И. Даль вариантында ваҡиғалар Дим йылғаһы менән Асылыгүл буйында бара. Шул ерҙәрҙә борон Сәмәр исемле данлыҡлы хан күсмә тормош менән йәшәгән. Ул Сыңғыҙ хан улдарының береһе булған, тиеләр. Сәмәр хандың йәш ҡатынынан Заятүләк атлы, ҡояш ке-

---

[1] Даль В. И. Башкирская русалка. «Москвитянин», 1843, № 1; икенсе баҫмаһы: Башкирия в русской литературе, т. I. / Составление, предисловие, биографические справки, комментарии и библиография М. Г. Рахимкулова. Уфа, 1961, 211—230-сы б.; өсөнсө баҫмаһы: Даль В. И. Повести и рассказы. Уфа, 1981, 14—31-се б.; башҡортса баҫмаһы: Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том. Өфө, 1959, 28—33-сө б.

үек йөҙлө улы тыуа. Ул атаһының иң ныҡ һөйгән улы була. Сәмәр хандың башҡа ҡатындарынан тыуған өлкән улдары Заятүләкте яратмайҙар, уның иркә, һөйөклө бала булыуынан көнләшәләр һәм хаслыҡ ҡылалар: ыласын урынына ябалаҡ бирәләр, көлөп кәмһетәләр, уны үлтерергә уйлайҙар.

Был эпизодтарҙа боронғо башҡорт ырыуҙарының күсмә тормошо, көнкүреш картиналары, ырыу йәмғиәтенең емерелә һәм синфи ҡатламдарға бүленеү тенденцияһының һиҙелерлек урын ала башлауы күренә. Сәмәр хан бик ҙур биләмәлә хакимлыҡ итә. Уның ҙур ғәскәре, вәзирҙәре, ҡош бағыусылары, хеҙмәтселәре бар. Ул сит халыҡтарға походтар ойоштора, әсирҙәр алып ҡайта. Заятүләк Сәмәр хандың әсир итеп алып ҡайтылған рус ҡатынынан тыуа. Сәмәр ханды Сыңғыҙ хан улы тип һүрәтләүҙә башҡорт фольклорындағы һәм шәжәрәләрендәге традицион алымды — эпик геройҙың сығышын ниндәй ҙә булһа легендар тарихи шәхескә йәки изге һаналған мифик образға бәйләргә тырышыуҙы күрергә мөмкин. «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙарында ла башҡорт ырыуҙарының сығышы күк аллаларына барып тоташҡан. Юрматы, мең ырыуы башҡорттары шәжәрәһендә лә был ырыуҙар үҙҙәренең сығышын тарихи шәхес — Сыңғыҙ ханға бәйләйҙәр [1]. Ә ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары үҙҙәренең ырыу башлығы итеп боронғо Көнсығыштың легендар табибы Лоҡман Хәкимде күрһәтәләр [2]. Был тенденция

---

[1] Башкирские шежере. Уфа, 1960, 27-се, 54-се б.
[2] Шул уҡ хеҙмәт, 93-сө б.

башҡорт халҡының этногенетик, тарихи риүәйәттәрендә лә нык һиҙелә.

В. И. Даль варианты үҙенең сюжет теүәллеге, боронғо эпос өсөн характерлы мотивтарҙы тулыраҡ һаҡлауы менән ҡәҙерле. Иң мөһиме шунда: В. И. Даль баҫмаһы аша үҙенсәлекле башҡорт эпосы рус фәне донъяһына билдәле булды, һәм беҙ мәшһүр рус ғалимын Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт фольклористикаһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе тип атарға хаҡлыбыҙ.

В. И. Далдең ҡул арты еңел булды. Ул башлап өйрәнгән ҡобайырға иғтибар бермә-бер артты. 1858 йылда Л. Суходольский был эпик ҡомартҡының тағы бер вариантын рус теленә тәржемәләп, «Түләк хаҡында легенда» исеме менән баҫтыра[1]. Әлеге баҫмаға таянып, Г. Н. Потанин «Дочь моря в степном эпосе» тигән мәҡәлә яҙа[2]. Ул «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын башҡа халыҡтарҙың эпик әҫәрҙәре менән сағыштырып өйрәнә. 1897 йылда «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының А. М. Федоров яҙып алған бер варианты «Живописное обозрение» журналында баҫыла[3].

1902 йылда Х. С. Солтанов тарафынан яҙып алынған һәм рус телендә газетала баҫылған вариантта[4] Заятүләк байлығы менән дан тот-

---

[1] Суходольский Л. Легенда о Туляке. — Вестник императорского русского географического общества. 1958, XXIV, № 12. 65—67-се б.

[2] Потанин Г. Н. Дочь моря в степном эпосе, 38—69-сы б.

[3] Федоров А. М. Степь сказалась — «Живописное обозрение», 1897, № 2—3.

[4] Султанов Х. С. «Башкирское предание «Зоя-Тюляк и Су-сулу». — «Самарская газета», 1902, № 83.

ҡан Һарымырҡыс улы итеп һүрәтләнә. Һарымырҡыстың ике ҡатыны булып, өлкәне Баныуҙан өс улы, йәше — Гөлзөһрәнән Заятүләк донъяға килә. Заятүләк әсәһенән бик йәшләй етем ҡала. Атаһының өлкән ҡатынынан тыуған өс ул көслө, уңған Заятүләктән көнләшәләр һәм уға һәр төрлө яуызлыҡтар эшләйҙәр. Шул сәбәпле, Заятүләк өйҙән китергә мәжбүр була. Вариантта яңы образ — йәберләнгәндәрҙе ҡурғап йөрөүсе Хызыр пәйғәмбәр образы индерелгән. Заятүләктең мөхәббәт хаҡына тыуған иленән, атаһынан баш тартыуы һәм Һыуһылыу менән бергә һыу аҫты батшалығына төшөүү эпизоды Х. С. Солтанов баҫмаһының үҙенсәлеге булып тора. Әҫәр, күпселек башҡа варианттарҙағы һымаҡ, Заятүләк менән Һыуһылыуҙың трагик һәләкәте менән түгел, ә Балҡантауҙа бик оҙаҡ йәшәгәндән һуң уларҙың ҡартайып үлеүҙәре менән тамамлана.

XX быуат баштарында башҡорттарҙың материаль һәм рухи культураһын өйрәнеүгә сит ил ғалимдарының, атап әйткәндә, венгр ғалимдарының, ҡыҙыҡһыныуы көсәйә. Был осорҙа тюркологтар һәм венгр ғалимдары араһында, башҡорт халҡы боронғо мадьяр, йәғни уғыр ҡәбиләләренән сыҡҡан, тигән ҡараш йәшәй ине. Ошо фекерҙең дөрөҫлөгөн раҫлау өсөн венгр этнографтары һәм телселәре Башҡортостанға ғилми экспедициялар ойошторалар. 1901 йылда боронғо венгр-башҡорт бәйләнештәрен, туғанлыҡ ептәрен тел һәм башҡа рухи культура материалдары нигеҙендә өйрәнеү маҡсаты менән Венгрияның атаҡлы тюркологы Вильмог Прөле Башҡортостанға килә. Ул, башҡорт ауылдарында йөрөп, байтаҡ фольклор материалдары йыя. Ошо сәйәхәт осоронда

ул «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының үҙенсәлекле бер вариантын яҙып ала. Үкенескә ҡаршы, В. Прөле йыйған фольклор материалдарының тик бер өлөшө генә һаҡланып ҡалған. Уның архивында һаҡланған «Заятүләк менән Һыуһылыу», Валерия Чикаи тарафынан әҙерләнеп, 1974 йылда Будапештта немец телендә «Киң билдәле башҡорт әкиәте варианты» исеме менән баҫтырылды.

Валерия Чикаи тексҡа ҙур булмаған инеш һүҙ яҙған һәм, телсе булараҡ, бик ентекле аңлатмалар биргән. Был вариант башҡаларынан боронғо мотивтарҙы күберәк һаҡлауы менән айырылып тора. Ҡобайырҙа һүрәтләнгән ваҡиғалар ҙур территорияла — Ана Иҙел (Волга) менән Ағиҙел араһында бара.

Октябрь революцияһына тиклем «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосы телдән телгә һөйләнелеп тә, ҡулъяҙма рәүешендә лә йөрөр булған. Уның үҙенә генә хас көйө лә бар. Мәҫәлән, 1894 йылда С. Г. Рыбаков был эпостың көйөн яҙып алған һәм нотаға һалған [1].

1909 йылда Мәжит Ғафури ҡобайырҙың бер вариантын халыҡ араһында йөрөгән ҡулъяҙма китаптан күсереп ала һәм 1910 йылда Өфөлә татар телендә айырым китап итеп баҫтыра [2].

М. Ғафури китапҡа яҙған инеш һүҙендә 1909 йылда бер нисә иптәше менән Асылыгүл буйында ял итеүе һәм Сапай, Ҡаңлы-Төркәй ауылдары ҡурайсы, йырсыларын саҡыртып, уларҙың йыр-көйҙәрен, «Заятүләк менән Һыу-

---

[1] Рыбаков С. Г. Музыка и песня уральских мусульман с очерком их быта. СПб, 1897, 143-сө б.; № 123.

[2] Ғафури М. Заятүләк илә Сусылу. Уфа, 1910.

һылыу»ҙы тыңлауҙары хаҡында яҙа. Ул янына ултырған башҡорт ағайҙың Заятүләк хаҡында шундай ихласлыҡ менән һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың дөрөҫлөгөнә тамам ышанып һөйләүен билдәләй.

«Ана, унда Заятүләк ташы бар, һәм бынан 15 саҡрым ерҙә, ана, күгәреп күренгән Балҡан тауында уның ҡәбере бар. Был күлдең уртаһы бик тәрән... — тип бөтөргәс, — «Заятүләк» тигән китап та бар», — тине.

«Мин элек был китаптың Өфөлә мәшһүр бер кеше тарафынан руссаға тәржемә ителеп, үҙе вафат булыуы сәбәпле, баҫтырылмай ҡалғанын ишеткәйнем. Бында ла бының барлығын ишеткәс, уны шунда уҡ эҙләп таптым. Ҡулыма төшкән бер нисә даналарын бергә килтереп ҡарағанда, китаптың әһәмиәте мин уйлағанса булмаһа ла, түбәндәге сәбәптәр өсөн яҙып алып, тура килһә, баҫтырырмын, тип уйланым. Сәбәптәр: «Заятүләк көйөнөң матур, моңло, бик иҫке булыуы, бының ваҡиғаһы хыяли булһа ла, башҡорттарҙың күңеленә ысын төҫлө булып урынлашыуы, бында яҙылған Заятүләктең шул — мин яҡында ултырған Асылыгүл янында йөрөгәнлеге, күлдең күҙ алдымда ялтырап ятыуы һәм башҡалар» [1], — тип яҙа. М. Ғафури һәм ҡулъяҙма китаптарҙың шаҡтай киң таралған булыуы хаҡында мәғлүмәт бирә.

Шуныһы характерлы, ҡулъяҙма текстар, дини мәҙрәсә тамамлаған уҡымышлы кешеләр ҡулы аша үткәнлектән булһа кәрәк, ҡайһы бер дини мотивтар тәьҫирен кисергәнгә оҡшай. Мәҫәлән, М. Ғафури баҫмаһында Хыҙыр пәй-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 306—307-се б.

ғәмбәр Заятүләктең төшөнә керә һәм уға мөғжизәле доға өйрәтә. Ул ошо доға ярҙамында юлда осраған ауырлыҡтарҙы еңә.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының ҡулъяҙма рәүешендә халыҡ араһында таралған булыуы СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һуңғы йылдарҙа ойошторған археографик экспедициялары ваҡытында ла раҫланды.

Был популяр халыҡ ҡобайырына иғтибар бер ваҡытта ла һүнмәне. 1938 йылда «Октябрь» журналында ҡобайырҙың үҙенсәлекле бер варианты баҫылып сыҡты. Һуңғы йылдарҙа фольклорсылар Башҡортостандың һәм Ырымбур өлкәһенең төрлө райондарында халыҡтың йәнле һөйләү телендә йәшәгән уның башҡа бик күп варианттарын яҙып алдылар [1]. Был яҙмаларҙың ҡайһы берҙәре башҡорт, рус телдәрендә матбуғатта донъя күрҙеләр [2].

Шулай уҡ башҡорт фольклористикаһында «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосын ғилми өйрәнеү йәһәтенән дә мөһим аҙым яһалды. Ҡирәй Мәргәндең 1961 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» монографияһында был эпосты тикшереүгә айырым бүлексә бирелә (101—126-сы биттәр).

Ҡ. Мәргән «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының ҡайһы ерлектә тыуғанлығын, уның тарихи нигеҙенә, ҡайһы бер образдарҙың функ-

---

[1] Ҡобайыр яҙмалары хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе түбәндәге сығанаҡтан ҡарарға мөмкин: БХИ. Эпос, 1972, 306—312-се б.

[2] БХИ. Эпос, 1972, 187—222-се б.; Башкирский народный эпос. М.: Наука, 1977, 206—215-се, 418—427-се б.; Былых времен сказанья. Уфа, 1979, 16—37-се б.

цияһын асыҡлау мәсьәләләренә туҡтап үтә. Шулай уҡ ул был әҫәрҙә «Урал батыр» эпосында күтәрелгән мотивтарҙың сағылыуын, конкрет алғанда, диңгеҙ, күл «хужаларына», «серле көстәргә» ҡаршы көрәш темаһының сағылыуын билдәләй. Заятүләктең һыу аҫты донъяһына сәйәхәтенең төп сәбәбен ул боронғо ырыу ҡоролошона хас булған экзогамия күренеше менән аңлата [1]. Автор тәүтормош-ырыу ҡоролошоноң емерелә башлау һәм шәхси милектең үҫеш ала башлау процесының да әҫәрҙә художестволы сағылыш табыуын күрһәтә.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» әҫәре хаҡында башҡорт эпосы томдарына яҙылған инеш мәҡәләләрҙә әйтелде, унын ерлеге, өйрәнелеү тарихы тикшерелде, анализдар яһалды [2].

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа, «Аҡбуҙат» ҡобайырындағы кеүек, эпик ваҡиғалар ике донъяла, ике мөхиттә — ер өҫтөндә һәм һыу аҫтында бара. Шуға ярашлы образдар системаһы ла икегә — ҡаҙимге ер кешеләре һәм һыу аҫты донъяһының мифик зат образдарына бүленә. Әҫәрҙең сюжеты төп герой Заятүләкте, унын башынан кискәндәрен һүрәтләүгә ҡоролған. В. И. Даль яҙмаһында ваҡиғалар Дим йылғаһы менән Асылыгүл аралығында, В. Прөле вариантында — Ана Иҙел (Волга) менән Ағиҙел, М. Ғафури вариантында — «Унсан уймат ҡырғыҙ илендә», Н. Д. Шоңҡаров тарафынан Ғибат Агишевтан яҙып алынған ва-

---

[1] К. Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 101-се б.

[2] БХИ. Эпос, 1972, 7—29-сы б.; Мирбадалева А. С. Башкирский народный эпос. М., 1977, 35—42-се б.

рнантта «алыҫ бер илдә» [1] бара. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күпселек яҙмаларҙа Асылыгүл һәм уның янындагы Балҡан тауы даими иҫкә алына.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында, нигеҙҙә, башҡорт халҡының тәүтормош-ырыу ҡоролошоноң емерелеп, шәхси милекселектең моронлай башлау осоро сағыла. Әҫәрҙең төп геройы Заятүләк, «Аҡбуҙат» эпосындағы Һәүбән кеүек үк, етем ҡалған, үҙ ырыуҙаштары тарафынан да ҡыйырһытылған, кәмһетелгән бала булып үҫә. Йә булмаһа Заятүләк иң кесе ул булып тыуа һәм өлкән ағаларынан ҡыйырһытыла. 1938 йылда «Октябрь» журналында баҫылған вариантта (№ 6, 38-се бит) Заятүләк ырыу башы ағалы-энеле Алтынбай менән Етембайҙың алыҫ туғаны, үкһеҙ етем итеп һүрәтләнә. Геройҙың үҙ ырыуҙаштары араһында социаль яҡтан кәмһетелгән ғаиләлә тыуыуы һәм үҫеүе «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының күп кенә варианттарына хас. Боронғо эпосҡа социаль тигеҙһеҙлек, етемлек мотивтарының килеп инеүенең етди сәбәптәре бар. Ҡешелек йәмғиәтен өйрәнеүсе фәндең аңлатыуына ҡарағанда, бик боронғо, «тәүтормош коммунизмы» тип аталған осорҙа ырыу эсендә уның һәр ағзаһы бер тиң хоҡуҡ менән файҙаланған, балалар тәрбиәләү бөтә ырыу эше тип ҡаралған, кешеләр ҡулындағы барлыҡ милек дөйөм, уртаҡ милек һаналған. Бала үҙ атаәсәһе үлгән тәҡдирҙә лә етем һаналмаған, уны бөтә ырыу үҙ балаһы итеп ҡараған. Шул сәбәпле, был осор фольклорында социаль тигеҙһеҙлек, етемлек темаһына күтәрелеүенә нигеҙ

[1] Ғилми архив, фонд 3, оп. 21/3, 108—111-се б.

булмаған. Тәүтормош-ырыу ҡоролошоноң тарҡалыу, шәхси милекселектең нығына, социаль тигеҙһеҙлектең көсәйә барыу осорон сағылдырған фольклорҙа етем-еҫер образдары, социаль тигеҙһеҙлек мотивтары күренә һәм киңәйә башлай. Халыҡтың уй-фекерен, аҡылын төйнәгән сәсәндәр, аҡһаҡалдар етемдәрҙең, шулай уҡ үҙ көсө менән көн итә алмаған ҡарттарҙың үҙ ырыуҙаштары тарафынан иҙелеүенә, ҡыйырһытылыуына ҡаршы сыҡҡандар, ғәҙеллеккә саҡырғандар. Халыҡ ижадында, конкрет алғанда, эпос жанрында етемдәр, ҡыйырһытылған кесе ул образдарын уларҙы йәберләүсе ырыуҙаштарынан, шулай уҡ дошмандарҙан өҫтөн образдар итеп һүрәтләгәндәр.

Тылсымлы әкиәт жанрын өйрәнеүсе Е. М. Мелетинский: «Етемлек мотивы мифик, фантастик ҡараш емеше түгел, ә тәрән реалистик мотив. Ул — социаль процесс — тәүтормош-община ҡоролошо системаһының тарҡалыуы, бәләкәй семьяның яңы производство ячейкаһы булып үҫеүе, тәүтормош-община ҡоролошона хас табышты бүлеү принциптарының боҙолоуы һөҙөмтәһендә тыуған саф социаль-көнкүреш мотивы», — тип яҙа һәм был мотивтың ерлеген билдәләй [1].

Ҡесе, кинйә Заятүләктең ағалары тарафынан йәберләнеүе, хатта улар араһындағы мөнәсәбәттең драматик төҫ, киҫкенлек алыуын һүрәтләү картинаһы эпостың һәр вариантында тип әйтерлек ентекле бирелә. Был көрәш эпизодын һүрәтләүҙә боронғо башҡорт ырыуҙары йәмғиәтендә минорат системаһы булғанлығы

[1] Мелетинский Е. М. Герой волшебной сказки. М., 1958, 64-се б.

һәм унының эпоста художестволы сағылғанлығы күренә. Минорат йолаһы буйынса, ғаиләлә, ырыуҙа ата йорто, атаның йәки ырыу башының хоҡуҡтары, байлығы кесе улға мираҫ булып күскән. Ә инде ата йортонан бүленеп сыҡҡан, айырым донъя көтә башлаған өлкән улдарҙың ата йортонда — нигеҙ йортта ҡалыуға хоҡуҡтары булмаған, улар үҙҙәрен ҡыйырһытылған кеше һанағандар һәм вариҫ булып ҡалған кинйә улдан көнләшкәндәр, ризаһыҙлыҡтарын белдергәндәр. Эпик әҫәр (һәм уны башҡарыусы сәсән) ағалары тарафынан ҡыйырһытылған кесе ул — Заятүләк яғында. Заятүләк, атаһы үлгәндән һуң, халыҡтың (ырыуҙаштарының) һорауы буйынса, хан тәхетен ала. Шулай итеп, кесе ул бөтә яҡтан да ағаларынан өҫтөн булып сыға.

Эпоста Заятүләктең бала сағын һүрәтләүгә ҙур ғына урын бирелә. Төрки халыҡтарҙың ҡаһарманлыҡ эпосында төп геройҙы бала ваҡытында уҡ гәҙәттән тыш көслө йә аҡыллы итеп һүрәтләү — традицион күренеш. Ул «нурлы йөҙлө» булыуы, уңғанлығы, етеҙлеге, көсө, аҡылы менән ағаларынан, тиҫтерҙәренән айырылып тора. Уйын уйнағанда ыҙғыш-фәлән сыҡһа, үҙ тиҫтерҙәрен ҡыйратып алып барыр булған, һунарҙа ла, ярыштарҙа ла башҡаларға ал бирмәгән. Унының ылысыны ла, тоғро эте, ҡарамаҡҡа килбәтһеҙ булып күренгән толпары ла тиңдәшһеҙ етеҙ булып сыға. Менгегә ат һайлау эпизодында ла төрки халыҡтар эпосына хас традиция ҡабатлана: Сәмәр хандың ете улы, йылҡы өйөрөнә сығып, берәм-берәм йүгәндәрен шылтыраталар һәм тауышҡа ҡайһы ат боролоп ҡараһа, шуны алалар. «Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайырының барлыҡ вари-

анттарында ла Заятүләктең ата йортонан, тыуған иленән ҡасып китеү эпизоды бар. Әҫәрҙең үҙендә төп геройҙың ҡасып китеүе Заятүләккә ҡарата ағаларының яуызлыҡ ҡылыуҙары, ғәҙелһеҙлеге һөҙөмтәһендә тыуған хәл тип ҡарала. Әммә был мотивтың нигеҙендә икенсе бер, ҙурыраҡ, мөһимерәк сәбәп ятҡанын күрмәй мөмкин түгел. Борондан йәшәп килеүсе йола буйынса, бер ырыу кешеләре үҙ-ара өйләнешә алмағандар. Егет кәләште мотлаҡ рәүештә сит ырыуҙан алырға тейеш булған. Ошо экзогамия күренеше төрки халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорт халҡының, эпосында художестволы сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, иң билдәле «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алпамыша менән Барсынһылыу» һ. б. эпик ҡомартҡыларҙа төп геройҙың үҙ иленән ситкә ауыр сәфәргә сығып китеүе сит ырыуҙан кәләш эҙләү, уны табып, яулап алыу менән бәйләнгән. Заятүләктең ситкә сығып китеүенең төп сәбәбе лә ана шул кәләш эҙләүгә, ғаилә ҡороуға булған ынтылышҡа ҡайтып ҡала. «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың бөтә варианттарында тип әйтерлек егет кәләше йортонда оҙаҡ ҡына йәшәргә мәжбүр була. Хатта ул кәләше менән бергә булыу өсөн ата-әсәһенән, тыуған иленән, һөйөп менгән толпарынан, тоғро этенән, етеҙ шоңҡарынан да баш тарта. Беренсе ҡарашҡа бик сәйер тойолған был күренеште реаль тормошта булған ғәҙәт-йоланың сағылышы тип ҡарарға кәрәктер. Ҡирәй Мәргән: «Ата йорто менән артыҡ иҫәпләшмәү мотивы — ул семья һәм аталыҡ-әсәлек роле яңы моронлай башлаған дәүер өсөн тәбиғи күренеш»[1], — тип яҙа.

[1] Ҡ. Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 112-се б.

Шулай итеп, ул Заятүләктең был ҡылығында тәүтормош-община ҡоролошо менән яңы тыуып килгән ғаилә, шәхси милекселек, йәғни ике формация конфликты ятҡанлығын һәм уның эпоста сағылыуын билдәләй. Был конфликтты ул Заятүләктең тәүҙә ҡыҙ йортонда ҡалырға риза булып та, аҙаҡ үҙ иленә мал-тыуар эйәртеп ҡайтыу, хан тәхетенә ултырыу эпизодтарында күрә.

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың күпселек варианттарында сатырҙа йоҡлап ятҡан Заятүләкте ағаларының үлтерергә йыйыныу эпизоды бар. Әммә был хәүефте һиҙгән толпар батырға был турала хәбәр итә һәм уны алып ҡаса. Шулай итеп, толпар булып сыҡҡан ябаға тай батырҙы хәүефтән ҡурғаусы, үлемдән ҡотҡарыусы, кәңәшсе, тоғро ярҙамсы, изге йән итеп һүрәтләнә. Артабан изге ат батырҙы уның буласаҡ кәләше йәшәгән Асылыгүл буйына алып килә. Тояҡтарына ҡаҙаҡ ҡағылған, имгәтелгән толпар, телгә килеп, егеткә: «Һин, өҙәңгегә нығыраҡ баҫып, бар көсөнә минең ҡабырғама ҡамсы менән ҡан сәсрәткәнсе уңлы-һуллы берәр тапҡыр һуҡ», — ти. Заятүләктең уңлы-һуллы ҡабырғаға һуғыуы була, «һуғылған ерҙән ҡан сәсрәп сыға, шул әҙере аттың табанына ҡағылған тимер ҡаҙаҡтар шылтырап ҡойолоп төшәләр. Күк толпар, ҡанатын йәйеп, уҡ кеүек алға атыла»[1].

Был эпик әҫәрҙең халыҡ араһында ҡулъяҙма рәүешендә таралған варианттарының ҡайһы берҙәрендә Заятүләктең төшөнә изге ҡарт инә һәм уны хәүефтән иҫкәртә, бәлә-ҡа-

[1] Биктимер сәсән Вәлиуллин варианты. — БХИ. Эпос, 1972, 189-сы б.

занан һаҡлаусы доға өйрәтә. Ул: «Эй, улым Заятүләк! Ғафил булып йоҡлайһың. Ағайҙарың һәм юлдаштарың яман уй уйлап, һине үлтермәксе булдылар. Атыңдың дүрт аяғына ҡаҙауҙар ҡаҡтылар. Бына һиңә бер доға өйрәтәм. Ҡасан да башыңа берәй мөшкөл эш төшһә, шуны уҡырһың» [1], — ти. Егет шул кеше өйрәткән доғаны уҡып, атының аяғын өшкөрә һәм уның яраһын төҙәлтә. Заятүләк артабан да ошо доға ярҙамында үҙенә осраған ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыға. Ә Солтангәрәй Солтанов тарафынан яҙып алынған вариантта, Заятүләкте төрлө бәлә-казанан, ауырлыҡтан һаҡлаусы изге йән булараҡ, ислам дине мифологияһында киң билдәле Хызыр образы кәүҙәләнә. Изгелекле Хызыр өйрәткән тылсымлы доға ярҙамында Заятүләк ағалары тарафынан аҡ толпарының тояғына ҡағылған ҡаҙауҙарҙы алып ташлай; һыу аҫты илен тотоусы Жаждар ханға, күл-йылғаларын ҡоротоп, ҡурҡыу һала, ҡыҙы Һыуһылыуҙы кәләшлеккә ала [2]. Боронғо башҡорттарҙың аң-ҡарашында пантеизм, йәғни тәбиғәтте аллалаштырыу, изгеләштерեү күренеше киң таралған булған. Был ҡараш буйынса, тәбиғәт алланың бер образы, кешеләргә күренеү рәүеше булараҡ ҡабул ителгән. Кешеләр бөтә донъяны, тәбиғәтте алланың ҡөҙрәте, алланың үҙе тип уйлағандар. Боронғо башҡорттарҙа тәбиғәтте һәм тәбиғәт күренештәрен йәнләндереп ҡабул итеү булған.

«... Башҡорттар тәбиғәтте һәм уның күренештәрен йәнләндереп кенә ҡалмағандар, —

---

[1] Мәжит Ғафури яҙмаһы. — БХИ. Эпос, 1972, 199-сы б.

[2] Башкирское предание «Зоя-Туляк и Су-сулу». — «Самарская газета», 1902, № 83.

ти С. И. Руденко, — а уларҙың һәр береһенең аллаһы (эйәһе) бар тип һанағандар»[1]. Ул башҡорттарҙа тау эйәһе, урман эйәһе, ер-һыу эйәһе һ. б. хаҡында бик күп ышаныуҙар, хөрәфәттәр йәшәүен билдәләй.

Ана шул төрлө тәбиғәт аллалары, йәғни эйәләре араһында «һыу эйәһе», «күл эйәһе», «йылға (диңгеҙ) эйәләре» (аллалары) барлығына ышаныу элек халыҡ араһында ифрат киң таралған булһа кәрәк. Йылға, күл эйәләренә ышаныу башҡорт фольклорының эпос, әкиәт, легенда жанрҙарында ныҡ сағылған. Геройҙың һыу аҫты донъяһы батшаһы ҡыҙын осратыуы, уның менән бергә һыу аҫты донъяһына сәйәхәте, аҙаҡ, күп мал алып, кире ер өҫтөнә ҡайтыуы кеүек мотивтарҙың «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» «Аҡһаҡ ҡола» әҫәрҙәрендә урын алыуы халыҡ аңында күптән йәшәп килеүсе һыу эйәһе культының эпик жанрҙа сағылыуын күрһәтә. Башҡорттарҙың һыу эйәһенә (аллаһына) табыныуы бынан мең йылдан ашыу элек үк ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙлан күҙәтеүе буйынса ла билдәле. Ул башҡорттар табынған ун ике алланың береһе итеп һыу аллаһын күрһәтә[2].

«Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайырында Заятүләктең, ағалары йәберенә түҙмәй, туған илен ташлап китеүе, толпарына агланып, һунар этен эйәртеп, аҡ шоңҡарын эйәр ҡашына ултыртҡан көйө Асылыгүл буйына йә булмаһа диңгеҙ йәки йылға буйына килеп, хәл алырға туҡтау эпизоды тотороҡло урын ал-

---

[1] Руденко С. И. Башкиры. Историко-этнографические очерки. М. — Л., 1955, 315-се б.

[2] Путешествие Ибн-Фадлана на Волгу, 66-сы б.

[illegible]. Күпселек яҙмаларҙа герой күл буйына [illegible] килеп туктай һәм тирә-яҡты, күл буйын [illegible]теп сыҡмаҡ була. Ошо төнгө сәфәрҙә ул күл ситендәге яҫы таш өҫтөндә алтмыш ҡолас [illegible]лоғондағы сәс толомдарын тарап ултырыусы, йә булмаһа төн яҡтылығында ҡойоноп йөрөүсе һыу аҫты батшаһы (һыу эйәһе) ҡыҙын осрата һәм уның матурлығына ғашиҡ була. Биктимер сәсән Вәлиуллиндән яҙып алынған вариантта Заятүләк һыу ҡыҙын күл өҫтөндә уйнаған нур буйынса килеп таба [1]. Ул, һаҡ ҡына йәшенеп килеп, ҡыҙҙы сәс толомдарынан тотоп ала. Барлыҡ яҙмаларҙа ла һыу ҡыҙы егеттән һыу төбөнә ҡасып ҡотолорға уйлай. Әммә сәс толомдарын ҡулына урап тотҡан Заятүләк уны ебәрмәй. Тап ошо урында башҡорт фольклорында киң таралған егет менән ҡыҙҙың ҡара-ҡаршы әйтеше ҡабатлана. Был әйтеш (поэтик диалог) әҫәр сюжетында мөһим роль үтәй. Егет менән ҡыҙ бер-береһе менән танышалар, бер-береһенә булған мөнәсәбәтте асыҡлайҙар, исемдәрен әйтешәләр. Һыу аҫты батшаһы ҡыҙының исеме Һыуһылыу икәнлеге белелә, һәм ул бөтә варианттарҙа ла тиерлек үҙгәрешһеҙ ҡала. Тик «Заятүләк» исеме менән яҙып алынған һәм баҫылған бер яҙмала ғына ул Көнһылыу тип аталған [2].

Һыу ҡыҙы башҡорт фольклорында — эпоста, әкиәт, легендаларҙа — киң таралған образ. «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡбуҙат» эпик ҡомартҡыларында һыу ҡыҙы — төп образдарҙың береһе. «Аҡбуҙат»тағы Нәркәс, «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙағы Һыуһылыу образ-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 190-сы б.
[2] «Октябрь» ж., 1938, № 6, 38—41-се б.

дарын һүрәтләүҙә оҡшашлыҡ ҙур. Был оҡшашлыҡты ер егете менән һыу ҡыҙы осрашыуы эпизодында ла күрергә мөмкин. «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙың барлыҡ варианттарында ла егет Һыуһылыуҙы күл йә йылға ситендә алтмыш ҡолас оҙонлоғондағы сәсен алтын тараҡ менән тарап ултырған хәлдә осрата һәм, йәшенеп килеп, тотоп ала. Ҡыҙ нисек булһа ла егеттән ҡасып ҡотолорға тырыша. Үҙен ебәрмәй ныҡ тотҡан егеткә ул алтын тарағын, көмөш йөҙөгөн, ай күҙгөһөн бүләк итеп бирмәк була, хатта уны бөтә һыу аҫты донъяһына хужа булған атаһы менән дә ҡурҡытып ҡарай. Ул егеткә үҙенең һыу аҫты донъяһы батшаһы ҡыҙы, йәғни икенсе зат кешеһе икәнлеген, ер улына тиң була алмауын белгертеп:

Сибәр егет, шаулама,
Атым минең — Һыуһылыу,
Мине һорап даулама;
Егет, һиңә тиң булмам:
Нурҙан тыуған тоҡоммон,
Ерҙә йөрөтөп хурлама.
Ер улына тиң булмаҫ,
Нурҙан тыуған ҡыҙ бала.
Егет, һүҙең оҙайтма,
Ебәрә күр, ер улы,
Атам белһә, яу һалыр,
Башыңа ҡиәмәт һалыр [1], —

ти. Әммә егет уның иҫкәртеүҙәренә, ҡурҡытыуына, үтенесенә ҡолаҡ һалмай. Ул Һыуһылыу менән бергә булырға теләүен әйтә.

Заятүләк менән Һыуһылыуҙың диалогы, бәхәсе һәр осраҡта тиерлек йыр дуэтын хәтерләтә. Ҡыҙҙың матурлығына ғашиҡ булған Заятүләк бөтә бүләктәрҙән баш тарта. Мөхәб-

[1] БХИ, Эпос, 1972, 190-сы б.

бәт хаҡына ул хатта күк толпарынан, һунар -тенән, аҡ шоңҡарынан, үҙен тыуҙырған атаәсәһенән дә баш тартып, ҡыҙ менән бергә һыу аҫты донъяһына китергә риза була. «Аҡбуҙат» ҡобайырында төп герой Һәүбән һыу ҡыҙын ике тапҡыр осрата. Беренсеһендә һыу ҡыҙы Нәркәсте алтын өйрәк ҡиәфәтендә, күлдә ҡойоноп йөрөгән ваҡытында күреп ҡала һәм уҡ менән атып яралай, тотоп ала. Бында ла һыу ҡыҙы үҙенең ябай өйрәк булмауын, ә һыу аҫты донъяһы батшаһының ҡыҙы икәнлеген әйтә, үҙен ебәреүен үтенә, егеткә бүләктәр, Аҡбуҙ толпар менән өйөр-өйөр мал бирергә вәғәҙә итә. Нәркәс тә, Һыуһылыу кеүек үк, үҙенең ер улына тиң булмаҫ тоҡомдан икәнлеген әйтә, һарайына дейеүҙәрҙе, «ҡылыс киҫмәҫ муйынлы батырҙарҙы туплаған» атаһы — һыу батшаһының көсө менән дә ҡурҡытып ҡарай. Егеттең үтенесен кире ҡағыуҙың сәбәптәрен ҡыҙ:

Мине алып һин, егет,
Һис тә мандый алмаҫһың;
Күгәрсен туным кеймәгәс,
Мине төндә күрмәҫһең;
Йәр тип мине һөйөргә
Ҡуйыныңда тапмаҫһың.
Ергә сығып ҡыуарһам,
Мине һылыу тимәҫһең...
Ер егете ер һөйөр,
Тәне ерҙән яралған;
Һыу ҡыҙының бар ере
Нурҙан, уттан яралған.
Ҡояш һине йылытыр,
Мине майҙай иретер,
Минән аҡҡан бер тамсы
Илең ыуҙай ҡоротор, —

тип аңлата. Хатта ул «нурҙан, уттан» яралған, ҡартайыу белмәҫ һыу ҡыҙының егет өсөн генә

түгел, ә уның иле-халҡы өсөн дә ҡурҡыныслы тоҡомдан булыуын иҫкәртә.

Һәүбән батыр һыу ҡыҙы Нәркәсте икенсе тапҡыр айҙың ун дүртенсе кисендә осрата. Был юлы Нәркәсте алтын өйрәк ҡиәфәтендә түгел, ә күл ситендә алтын тәхет өҫтөндә алтын сәстәрен тарап ултырыусы һылыу ҡыҙ һүрәтендә күрә һәм уны һиҙҙермәҫтән сәсенән тотоп ала. Һәр осраҡта ла, «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙағы шикелле үк, ҡыҙ менән егеттең ҡара-ҡаршы әйтеше бирелә. Был поэтик диалог башҡорт эпик ҡомартҡыларында тотороҡло һаҡланған һәм традицион алымға әйләнгән.

Шуныһы характерлы, һыу ҡыҙҙары һәр осраҡта ла әйткән, ышандырған һүҙҙәренә тоғро ҡалалар һәм уны тайпылышһыҙ үтәйҙәр. Тик Һәүбән батырҙың ҡыҙ һүҙенә ышанып етмәүе арҡаһында, һыу ҡыҙы вәғәҙә иткән өйөр-өйөр малдар, күлдән сығып өлгөрә алмай, кире сумалар.

«Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» ҡобайырҙарында эпик геройҙарҙың һыу аҫты донъяһына сәйәхәтен һүрәтләүгә ҙур урын бирелә.

Боронғо башҡорттарҙа һыу эйәһе, йәғни һыу аллаһы, күк аллаһы кеүек үк ҙур алла (эйә) һаналған булһа кәрәк. «Урал батыр» ҡобайырында Урал батырҙың улдары күк аллаһы бүләк иткән изге алмас ҡылыс ярҙамында йырған йылғалар кешеләргә түл йәйеп йәшәргә уңайлы, изге йылғалар булып һанала. Ә аҡмай ятҡан күлдәрҙә дейеү, аждаһалар йәшәүе һәм уларҙың кешеләр өсөн зыянлы, ҡурҡыныслы булыуы әйтелә. Унда ағыр һыу-

ҙар, шишмәләр таҙа, эсергә яраҡлы, ә күл һыуын эсеү зарарлы, тигән фекер үткәрелә.

Шулай итеп, боронғо ҡобайырҙа һыу аҫты донъяһы аллаларына халыҡтың ике төрлө ҡарашы күренә: йылға, шишмә эйәләренә — ыңғай, ә диңгеҙ, күл эйәләренә — кире. Диңгеҙ менән күл эйәләрен яуыз көстәр итеп ҡарауҙың нигеҙендә реаль, объектив сәбәптәрҙең ятыуы ла ихтимал. Боронғо кеше өсөн диңгеҙ аңлашылып бөтмәгән реаль ҡурҡыныс, буйһондоролмаҫ тәбиғәт көсө булып күренгән. Ә тирә-яғы төрлө йыртҡыс йәнлектәр, ҡошҡорт, йыландар менән тулы булған һаҙлы, күтерле, тонсоу күлдәрҙең кешеләр өсөн ҡурҡыныслы, хәүефле булыуы күл эйәләренә ҡарата кешеләрҙә кире ҡараштың нығыныуына булышлыҡ иткән булһа кәрәк. Аҡмаған һыуҙы эсергә ярамай, тигән ҡарашҡа килгәндә иһә, уны халыҡтың борондан уҡ килгән гигиена тәрбиәһенең эпоста художестволы сағылыуы тип ҡарарга мөмкин. Кешеләр быуаттар дауамында тирә-яҡ мөхитте өйрәнеү тәжрибәһен туплағандар һәм шул тәжрибәне төрлө тыйыуҙар аша йәштәр аңына һеңдергәндәр. Был тыйыуҙар аҙаҡ ҡәтғи үтәлергә тейешле йолаға әүерелгәндәр һәм халыҡ ижадында сағылыш тапҡандар. Йылға менән тоташмаған күлдән һыу эсеү, изге һаналған һыуҙы бысратыу, күлгә емтек ташлау, бигерәк тә һыуға ярау итеү ҡәтғи тыйылған һәм ҙур гөнаһ һаналған. Был тыйыуҙар кешеләр өсөн кәрәкле гигиена талаптарын ҡәнәғәтләндергәндәр.

Халыҡ һыу эйәһен төрлө ҡиәфәттә, ир йә ҡатын затлы итеп күҙ алдына килтергән. Боронғо ҡараш буйынса, ул — ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтендә: һыуһылыу, һыу инәһе (һыу анаһы) һ. б.

һыу инәһе төндәрен яр ситенә сығып, ай көҙгөһөнә ҡарап, алтын тараҡ менән сәс тарап ултырырға яратыусы һылыу ҡыҙ образында күҙ алдына килтерелгән һәм фольклорға үтеп ингән. Эпик ижадта ул Һыуһылыу, Нәркәс исемдәре менән йөрөй. Халыҡтың ҡарашы буйынса, һыу инәһе төрлө ҡош-ҡорт, йәнлек, януар ҡиәфәтенә инә ала. Уның кәйефен боҙоп йөрөүсе, ул йәшәгән һыуға йәки күлгә зыян килтереүсе кешеләрҙе ул йыш ҡына ҡурҡытып, ҡыуып ебәрә, хатта уларҙы эҙәрләй, ҡазаға юлыҡтыра, ауырыуға һабыштыра. Ошоға оҡшаш образдарҙы башҡа төрки һәм төрки булмаған халыҡтар ижадында ла осратырға мөмкин. Мәҫәлән, татар халыҡ ижадында су анасы, якуттарҙа — эбе (әбей), алтай, шор халыҡтарында — иййе, боронғо гректарҙа — нимфа, рустарҙа — русалка, водяная тип аталып йөрөгән оҡшаш образдар бар. Гректарҙа һыу аллалары — нимфалар бер нисә төргә — диңгеҙ аллаларына (океанидалар), йылға (нереидалар), инеш, шишмә аллаларына (наядалар) бүленгән һәм мифологияға, фольклорға ингән [1].

Нимфалар грек аллаларының иң олоһо — Зевстың ҡыҙҙары һаналғандар, Олимп тауында үткәрелгән аллалар йыйындарында, байрамдарында ҡатнашҡандар, аллаларға кейәүгә сыҡҡандар, ҡайһы бер геройҙарҙы тыуҙырғандар. Нимфалар ҡайғыһыҙ, хәүефһеҙ, күңелле тормошта йәшәгәндәр, шағирҙарға, йыркөй ижадсыларына илаһи рух, ҡеүәт биргәндәр. Боронғо гректарҙа нимфалар культы көслө булған, һәм йылға буйҙарында, шишмәләр

---

[1] Мифологический словарь. Л., 1959, 127-се б.

янында, тау мәмерйәләре алдында уларҙың хөрмәтенә храмдар ҡоролған. Шуға оҡшаш күренеште башҡорт фольклорында ла осратырға мөмкин. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында һыу эйәһе Һыуһылыу оҙаҡ йылдар төҫ ташламай. Асылыгүлендә йәшәй, көн дә, күл ситендәге ташҡа ултырып, сәсен тарай, күктәге йондоҙҙарҙы алып, сәс толомдарын биҙәй. Әммә Һыуһылыу нимфалар кеүек үлемһеҙ түгел. Әҫәрҙең аҙағында ул Заятүләк менән бергә ер өҫтөнә сыға һәм Балҡан тауында һәләк була. Уның Заятүләк менән бергә Балҡан тауы башында күмелгән ҡәбере башҡорттарҙың изге урыны һанала, ә Балҡан тауы изге тауға әйләнә, тиелә эпоста. «Аҡбуҙат» эпосында ла һыу эйәһе Нәркәстең тыныс күлдә оҙаҡ йылдар ҡартаймай йәшәгәнлеге билдәле. Нәркәс үҙе хаҡында:

Төҫөм йәштәй булһа ла,
Күп йыл ғүмер һөрҙөм мин.
Батша ҡыҙы булғанға,
Ергә сығып баҫмағас,
Унан ашам йыймағас,
Һис ғүмерем уҙманы,
Ҡартлыҡ мине еңмәне,
Йәш саҡтарым һаҡланып,
Һылыулығым бөтмәне[1], —

тип үҙенең ҡартаймауының серен әйтә.

Һыу ҡыҙы, йәғни һыу эйәһе ғәҙәттә ер өҫтөнә сығыуҙан ҡурҡа, унда йәшәй алмауын белдерә, үҙен тотҡан егеттән ирекҡә ебәреүҙе һорай. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙа, һыу эйәһе ҡыҙы һыу аҫты донъяһында ғына түгел, ер өҫтөндә лә йәшәй ала, тигән ҡараштың да

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 185—186-сы б.

йәшәгәнлеге күренә. Башҡорт фольклорында һыу ҡыҙының батырға кейәүгә сығып, ҡәҙимге ер тормошо менән йәшәй башлауын һүрәтләү — ана шул ҡараштың художестволы сағылышы. тип уйларға урын бар.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында һыу аҫты донъяһын һүрәтләүгә ҙур урын бирелә. Заятүләк, толпарын, этен, шоңҡарын ҡалдырып, ата-әсәһенән, тыуған иленән төңөлөп, Һыуһылыу менән һыу аҫтына сума. Артабан уның яҙмышы, тормошо һыу аҫты донъяһында бара. Заятүләк байтаҡ ваҡыт Һыуһылыу тирмәһендә йәшенеп йәшәй, уның ата-әсәһенә күренмәй. Әммә аҙаҡ сер асыла. Һыу аҫты батшаһы Заятүләк менән Һыуһылыуҙың өйләнешеүенә риза була. Әммә ләкин ул батырҙың мотлаҡ рәүештә һыу аҫтында ҡалыуын һорай, әгәр ҙә илен һағынып, һыу аҫты донъяһын ташлап сыҡһа, икеһенең дә һәләк буласағын әйтә. Заятүләк был шартҡа тәүҙә риза булһа ла, аҙаҡ илен, Ҡарағас тауы башында эйәһен көтөп торған Күк толпарын, аҡ шоңҡарын, һунар этен һағына һәм был шартты боҙа, һағыныуы йөҙөнә сығып һарғая, кибә башлай. Ғайса Хөсәйенов менән Нигмәт Шоңҡаров яҙып алған бер вариантта Заятүләк һағышынан хатта күлдәге балыҡтар һарыға әйләнеп үлә башлай [1].

Һыу батшаһы кейәүенең һағыныуын, ҡайғыһын бер аҙ баҫыу өсөн ендәргә уның тыуған ере Балҡантауҙы Заятүләк тирмәһе алдына килтереп ҡуйырға ҡуша. Ләкин дейеүҙәр, яңы-

---

[1] Хөсәйенов Ғ. Б. Археография һәм фольклор. ТТӘИ-ның ҡулъяҙмалар фонды, 1982, 10-сы б.

лышып, Балҡантау урынына икенсе тауҙы күсереп килтерәләр.

Заятүләк был тауҙың Балҡантау түгел икәнлеген беләә. Һыу батшаһы Заятүләкте йәлләй һәм:

— Заятүләк, һин ер улы, ерһеҙ йәшәй алмаҫһын. Һин бөгөндән үк үҙ иркеңдә, бында көсләп тотмайым. Балҡантауыңа ҡайтып, донъя көтөгөҙ. Һыуһылыу һинең менән булыр: ир ҡатын артынан йөрөмәй, ҡатын ир артынан йөрөй. Өйөрөмдән Аҡбуҙ толпарҙы ал. Донъя ҡороп ебәреү өсөн мал бирәм. Күлдән сығып, Балҡантауға етмәй тороп, артыңа әйләнеп ҡарама! — ти.

Заятүләк менән Һыуһылыу, Аҡбуҙ толпарға атланып, бик күп йылҡы эйәртеп, ер өҫтөнә сығалар һәм Балҡантауҙа донъя көтә башлайҙар.

Башҡорт мифологияһында, шулай уҡ мифология нигеҙендә тыуған эпик әҫәрҙәрҙә һыу эйәләренә ҡарата бер төрлө генә ҡараш булмауы, һыу аҫты донъяһын аңлатыуҙа төрлө ҡараш ятҡанлығы күренә. Һыу эйәләренә ҡарата боронғо башҡорттарҙа нигеҙҙә ике төрлө мөнәсәбәттең ныҡлы урын алғанлығы асыҡ. Береһе буйынса, һыу эйәләре, һыу аҫты донъяһы ер кешеләре өсөн ҡурҡыныслы дейеү, ен, аждаһаларҙан һәм уларҙың донъяһынан тора. Был ҡурҡыныслы, яуыз йәндәр йыш ҡына ер өҫтөнә сығалар һәм унда йәшәүсе кешеләргә ҡарата төрлө яуызлыҡтар ҡылалар. Күлдә йәшәүсе аждаһа, йыландар һыуға яҡын килеүсе хайуандарҙы, кешеләрҙе йоталар, сағалар. «Урал батыр» эпосында дейеү, аждаһалар кешеләрҙең, шулай уҡ күк аллаларының яуыз дошманы итеп һүрәтләнә, ә «Аҡбуҙат» эпик

ҡомартҡыһында һыу батшаһы дейеүҙәре, аждаһалары, ер өҫтөнә ваҡыт-ваҡыт сығып, кешеләргә һөжүм итәләр, ер ҡыҙҙарын урлайҙар, һәүбән батырҙың әсәһен ҡол итәләр. Хатта күк аллаһы Һомайҙың балаларын да әсир итәләр һәм ҡоллоҡта тоталар, күк толпары — Аҡбуҙатты урлайҙар. Тик был эпоста бөтә һыу аҫты донъяһы эйәләре лә гел кире образдар ғына түгел. Улар араһында ыңғай сифатлылары ла осрай. Һыу эйәһе Нәркәс — шундай образ.

Икенсе ҡараш буйынса, һыу эйәләре — изге йәндәр, уларҙың кешеләргә зыяны юҡ. Бындай һыу эйәләре йәки аллалары, күк аллалары кеүек үк, игелекле кешеләргә изгелек эшләйҙәр, уларҙы һәр төрлө хәүефтән һаҡлайҙар.

Боронғо башҡорттар һыу аҫты донъяһын үҙҙәренә билдәле бер ер өҫтө донъяһы һымаҡ күҙ алдына баҫтырғандар, һыу эйәләре тормошо ла кешеләрҙекенә оҡшаған, тип уйлағандар. Мәҫәлән, «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында һыу эйәләре күсмә тормош менән көн күрәләр, өйөр-өйөр йылҡы, һыйыр, ҡуй-һарыҡ көтәләр, күсмә халыҡ кеүек, кейеҙ тирмәләрҙә йәшәйҙәр. Һыу аҫтында ла, ерҙәге кеүек, иркен, киң яландар, урман-тауҙар, өйрәктәре, балыҡтары йөҙөп йөрөгән матур йылғалар, күлдәр бар. Һыуһылыу һөйгәне Заятүләкте көн дә иртәле-кисле башҡорттарҙың ҡәҙимге ризығы — һаумал ҡымыҙ, ҡорот, һалмалы аш, һарыҡ ите, төрлө ашамлыҡ, эсемлектәр менән һыйлай. Һыу аҫты донъяһына, уның бөтә байлығына дейеү, ендәр хужа. Улар араһында социаль тигеҙһеҙлек, синфи ҡатламдарға — ырыу аристократияһына һәм уларға буйһонған ябай ырыу ағзаларына бүленеү күренә. Ырыу ба-

шы, йәғни һыу батшаһы, ер өҫтөндәге ырыу бейе, хан кеүек, зиннәтле балаҫ-келәмдәр түшәлгән ҙур, матур аҡ тирмәлә йәшәй.

Һыу батшаһының улы, ҡыҙы бар. Һыу эйәләре яҡшы аттарға атланып, яурындарына, эйәр ҡаштарына ыласындар ултыртып йөрөйҙәр, кейек ҡоштарға, йәнлектәргә һунар итәләр, миҙгел-миҙгел ер өҫтөнә сығалар, кешеләрҙең тормошона ҡыҫылалар.

«Аҡбуҙат» ҡобайырында һыу эйәләре тормошон, һыу аҫты донъяһын һүрәтләүҙә ҡайһы бер халыҡтар тарихында булып үткән боронғо ҡол биләүселек ҡоролошона хас моменттарҙы һиҙемләргә мөмкин. Һыу эйәһе, йәғни һыу батшаһы Шүлгән төпһөҙ күлдә йәшәй. Уның вәзирҙәре, һарай хеҙмәтселәре, ерҙән урлап алып ҡайтҡан ҡолдары, уға буйһонған дейеүҙәре, күп башлы аждаһалары бар. Ул ер кешеләренә сапҡындар яһай, кешеләрҙе ҡоллай, күк эйәләренең ҡыҙҙарын урлай. Бер туҡтауһыҙ Урал батыр тоҡомдары менән көрәшә, Иҙел батырҙың улын төрлө байлыҡ, дан вәғәҙә итеп һатып ала һәм уны кешеләргә дошман яһай. Уның йәшәгән күле, һарайы хаҡында:

Шүлгән күле шундай ул:
Ҡанлы йәштәр аҡҡан һуң,
Бер урынға эркелеп,
Бара-тора бер килеп
Күҙ йәшенән бар булған.
Был һарайҙар һалынған
Тереләй һуйған һөйәктән;
Һарай тирә баҡсаһы,
Биҙәп торған сәскәһе
Һуғарылған ҡан менән [1], —

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 173-сө б.

тип әйтелә. Шулай итеп, һыу аҫты донъяһының, ундағы батшалыҡтың көслөнөң көсһөҙҙө иҙеүенә ҡоролғанлығы, тупаҫ яуыз көс өҫтөнлөк алған, ғәҙелһеҙ ил икәнлеге эпоста һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Һыу әйәһенең беренсе тибына ингән аждаһа, ен образдары башҡорт легендаларында киң таралған. Боронғо башҡорт мифологияһында, йөҙ йәшкә еткән йылан — аждаһа, мең йәшкә еткәне — юха була, тип аңлатыла.

Легендаларға ҡарағанда, аждаһалар, ғәҙәттә, һаҙлыҡта йәки күлдә йәшәгәндәр. Кешеләр аждаһа йәшәгән һаҙлыҡ йә күл янына барырға, унан һыу эсергә ҡурҡҡан. Йөҙ йәше тулып, аждаһаға әйләнгән йыланды һәр саҡ аҡ болот (күк әйәһе) килеп, күлдән күтәреп алып, мифик Ҡафтау артына илтеп ташлай. Аҡ болот аждаһаны күтәргән ваҡытта көслө дауыл сыға, ямғыр ҡойоно була, аждаһа, китмәҫкә теләп, ҡойроғо менән ағастарҙы йолҡоп, һындырып ала икән, тип уйлағандар. Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә хәҙерге көндә лә «Аждаһа алған», «Аждаһалы» тип йөрөтөлгән күл исемдәренең осрауы ана шул боронғо хөрәфәттең сағылышы булып тора.

Элекке ҡараш буйынса, юхаға әйләнгән йылан һылыу ҡыҙ һынына ла, егет ҡиәфәтенә лә керә алыр булған. Енле күлдә һыу инһәң, йәки кис унда һыуға барһаң, имеш, ен ҡағыла, ундай күлдән ситтәрәк йөрөү хәйерлерәк.

Ҡыҫҡаһы шул: боронғо халыҡ һыу әйәләрен һәм уларҙың донъяһын һүрәтләгәндә үҙҙәренә таныш реаль кешеләрҙең дөйөмләштерелгән образдарын, уларҙың донъяһын, шулай уҡ реаль тормош картиналарын, деталдәрен файҙаланғандар һәм мифик, фантастик һыу

аҫты донъяһына күсергәндәр. Һыу эйәһе һәм һыу культы халыҡ аңына нык һеңешкән булған һәм фольклорҙа художестволы сағылыш тапҡан. Изгелекле һыу эйәләре йыш ҡына ер кешеләренә, эпос батырына ярҙам итәләр, төрлө хәүефте иҫкәртәләр. Мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосында һыу ҡыҙы Нәркәс ер улы Һәүбән батырҙы Шүлгән батша, һыу аҫты батшалығы дейеүҙәре мәкеренән, яуызлығынан ҡурсалай, батырға хәүефтән ҡотолоу өсөн төрлө тылсымдар өйрәтә, дейеүҙәр тарафынан Урал батырҙың урланған мифик Аҡбуҙатын, алмас ҡылысын алырға ярҙам итә. Ул һыу атынан яҡшы тоҡомло йылҡы малы сығара. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпик ҡомартҡыһында һыу ҡыҙы Һыуһылыу ер улы Заятүләкте һәр төрлө хәүефтән һаҡлай, уға кәңәштәр бирә, һыу аҫты малын ер өҫтөнә сығара. Һыу батшаһы ер халҡын төрлө бәлә-ҡаза килеүҙән иҫкәртә, кешеләргә мал бирә, яҡшы тоҡом йылҡы үрсетергә булышлыҡ итә.

Элек башҡорттарҙа, изгелекле эйәләр кешеләргә һәр ваҡыт ярҙам итә, тигән ҡараш йәшәгән. Мәҫәлән, аҙбарҙа ҡышҡы һалҡында төндә һыйыр быҙаулағанда, аҙбар эйәһе йоҡлап ятҡан хужаны: «Тор, һыйырың быҙауланы», — тип уятыусан булған. Йәки: «Ни эшләп ятаһың, мунсаң яна!», «Келәтеңә ҡараҡтар төштө», «Йәш сабыйың сәсәй, ауыҙын юрған ҡаплаған» һ. б. тип өй эйәһе вайымһыҙ йоҡлап ятҡан хужаны иҫкәртә, имеш, тигән төрлө хөрәфәттәрҙе хәҙер ҙә ишетергә мөмкин.

Асылыгүл, Дим буйы башҡорттарының ышаныуҙарына ҡарағанда, Асылыгүлдең батшаһы — иң оло эйәһе илгә ҙур афәт, бәлә-ҡаза

килеүен башҡорттарға алдан иҫкәртеп ҡуйыр булған. Бәлә-ҡаза килер алдынан уның һыуы нык ташып, тирә-яҡты баҫыр булған.

Был хаҡта Владимир Далдең Дим буйы башҡорттарынан яҙып алған мәғлүмәттәре, риүәйәттәре ҡыҙыҡлы.

«*Асылы* йәки *Асыулы,* — тип яҙа ғалим,— тәржемә итһәң, *асыҡ, асылған, төпһөҙ,* йә, дөрөҫөрәге, *асыулы* булыуы ихтимал. Ысынлап та уның һыуы, күҙгә күренеп торған сәбәп булмай тороп та, төрлө ваҡытта төрлөсә арта һәм кәмей. Башҡорттар беренсеһен берәй афәт килер алдынан була, тип ышаналар. Улар һиңә 1772 йылдан 1860 йылға тиклемге ваҡиғаларҙы, Емельян Пугачевтан алып Польшалағы баш күтәреүгә тиклем генә түгел, хатта бер генә һуғышты ла, урындағы халыҡ йәки дөйөм империя өсөн дөйөм бәлә-ҡазаны ла онотмай, бармаҡ менән һанап сығып ҡына ҡалмай, бик боронғо дәүер ваҡиғаларына ла инеп китәләр... [1] — ти. Асылыгүл бәлә-ҡазаны алдан иҫкәртә, тигән һүҙҙәрҙе Дим буйы башҡорттары араһында хәҙерге көндә лә ишетергә мөмкин.

Асылыгүлдең ташыуын икенсе төрлө аңлатыу ҙа бар. Уның буйынса, һыу батшаһы ер кешеләренең берәй эшенә йә яман ҡылығына асыуланһа, күл ташып, тирә-яҡты баҫа икән. Мәҫәлән, В. И. Даль яҙып алған вариантта Һыуһылыу Заятүләкте, ата-әсәһенә һәм ағаларына күрһәтмәй, үҙ тирмәһендә йәшереп тота. Әммә берҙән-бер көн Һыуһылыуҙың ҡара атҡа атланған, ҡара кейемле ағаһы Заятүләктең һыу аҫты батшалығында уның һеңлеһе

---

[1] Даль В. И. Повести и рассказы, 21-се б.

менән йәшәп ятыуын белеп ҡала һәм ҡашын төйөп асыулана. Уның асыуланыуы була, Асылыгүл, бәлә-ҡаза килерен белдереп, ҡайнап ҡабара, таша башлай [1].

Әйтергә кәрәк, һыу, һыу эйәһе культының башҡорттарҙа киң таралған булыуын хәҙергә көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған йолалар буйынса ла белергә мөмкин. Элек башҡорттар ят кешенең ҡайҙан икәнен белергә теләһә, уның ҡайһы һыуҙы һыулағанын һорап белгәндәр.

Йылға, күл эйәләре көндөҙ ял итә, ә төндә улар уйнайҙар, кәйеф-сафа ҡоралар, һыу өҫтөнә сығып, таш өҫтәренә ултырып, сәстәрен тарайҙар, биҙәнәләр, тип уйлағандар. Шуның өсөн төндә һыуға барып, һыу эйәләрен бимазалап йөрөү ныҡлы тыйылмаһа ла, хуп күрелмәгән.

Йылғаны, күлде бысратыу, болғатыу, әрләү тыйылған. Шишмәләрҙе, йылға баштарын бысраныуҙан, мал тапауҙан һаҡлау, уны бурап ҡуйыу, мал эсеү өсөн улаҡтар яһау изгелекле, сауаплы эш, тип ҡаралған. Үҙҙәре изге һанаған йылға, шишмәләргә кешеләр хөрмәт күрһәтеү, ризаландырыу, уның сауабын алыу өсөн бүләк итеп көмөш тәңкәләр ташлаған, һыу ситендә үҫкән тал ботаҡтарына төрлө таҫма, сепрәктәр таҡҡандар. Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә «Әүлиә ҡотоғо», «Әүлиә шишмәһе» аталып йөрөгән һәм изгеләштерелгән шишмә, инештәр был фекергә миҫал була ала. Мәҫәлән, Учалы районы Әүеш тауы ситендәге Әүлиә ҡотоғо, Бөрйән районы Баҙал тауы башындағы «Хәҙрәт ҡотоғо», Хәйбулла районы Әбеш ауылы янындағы «Әүлиә ҡото-

[1] Даль В. И. Повести и рассказы, 26-сы б.

ғо» ана шундай изгеләштерелгән шишмә, һыу сығанаҡтары рәтенә инә.

Башҡорт халҡында бер ауыл ҡыҙы икенсе ауылға килен булып төшкәндә уға һыу күрһәтеү, һыу башлау кеүек боронғо йола хәҙерге көнгә тиклем һаҡланып килә. Ҡейәү егеттең ҡыҙ туғандары махсус рәүештә йәш килендә үҙҙәре эскән һыу буйына алып килгәндәр. Йәш килен, ғәҙәт буйынса, һыуҙы ауыҙ иткән, битен йыуған, һыулы ҡулы менән сәс толомдарын, ҡашын һыйпаған, изге теләктәр теләп, шул һыуҙы эсеп йәшәргә ризалығын белдереп, бүләк итеп һыуға көмөш тәңкә һалған.

Һыу эйәһен бүләк биреп ризаландырыу, унан ярҙам һорау күренешен боронғо башҡорттарҙың ямғыр теләү йолаһында асыҡ күрергә мөмкин. Оҙайлы ҡоролоҡ йылдарында ауыл халҡы, өй беренсә ризыҡ йыйып, йылға буйына йәки тау башына менеп, йыйын үткәреп, ямғыр теләгән, доға ҡылған. Ямғыр теләү йолаһында бөтә ауыл халҡы — йәштәр ҙә, ололар ҙа, ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ҡатнашыр булған. Йоланың аҙағы һыу һибешеү, һыуға һалыу менән тамамланған. Ҡешеләр бер-береһен кейеме-ние менән бергә һыуға ташлағандар, күнәктәр менән һыу һибешкәндәр. Ошо йоланы үтәгәндән һуң ямғыр яуырға тейеш булған. Ҡешеләрҙе һыуға ташлау бик боронғо дәүерҙә һыу эйәләренә кеше ҡорбаны биреү йолаһын имитациялауға ҡайтып ҡала. Шуныһы характерлы, һыуға ташланған, шулай уҡ һыу һибешеүҙә һыуланып бөткән кешеләр үпкәләшергә тейеш түгел [1].

---

[1] 1972 йылда Башҡортостандың Дәүләкән районы Иҫке Мерәҫ ауылында Ғәйнуллин Фәтхулла Ғәйфулла улынан (1883 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алды.

һыу эйәһе культы һалсылар, ҡыуғынсылар араһында киң таралған булған. Әүәл һалсылар ҡыуғынға йәки һалға китер алдынан именлек теләп доға ҡылыр, хәйер таратыр булғандар. Ауылдың уҡымышлы оло кешеһе, йә булмаһа һалсының нәҫел-нәсәбенән булған берәй ҡарты уларҙы доға ҡылып, фатиха биреп оҙатып ҡалған. Шул рәүешле һалсы, ҡыуғынсы һыу хәтеренән һаҡланырға теләгән.

Йылға, шишмә, күл, ғөмүмән, һыу культының башҡорт халҡында ныҡ таралған булыуын музыкаль фольклор материалдары ла раҫлай. Мәҫәлән, башҡорттар йәшәгән ерҙә йыр, көй менән данланмаған, йырланмаған бер генә йылға, шишмә, күл дә юҡ тип әйтерлек. Ағиҙел, Яйыҡ, Һаҡмар, Әй, Йөрүҙән, Дим, Ҡариҙел, Инйәр, Ҡәмәлек һ. б. йылғалар, Арғужа, Ҡандра кеүек күлдәр хаҡында башҡорттар бөтмәҫ-төкәнмәҫ маҡтау, данлау йырҙары сығарғандар. Был йырҙар башҡорт халҡының йыр-көй классикаһында ныҡлы урын алған. Хатта «Йәмле Ағиҙел» йыры боронғо мәшһүр «Урал батыр» эпосы сюжетында нығынып ҡалған.

Үҙе эскән һыуҙы маҡтау, һыу эйәһен данлау, уның изгелекле булыуын теләү боронғо йырҙарҙың йөкмәткеһендә мөһим урын тота. Боронғо кешеләр һыу эйәләре менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙы хуп күргәндәр. Һыу эйәләре кис ял иткән, уйнаған, кәйеф-сафа ҡорған мәлдә һыу алырға барыу, һыуға таш ташлау тыйылған. Әгәр ҙә кеше, сараһыҙҙан төндә һыуға барһа йәки һыуҙы кисеп сыҡһа, ул тамаҡ ҡырып, йә булмаһа әкрен генә көйләп тауыш биргән. Шуның менән ул һыу эйәһенә үҙенең килеүен аңғартҡан. Үҙен бимазалаған

«яман уйлы» кешеләрҙе һыу эйәһе, төрлө ҡиәфәткә инеп (айыу, йә булмаһа бер ҡурҡыныс йән эйәһе булып) ҡурҡытып, ҡыуып ебәрер булған. Изгелекле, саф күңелле кешеләргә иһә һыу эйәһе лә изгелекле булған һәм һәр төрлө ярҙам күрһәткән, бүләктәр биргән, тиелә. Алда әйтелгәнсә, «Аҡбуҙат» эпосында Һәүбән батырға һыу ҡыҙы Нәркәс алмас ҡылыс, Аҡбуҙат, өйөр-өйөр йылҡы малын бүләк итә, ер улына (Һәүбәнгә) кейәүгә сыға. Заятүләк батыр һыу эйәһенән уның ҡыҙы Һыуһылыуҙы ала, өйөр-өйөр малдарын алып ер өҫтөнә сыға.

Әйтергә кәрәк, донъя фольклорында геройҙың һыу аҫты донъяһына сәйәхәте, һыу батшаһынан кәләш һәм бүләктәр алып, тыуған иленә ҡайтыуы — киң таралған мотив. Миҫалға рус фольклорында киң билдәле «Садко» былинаһын алырға мөмкин. Һыу аҫты батшалығына ҡорбан рәүешендә барған сәүҙәгәр Садко үҙенең гуслелә матур уйнауы, ябайлығы, бер ҡатлылығы менән батшаға оҡшай. Уның мәрхәмәтен таба, ҡыҙына өйләнә һәм тыуған иле— Новгородҡа ҡайтыуга ирешә. Грек мифологияһында бик популяр һаналған диңгеҙ батшаһы Посейдон һәм уның геройҙарға булған мөнәсәбәтендә лә шундай уҡ деталдәрҙе осратырға мөмкин. Донъяның төрлө халыҡтарында һыу эйәләре, һыу батшалары образын һүрәтләүҙә уртаҡ, оҡшаш моменттар бар. Мәҫәлән, «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпик ҡомартҡыларындағы һыу эйәләре һәм «Садко»лағы диңгеҙ батшаһы, грек мифологияһындағы диңгеҙ аллаһы Посейдон реаль тормоштағы кеше — феодаль кенәз йәки батша образында һүрәтләнәләр. Асылыгүл батшаһы асыу-

ланғанда йә шатланғанда күл нисек таша, тулҡынлана торған булһа, «Садко»лағы диңгеҙ батшаһы, шулай уҡ Посейдон алла асыуланғанда йәки шатланғанда ла диңгеҙ шулай тулҡынланыусан, урғып ҡайнаусан итеп һүрәтләнә.

Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә диңгеҙ эйәһе йәки һыу батшаһы образы, һыу стихияһы күсөп һүрәтләү йыш осрай. Мәҫәлән, «Ала ҡарға» әкиәтендә һыу эйәһе батыр ултырған карапты туҡтата, кеше ҡорбаны көтә [1].

Боронғо грек, рим диңгеҙселәре афәткә осраһалар, унан ҡотолоу өсөн диңгеҙ аллаһы Посейдонға кеше ҡорбандары биргәндәр, галералағы ҡолдарҙы һыуға ырғытҡандар. Бына ошоға оҡшаш ҡорбан килтереү йолаһы, әкиәттәрҙән тыш, башҡорт эпосында ла сағылмай ҡалмаған. Мәҫәлән, «Урал батыр» ҡобайырындағы Ҡатил батшалығында әсиргә алынған төрлө ырыу кешеләрен, ҡулы бәйле ирҙәрҙе һыуға ташлауҙары һүрәтләнә.

Шулай уҡ:

Һәр йыл батша тыуған көн
Ата-әсәһе хаҡы өсөн,
Батша тыуғас, һыу алып,
Йыуған ҡойоһо өсөн,
Ҡорбан бирер йола бар [2], —

тип әйтелә ҡобайырҙа.

Шуныһы характерлы, боронғо ҡаращты сағылдырған эпик әҫәрҙәрҙә герой эскерһеҙлеге, яҡшылыҡ эшләүе менән һыу эйәһенең үҙенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәтен яулаған, ярҙамын

[1] Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том. Өфө, 1959, 79—82-се б.
[2] БХИ. Эпос, 1972, 51-се б.

күргән. Ул һыу эйәһенә бүләк, ҡорбан биргән. Һыу эйәһенә булған мөнәсәбәт һуңғараҡ, кеше үҙен көслөрәк һиҙә, тәбиғәт көстәренә яраҡлашып йәшәй башлағас ҡына, үҙгәрә. Кешеләрҙәге ҡараш үҙгәреше фольклорға ла үтеп инә. Бигерәк тә башҡорт халҡының әкиәт жанрында батыр һыу эйәһен тылсым көсө менән еңә («Ала ҡарға»), йә булмаһа хәйлә юлы менән уның байлығын ҡулға төшөрә («Әбйәлил»)[1]. Хатта батыр һыу эйәһен юҡ итә, уның донъяһын тар-мар ҡыла, һыуһыҙлыҡтан интеккән халыҡҡа һыу бирә («Айыуғолаҡ»)[2]. Әлбиттә, кеше ихтыярына, көсөнә буйһонмаған һыу эйәһен еңергә ынтылыу теләге кешеләрҙә элек-электән йәшәһә лә, һуңғы дәүерҙәрҙә, кеше үҙен тәбиғәт көстәренән юғарыраҡ тоя башлағас ҡына, ошондай оптимистик мотивтарҙың тыуыуына тәбиғи мөмкинселектәр асылған.

Юл ыңғайында башҡорт фольклорында, шул иҫәптән эпос жанрында ла, һыуһыҙлыҡтан интегеү мотивының ҙур ғына урын алыуы хаҡында бер аҙ туҡталып үтеү кәрәк булыр.

Борон Урал буйында, шулай уҡ башҡорттар йәшәгән башҡа ерҙәрҙә һыуға ҡытлыҡ булмаған. Көньяҡ Уралда иркен далалары, бай урмандары, мул һыулы йылғалары, күлдәре, шишмәләре булған халыҡтың фольклорында һыуһыҙлыҡ мотивтары булырға тейеш түгел ине кеүек. Әммә башҡорт әкиәттәрендә һәм эпик ҡомартҡыларында халыҡтың һыу эҙләүен, һыу өсөн көрәшеүен сағылдырған байтаҡ әҫәрҙәрҙе, мотивтарҙы күрергә мөмкин.

---

[1] БХИ, 2-се том, 1959, 73—78, 79—82-се б.
[2] БХИ. Әкиәттәр. 3-сө китап, 1978, 143—150-се б.

Мәҫәлән, «Аҡъял батыр» әкиәтендә Аҡъял батыр, һыу эйәһен үлтереп, оҙаҡ йылдар һыуға зар-интизар булған, сарсаған халыҡҡа һыу бирә [1]. Был әкиәттә һыу кеше өсөн иң ҡәҙерле байлыҡ итеп һүрәтләнә. Мәшһүр «Урал батыр» ҡобайырында ла Урал батырҙың улдары һыу етмәүҙән интеккән халыҡҡа һыу табыу, йылға йырыу менән мәшғүлдәр [2].

Урта Азия, сүл далаларында йәшәүсе халыҡтар ижадына хас һыуһыҙлыҡ мотивы башҡорт фольклорына ҡайҙан килеп ингән һуң? Был һорауға яуапты башҡорт халҡының этник тарихын өйрәнеү аша ғына табырға мөмкин. Билдәле булыуынса, башҡорт халҡының ойошоуында мөһим роль уйнаған ҡайһы бер ырыу, ҡәбиләләр яңы эра башында хәҙерге Үзбәкстан, Төрөкмәнстан тирәләрендә, Сыр-Дарья, Аму-Дарья буйҙарында йәшәгәндәр. Тарихи этнографияны өйрәнеүсе ғалимдар хәҙерге көндә лә Аму-Дарьяның үрге ағымында, Термез ҡалаһы янында, Башҡорт тауҙары тип аталған тауҙар, ә Памир үҙәгендә — Башҡорт тигән ер исеме һаҡланып ҡалыуын был фекерҙе дәлилләүсе бер факт тип ҡарайҙар [3]. Мәҫәлән, иң ҙур башҡорт ҡәбиләләренең береһе булған бөрйәндәрҙең сығышы Урта Азия, Иран менән тығыҙ бәйләнгән.

Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, бөрйәндәр халыҡ кимәлендәге ҙур ҡәбилә булған. Ғәрәп сығанаҡтары буйынса, бөрйәндәр яңы эраның V быуатында уҡ билдәле булғандар, ә VII быуатта улар, Хорезм менән союздаш бу-

---

[1] БХИ, 2-се том, 1959, 25—26-сы б.

[2] БХИ. Эпос, 1972, 134-се б.

[3] Кузеев Р. Г. Историческая этнография башкирского народа. Уфа, 1978, 162-се б.

лып, гәрәптәргә ҡаршы көрәшкәндәр [1]. Урта Азияла бөрйәндәрҙең ҙур көс булыуын ғәрәптәр танырға мәжбүр булғандар. Бөрйәндәрҙең ҡасандыр Һиндостанды белгән булыуҙары ла бик ихтимал. Мәҫәлән, бөрйән ырыуы сәсәндәре Ғәбит Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып алынған «Урал батыр» эпосы вариантында күл буйында үҫкән томбойоҡтарҙың ап-аҡ сәскәһе тик ағасы сәскәһе менән сағыштырыла.

Шүлгән барып сыҡҡан бер ергә,
Ос(о)раған бер күлгә,
Ситен ҡуға уратҡан,
Томбойоҡтар япырапып,
Тик агастай сәскә атҡан [2], —

тип әйтелә әҫәрҙә.

Билдәле булыуынса, тик — Һиндостан, Ява утрауының дымлы, һаҙмат урындарында үҫә торған, аҡ сәскә атыусы ағас.

Башҡорттарҙың һинд культураһы менән танышлығын башҡа фольклор материалдарында ла күрергә мөмкин. Мәҫәлән, һинд халыҡтары эпосында киң таралған япа-яңғыҙ мәмерйәлә, тау ҡыҫаландарында йәшәүсе изге алла образы менән «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә» эпик ҡомартҡыларындағы Мәскәй образы араһында айырма юҡ тиерлек. Шулай уҡ башҡорттар араһында «Кәлилә вә Димнә» исемле һинд фольклоры әҫәре мотивтары ла киң таралған. Былар элекке ниндәйҙер бәйләнеш аша ингән деталдәр булырға тейеш.

---

[1] Киекбаев Ж. Г. Вопросы башкирской топонимики. — Ученые записки БГПИ им. К. А. Тимирязева, вып. 8. Уфа, 1956, 233-сө б.

[2] БХИ. Эпос, 1972, 72-се б.

Төрки телле бөрйән ырыуы хатта боронғо Монголияла ла билдәле булған. Мәçәлән, кенәз Тимучиндың (атаһы яғынан) бурджигин (бөрйән) ырыуынан сыҡҡанлығы билдәле. Тимучин ошо бурджигиндарҙан нәүкәр (дружина) төҙөгән һәм уларҙың ярҙамы менән тәхет яулап алған. 1206 йылда үткәрелгән бөйөк ҡоролтайҙан һуң ул үҙен «монгол» исемен алған халыҡтың ханы Сыңғыҙ тип иғлан иткән [1].

Бөрйән ҡәбиләһенең борон Иран территорияһында йәшәгәнлеген хәҙерге көндә лә һаҡланып ҡалған топонимик атамалар раçлай. Мәçәлән, Ирандың үҙәк өлөшөндәге бер ҡала Бирдженд (Бурджинд) исемен йөрөтә.

Тимәк, беҙгә башҡорт фольклорындағы һыу ҡытлығы мотивтарын ана шул Урта Азия, Иран эçелектәрен, һыуһыҙ ҡом сүллектәрен үҙҙәре күреп татыған бөрйән һәм башҡа ырыуҙарҙың алып килеүе бик мөмкин.

Этник сығышы яғынан күп төрлө ырыу-ҡәбиләләрҙән торған башҡорт халҡының фольклорында һыуһыҙлыҡтан интегеү, һыу өсөн көрәш мотивтарының һаҡланып ҡалыуы — тәбиғи күренеш. Һыу (диңгеҙ, күл, йылға, шишмә, һаҙлыҡ) эйәләре хаҡында барған күҙәтеүҙе дөйөмләштереп, шуны әйтергә мөмкин: башҡорт халҡының һыу эйәләренә ҡарашы бер төрлө генә булмаған. Боронғораҡ дәүерҙә, кешеләр тәбиғәт көстәренә ҡаршы көрәштә үҙҙәрен көсһөҙ тойған мәлдә, һыу эйәһенән ҡурҡыу, уның мәрхәмәтен изгелек эшләү, ҡорбан,

---

[1] Бичурин (Иакинф) Н. Я. Собрание сведений по исторической географии по восточной и срединной Азии. / Составители: Л. Н. Гумилев, М. Ф. Хван. Чебоксары, 1960, 669—670-се б.

бүләктәр биреү юлы менән яуларға тырышыу ҙур урын алғанлығы күренә.

Артабан халыҡтың экономик хәле еңеләйә, тәбиғәт алдында көсһеҙлегө кәмей, аңы үҫешә барған һайын уның донъяға мөнәсәбәте лә үҙгәреш кисерә. Һыу культы, һыу эйәһен изгеләштереү, унан ҡурҡыу бермә-бер кәмей. Был хәл фольклорҙа ла сағылмай ҡалмай. Һуңғыраҡ осорҙа тыуған әкиәттәрҙә, эпос әҫәрҙәрендә элек илаһи көс һаналған һыу эйәләрен хәйлә йәки көс менән алдарға һәм үлтерергә мөмкин, тигән ҡараш сағыла башлай.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» — башҡорт халҡының боронғо уникаль эпик ҡомартҡыһы. Унда мауыҡтырғыс сюжет, кешеләр һәм һыу эйәләре менән бергә көнкүреш деталдәре, күсмә тормош, ырыу ҡоролошо менән йәшәгән халыҡтың ҡараш системаһы асыҡ сағылыш алған. Боронғо ҡараш системаһына, әле беҙ ҡарап үткән һыу, һыу эйәләре культынан башҡа, мал, тау культы һәм халыҡтың уларға булған мөнәсәбәтен индерергә мөмкин.

Башҡорттарҙа элекке дәүерҙәрҙә тауҙы изгеләштереү, «тау эйәһе» бар тип ҡарау һәм уға табыныу күренеше булған, тип уйларға кәрәк. Һәр ырыуҙың, һәр ауылдың йолалар үтәй, йыйындар үткәрә торған изге тауҙары булыуын раҫлаусы мәғлүмәттәрҙе хәҙерге көндә лә Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә ишетергә, күрергә мөмкин. Мәҫәлән, ҡара табын ырыуы башҡорттарының Әүеш тауы (Учалы районы), меңдәрҙең — Әүлиә тауы, Дүрткел тауы (Әлшәй районы), тамьяндарҙың — Рәз, Ҡағыташ тауҙары (Белорет районы), юрматыларҙың — Һөйөрсәк (Мәләүез, Ишембай райондары), бөрйәндәрҙең — Атайсал, Бәйет тау-

ҙары (Бөрйән районы), ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙың — Ҡурыуҙы (Бөрйән районы) тауҙары һ. б. элек изге тауҙар һаналғандар [1].

Тюрколог Л. Н. Гумилев, тауҙарҙы йәнләндереп ҡабул итеү, изгеләштереү боронғо төрки халыҡтары тормошонда ла булған, тип билдәләй [2].

Себер, Алтай халыҡтарының этнографияһы белгесе Л. П. Потапов тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, тауҙарҙы, айырым урмандарҙы изгеләштереү алтайҙарҙа киң таралған булған. Л. П. Потапов элек һәр алтай ырыуының билдәле тауы, урманы, ҡыуаҡлыҡтары булыуын, уларҙың ошо тау, урман йәнлектәрен, байлығын үҙҙәренең милке һанағанлыҡтарын әйтә. Һәр ырыуың бөтә ырыу ағзаларын туйҙырған «Алтайы» булған, тип яҙа автор [3].

Ошондай уҡ күренеште «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында ла осратырға мөмкин. Һыу аҫты донъяһында йәшәргә мәжбүр булған Заятүләк ер өҫтөндәге һәр бер тауҙы түгел, ә үҙ ырыуының изге тауын һағына. Ул үҙенең ырыу тауын — Балҡанды, уның байлыҡтарын яҡшы белә һәм уны данлап йырлай. Балҡан уның өсөн ябай тау түгел, ә изге тау, һыу батшаһы бойороғо буйынса ендәр тарафынан килтерелгән тауҙың Балҡантау түгел икәнен аңғартып һәм үҙенең тауын маҡтап, Заятүләк былай ти:

— Тауҙы тауға оҡшатып,
Тимер менән ҡоршатып,

---

[1] Авторҙың ялан яҙмаларынан.

[2] Гумилев Л. Н. Древние тюрки. М.: Наука, 1967, 80-се б.

[3] Потапов Л. П. Культ гор на Алтае. — «Советская этнография», 1946, № 2.

Алып килгән тауығыҙ, —
Балҡантауым был түгел.
Балҡантауҙың бейеге,
Бөйөрөндә уйнар кейеге;
Һыулап ҡаҡҡан ҡаҙыҡтай
Һыуыры күп Балҡантау;
Айыры ҡолаҡ, йылтаң күҙ,
Бүреһе күп Балҡантау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Балҡантау;
Оя яһар, түл йәйер
Ҡоштары күп Балҡантау;
Майлап һалған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау;
Йәйеп ҡуйған бәрхәттәй
Урманы күп Балҡантау... [1]

Шулай итеп, ғалим Л. П. Потаповтың алтай ырыуҙарында элек тау, урман культы булыуы хаҡында әйткән фекере башҡорт ырыуҙары тормошонда булған һәм халыҡ ижадында сағылған тау, урман культына ҡарата ла тура килә. Был хаҡта ҡайһы бер тарихи мәғлүмәттәр ҙә һаҡланған. Мәҫәлән, Ибн Фаҙлан башҡорттарҙың ун ике аллаға (эйәгә) табыныуҙарын һәм шулар эсенән «ағастар»ҙың да (урмандың) аллаһы барлығын яҙып ҡалдырған [2].

Үҙәк Азияла, Алтайҙа йәшәгән боронғо төрки халыҡтарҙа һәр ырыуҙың һунарсылыҡ итеү, мал көтөү өсөн билдәле урман-тауҙары, ерһыуы булған. Был хәл башҡорттар өсөн дә традицион, ҡәҙимге күренеш. Һәр ырыуҙың айырым ер-һыуы булған кеүек, уның айырым ерһыу аллаһы (эйәһе) лә булған. Ул икенсе ырыу

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 193—194-се б.
[2] Путешествие Ибн-Фадлана на Волгу, 66-сы б.

кешеләре өсөн ҡурҡынысլы көс һаналған — ерҙе ихтирам итмәгән, уны мыҫҡыллаған кешене ер йотоп йәки убып алып, һәләк итә, тип уйлағандар. Шуның өсөн дә «һине ер йотһон», «ер йотҡоро», «ырыу-тоҡомоңдо ер йотһон», «өйөңдө, донъяңды ер упһын», «һыу йотһон», «һыу алһын» кеүек борондан ҡалған ҡәһәр-ҡарғыштар халыҡ хәтерендә әле лә һаҡлана [1].

Ҡобайырҙағы Заятүләк үҙенең эшмәкәрлегендә ырыу ҡоролошо традицияларына таяна, үҙ ырыуының вәкиле булып сығыш яһай. Сит ырыу йолалары, тормошо Заятүләк өсөн ят күренә. Ҡобайырҙа һыу аҫты донъяһын һүрәтләүҙә халыҡтың боронғо аң-ҡарашы, фантастика элементтары күберәк булһа, ер тормошон һүрәтләүҙә реаль тормош картиналары, сағыштырмаса һуңғы осорға хас тормош күренештәре өҫтөнлөк ала. Әҫәрҙән күренеүенсә, ундағы ваҡиғалар ырыу ҡоролошо традициялары емерелеп, социаль тигеҙһеҙлеккә нигеҙләнгән феодализм ҡоролошоноң башланыу дәүеренә тура килә.

Феодаль йәмғиәт иерархияһы шунан ғибарәт: йәмғиәттең иң юғары баҫҡысында хан тора, уның вәзирҙәре, ғәскәре, хеҙмәтселәре, һунар өсөн ыласын, бөркөт өйрәтеүсе ҡошсолары бар. Хан тәхете нәҫелдән нәҫелгә мираҫ булып күсә. Тәхет өсөн көрәш хан балалары араһында туҡтауһыҙ бара. Ҡүп кенә яҙмаларҙа Сәмәр хан үлгәндән һуң уның алты улы тәхет өсөн бер-береһен ҡырып бөтөрәләр. Һәм тәхеткә хандың кинйә улы Заятүләк ултыра. Ул сит халыҡтар менән мөнәсәбәтте яҡшырта, ханлыҡ эсендә талаш-тартышты бөтөрә. Зая-

[1] Авторҙың ялан яҙмаларынан.

түләк ырыу традицияларын тоғро үтәүсе һәйбәт хан итеп һүрәтләнә.

Заятүләк бер саҡ, ил эштәре менән мауығып, ҡырҡ көндә килеп етеү шарты менән ҡалдырып киткән Һыуһылыуҙы ла онотоп китә. Заятүләк Балҡантауға килеп еткәндә, ҡырҡ беренсе көн башланған була. Ул Һыуһылыуҙы үле килеш таба. Заятүләк үкенә, әммә һуң була. Ул, икеһенә бер ҡәбер соҡоро ҡаҙа ла, үҙен үҙе сәнсеп үлтерә. Шулай итеп, герой саф, керһеҙ мөхәббәт хаҡына ҡорбан була.

Заятүләк менән Һыуһылыуҙы, йола буйынса изге тау түбәһенә мендереп, таштан уба яһап күмәләр. Ә ырыуҙың абруйлы кешеләрен изге һаналған тау башына күмеү йолаһы тау культы менән тығыҙ бәйләнгән.

Һыуһылыу менән Заятүләктең саф мөхәббәтен һүрәтләүгә эпоста ҙур урын бирелә. Сәсәндәр халыҡтың саф мөхәббәт тураһындағы идеалын бына ошо ике йәш йөрәктең мөхәббәте аша сағыу поэтик буяуҙар менән бирергә тырышҡандар. «Заятүләк менән Һыуһылыу» — мөхәббәт темаһын күтәреүсе лиро-эпик ҡомартҡыларҙың гүзәл өлгөләренән береһе, тип әйтергә хаҡлыбыҙ.

Тәрән лирика менән һуғарылған был эпик әҫәр хәҙерге көндә лә башҡорт халҡында ҙур ихтирам менән файҙалана. Халыҡ араһында эпос сюжетына, уның образдарына бәйле бик күп легендалар, топонимик риүәйәттәр таралған. Башҡортостандың көнбайышында урынлашҡан Асылыгүл янында эпоста һүрәтләнгән Ҡарағас тауы, Һыуһылыу ташы бар, һәм улар хаҡында әле лә легендалар йәшәй. Балҡантау башында ҡәберлектәрҙең дә булыуы элек-

керәк заманда эпоста һүрәтләнгән ваҡиғаларға ышаныуҙы көсәйткән.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» — күләм яғынан ҙур булмаһа ла, башҡорт халҡының тормошон, йолаларын, идея-эстетик ҡараштарын, идеалдарын киң сағылдырған эпик ҡомартҡы.

Башҡорт халҡының эпик мираҫында хайуандарға, мал культына бәйле ҡомартҡыларҙың киң урын алыуы хаҡында юғарыла юлайҡан әйтеп кителгәйне инде. «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» — ана шундайҙарға инә. Был ҡомартҡыларҙа һүрәтләнгән ваҡиғалар ҙур территорияла — Шүлгән күле, Урал тауҙары, Каспий диңгеҙе буйҙарында, Көньяҡ Уралға яҡын киң далаларҙа бара.

Хайуандар хаҡындағы эпик әҫәрҙәрҙең дөйөм бер уртаҡлығы бар: һәр әҫәрҙә лә күсмә халыҡ тормошонда мөһим роль уйнаған йылҡы, һыйыр малы, бөтә өйөр, көтөү ҡотон үҙендә туплаған, ырыуҙың бәхет-ырыҫы символы булған өлөшлө малдар һүрәтләнә һәм уларға дан йырлана. Йылҡы йәки һыйыр малы актив образдар булып әҫәрҙең башынан аҙағына тиклем ҡатнаша. Мал образдары хатта иң актив, төп образдар рәтенә инәләр.

Башҡорт фольклорында «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» эпик әҫәрҙәренән тыш, ошо уҡ исемде йөрөткән, үҙ көйө булған йырҙар, риүәйәттәр халыҡ араһында киң таралған. «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» йырҙары башҡорт халҡының музыка культураһының алтын фондын тәшкил итәләр. Был йырҙар заманында әлеге эпик әҫәрҙәрҙең органик өлөшө, шиғри киҫәктәре булып, аҙаҡ йыр рәүешендә айырымланып, үҙ аллы жанрға әйләнеп киткән булырға тейеш.

Йылҡы культын художестволы сағылдырған эпик әҫәрҙәр араһында «Аҡһаҡ ҡола» мөһим урын биләй. Был эпик ҡомартҡы нигеҙҙә Башҡортостандың көньяғында, көньяҡ-көнсығышында, шулай уҡ хәҙерге Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе башҡорттар араһында киң таралған. Хәҙерге көндә билдәле булған егерменән ашыу варианттың барыһы ла шул тарафта йәшәгән башҡорттарҙан яҙып алынған.

«Аҡһаҡ ҡола», боронғо эпос булыуына ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарға тиклем иғтибар үҙәгенән ситтә ҡала килде. Бөйөк Октябрь революцияһына ҡәҙәр уның тик бер генә тапҡыр яҙып алынғанлығы мәғлүм. М. Буранғолов 1907 йылда уны «Аҡһаҡ ҡола тураһында әкиәт» исеме менән элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосында (хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Үрге Ильяс ауылы) Хәсән Буранғоловтан яҙып алған [1]. М. Буранғолов уны 1938 йылғы баҫмаға ла әҙерләгән булған, әммә был яҙма үҙ ваҡытында донъя күрмәй ҡалған. Беҙгә билдәле булған барлыҡ башҡа варианттар Октябрь революцияһынан һуң яҙып алынғандар. Эпостың шиғри киҫәктәре көй ноталары менән бергә башҡорт халыҡ йырҙары йыйынтыҡтарында баҫылды [2].

«Аҡһаҡ ҡола»ның беренсе ғилми баҫмаһы 1972 йылда тормошҡа ашырылды. Был әҫәрҙең үҙенсәлекле дүрт варианты күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады»нда донъя күрҙе [3].

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/218, 133—136-сы б.

[2] Лебединский Л. Н. Башкирские народные песни и наигрыши. М., 1965, 173-сө б., № 38; Башҡорт халыҡ йырҙары. Өфө, 1954, 175-се б., № 86.

[3] БХИ. Эпос, 1972, 223—243-сө б.

1972 йылғы баҫма — «Аҡһаҡ ҡола» эпосының тулы килеш сыҡҡан тәүге баҫмаһы. Ошо ҡобайырҙың 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман ауылында Ғибадулла сәсән Агишовтан Ә. Н. Ҡирәев тарафынан яҙып алынған варианты икенсе тапҡыр 1977 йылда рус телендә Мәскәүҙә сыҡҡан йыйынтыҡҡа индерелде[1]. Быларҙан тыш, Өфөлә «Аҡһаҡ ҡола» эпосының рус телендә әҙәби тәржемәһе баҫылып сыҡты[2].

Был үҙенсәлекле эпик ҡомартҡыға 1960-сы йылдар башында Ҡирәй Мәргән ныҡлап иғтибар итте. Ул «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» монографияһында «Аҡһаҡ ҡола» әҫәрен тикшерсүгә айырым бүлексә бирҙе[3]. Автор унда халыҡ араһында йырланып та, һөйләнеп тә йөрөтөлгән «Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырының жанрын, тарихи нигеҙен билдәләүгә, шулай уҡ ҡайһы бер варианттарҙың үҙенсәлектәрен асыуға әһәмиәт бирҙе. Бигерәк тә уның эпос нигеҙендә ятҡан Аҡһаҡ ҡола менән хужа араһындағы төп конфликттың сәбәбен аңлатыуы иғтибарға лайыҡ.

Ҡирәй Мәргән изге тоҡомло, батырҙың кәңәшсеһе, ярҙамсыһы рәүешендә фольклорҙа һүрәтләнеүсе ат образына һуңғыраҡ осорҙа кешеләрҙең ҡарашы үҙгәреүен һәм уның эпик жанрға үтеп инеүен кешеләр тормошондағы экономик шарттар үҙгәреүенән килеп сыҡҡан күренеш тип аңлата. Элек бәхет, байлыҡ сы-

---

[1] Башкирский народный эпос. М.: Наука, 1977, 237—241-се б.

[2] Былых времен сказанья. Башкирский народный эпос. Уфа, 1979, 39—50-се б.

[3] Ҡ. Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 163—187-се б.

ғанағы һаналған аттың синфи йәмғиәттә етештереү ҡоралына әйләнеүен билдәләй. Иң мөһиме шунда, автор ҡыйырһытылған Аҡһаҡ ҡола образында синфи йәмғиәттә иҙелгән халыҡ образын күрә һәм әҫәрҙең конфликтын, идеяһын ошо позициянан сығып аңлата[1]. Был фекерҙә ниндәйҙер кимәлдә хаҡлыҡ булған тәҡдирҙә лә, уның менән тулыһынса килешеү ҡыйын. Аҡһаҡ ҡола менән хужа конфликты нигеҙендә башҡа сәбәптәр ҙә бар.

«Аҡһаҡ ҡола»ның сюжеты ҡатмарлы түгел. Унда өйөр башы Аҡһаҡ ҡоланың үҙ эйәһенән өйөрөн эйәртеп ҡасып китеүе хикәйәләнә. Әҫәрҙең үҙәк образдары: йылҡы өйөрө ҡотон тотоусы Аҡһаҡ ҡола, ат хужаһы, уның улы менән ҡоло Ҡарағол. Йылҡы өйөрө хужаһының исеме ғәҙәттә әйтелмәй, ул бай улы тип кенә атала. Ҡайһы бер варианттарҙа ғына хужаның Байыулы, Йәноҙаҡ исемле булыуы әйтелә. Уның сюжеты ярайһы уҡ тотороҡло һаналған түбәндәге төп мотив һәм эпизодтарҙан ғибарәт: эпик ат мөғжизәле шарттарҙа тыуа. Мөғжизәле шарттарҙа йылҡының тыуыу мотивы — төрки халыҡтарының эпик ижадында традицион күренеш. Байҙың Шүлгән күленән сыҡҡан, йылҡы нәҫеленән булған бейәһе, ҡолонлар ваҡыты етһә, юғала торған була. Бер саҡ хужа бейәне ҡарауыллап тороп ҡолонлатмаҡ була. Уның артынан барһа, бейә Шүлгән күленә төшөп китә лә шунда ҡолонлай. Бер аҙ ваҡыт үткәс, бейә ҡолонон эйәртеп сыға. Шул мәлдә байҙың бейә менән ҡолон ҡаршыһына килеп сығыуы була, улар, өр-

[1] К. Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары, 176-сы б.

кәп. икеһе ике яҡҡа ҡасалар. Бейә күлгә инеп юғала, ә ҡолон, аяғын имгәтеп, тороп ҡала. Ҡолон аҡһаҡ булып ҡала һәм уға Аҡһаҡ ҡола тип исем бирәләр. Аҡһаҡ ҡола үҫеп етһә лә, уны өйөргә ҡушмайҙар, өй янында төрлө эшкә тоталар.

Йортта туй барған ваҡытта Аҡһаҡ ҡола, өйөргә килеп, уны эйәртеп ҡасып китә. Ҡайһы бер варианттарҙа Аҡһаҡ ҡола айырым йөрөгән тай-тулаҡ өйөрөн, ҡайһы берҙәрендә ҙур йылҡы өйөрөнөң яртыһын бүлеп алып китә.

Аҡһаҡ коланың өйөрҙө алып ҡасыуы беленә. Хужа, Ҡарағол исемле ҡолдо эйәртеп, ҡасҡан өйөрҙө ҡыуа сыға. Хужа егет юл буйындағы бер йәйләүҙә һылыу ҡыҙҙы осрата (ҡайһы бер яҙмаларҙа кәнизәктәр, көндәр менән уратып алынған был ҡыҙ — бай улының үҙ кәләше). Ҡыҙ егетте үҙ янында ҡалдырырға теләй, ләкин егет риза булмай һәм юлын дауам итә.

Ҡасып киткән Аҡһаҡ ҡола төш күрә. Ул төшөн ҡуҙаҡтарына (иптәштәренә) һөйләй, әммә иптәштәре уны:

— Бөгәсә һин төш күрһәң,
Ҡанъяғалай шеш күрһәң,
Шеш башында ут күрһәң, —
Үҙ башыңа ҡарт ҡуҙаҡ!
Аҙҙырған да һин булдың,
Туҙҙырған да һин булдың, —
Үҙ башыңа ҡарт ҡуҙаҡ![1] —

тип яманға юрайҙар һәм өйөрҙө аҙҙырыуҙа ғәйепләйҙәр.

Башҡорттарҙың борондан килгән ҡараштары, ыҙан-йолалары буйынса, кеше ниндәй генә төш күрһә лә, уны яҡшыға юрарға тейеш.

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 226-сы б.

Ни өсөн тигәндә, төштө яҡшыға юраһаң — яҡшы, яманға юраһаң, яман була, тип ҡаралған. Шуға күрә төш юратыу өсөн кешеләр һәр кемгә түгел, ә тормош тәжрибәһе ҙур, аҡыллы кәңәш бирерҙәй, абруйлы ил ҡартына йәки ил ҡарсығына мөрәжәғәт итер булғандар.

Аҡһаҡ ҡола ҡуҙаҡтарҙың төштө яманға юрауҙарын яратмай, үпкәләй, ҡайһы бер варианттарҙа ошоноң өсөн ул өйөрҙө уҡ менән ҡырҙырып үс ала. Аҡһаҡ ҡола, эҙәрләп килеүселәрҙе күреп, ауыр хәлгә ҡалған йылҡы өйөрөнә нисек бәләнән ҡотолоу юлын өйрәтә.

Бай улы, Ҡарағол менән бергәләп, өйөрҙө тау араһына ҡыҫрыҡлай. Ул Аҡһаҡ ҡолаға, уның ҡасып китеүенә үпкәләй, өйөрҙө кире алып ҡайтыуын үтенә.

Аҡһаҡ ҡола, риза булыуҙан алда, хужаһы уны башҡаса ҡыйырһытмаҫҡа, ыҙалатмаҫҡа ер ашап ант итһә генә ҡайтасағын әйтә. Бай улы тупраҡ ашап ант итә. Шунан һуң ғына Аҡһаҡ ҡола өйөрө менән ҡайтыу юлына ҡуҙғала. Әммә асыуы ныҡ ҡабарған хужа, уҡ менән атып, Аҡһаҡ ҡоланы яралай. Һаҙаҡ ҡойроҡ төбөнән алып һыртын ярып, бер ҡолағының осон телеп барып сыға.

Әҫәрҙең фажиғәһеҙ, уңышлы тамамланған варианттары ла бар. Улар Аҡһаҡ ҡоланың илгә ҡайтыуы, ырыу халҡының уны байрам итеп ҡаршы алыуы, йыр сығарып данлауы менән бөтә [1].

Аҡһаҡ ҡола хужаһын имгәнгән аяғы менән тибеп үлтерә. Шулай итеп, егеттең антты боҙоуы фажиғә менән бөтә.

---

[1] М. Буранғолов яҙмаһы. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/218, 133—136-сы б.

«Аҡһаҡ ҡола» үҙенең йөкмәткеһе, характеры менән хайуандар тураһындағы боронғо эпос циклына ҡарай. Унда боронғо башҡорттарҙың хайуандар хаҡындағы ҡараштары сағыла, ат культы күҙәтелә. Башҡорттарҙың боронғо ышаныуҙары буйынса, изге мал культы билдәле йола, тәртиптәрҙе теүәл үтәүҙе талап иткән. Культ йолаларын, ғәҙәттәрен боҙоу, үтәмәү бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек килтерә, тип ҡаралған.

«Аҡһаҡ ҡола» әҫәренең төп идеяһы — ырыу бәхетенең, именлегенең нигеҙен тәшкил иткән йылҡы малына ҡарата яҡшы мөнәсәбәт булдырыу, әйткән һүҙгә, биргән антҡа тоғро булыу. Икенсе бер вариантта Байыулының ырыу йолалары менән иҫәпләшмәүен, йылҡы өйөрө менән ҡаты мөғәмәлә итеүен хатта үҙ ырыуҙаштары ла, һөйгән ҡыҙы ла хуп күрмәй. 1960 йыл Ырымбур өлкәһендә Рәхилә Теләкәева, Нәзифә Байтимерова, Миңлебулат Әбдрәзәков, Шәрәфи Юлыев, Солтанморат Сәйетовтарҙан яҙып алынған варианттарҙа ҡасып киткән өйөрҙө бай улының (Байыулы) ҡыуып етеүен һәм Аҡһаҡ ҡоланы уҡ менән атыуын белгән ата-әсәһе, ырыуҙаштары уны үлемгә дусар кеше тип һанайҙар, ҡәбер ҡаҙып, ясин уҡып ҡаршы алалар. Өйгә ҡайтҡан егетте ғәҙәттә йә ат тибеп үлтерә, йә Ғазраил килеп быуа, йәки ул ишек тупһаһын аша атлауы менән үк йығылып үлә.

Малсылыҡ, бигерәк тә йылҡысылыҡ менән көн күреүсе боронғо күсмә халыҡ өсөн йәшәү сығанағы булған малдың ҡәҙерен белмәү, унан яҙып ҡалыу ҙур фажиғә, бөлгөнлөк һаналған.

Һыу аҫты донъяһынан сыҡҡан, илгә, ха-

лыкка ырыҫ килтерерлек изге йылҡы тоҡомо Аҡһаҡ ҡоланың хужаһы тарафынан һанға һуғылмауын, ҡәҙер ителмәүен эпик әҫәрҙе ижад итеүсе халыҡ хуп күрмәй, тәнҡит итә.

Башҡорттар элек, һәр көтөүҙә бер өлөшлө мал була, тип уйлағандар. Яҡшы тоҡомло айғыр, үгеҙ, шулай уҡ һарыҡ, кәзә тәкәләре өлөшлө мал һаналыр булған. Йылҡы, һыйыр, ҡуй көтөүҙәренең үрсеп, түлләп китеүен шуларға бәйләп аңлатҡандар. Өлөшлө һаналған малды һатмағандар, һаҡлап тотҡандар, ҡәҙерләгәндәр, күҙ тейеүҙән һаҡлағандар. Үлһә йәки һуғымға һуйылһа, ул малдың енес органын йолоп алғандар, бейеккә элеп ҡуйып киптергәндәр, уны ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүлеп, түл төйөмө яһағандар. Көтөүҙә түл ҡоромаһын өсөн бейәләргә, һыйырҙарға һәм башҡа орғасы малға, теләктәр теләп, түл төйөмөн таҡҡандар. Ислам дине ҡабул ителгәндән һуң түл төйөмөн, ҡөрьән уҡып өшкөрөп, бетеү яһап, малдың муйынына йәки мөгөҙөнә таҡҡандар. Уға өлөшлө малдың ҡото, түле, бөтә һәйбәт сифаттары күсергә тейеш, тип һаналған.

Был хаҡта «Ҡуңыр буға» ҡобайырында бик матур эпизод бар. Унда Таңдысаның ата йортона ҡасҡан малын юллап ҡайтыуы һүрәтләнә. Бер аҙ ҡунаҡ булып, ял иткәндән һуң, Таңдыса, эҙләп тапҡан малын алып, кейәүе иленә — төшлөк яҡҡа ҡайтырға йыйына. Шул ваҡыт уны оҙатышырға килгән ырыу башлығы, һамаҡлап:

Ырыуҙағы ололарҙан
Кейәүебеҙгә һауыт * бир;

* Һауыт — лат, ҡоростан эшләнгән һуғыш кейеме.

Улдарыңдың үҙле-үҙенә
Беҙҙән орлоҡ, кәтмән бир;
Ҡыҙҙарыңдың һәр беренә
Һарауыс менән йөҙөк бир.
Кеше түгел, малҡай ҙа,
Быҙауҙарын эйәртеп,
Ҡыл муйынсаҡ һөйрәтеп,
Тыуған ерем тип килгән, —
Белгәндәргә белектер,
Белмәгәнгә көҙөктөр.
Ҡуңыр буға, малдарым,
Килегеҙ, кил яныма;
Ырыҫ-байлыҡ бәйләйбеҙ
Быҙауҡайҙың муйынына.
Ҡусҡар мөгөҙлө тәкәңә
Түл төйөмө эләбеҙ;
Ҡуш мөгөҙлө һарығыңа
Бөтмәҫ тоҡом теләйбеҙ.
Кәзәң менән тәкәндең
Йөнө, дебете күп булһын,
Үрсеп китеп, күбәйеп,
Тау-таш ҡуйыны тулһын.
Ҡабырғаһын тәкәндең
Кертелдәк май ҡаплаһын,
Унда-һанда һуғылып,
Зыян булып ятмаһын;
Илен-көнөң туҡ булһын,
Малың ырыҫ, ҡот булһын,[1] —

тип теләктәр әйтеп ҡала. Был теләктә түл төйөмөнә «бөтмәҫ тоҡом» биреүгә, «тау-таш ҡуйыны тулырлыҡ» үрсеүгә, илгә туҡлыҡ, ырыҫ, ә малға ҡот биреүгә булышлыҡ итеү функциялары йөкмәтелгәнлегә айырым-асыҡ.

Айғыр, тәкәнең ҡайһы бер өлөштәре ритуал ашамлыҡ рәүешендә лә ҡулланылған. Был йоланың ҡалдыҡ эҙҙәрен хәҙерге көндәрҙә лә халыҡ тормошонда күҙәтергә мөмкин. Уны ғәҙәттә тик ирҙәр, малайҙар ғына өтөп ашаған-

[1] БХИ. Эпос, 1972, 289—290-сы б.

дар. Сөнки түл йәйеүҙә ир кешенең роле өҫтөнөрәк күрелгән.

Түл төйөмөн бәйләү — малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтар тормошонда киң таралған йола. Түл төйөмөн, мал енесен эт-ҡошҡа ташлап ҡуйыу ҡәтғи тыйылған, гөнаһ һаналған. Малдың сыуынын да, йолоп алынған енесен дә ергә ҡаҙып күмгәндәр. Шулай итеп, түл үрсемен, мал ҡотон йортта һаҡларға, уны өҙөлмәҫкә тырышҡандар.

«Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырының Зәйнәп Зөбәированан яҙып алынған вариантында, шулай уҡ Мөхәммәтша Буранғолов, Ҡәрим Дияров яҙмаларында ҡобайыр эпик герой һәм Аҡһаҡ ҡоланың фажиғәһе менән тамамланмай, ә күңелле, уңышлы финал менән бөтә. Ҡ. Дияров яҙмаһында Аҡһаҡ ҡола, хужаһы тарафынан атылһа ла, уға буй бирә һәм бөтә йылҡыларын алып ҡайтып китә. Бөтә йәйләү сығып, Аҡһаҡ ҡоланы ҡаршы ала. Аҡһаҡ ҡола ҡайтҡас, көтөү йәмләнде, тип маҡтайҙар. Был вариантта боронғо эпос өсөн характерлы этиологик мотивтар сағылыш алған.

Аҡһаҡ ҡоланың бөтә һырты буйлап уҡ ярып үткән яра уңала. Һырт буйына ҡара йөн үҫә. Ҡола йылҡының сысҡан һыртлы булыуы, ҡолағы теленеп ҡалыуы, йылҡыға ин һалыу шунан ҡалған ҡола, тип аңлатыла ҡобайырҙа. Сысҡан һыртлы ҡола йылҡы башҡорттар ихтирам иткән ат тоҡомо һаналыр булған, тиелә.

Күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе башҡорт халҡы тормошонда ғаиләлә бала тыуғанда мал инселәү йолаһы булған һәм ул хәҙерге көндә лә юғалып бөтмәгән. Ошо йола «Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырының байтаҡ вариант-

тарында һурәтләнә. Мәҫәлән, Зәйнәп Зөбәированан яҙып алынған вариантта илгиҙәр бер ҡарт байҙың улы тыуғас та уға Йәноҙаҡ тип исем ҡушырға, шунан һуң өйөрҙәге иң яҡшы нәҫел бейәләренән тыуған биш ҡолондо айырып алып, улы исеменә атарға, уларҙы теләктәш итеп бергә үҫтерергә ҡуша. Ҡарттың ҡушҡандары үтәлә. Балаға мал инселәү йолаһы ғәҙәттә ике ниәттән сығып эшләнгән: баланың малдан бәхетен һынау һәм, алдан уҡ уның киләсәк тормошон ҡайғыртып, ғаилә малынан өлөш сығарыу. Инселәгән ваҡытта малдың ҡолағына, мөгөҙөнә билдәле бер ин, тамға һалғандар.

Билдәле бер кеше исеменә мал ҡотон, үрсемен һынау — борондан ҡалған күренеш. Ҡайһы бер ғаилә, ырыу ағзаһы малдан бәхетле була. Уның исеменә мал инселәһәң, мал тиҙ генә үрсеп китә, тип уйлағандар. Ҡайһы бер кешегә тик билдәле бер төр мал ғына (йылҡы, һыйыр, һарыҡ, кәзә һ. б.) килешә, тигәндәр.

Мал инселәү йолаһының килеп сығыуының сәбәбен, иң беренсе, тәүтормош-община ҡоролошо емерелеп, яңы социаль-экономик мөнәсәбәттәр урынлашыуҙан, шәхси милекселеккә нигеҙләнгән айырым ғаиләләр барлыҡҡа килеүҙән эҙләү нигеҙле.

Ҡобайыр үҙ заманы өсөн бик актуаль һәм мөһим мәсьәләләр күтәреүе менән әһәмиәтле. Шуларҙың береһе — ҡәрҙәш ырыуҙарҙың берләшеү идеяһы. Әҫәрҙә хикәйәләнгән малсылыҡ менән көн итеүсе күсмә халыҡтың тормошо йыш ҡына дошман яуы ҡурҡынысына дусар була. Ҡобайырҙа бөрйән ырыуы башҡорттарын әленән-әле дошман яуы баҫа. Бөрйәндәр уҡ-һаҙаҡтар, һөңгөләр менән ҡоралланып, ат-

тарға менеп яу ҡайтаралар, баҫҡынсыларҙы ҡыйраталар. Ошондай хәүефле, ҡатмарлы шарттарҙа дошманға ҡаршы уңышлы көрәшеү өсөн ырыуҙар берҙәмлеге актуаль мәсьәләгә, хәл иткес факторға әүерелә. Әҫәрҙә ике ырыу берләшеүе егет менән ҡыҙҙың өйләнешеүҙәре, туғанлыҡ бәйләнешен урынлаштырыу юлы менән хәл ителә. Кәрим Дияров, Зәйнәп Зөбәирова яҙмаларында ике ырыуҙың ҡушылыуы ҙур, мөһим ваҡиға булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт эпосында, ғөмүмән, фольклорҙа, ырыу-ҡәбиләләр берләшеүен, татыулығын ике ырыу вәкиленең өйләнешеүе аша күрһәтеү — ҡалыплашҡан, традицион күренештәрҙең береһе.

Ҡобайырҙа тыуған илде һаҡлау темаһы күтәрелә. Был тема ырыу-ҡәбиләләр берләшеүе мотивы менән бергә үрелеп китә. Тыуған илгә мөхәббәт һаҡлау, уны дошмандарҙан ҡурсыу мәсьәләһе эпоста беренсе планға сыға. Эпос геройы Йәноҙаҡ һуғыш аты Аҡһаҡ ҡола менән дошмандарҙан Урал тауҙарын һаҡлаһа, уның атаһы Туҡ — Соран яғындағы тибенлек өсөн ҡулайлы далаларҙы һаҡлай.

З. Зөбәирова вариантында Йәноҙаҡ менән Аҡһаҡ ҡоланың конфликты ла ана шул тыуған төйәкте һаҡлау мәсьәләһе буйынса килеп сыға.

Йәноҙаҡ, малы-ние менән Уралды ҡалдырып, дала ерҙәрен һаҡларға киткән атаһы янына, Туҡ менән Соран * буйҙарына барып йәшәй башлай. «Йәноҙаҡ бәләкәйҙән бергә үҫкән ҡола айғырын ярата. Атаһына эйәреп, яу ҡайтарырға йөрөгәндә, ҡола айғырына ат-

* Туҡ, Соран — хәҙерге Ырымбур өлкәһе территорияһындағы йылғалар.

лана. Бергә яраланған саҡтары ла була, ләкин аты, яраланһа ла, хужаһын һуғыш ҡырында ҡалдырмай, алып саба торған була. Йәноҙаҡтың батыр юлдашы Аҡһаҡ ҡола тирә-яҡта дан ала. Тик уның, был ялан яғын ерһенмәй, өйөрөн эйәртеп, ҡасып киткән саҡтары ла була. Әммә уны, һиҙеп ҡалып, кире ҡайыралар», — тиелә ҡобайырҙа.

Аҡһаҡ ҡола өйөрҙө алып ҡаса һәм Уралда, үҙе тыуған төйәктә, ҡалырға ҡарар итә. Йәноҙаҡ өйөрҙө ҡыуып килеп етә, асыуланып, Аҡһаҡ ҡолаға уҡ атмаҡ була. Аҡһаҡ ҡола уға былай ти:

— Ошо һыуҙы эсеп үҫкән
Биш ҡолондоң толпары мин;
Яраланғас, яуҙан һине
Алып осҡан шонҡарың мин.
Нисә даръя кискәнмен,
Урман, һыуын үткәнмен,
Ҡүпме тауҙар ашҡанмын;
Айыу менән алышып,
Бүре менән сәйнәшеп,
Имен һаҡлап малыңды,
Төбәгемде тапҡанмын!
Төйәгемдең һағышы
Йөрәгемә уралған.
Мин китмәмен Уралдан,
Һин дә китмә Уралдан!
Урал — минең төйәгем,
Шунда ҡалһын һөйәгем! [1]

Егет төҙәгән уғын кире ала. Аҡһаҡ ҡола ла, егет тә Уралда ҡалалар, Уралды дошман яуынан һаҡлайҙар. Аҡһаҡ ҡола батыр егеттең тоғро юлдашы, яуҙашы, кәңәшсеһе булып ҡала.

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 241—242-се б.

«Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырында башҡа төрки халыҡтарҙың эпосы өсөн традицион булған байтаҡ уртаҡ мотивтар бар. Шундайҙар рәтенә эпос геройҙарының өлкән йәштәге балаһыҙ ата-әсәнән тыуыу мотивы инә.

Йәноҙаҡ (Байыулы, бай улы) менән Үлмәçбикә бер-береһе менән татыу, дуç йәшәгән ике ырыу башлығының ҡатындарынан тыуа. Тәүҙә, ырыу башлыҡтарының балалары йәше лә тулмай үлеп торғанлыҡтан, улар төрлө имселәргә мөрәжәғәт иткәндәр, ләкин бер ни ҙә ярҙам итмәгән. Берҙән-бер көн был ике ырыу йәйләүенә, дарыу үләндәре йыйып, китаптар уҡып, ҡобайырҙар әйтеп йөрөүсе юлаусы ҡарт килә. Ул хужаларҙың зарын тыңлай һәм уларға шифалы үләндәр бирә, кәңәштәрен әйтә. Шулай уҡ ул береһенең улы тыуһа — Йәноҙаҡ тип, ә ҡыҙ бала тыуһа, Үлмәçбикә тип исем ҡушырға, балаларҙың ҡолаҡтарын тешләтеп, ҡоҙалашырға кәңәш бирә һәм йәйләүҙән китеп юғала.

Балаларҙың тыуасағы изге ҡарт, әүлиә тарафынан алдан хәбәр ителеүе — төрки халыҡтар эпосында киң таралған күренеш («Алпамыша», «Ҡорҡот китабы», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» һ. б.).

Ғәҙәттә, эпос геройы менән эпик ат бер үк көндә тыуа. Был мотив бигерәк тә Себер, Алтайҙағы төрки халыҡтар эпосына хас.

«Аҡһаҡ ҡола» ҡобайыры күләме яғынан ҙур булмаһа ла, башҡорт халҡының ырыу-ырыу булып күсмә малсылыҡ менән йәшәү дәүерен сағылдырыуы менән ҡиммәтле. Унда башҡорттарҙың тормошонда йылҡысылыҡтың төп урынды алыуы күренә. Был эпостан башҡорттарҙың йылҡы өйөрҙәрен йәй көнө

Урал тауы итәктәрендә, йылға туғайҙарында йәйләү ҡороп йөрөтөүҙәре, ә ҡыш көндәре Туҡ, Соран, Каспий буйы далаларында тибендә аҫрауҙары хаҡында мөһим мәғлүмәттәр алырға мөмкин. Шулай уҡ һунарсылыҡтың да халыҡ хужалығында ҙур ғына урын тотҡанлығы күренә.

Башҡорт эпосына этиологик мотивтарҙы, күренештәрҙе аңлатырға тырышыу тенденцияһы хас. Был «Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырында ла күҙәтелә. Мәҫәлән, башҡорттарҙа сысҡан һыртлы ҡара-ҡола йылҡы тоҡомоноң үрсеп китеүе һәм уның изге төҫ һаналыуы Аҡһаҡ ҡола айғыр нәҫеленә тоташтырыла. Үҙ сиратында Аҡһаҡ ҡола — Шүлгән күленән сыҡҡан һыу эйәһе йылҡыһы тоҡомона бәйле.

«Аҡһаҡ ҡола» йырының этиологияһына ҡарағанда, был йыр боронғо дәүерҙә үк мөғжизәле ҡола айғырҙы данлап сығарылған һәм ҡурайсынан ҡурайсыға, йырсынан йырсыға күсә килеп, беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған.

Боронғо «Аҡһаҡ ҡола» эпосы буйынса башҡорт ырыуҙарының үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, халыҡтың көнкүрешен, ыҙан-йолаларын, эстетик ҡарашын, мораль-этик нормаларын да тоҫмалларға мөмкин. Халыҡтың боронғо аңҡарашы, йылҡы культы нигеҙендә тыуған Аҡһаҡ ҡола образы Аҡбуҙат, Һарат, Ҡара юрға кеүек изгелекле мифик ат образдары янында үҙенә лайыҡлы урын биләй.

«Аҡһаҡ ҡола» ҡобайырында күтәрелгән темалар, мотивтар башҡорт халҡының популяр «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙарында ла үҙенсәлекле сағыла. Был ике эпик ҡомартҡы шулай уҡ мал культы менән тығыҙ

бәйле. Әлеге эпик сюжеттар ҙа Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында, көньяғында һәм Ырымбур өлкәһе башҡорттары ижадында киң таралған. Ике әҫәрҙең дә беҙгә билдәле варианттары ошо тарафтарҙа яҙып алынған. Был сюжеттың башҡорттарҙың интенсив күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнгән төбәктәрендә таралыуы — тәбиғи хәл.

«Ҡара юрға» менән «Ҡуныр буға», сюжетлы эпик әҫәрҙәр булыуға ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарға тиклем йыр жанрына индерелеп йөрөтөлдөләр. Ике әҫәрҙең дә үҙҙәренә генә хас, нығынған көйҙәре булыуы һәм уларҙың йырланып та, һөйләнеп тә йәшәүҙәре жанр буталсыҡлығына килтергән булһа кәрәк. 1961 йылда Кирәй Мәргәндең «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» монографияһы донъя күргәндән һуң ғына ике ҡомартҡы ла эпос жанрында ныҡлы урын алды һәм ошо жанр системаһында өйрәнелә башланы.

«Ҡара юрға»ның көйө 1833—1835 йылдарҙа уҡ атаҡлы рус композиторы А. А. Алябьев (1787—1851) тарафынан Ырымбур губернаһы башҡорттарынан «Башҡорт йыры «Ҡара юрға» исеме менән яҙып алынған һәм «Азиатские песни» ҡулъяҙма йыйынтығына индерелгән булған [1]. 1907 йылда Мөхәммәтша Буранғолов

---

[1] Көй нотаһы Ленинградтағы Кино, театр һәм музыка институтының ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана: ф. 3, оп. 2, ед. хр. 17. Беренсе тапҡыр музыка белгесе Л. П. Атанова тарафынан матбуғатта баҫтырылды. — Фольклористика в Советской Башкирии. Выпуск 1, под редакцией Н. Т. Зарипова. Уфа, 1974, 210—211-се б.

«Ҡара юрға» ҡобайырының көйө 1894 йылда С. Г. Рыбаков тарафынан Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Кананикольск заводында (Башҡортостандың хәҙерге Йылайыр р-ны) ҡурайсы Һ. Лоҡмановтан яҙып

тарафынан элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосы Үрге Ильяс ауылында Хәсән Буранғоловтан яҙып алынған вариант — Октябрь революцияһына тиклем йыйылған «Ҡара юрға» ҡобайырының берҙәнбер тулы күләмле яҙмаһы. Әҫәр 1939—1940 йылдарҙа М. Буранголов төҙөгән, ләкин баҫылып сыҡмай ҡалған «Боронғо башҡорт йырҙары һәм ҡобайырҙары» йыйынтығына индерелгән [1]. Ҡобайырҙың башҡа варианттары нигеҙҙә 60-сы, 70-се йылдарҙа үткәрелгән фольклор экспедициялары ваҡытында яҙып алынғандар.

«Ҡуңыр буға» ҡобайыры, халыҡ араһында ифрат популяр булыуына ҡарамаҫтан, нигеҙҙә совет осоронда ғына өйрәнелде һәм фольклористика фәненә билдәле булды. Ул — башҡорт халҡының эпик поэзияһының алтын фондын тәшкил итеүсе рухи хазиналарҙың береһе.

«Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» сюжеттары өсөн уртаҡ күренештәр бар: өсөһөндә лә өйөр, көтөү ҡотон тотоусы изге, өлөшлө мал образдары һүрәтләнә. «Ҡара юрға»ла, тап «Аҡбуҙат» эпосындағы кеүек, Шүлгән күленән йылҡы сығыу эпизоды бар. Аҡһаҡ ҡола

алынған. Нотаһы 1897 йылда С. Г. Рыбаковтың «Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта» китабында (143-сө б., № 111) баҫылған. С. Г. Рыбаков шул уҡ Орск өйәҙе Күсей ауылында (Башҡортостандың хәҙерге Баймаҡ р-ны) Бирғәле исемле ҡурайсынан да «Ҡара юрға» көйөнөң тағы бер вариантын яҙып алған һәм үрҙә әйтелгән китабына индергән (143-сө б., № 110).

[1] Йыйынтыҡтың сигнал экземпляры СССР ФА Башҡортостан филиалының ғилми архивында һаҡлана: 8 СФ. Б29.

менән Ҡара юрға — Шүлгән күленән, һыу аҫты донъяһынан ер өҫтөнә сығып түл йәйгән изге тоҡомло аттар. «Ҡара юрға»ның Ҡирәй Мәргән тарафынан Ырымбур өлкәһендә Усман Сәйетов менән Рәхилә Теләкәеванан һәм Шакир Буранғоловтан яҙып алынған варианттарында Шүлгән күленән йылҡы сығыу күренеше һүрәтләнә [1].

Әҫәрҙең геройы — Ҡушлаҡ батыр — һунарсылыҡ менән шөғөлләнә. Уның һунар эте, шоңҡары бар. Берҙән-бер көн, һунар итеп йөрөп, Ҡушлаҡ батыр Шүлгән күле буйлап килә һәм, шоңҡарын ағас ботағына ултыртып, ятып йоҡлай. Шул саҡ уның янына ят бер юлаусы (аҙаҡ уның күл эйәһе икәнлеге аңлашыла) килә. Ул, йоҡонан уянған Ҡушлаҡ батыр менән һыйланып, һөйләшеп алғандан һуң уның шоңҡарын һорай. Һунарсы батыр тиҙ генә риза булмай, шулай уҡ шоңҡар ҙа үҙен ят кешегә бирмәүен үтенә. Шоңҡары уға, әгәр ҙә мине бирһәң, һин үләсәкһең, тип иҫкәртә.

Ҡушлаҡ батыр аҙаҡ шоңҡарын бер өйөр йылҡыға алмаша. Ят юлаусы, йәғни күл эйәһе, Ҡушлаҡ батырға артына әйләнеп ҡарамайынса ҡайтып китергә ҡуша. Ҡушлаҡ батыр ҡуҙғалып китеү менән, Шүлгән күле төбөнән йылҡы малы сырҡырашып, деһерләшеп сыға башлай. Бер аҙ барғас, ул тауышҡа сыҙай алмай, тыйыуҙы боҙоп, артына әйләнеп ҡарай, һәм йылҡылар эркелешеп күлдән сығыуҙан туҡтай. Өйөрҙөң яртыһы күлгә кире сума. Ҡалғаны Ҡушлаҡҡа эйәреп ҡайта. Ҡушлаҡ һунарсы йылҡыларын берҙән-бер улына бирә,

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 115—123, 123—124, 125—126-сы б.

ә үҙе түшәккә йығыла ла, күп тә үтмәй йән бирә. Ҡушлаҡтың улы, йылҡыһы үрсеп, байып китә. Ул өйөр башы Ҡара юрғаны менеп йөрөй. Ҡара юрға уға күрше ырыу ҡыҙын урлап алып ҡайтып бирә. Ҡушлаҡ улы менән Ҡара юрға алып ҡайтып биргән һылыу ҡыҙҙан таралған тоҡомдо байыулылар, байыулы ырыуы атап йөрөтә башлайҙар. Ҡобайырҙың аҙағы ана шул байыулы ырыуының ошо ике кеше нәҫеленән таралыуы хаҡында хәбәр итеү менән тамамлана.

«Ҡара юрға»ла Шүлгән күленән йылҡы өйөрө сығыу, күл эйәһенең тыйыуына ҡарамаҫтан, һунарсының артына әйләнеп ҡарауы арҡаһында бүләк малдың бер өлөшөнөң кире күлгә сумыуы, ҡобайыр геройының байып китеүе, байыулы исемле башҡорт ырыуының таралыуы эпизодтарында һәм мотивтарында «Аҡһаҡ ҡола» эпосы менән ҙур яҡынлыҡ, уртаҡлыҡ бар. Ике әҫәрҙә лә бер үк байыулы ырыуы, ошо ырыуҙың йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә башлауы хаҡында һүҙ бара. Тарихи этнография фәне мәғлүмәттәренә, конкрет алғанда, этнограф Р. Г. Кузеев тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе байыулы ырыуы бөрйән ҡәбиләһе составында көньяҡ-көнсығыш башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең этнографик төркөмөнә ингән [1]. Хәҙерге көндә байыулы ырыуы башҡорттары Ырымбур өлкәһендә һәм Башҡортостандың көньяҡ райондарында йәшәйҙәр. Һунарсылыҡ менән көн күреүсе батырҙарҙың, һунар ҡошон биреп, күл эйәһенән йылҡы алыуы һәм мал-

---

[1] Кузеев Р. Г. Историческая этнография башкирского народа, 146-сы б.

сылыҡ хужалығын башлап ебәреүе — халыҡ ижадында киң таралған боронғо мотив. Фольклорсы Ҡирәй Мәргән эпоста һүрәтләнгән был эпизодта тәүтормош общинаһының экономик нигеҙе булған боронғо һунарсылыҡҡа алмашҡа сағыштырмаса өҫтөнөрәк торған малсылыҡтың, яңы моронлай башлаған экономик формацияның килеүен күрә [1].

Шүлгән күленән йылҡы сығыу һәм башҡорттар араһында яҡшы тоҡомло ҡола йылҡы малының таралыуы хаҡында, эпик ҡобайырҙарҙан башҡа, бик күп легендалар таралған. Бөрйән районында был мөғжизәле күлде Шүлгән күле тип тә, Йылҡысыҡҡан күл тип тә атап йөрөтәләр.

«Йылҡысыҡҡанкүл» легендаһына XIX быуат ғалимдары В. Даль, М. Лоссиевскийҙар иғтибар иткәндәр һәм уның хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырғандар.

Һуңыраҡ «Йылҡысыҡҡанкүл» легендаһы крайҙы өйрәнеүсе һәүәҫкәрҙәр, фольклорсылар иғтибарынан төшмәне тиерлек, уның яңынан-яңы варианттары яҙылды. Был легендаларҙың күбеһе өсөн шул характерлы: күл эйәһе (һыу аҫты донъяһы батшаһы) һунарсының этен, йә булмаһа, шоңҡарын һорап ала һәм уға алмашҡа йылҡы өйөрөн сығарып бирә. Ә. М. Сөләймәнов: «Йылҡысыҡҡанкүл» легендаһында боронғо кешеләрҙең тәбиғәтте артабан үҙләштерә барып, ҡырағай йәнлектәрҙе ҡулға эйәләштереүе, йәғни һунарсылыҡ кәсебенең айырылып сығыуы кеүек мөһим тарихи боролош, ижтимағи хеҙмәттең иң тәүге ҙур бүленеше

[1] Ҡ. Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. 146—147-се б.

үҙенсәлекле сағылыш тапҡан», — тигән һығымтаға килә [1].

«Ҡара юрға» ҡобайыры сюжеты оҙаҡ быуаттар халыҡ хәтерендә йәшәү һөҙөмтәһендә ҡатлаулана, яңы мотивтар менән байый барған булһа кәрәк. Уның беҙгә билдәле яҙмаларында ваҡиғаларҙы, эпизодтарҙы һүрәтләүҙә төрлөлөк күҙәтелә. Мәҫәлән, Шүлгән күленән йылҡы өйөрө сығыу эпизоды күпселек варианттарҙа бирелмәй. Тик шуныһы даими: Ҡара юрға образы һәр вариантта ла өлөшлө, өйөр ҡотон тотоусы изге мал булып ҡала. Ҡара юрға әҙәмсә һөйләшә, хужаһына кәңәшсе лә, ярҙамсы ла, тоғро көрәштәш ролен дә башҡара. Ул ябай ат түгел, ә толпар затынан.

Ҡара юрға — Аҡһаҡ ҡола, Аҡбуҙат, Ҡуңыр буға кеүек актив, хәрәкәтсән образ. Ул батырҙың, ырыу кешеләренең эшенә, яҙмышына ҡыҫыла, ярҙам итә, кәрәк була ҡалһа, хәйлә юлына ла баҫа һәм үҙ ниәтенә ирешә. Өйөр башы Ҡара юрға хужаһына күрше ырыу ҡыҙын урлап алып ҡайта. Аттың эйәһе өсөн ҡыҙ урлау мотивы төрлө вариантта төрлөсә аңлатыла: егет күрше ырыу ҡыҙын яратһа ла, уны үҙенә ҡаратырға, ҡоҙаларға ҡыйыулығы етмәй һәм ярҙам һорап атына мөрәжәғәт итергә мәжбүр була. Йә булмаһа, ярлы булыуы сәбәпле, бай ҡыҙын ҙур ҡалым биреп алырға һунарсы егеттең хәленән килмәй, һәм ул ҡыҙҙы аты ярҙамында ҡалымһыҙ алмаҡ була. Ҡыҙ менән егеттең мөхәббәтенә, уларҙың ҡауышыуына социаль ҡаршылыҡтар кәртә була.

Һәр осраҡта ла тиерлек Ҡара юрға хужа-

---

[1] Сөләймәнов Ә. М. Йылҡысыҡҡанкүл. — «Совет Башҡортостаны», 1973, 20 октябрь.

һы һорауын теүәл, еренә еткереп үтәй, шул эштең уңышлы үтәлеүенә бөтә хәйләһен, таҫыллығын һала. Ул күрше ырыу йәйләүенә бара, ҡыҙҙың әхирәттәре менән бергә уйынға йәки еләк йыйырға барыуын аңдып йөрөй.

Ҡара юрға үҙенең матурлығы, йөрөшө менән ҡыҙға оҡшарға тырыша, эйәрле, йүгәнле көйө уның алдында уйнаҡлап, елдереп йөрөй. Ул, ҡыҙ янына килеп, үҙен иркәләтә, йыуаш, күркәм ат булып ҡылана. Ҡыҙҙың Ҡара юрғаға атланыуы була, ул уны хужаһы йәйләүенә алып ҡаса. Әммә Ҡара юрға ҡыҙҙы тиҙ генә егеткә бирергә ашыҡмай, төрлө шарттар ҡуя. Егет Ҡара юрғаға бүләктәр бирәсәгенә, ҡәҙерләп, яҡшы итеп ҡараясағына ышандырғас ҡына, теҙ сүгеп, ҡыҙҙы эйәренән төшөрөп бирә.

Ҡара юрғаның тиҙ генә риза булмауы, егеттең киләсәктә атты яҡшы итеп ҡарарға һүҙ биреүе эпизодында йылҡы малының үҙ хужаһына үпкәһе сағылып ҡала. Малдың хужаға үпкәләү мотивы «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙарында ла бар.

Ҡара юрғаның егеткә ҡыҙ урлап алып ҡайтыуында йылҡының геройҙы ҡурғаусы, һәр төрлө ҡыйынлыҡтан ҡотҡарыусы изге йән ролендә һүрәтләнеүе күренә. Ҡайһы бер варианттарҙа Ҡара юрға егеттең үтенесе буйынса күрше ырыу ҡыҙын урлап алып ҡайта, әммә ҡыҙҙы егеткә бирмәй, уға үҙе дәғүә итә. Ул геройҙан көнләшә, ҡыҙҙы үҙенә ала. Мәҫәлән, 1928 йылда музыка белгесе И. В. Салтыков тарафынан яҙып алынған «Ҡара юрға» эпосында кеше телен белгән Ҡара юрға бай хужаның һорауы буйынса Бикәс исемле ҡыҙҙы урлап алып ҡайта. Ҡара юрға, хужаһына асыу итеп, ҡыҙҙы эйәренән төшөрмәй. Бай ҡара юрғанан

Бикәсте төшөрөүен үтенә, әммә Ҡара юрға уның теләгсн үтәүҙән баш тарта һәм Бикәсте алып ҡаса. Ҡара юрға толпар бер һикергәндә Боҙ диңгеҙе аша осоп, бер утрауға барып төшә. Ҡобайыр Бикәс менән Ҡара юрғаның ошо утрауҙа бергә ғүмер кисереүҙәре хаҡында хикәйәләү менән тамамлана [1].

Шулай итеп, эпик герой образы менән изге, ҡотло мал образы араһында айырма ҡайһы бер осраҡта юғалып ҡала. Хатта йылҡы образы эпик герой образынан өҫтөнлөк алып китә, тотем дәрәжәһенә күтәрелә.

Шуны билдәләп китеү мөһим: мал культы нигеҙендә тыуған барлыҡ эпик ҡомартҡыларҙа ла тип әйтерлек герой үҙенең терәге, таянысы, кәңәшсеһе, яуҙашы булған аты, йә булмаһа көтөү, мал ҡото Ҡуңыр буға менән конфликтҡа килә. «Аҡһаҡ ҡола» эпосында хужа егет бер яҡҡа баш һуғып ҡасып киткән йылҡы өйөрөн ҡыра, өйөр башы Аҡһаҡ ҡоланы уҡ менән атып яралай. Аҡһаҡ ҡола хужаһын тибеп үлтерә, йә булмаһа ул, анты башына етеп, үлә. Ҡара юрға эйәһенең талабына буйһонмай, уның кәләшен диңгеҙ буйына алып ҡаса. Ә Ҡуңыр буға иһә, быҙауҙарын эйәртеп, тыуған төйәгенә ҡасып китә. Төп ғәйепте улар хужаларының малға иғтибарһыҙ, ихтирамһыҙ булыуында күрәләр. Хатта өлөшлө малдарҙың үҙ эйәләренә булған үпкәһе ҙур булмаған үҙгәрештәр менән бер эпик әҫәрҙән икенсеһенә күсеп йөрөй.

Мәҫәлән, Аҡһаҡ ҡола бай улына былай ти:

Яҙ ҙа мине менәһең,
Көҙ ҙә мине менәһең,

[1] Салтыков И. В. История и анализ башкирских песен. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 61/25, 33—34-се б.

Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һанайһың [1].

Ҡара юрға күрше ырыу йәйләүендә күҙләп ҡайтҡан ҡыҙҙы алып килеп биреүен үтенгән егеткә:

Эй бай улы, бай улы,
Малың һиңә асыулы:
Яҙ ҙа мине менәһең,
Көҙ ҙә мине менәһең,
Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләйһең,
Ҡабырғамды һанайһың.
Һин әйткәнде мин алмам,
Ҡыҙ янына мин бармам [2]. — ти.

Алда күреүебеҙсә, герой менән өлөшлө мал конфликты ҡайһы бер осраҡтарҙа хужаның фажиғәһе, өлөшлө малдың еңеүе менән тамамлана.

Ҡобайырҙарҙа герой менән мал араһындағы киҫкен конфликтты һүрәтләү эпизодтарында күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе башҡорт халҡының малға ҡарашы эволюцияһын күрергә мөмкин. Атап әйткәндә, конфликттың нигеҙендә боронғо халыҡтың малға изге йән итеп ҡарауы менән һуңғыраҡ осорҙа тыуған мөнәсәбәттәрҙең (уға байыға сығанағы итеп ҡарауҙың) ярашып етмәүе, ҡаршылыҡҡа килеүе ята. Малды боронғоса изгеләштереп ҡараусы кешеләр яңы экономик шарттар тыу-

[1] 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург р-ны Ҡолман ауылында 84 йәшлек Ғибадулла сәсән Агишовтан Ә. Н. Ҡирәев яҙып алған. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 64-се б.

[2] 1960 йылда Ә. Н. Ҡирәев тарафынан Ырымбур өлкәһе Александров р-ны Ҡайыпҡол ауылында 62 йәшлек Усман сәсән Сәйетовтан яҙып алынған. — БХИ. Эпос, 1972, 261-се б.

ҙырған ҡараш менән тиҙ генә килешә алмағандар, ризаһыҙлыҡ белгерткәндәр. Һәм бына ошо ризаһыҙлыҡ эпик ижадта, конкрет алғанда, «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙарында изге һаналған хайуандарҙың уларға насар мөнәсәбәт күрһәткән кешеләр алдында «баш күтәреүҙәрен» һүрәтләү аша бирелә, һәм унда феодализмдың башланыу осорона хас социаль ҡаршылыҡтар һәм бәрелештәр сағыла. Бында беҙ ҡолдар булғанын, ҡалым биреп ҡыҙҙы һатып алыу йолаларын да күрәбеҙ.

Изгелекле хайуандар хаҡындағы ҡобайырҙар, әлбиттә, оҙаҡ быуаттар буйы халыҡ хәтерендә йәшәү дәүерендә байтаҡ үҙгәрештәр кисергәндәр, һәр осор был әҫәрҙәргә үҙ ҡатлауын һалған. Был эпик ҡомартҡыларҙа башҡорт халҡының боронғо ыҙан-йолалары, ырыу-ара мөнәсәбәттәре, идеалдары, уй-теләктәре реалистик сағылыш тапҡан. Беҙ «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» әҫәрҙәрендә, «Аҡһаҡ ҡола»-лағы кеүек үк, кешеләрҙең ырыу-ырыу булып йәшәүҙәрен күрәбеҙ. Сит ырыуҙан кәләш алыу, геройҙың кәләш эҙләп сәйәхәт итеүҙәрен һүрәтләү эпоста экзогамия йолаһының тотороҡло йәшәгәнлеген күрһәтә. Егет кәләш алғанға тиклем бик күп һынауҙар үтә, батырлыҡтар күрһәтә. «Ҡара юрға»ла Әбләй батыр, толпарын менеп, ил аралап йөрөй, ил менән таныша, төрлө бәйгеләрҙә көс һынай һәм еңеп сыға. Ул эпик геройға хас бөтә күркәм сифаттарға эйә: тоғролоҡло, ғәҙел, киң күңелле, оҫта ҡурайсы, йор һүҙле, мәргән уҡсы, бил бирмәҫ көрәшсе, ҡурҡыу белмәҫ батыр. Ул идеаль герой дәрәжәһенә күтәрелә һәм хаҡлы рәүештә башҡорт эпосының ҡаҙанышы булып тора. Уның йәр

итеп һайлаған ҡыҙы Маҡтымһылыу ҙа идеаль ыңғай образдар рәтенә инә. Сәсәндәр уның һылыулығын, тәрбиәле, эшкә уңған булыуын, халыҡ йолаларын яҡшы белеүен һүрәтләүҙә сағыу биҙәктәрҙе йәлләмәгәндәр. Маҡтымһылыу, иң беренсе, йырсы сәсән ҡыҙ итеп тасуирлана:

Һайрар ҡошто туҡратып,
Таң ҡалдырып тыңлатҡан,
Күк ҡояшы ҙурлаған,
Ҡисен айы бәпләгән,
Пәйге еләҫ таңында
Моңон сәсеп йырлаған [1], —

тип әйтелә ҡобайырҙа. Ул йор һүҙле, уйын-көлкөгә һәүәҫ, итәғәтле, йорт эштәрен яҡшы белә, оҫта һыбай йөрөй. Маҡтымһылыу ҡобайырҙа көслө ихтыярлы, йөрәгендә оло мөхәббәт йөрөтөүсе гүзәл ҡатын-ҡыҙ образы булып алға баҫа.

«Ҡуңыр буға» ҡобайырында шундай идеаль ҡатын-ҡыҙ образдарының береһе — Таңдыса (ул ҡайһы бер варианттарҙа Ҡолансәс, Ҡанифа исеме менән дә йөрөй). Көньяҡта дала башҡорттары араһында йәшәүсе Таңдыса төньяҡ башҡорттарының данлыҡлы батыры һәм һунарсыһы Минәй батырға кейәүгә сыға. Йәш килен инсе малы, өлөшлө ҡуңыр һыйыры менән кейәү йортона оҙатыла. Уны халыҡ сәсәндәре ырыусылыҡ тормошоноң һәйбәт традицияларында тәрбиәләнгән, ырыу йолаларын яҡшы белгән һәм теүәл үтәгән, хужалыҡ эштәрен оҫта башҡарыусы, шул уҡ ваҡытта оло мөхәббәт һаҡлай алыусы, ата-әсәһенә, ырыуҙаштарына ҙур ихтирам менән ҡараусы тин-

[1] БХИ. Эпос, 1972, 247-се б.

дәшһеҙ һылыу итеп һүрәтләгәндәр. Таңдыса белемле, һынсыллыҡ сифаттарына эйә, оҫта йырсы, сәсән булып кәүҙәләнә. Ул им-томдарҙы, халыҡ медицинаһын яҡшы белә, Урал тауҙарында мал, йәнлек эҙҙәрен еңел таный, Урал тауҙы, тап булған һәр бер ҡош-йәнлекте, таулашты, хозур тәбиғәтте маҡтап йырҙар сығара, ҡобайырҙар әйтә. Таңдыса ил яҙмышы хаҡында ла уйлана, тормош тураһында тәрән фәлсәфә йөрөтә. Бар тәбиғәт үҙе Таңдыса һылыуға һоҡланып ҡарай. Гөл сәскәһе лә уға, ҡояш кеүек балҡып:

— Юлың алыҫ, беләмен,
Талыҡҡанһың, күрәмен;
Бер аҙ туҡтап китһәңсе,
Әҙерәк ялдар итһәңсе,
Илдең батыр ҡыҙы һин,
Илдең матур ҡыҙы һин[1], —

тип өндәшә, уның матурлығына, батырлығына һоҡлана. Сәсәндәр ҡобайырҙа Таңдыса образы аша данлыҡлы ҡатын-ҡыҙ сәсәндәрҙең дөйөмләштерелгән образын бирергә тырышҡандар. Уңдайҙар иҫәбенә, мәҫәлән, бөрйән ырыуының данлыҡлы сәсәне Ғилмиязаны индерергә мөмкин. Яҙма һәм фольклор материалдары буйынса Ғилмияза XVI быуат уртаһында йәшәгән. Ҡобайыр әйтеүе, йыр йырлауы менән уның даны бөтә тирә-яҡҡа таралған булған. Ғилмияза Ирәндек тауы өсөн бөрйәндәр менән үҫәргәндәр һәм башҡа ырыуҙар араһындағы ҡан ҡойғос һуғышты, сәсәндәр ярышы ойоштороп, туҡтатыуға өлгәшә[2].

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 284-се б.
[2] Буранғолов М. Башҡорт халыҡ поэзияһы.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 134—135-се б.

Был фекерҙе башҡорт халҡының эпик репертуарына етди өлөш индергән, хәҙерге көндәрҙә киң билдәле булған ҡатын-ҡыҙ сәсәндәр ижады ла раçлай (Рәхилә Теләкәева, Бәҙерниса Әфләтунова, Хәтирә Селәүсинова, Өммөхаят Ҡолдәүләтова һ. б.)[1].

Таңдыса — ил аҡылын төйнәгән, халыҡтың тарихын, рухи культураһын тәрән аңлаған сәсән. Ул атаһынан отоп алған Урал батыр хаҡындағы ҡобайырҙы яттан белә һәм үҙе лә әйтеп йөрөй. Шулай итеп, «Урал батыр» эпосына бәйле шиғри юлдар «Ҡуңыр буға» сюжет туҡымаһына килеп инәләр.

Таңдысаның Урал батыр хаҡындағы әйтемләгән ҡобайыры маҡтау одаһы булып яңғырай. Урал ғәйрәтле мифик образ, ил һаҡлаусы ғәҙел батыр булып күҙ алдына баҫа:

— Уралына артылып,
Теҙәкләнеп, тартылып,
Ергә терәп аяғын,
Тау-ҡаяға таянып;
Ужарланып дошманга,
Аҡбуҙында елдереп,
Саптарында сабышып,
Йән аямай алышып,
Яу ҡыуып, һөрән һалып,
Болот һымаҡ ҡуҙғалып,
Ҡулындағы ҡылысын
Яҡ-яғына һелтәнгән,
Дошманына уҡталған.

Тас айыуҙай алышып,
Ҡем уҙарҙан сабышып,
Ҡыу ҙа ҡыу тип ҡеүәтләп,
Ҡилгән яуҙы дөмбәçләп,
Алҡымлашып, алышып,

---

[1] Башкирский народный эпос. М.: Наука, 1977, 489-сы б.

Ҡарыуын һынап ярышып,
Самытланып күс алып,
Өҙә тотҡан биленән,
Ҡәрен алған ҡулынан;
Унарын унарлап әйләгән,
Йөҙәрен йөҙәрләп әйләгән.

Эй батыр ир, батыр ир,
Яу ҡайтарған батыр ир,
Һуғышҡанһың йәнтәстем.
Илгә сыҡҡан даныңды
Иҫемә алып, мин әйттем,
Мин әйттем, ау, мин әйттем.
Ҡан ҡойған ул, йән биргән
Үңгәмләшеп, алышып,
Дошмандарын ҡамалап,
Ҡыҫрыҡлап ҡырған ул:
Ҡаялай күкрәк киреп,
Тауҙай ҡалҡып торған ул.
Хас дошманды баҫтырып,
Килгән юлын таптырып,
Илдән ҡыуып сығарған;
Ертыштан * да уҙғарған,
Уҙғарған, ау, уҙғарған [1].

«Ҡуңыр буға» әҫәрендә «Урал батыр» ҡобайыры менән бәйлелек бер нисә урында осрай. Әҫәргә Урал батыр, Урал тауы хаҡында халыҡ араһында таралған легендалар килеп инәләр һәм уның сюжет туҡымаһына органик рәүештә ҡушылып китәләр. Юғалған малын юллап барыусы Таңдыса әллә ҡайҙан күренеп, күккә олғашып ятҡан күм-күк тауҙарҙы, күбә-күбә таштарҙың өҫтө-өҫтөнә ултыртылып бөткәнлеген күрә һәм атаһының: «Урал батыр һәр илле, һәр йөҙ йылда таштарҙы өҫтө-өҫтөнә ултыртып бара», — тип һөйләгәнен иҫенә төшөрә.

---

* Ертыш — Иртыш йылғаһы.
[1] БХИ. Эпос, 1972, 281—282-се б.

Ҡобайыр Урал батырҙы үлемһеҙ, ғүмер баҡый үҙенең Аҡбуҙатында, алмас ҡылысын тотоп, халҡын дошмандан һаҡлап йөрөүсе изге йән итеп һүрәтләй. Таңдыса ер һелкетеп баҫҡан тояҡ тауышына әйләнеп ҡарай һәм «ҡаршылағы арҡа өҫтөнән Аҡбуҙатҡа атланған, ҡулына ҡылыс тотҡан, буй-һыны болоттан ашҡан батырҙың Уралтауға табан барыуын күрә. «Урал батырҙың рухылыр был. Уның йәне үлемһеҙ, ул хәҙер ҙә, дошман Уралға аяҡ баҫмаһын, халҡымды таламаһын, тарҡатмаһын, тип ҡурғап, һағауыллап йөрөй, тиҙәр ине, раҫ икән», тип, ата-олаталарының һөйләүҙәрен хәтерләп, батыр һынын күҙҙән юғалғансы ҡарап, оҙатып ҡала [1].

Шулай итеп, эпостың башынан аҙағына тиклем Таңдысаның «ата-бабалар һүҙенә» иғтибарлы булыуы, отҡорлоғо, оҫта йырсы булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Сәсәнлек сәнғәтенә ул атаһы Өлкәрҙән өйрәнгән була. Бынан сәсәнлек оҫталығының быуындан быуынға, атанан балаға күсә килеүе күренә. Таңдысаның атаһы һәләтле һүҙ оҫтаһы ғына түгел, ә замананың ҙур уҡымышлы кешеһе, боронғо донъяның легендар табиптары Гиппократ, Лоҡман Хәким кеүек үк, данлыҡлы табип та: «Өлкәр ун ике йәштән алып утыҙ йәшкә хәтле гел ятлап һабаҡ алған, Таһранда (боронғо Персия ҡалаһында — *М. С.)* табиплыҡҡа уҡып ҡайтҡан ғилемле кеше, Уралдағы төрлө үләндәрҙән дауа эшләп, халыҡты дауалап, ауырыуҙарынан йүнәлтер, һауыҡтырыр ине. Таһран шағирҙары менән ултырҙаш булып, шиғриәткә

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 284—285-се б.

әүәҫ, сәсән дә ине»[1], — тиелә ҡобайырҙа. Шулай уҡ Таңдыса ла сәсән генә түгел, ә атаһы шикелле табип кеше лә.

Әҫәрҙә тағы ла бер ҡатын образы бар. Ул — Тандысаның әсәһе Өһәбикә әбей. Өһәбикә ырыу эсендә абруй ҡаҙанған, ырыу йолаларын тотоусы, һынсыл, ҙур тормош тәжрибәһе туплаған изгелекле әсә итеп һүрәтләнә.

«Ҡуңыр буға» эпосының төп геройы — Минәй батыр. Дөрөҫ, был образ һәр вариантта ла бер төрлө исем менән аталмай. Ҡайһы бер яҙмаларҙа ул Ирәндек булып йөрөй. Төп герой нисек кенә аталмаһын, ул — данлы таралған һунарсы, Уралды, илде төрлө баҫҡынсы дошмандарҙан һаҡлаусы ил батыры, ҡурҡыу белмәҫ яугир.

Минәй образын һүрәтләүҙә боронғо башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең үҙ-ара мөнәсәбәттәре, ҡурҡыныслы дошман килгәндә, берләшеп яу ҡайтарыу ваҡиғалары сағылып ҡала. Хатта башҡорт иленә баҫып инеүсе яуҙың «һун төрөктәре» (гунндар) булыуы әйтелә. Мөғәллим Мирхәйҙәровтан яҙып алынған «Ҡуңыр буға» ҡобайырының ике вариантында ла көньяҡта йәшәүсе дала башҡорттарын һун төрөктәре баҫыуы, уларға ярҙамға Минәй батыр етәкселегендә төньяҡ башҡорттарының (урман-тау башҡорттары) ярҙамға килеүҙәре хикәйәләнә. Минәй батыр илде баҫып килгән һун төрөктәре менән аяуһыҙ һуғыша һәм уларҙы төшлөк (көньяҡ) башҡорттары еренән ҡыуып сығара. Илгә күрһәткән батырлығы өсөн уға дала башҡорттарының иң һылыу, иң күр-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 283-сө б.

кәм ҡыҙы Тандысаны кәләшлеккә биреп, ҙур туй үткәрәләр.

Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, элек һундар (хунну) хәҙерге Монголия менән Көньяҡ Байкал алды территорияһында йәшәгән һәм үҙ эсендә егерменән артыҡ эре ҡәбиләне берләштергән күсмә халыҡ булған. Ул ерҙәрҙә һундар беҙҙең эраға тиклемге 3—2-се быуаттарҙа йәшәгәндәр. Ҡәбиләләр башында һайланмыш оло стәксе торған. Һундар үҙҙәренә күрше халыҡтар менән йыш ҡына һуғыш алып барғандар. Беҙҙең эраның 1-се быуатында улар көнбайышҡа табан күсенә башлағандар. Үҙҙәре менән башҡа халыҡтарҙы ла эйәртеп алып китәләр. Яңы эраның 2-се быуатында һундар, Көньяҡ Уралды үтеп, Волгаға килеп етәләр. Башҡорт эпосына һундар «һун төрөктәре» исеме менән килеп ингән. «Ҡуңыр буға» ҡобайырында һундар дала башҡорттарына афәт килтереүсе ҙур яу рәүешендә һүрәтләнә.

Һундар һәм уларға ҡаршы башҡорттарҙың көрәше хаҡында бер риүәйәт бар. Башҡортостандың Бөрйән районындағы, Ағиҙел йылғаһы буйындағы «Аҙан ташы» исемле бейек кенә тауға бәйле ул риүәйәт: борон көнтыуыштан бик ҙур яу килеп, башҡорт илен баҫа. Башҡорттар, тыуған илен һаҡлап ныҡышмалы көрәшһәләр ҙә, бик ҙур көс менән килгән яуҙан еңеләләр. Улар, урман-тауҙарға йәшеренеп, көрәште дауам итәләр. Бер бөрйән ырыуы батыры, иртә таңда бейек тауға менеп, ҡасып-боҫоп йөрөүсе ир-егеттәргә оран һала, аҙан әйтә. Иртәнге тынлыҡта тауыш бик алыҫҡа ишетелә. Батырҙың оранын ишетеп, ир-егеттәр йыйыла башлай. Бөрйән батыры, ҡасып-боҫоп йөрөүсе ир-егеттәрҙе туплап, дошман-

дарға ҡаршы яуға сыға һәм илбаҫарҙарҙы илдән ҡыҫып сығара. Ошо легенданың хәҙер Күгәрсен районына ҡараған Үрге Бикҡужа ауылында яҙып алынған вариантында башҡорт илен баҫып кереүсе ҙур яуҙың «һун төрөктәре» булыуы әйтелә [1].

Башҡорттарҙың һундар менән һуғышы ысынлап та булғанмы, юҡмы икәнлеген раҫлаусы, ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереүсе тарихи материалдар хәҙергә билдәле түгел. Һуғыш булғанлығын әлегә тик фольклор материалдары ғына һөйләй. Башҡорт — һун мөнәсәбәттәренең, улар араһындағы киҫкен көрәш ваҡиғаларының фольклорға килеп инеү сәбәбе хаҡында ошо уҡ фольклор сығанаҡтарына таянып, түбәндәге фекерҙәргә килергә мөмкин:

а) боронғо башҡорт ҡәбиләләре менән һундарҙың Үҙәк Азия, Көньяҡ Алтай тарафтарында яңы эраға тиклем күрше йәшәү осоронда булып үткән киҫкен мөнәсәбәттәрҙең халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалыуы һәм фольклорҙа сағылыуы ихтимал;

б) Үҙәк Азия, Байкал алды һәм Алтайҙа йәшәүсе боронғо күсмә төрки ҡәбиләләр яңы эра башынан, тибенлектәр өсөн яңы ерҙәр, биләмәләр эҙләп, бер-бер артлы көнбайышҡа, Евразия далаларына ағылғандар һәм Көнбайыш Европаға, Дунай үйһыулыҡтарына тиклем барып еткәндәр. Ҡайһы бер башҡорт ҡәбиләләренең, алданыраҡ килеп, Көньяҡ Уралда, Каспий диңгеҙенә яҡын киң далаларҙа ны-

[1] Риүәйәт «Аҙан ташы» исеме менән 1971 йылда Башҡортостандың Күгәрсен р-ны Үрге Сорғояз (Үрге Бикҡужа) ауылында Ғөбәйдуллин Мәхмүт Ҡорбан улынан (1909 йылғы) М. М. Сәғитов тарафынан яҙып алынды. — Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/6, 165-се б.

ғынып ҡалыуҙары һәм сағыштырмаса һуңы-раҡ килгән һун ҡәбиләләрен үҙ биләмәләренә индермәҫкә тырышып яулашыуҙары һәм шуның халыҡ ижадында сағылыуы, һаҡланып ҡалыуы мөмкин. Шулай уҡ һун төрөктәре хаҡындағы аҙмы-күпме мәғлүмәттәрҙең халыҡ сәсәндәренә тарихи сығанаҡтар аша билдәле булыуы һәм уларҙың ижадында яңы интерпретация алыуы ла ихтимал. Әммә был фекерҙе раҫлау өсөн хәҙергә дәлилдәр килтереүе, тарихи, яҙма сығанаҡтар табыуы ҡыйын. Шулай итеп, башҡорт — һун көрәше ваҡиғалары тарихы хәҙергә асылмаған сер, халҡыбыҙ тарихында һүтелмәгән йомғаҡ булып ҡала.

Минәй батыр (Ирәндек батыр) образы тураһында һөйләгәндә тағы бер мөһим деталгә иғтибар итмәй булмай. Ҡайһы бер варианттарҙа төп герой ҡурҡыу белмәҫ оҫта һунарсы итеп һүрәтләнә, әммә уның малсылыҡ хужалығына әһәмиәт бирмәүе ҙур етешһеҙлек тип ҡабул ителә. Мәҫәлән, 1961 йылда Ҡирәй Мәргән тарафынан Ырымбур өлкәһе Медногорск районы Ырысай ауылында 73 йәшлек Сәйфулла сәсән Хәсәновтан яҙып алынған вариантта төп герой — Ирәндек батыр Һаҡмар буйында йәшәгән бер абруйлы кешенең Ҡанифа исемле ҡыҙын кәләшлеккә алып, тыуған төйәгенә — төньяҡтараҡ ятҡан Ирәндек буйына ҡайта. Ирәндек батыр, йәнлек аулап йөрөп, Ҡуңыр буғаны ла, көтөү малдарын да яҡшылап ҡарамай. Шуға асыу итеп, Ҡуңыр буға, көтөүҙе эйәртеп, ҡуйы урман, тауҙар аша төньяҡҡа — үҙенең тыуған яҡтарына ҡайтып китә[1]. Шулай итеп, был вариантта ла һунарсылыҡҡа күбе-

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/6, 49—50-се б.

рәк иғтибар биргән төп геройҙың күсмә малсылыҡ хужалығына нигеҙләнгән яңы тормош тәртиптәрен, йолаларын һанлап етмәүе күренә. Изге малдың, ғөмүмән, мал-тыуарҙың иғтибарһыҙ хужаға үпкәләү мотивы «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға» эпик ҡомартҡыларындағыса тасуирлана.

«Ҡуңыр буға» эпосында Ҡуңыр һыйыр менән уның быҙауы Ҡуңыр буғаның башҡорттарҙы ҡурғаусы изге мал булыуы айырып әйтелә. Изге болан, йылҡы, бүре башҡорттарға иркен далалары, мөһабәт тауҙары, йылға-күлдәре күп булған яңы төйәк, яңы ил табып бирһә, Ҡуңыр һыйыр Ҡуңыр үгеҙ быҙауы менән бергә яҙлы-көҙлө һыу ташҡан ваҡытта ла өҙөлмәй торған юл һала, һыйыр малына изге төҫ — ҡуңыр төҫөн, шулай уҡ түлле тоҡом ҡалдыра.

Билдәле булыуынса, Көньяҡ Урал тау һырты буйлап һалынған һәм боронғо башҡорттар файҙаланған юл «Ҡуңыр буға юлы» тип аталып йөрөй. Ҡуңыр буға юлы башҡорт халҡының экономик, ижтимағи һәм хәрби тормошонда ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығы әлеге эпик әҫәрҙә лә, шулай уҡ халыҡ араһында күп таралған риүәйәттәрҙә лә сағылыш тапҡан. Мәҫәлән, 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Түбәнге Ильяс ауылында Ғибадулла Ҡасҡыновтан Ҡирәй Мәргән яҙып алған варианттың аҙағында Урал һырты буйлап киткән Ҡуңыр буға юлының боронғо башҡорттар тарафынан ғәскәр йөрөтөү өсөн файҙаланылыуы әйтелә [1].

1907 йылда Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосы Үрге Ильяс ауы-

---

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 134-се б.

лында Х. Буранголов сэсэндэн М. Буранголов тарафынан яҙып алынған вариантта боронғо Ҡуңыр буға юлының әһәмиәте хаҡында тағы ла мөһимерәк, киңерәк мәғлүмәттәр бирелә. Ҡобайырҙа: «Ҡолансәс шатлығынан буғаһы (үгеҙе) менән һыйырының ҡолағына көмөш һырға тағып ҙурлаған. Әсәһе, Ҡолансәстәрҙә айлап ҡунаҡ булғас, ҡыҙы менән кейәүеп үҙенә ҡунаҡҡа алып ҡайтып киткән. Ике йәйләүҙә генә түгел, бөтә Уралда Ҡуңыр буғаның даны киткән. Бөтә ырыуға бер-береһенә ҡатнашып йөрөргә буғаларҙың юлы оло юл булған, ти. Шунан һуң бөтә йәйләүҙә тыуған ҡуңыр һыйыр тоҡомон шуларҙың балаһы тип ҡәҙерләгәндәр. Ҡуңыр һыйырҙың һөтө дауа, тип йөрөткәндәр, ти. Был юл менән бөтә Урал буйы йәйләүҙәре береһе икенсеһенә ҡунаҡҡа йөрөшкән, бер йәйләүҙе яу килеп басһа, тыныс яҡҡа ҡуйы, шыр урман үтә — шул юл менән күсеп киткәндәр. Батша түрәләре халыҡҡа тоҙ бирмәгән саҡтарҙа, шул юл буйлап, һис бер нәмәгә эләкмәй, бер йәйләүҙән икенсе йәйләүгә йәшерен тоҙ ташығандар, шуға күрә ул юлды тәүҙә Ҡуңыр буға, һуңға табан ҡайһы бер ерҙәрҙә Күс, Тоҙ юлы тип тә йөрөтөр булғандар»[1], — тип әйтелә. Бында Ҡуңыр буға юлының хәрби, күс юлы булыу ғына түгел, ә йәшерен юл булыуы ла аңлашыла. Мөғәллим Мирхәйҙәров вариантында Ҡуңыр буға юлының этимологияһы: «Башҡорт иленең төньяғынан төшлөк яғына мал ҡасып ҡайтҡан юл «Ҡуңыр буға юлы» аталып ҡала. Шул замандан бирле ҡуңыр мал — изге мал булып, ку-

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп 12/219, 129-сы б.

ныр төҫ изге төҫ һаналып ҡалған», — тип аңлатыла һәм ҡуңыр мал менән ҡуңыр төҫтө башҡорттарҙың изге һанауҙары хаҡында мәғлүмәт бирелә. Шулай итеп, Ҡуңыр буға башҡорт эпосында һәм риүәйәттәрендә тотем образ итеп һүрәтләнә. Ул изге һыйыр малының үрсеп китеүенә булышлыҡ итә, башҡорт ырыуҙарына хәүеф-хәтәрһеҙ күсенеп йөрөрлөк, ғәскәр йөрөтөрлөк Урал һырты аша юл һала.

Мифик Ҡуңыр буға, үгеҙ образы башҡорт халыҡ ижадында, шул иҫәптән эпоста, ҙур урын алып тора. «Урал батыр» эпосында үгеҙ һыйыр тоҡомон башлап ебәреүсе тотем, башҡорттарға муллыҡ килтереүсе, уларҙы ҡурғаусы рәүешендә һүрәтләнә. Үгеҙ образы төрки халыҡтар фольклорында ифрат киң таралған. Бигерәк тә ҡоба, ҡуңыр, күк үгеҙ образдары ҙур популярлыҡ алған. Хатта ҡайһы бер ырыу, халыҡ үҙҙәренең сығышын үгеҙгә бәйләй, уны ырыу башы һанай. Мәҫәлән, боронғо оғуз (үгеҙ) төрки ҡәбиләләре, йәғни хәҙерге төрөкмәндәрҙең, төрөктәрҙең ата-бабалары, үҙҙәренең этник сығышын үгеҙ менән Аҡ каган исемле ҡатындан тыуған Оғуз каганға бәйләгәндәр һәм уны ырыу башы һанағандар.

Шуныһын да әйтеп үтеү мөһим, башҡорт халҡының этник составында сығышы менән боронғо оғуз төрки ҡәбиләләренә барып тоташҡан һалйоғот, төрөкмән, тәкәй ырыуҙары бар. Башҡорттар араһында үгеҙ культының ныҡлы таралып китеүенә был ырыуҙарҙың ниндәйҙер кимәлдә роль уйнаған булыуы ихтимал.

Хакас фольклорсыһы В. Е. Майногашева фольклорҙа күк һәм ҡара үгеҙ образдарын

тикшереүгә арналған мәҡәләһендә Енисей руна яҙмаларында Буга тип аталған кеше исеме һаҡланыуын билдәләй. Ул шулай уҡ хәҙерге ҡырғыҙҙарҙа — буға, хакастарҙа пуга (буға) этнонимы һаҡланыуын, ә буряттарҙың элек Буха-Нойон тип аталған изгеләштерелгән үгеҙ тотемдары булғанлығы хаҡында мәғлүмәттәр килтерә [1]. Тикшеренеүсе төрки телле Саян-Алтай халыҡтары ижадында Күк һәм Ҡара үгеҙ хаҡында миф һәм эпик сюжеттарҙың таралған булыуын, күк үгеҙҙең ырыҫ килтереүсе, мал үрсемен арттырыусы, кешеләрҙең ярҙамсыһы булараҡ һүрәтләнеүен әйтә. Ғәҙәттә эпик герой көслө дәү үгеҙҙе яңғыҙ алышта еңеп сыға, уны буйһондора, үҙенә ярҙамсы, кешеләргә дуҫ яһай. Мәҫәлән, «Ҡурҡыу белмәҫ Хан-Хулюк» тува эпосында Хан-Хулюк батыр күк үгеҙҙе еңә һәм уның ергә батҡан мөгөҙөн тартып сығара [2].

«Ҡурҡыу белмәҫ Хан-Хулюк», шулай уҡ алтай халҡының «Малчы-Мерген» [3] һәм башҡорт халҡының «Урал батыр» эпик ҡомартҡыларында батырҙарҙың ғәҙәттән тыш ҙур һәм ҡурҡыныслы үгеҙ менән алыш эпизодтарын һүрәтләүҙә ҙур оҡшашлыҡ бар. Урал батыр Ҡатил батшаның «һарайын күтәрә алған», ерҙе тырнап, үкереп, шылағайын ағыҙып, тауҙай булып килгән үгеҙен алышып еңә, әммә уны үлтермәй. Батыр ергә батҡан

[1] Майногашева В. Е. Некоторые сюжеты сивого (синего) и черного быков в фольклоре Саяно-Алтайских тюркоязычных народов. — Сб: Алтайский фольклор и литература. Горно-Алтайск, 1982, 137—138-се б.

[2] Шунда уҡ, 142—143-сө б.

[3] Шунда уҡ.

үгеҙҙе ике мөгөҙөнән шаҡарып күтәреп алып ҡуя. Шунан үгеҙгә ҡарап:

— Ҡулым тейгән мөгөҙөң
Ҡәкрәйгән көйөнсә,
Тешең төшкән ауыҙың
Өҫкө тешең үҫмәйсә,
Айырылған тояғың
Һис тә берекмәйенсә,
Үҙең түгел, балаң да
Мәңге ҡалыр шул көйсә.
Кеше көсөн күрҙең һин,
Хәлһеҙлегең белдең һин,
Кешегә мөгөҙ сайҡама,
Еңермен тип, айҡанма![1] —

ти. Был юлдарҙа этнологик күренештәрҙе лә тойорға була. Мәҫәлән, һыйыр малының мөгөҙө ни өсөн кәкре булыуы, йыртҡыс йәнлектәргә хас оҙон тештәренең булмауы, айыры тояҡлы ҡалыуы, йорт хайуанына әйләнеүе хаҡында аңлатыуҙар бар. Төрки халыҡтарҙың эпосында батырҙың, ғөмүмән, кешеләрҙең үгеҙ менән осрашыуы, дуҫлашыуы һәр ваҡыт тип әйтерлек көрәш менән башлана. Үгеҙ кешеләргә тиҙ генә бирелмәй. Ғәҙәттә күк үгеҙ илаһи көскә эйә булған изгелекле образ итеп, ә ҡара үгеҙ күберәк дошман яҡлы хайуан образында һүрәтләнә. Күк үгеҙ — кешеләргә, көтөүгә муллыҡ, түл килтереүсе изге хайуан.

Хакастар араһында киң таралған мифологик риүәйәттә Алтайҙан килгән Күк үгеҙ урман менән ҡапланған бейек тауға — тасхылға — менеп үкереүе була, бөтә тирә-яҡтағы һыйырҙар быуаҙыйҙар. Кешеләр Күк үгеҙҙе йүкәнән ишелгән арҡан менән тоторға уйлайҙар, ләкин үгеҙ арҡанды өҙөп китә. Ул Тей

[1] БХИ. Эпос, 1972, 58-се б.

(Төй) йылғаһына етер-етмәҫтән тағы үкереп ебәреүгә, ундағы бөтә һыйырҙар быуаҙыйҙар. Кешеләр, байлыҡ, ырыҫ беҙҙең ҡулға үҙе килә, тип шатланып, үгеҙҙе ҡыл арҡан менән тоторға уйлайҙар. Әммә үгеҙ ҡыл арҡанды ла өҙөп китә. «Ҡамышлы Тамаҡҡа еткәс кенә уны ҡайыш арҡан менән тотоп алалар — бына ни өсөн Күк үгеҙҙе тотҡан кач (хаас) кешеләрендә мал нык үрсей» [1], тип аңлата риүәйәт.

Алтайҙан килгән Күк үгеҙ илаһи, изгелекле хайуан, байлыҡ, бәхет символы итеп ҡабул ителә. Элек нигеҙҙә малсылыҡ менән көн күргән яҡуттарҙың фольклорында ла күк үгеҙ образы бар. Күк үгеҙҙе (аҡ үгеҙ) һалҡын ҡыш килтереүсе йән итеп ҡабул иткәндәр һәм уны ғәҙәттә яуыз, тиҫкәре образ итеп һүрәтләгәндәр. Күренекле яҡут ғалимы Г. У. Эргистың тикшеренеүҙәренә ҡарағанда, эпик поэма — олонхоларҙа яуыз көс эйәһе абаалар түбәнге донъя — ер аҫтында йәшәйҙәр һәм кешеләр йәшәгән урта донъяға дәү, ҡурҡыныслы үгеҙҙәргә атланып килеп сығалар. Г. У. Эргис килтергән мәғлүмәттәр буйынса, элек яҡуттар мөгөҙлө малды йылҡыға ҡарағанда әҙерәк ихтирам иткәндәр. Йылҡы аллалар тарафынан ергә күктән төшөрөлгән, тигәндәр. Мөгөҙлө малдың ҡурғаусыһы, эйәһе көнсығышта, ҡояш тыуған ерҙә йәшәүсе Ынахсыт Хатун (ҡатын) һаналған. Тәүге һыйырҙар, имеш, һыуҙан сыҡҡандар һәм кешеләр тарафынан ҡулға эйәләштерелгәндәр [2].

Яҡут фольклорында Күк үгеҙ, ғөмүмән,

---

[1] Хакасские предания, сказки. / Составители П. А. Трояков и Т. Г. Ткачева. Абакан, 1960, 158-се б.

[2] Эргис Г. У. Очерки по якутскому фольклору. М., 1974, 123-сө б.

үгеҙ образы кире сифаттар менән һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта һыйыр малы һыу эйәһе бүләге, һыуҙан сыҡҡан изге мал рәүешендә аңлатыла.

Һыйыр малының һыуҙан сығыуы һәм кешеләр тарафынан ҡулға эйәләштерелеүе мотивы башҡорт фольклорында ла бар. Ҡатил батша үгеҙе — Аҡбуҙат кеүек күктән төшкән мал түгел, ә һыу аҫтында, ер аҫтында йәшәүсе яуыз йәндәр эйәһенең хайуаны. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосының ҡайһы бер варианттарында, шулай уҡ башҡа риүәйәттәрҙә йылҡы малы менән бергә һыйыр, кәзә-һарыҡ малдарының да күл төбөнән сығыуы хаҡында әйтелә.

Үгеҙ образының донъя халыҡтары фольклорында кире сифаттар менән һүрәтләнеүенә байтаҡ миҫалдар килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, боронғо грек мифологияһында үгеҙ — күп осраҡта кире образ. Баш алла Зевс үгеҙ ҡиәфәтендә Финикия батшаһы Агенорҙың ҡыҙы Европаны урлай һәм Крит утрауына алып бара. Шул уҡ ваҡытта үгеҙҙең диңгеҙҙән сыҡҡан хайуан икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Үгеҙ хатта ҡатындар менән мөнәсәбәткә керә. Мәҫәлән, диңгеҙ аллаһы Пасейдондың диңгеҙ үгеҙе менән Минос батшаның ҡатыны Пассифаи сәйер мөхәббәт тоталар. Пассифаи менән диңгеҙ үгеҙенән кеше кәүҙәле, үгеҙ башлы ҡот осҡос йән эйәһе — Минотавр тыуа. Минотавр Дедал төҙөгән ер аҫты лабиринтында йәшәй һәм Афинанан килтерелгән енәйәтселәрҙе, ҡорбан өсөн бирелгән егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы ашай. Минотавр аҙаҡ Эгей батшаның улы Тесей тарафынан үлтерелә [1].

---

[1] Мифологический словарь, 117-се б.

Боронғо иран мифологияһына ҡарағанда, ерҙәге иң тәүге йән эйәһе үгеҙ (йәки һыйыр) булған. «Авеста» һәм уны ижад итеүсе ырыу ҡарашы буйынса бик боронғо дәүерҙә һыйыр изге хайуан иҫәпләнгән, һәм ырыу үҙенең сығышын ана шул һыйырға бәйләгән, уны ырыуҙың дуҫы һанап, ихтирам иткән. Һыйыр һәм үгеҙ итен ашау дин тарафынан ҡәтғи тыйылған[1].

Ошондай уҡ ҡарашты Һиндостан халыҡтары тормошонда ла күҙәтергә мөмкин. Һыйыр малы — Һиндостанда изге хайуан. Уны рәнйетеү, уның итен ашау тыйыла. Һыйыр һөтө Иранда ла, Һиндостанда ла изге, аллалар эсемлеге һаналған һәм хөрмәт ителгән. Төрки-монгол халыҡтарында ла һөт (аҡ) — изге эсемлек. Хужа сит кешегә йә булмаһа күршекүләненә һөт биргән ваҡытта һөт ҡойолған һауытҡа күмер киҫәге ташлаған. Күмер күҙ тейеүҙән, малға зыян, зәхмәт ҡағылыуҙан, мал ҡото китеүҙән һаҡлай, тип уйлағандар.

Башҡорт фольклорында, бигерәк тә эпос жанрында халыҡтың күк, аҡһыл-күк, ҡоба, ҡуңыр, аҡ, һары төҫкә ҙур ихтирам менән ҡарауы күренә. Был бер башҡорт фольклорына ғына хас күренеш түгел. Ғөмүмән, төрки-монгол халыҡтарында һәм башҡа донъя халыҡтарында ла күк, аҡ төҫтө ихтирам итеү, уны изгеләштереү көслө, һәм ошо ҡараш фольклорға, көндәлек тормошҡа үтеп ингән.

Башҡорт фольклорында йыш осрай һәм хөрмәт ителә, изге күрелә торған ҡош-ҡорт, йәнлек, хайуан образдары нигеҙҙә күк, аҡ, ҡу-

---

[1] Маковельский А. О. Авеста. Изд-во АН Азербайджанской ССР, Баку, 1960, 75-се б.

ңыр, аҡбуҙ, ҡоба, һары төҫтә булалар. Мәҫәлән, Аҡбуҙат, Һарат, Ҡүктолпар, Ҡуңыр буға, Ҡуңыр һыйыр, Аҡ болан, Аҡ тейен, Аҡ бүре, Аҡҡош (аҡ ҡош), Аҡ ябалаҡ, Аҡ шоңҡар, Аҡ йылан образдары башҡорт фольклорында бик популярҙар һәм тик ыңғай сифаттар менән генә һынландырылғандар.

Беҙҙеңсә, аҡ, күк төҫтөң изгеләштерелеүенең нигеҙендә ике сәбәп бар. Берҙән, аҡ төҫ — таҙалыҡ, паклык символы. Икенсенән, башҡорттарҙың, шулай уҡ башҡа бик күп донъя халыҡтарының ҡарашы буйынса донъя өс төп өлөштән, өс ҡаттан — күк (өҫкө ҡат), ер (урталыҡтағы ҡат), ер йәки һыу аҫты донъяһынан (аҫҡы ҡат) тора. Самрау, Тәңре, аллалар, изге йән эйәләре күктә йәшәйҙәр. Тереклек өсөн кәрәкле ҡояш, ай, йондоҙҙар ҙа күктән яҡтырталар. Донъяның изге йәндәр йәшәй торған иң өҫкө ҡаты — күк төҫтә; ҡояш та, уның нурҙары ла — һары төҫтә; ай нуры, күктән яуған ҡар — аҡ төҫтә. Был шулай халыҡ аңына һәм хәтеренә һеңгән. Шуның өсөн дә күктә осоп йөрөүсе толпарҙар фольклорҙа ғәҙәттә күк буҙ, тимгел күк, һары төҫөндә һүрәтләнәләр. Аҡ, күк, һары, буҙ, ҡуңыр төҫтәр изге төҫ һаналған, ошо төҫтәге хайуандар, йәнлектәр, ҡошҡорт изге (күктән төшкән) йән эйәһе тип ҡаралған. Хатта ҡартайыуҙы, сәс-һаҡал ағара башлауҙы ла кешенең йылдан-йыл аҡылға ултыра, изгегә әйләнә барыуы һөҙөмтәһе тип ҡарағандар. Шуның өсөн төрки-монгол донъяһында, ғөмүмән, башҡа халыҡтарҙа ла, аҡһаҡалдарҙы, оло кешеләрҙе (изге йәндәрҙе) ихтирам итеүгә, хөрмәтләүгә ҙур әһәмиәт биргәндәр. Төрки халыҡтарҙа аҡ төҫкә ихтирамдың ҙурлығын билдәләй торған тағы бер миҫал

килтерергә мөмкин. Мәсәлән, башҡорт халҡында нәҙер әйтеү (әйтеү әйтеү) йолаһы бар. Был йола буйынса кеше көтөлгән, бик теләгән эше уңышлы барып сыҡһа, фәләнсә изгелек эшләр йә фәлән малдан ҡорбан салыр инем, тип тәңрегә һүҙ биреп ҡуя. Әгәр ҙә нәҙер әйтеүсенең көткән теләге бик ҙур, мөһим булһа һәм шул эш үтәлә ҡалһа, ул аҡтан, йәғни аҡ төҫтәге йәндән (малдан), ҡорбан салырға һүҙ бирә. Аҡ төҫтәге йәнлек, хайуан йә ҡош-ҡорт итен ашау, уны ҡорбанға килтереү оло хөрмәт һаналған.

* * *

Үрҙә ҡарап үтелеүенсә, башҡорттарҙа һыйыр малы культы, йылҡы культына ҡарағанда сағыштырмаса ҡайтышыраҡ булыуына ҡарамаҫтан, ярайһы уҡ киң таралған булған һәм фольклорҙа сағылған.

Башҡорт халҡының тормошонда һәм фольклорында мал, йәнлек, ҡош-ҡорт культының үҫеүенә, изге һаналған хайуандар, ҡош-ҡорт хаҡындағы риүәйәттәрҙең, эпик сюжеттарҙың тыуыуына һәм таралып китеүенә реаль шарттар булған. Улар халыҡтың борондан малсылыҡ менән шөғөлләнеүенә, тәбиғи шарттарҙың ҡулайлығына тығыҙ бәйле.

Башҡорттар тормошонда, элек күсмә малсылыҡ хужалығы башҡа хужалыҡ тармаҡтарына ҡарағанда өҫтөнлөк алғанға һәм күп быуаттар буйы хөкөм һөргәнгәлер, күрәһең, хайуандар, бигерәк тә йылҡы культы нығыраҡ таралған булған.

Йылҡы культы һәм уның менән бәйле мотивтар башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадына

ғына түгел, музыкаль фольклорына, бейеү һәм биҙәү сәнғәтенә, уның тормошоноң төрлө өлкәләренә, ырым-йолаларына үтеп ингән.

Башҡорт фольклорында ҡанатлы толпар — художество яғынан иң ныҡ эшкәртелгән образ. Боронғо халыҡтың ҡарашы буйынса, толпарҙың ҡанатын бер кем дә, хатта уға атланған батыр ҙа күрергә тейеш булмаған. Толпар тик төн ҡараңғылығында, шулай уҡ ҙур араларҙы тиҙ ваҡыт эсендә үтергә кәрәк булғанда ғына ҡанатын йәйгән һәм батырҙы күҙ асып йомғансы кәрәкле урынға илтеп ҡуйған. Осорҙан алда толпар һәр ваҡыт батырға күҙен йоморға ҡуша, осоуҙан туҡтап, ҡанатын йыйғандан һуң ғына күҙ асырға мөмкин икәнлеген белдерә. Әгәр ҙә кем дә кем уның ҡанатын күрһә һәм күҙ тейҙерһә, толпар һәләк булған. Кеше күҙе тейеү, уны күреп һоҡланыу толпар өсөн үлемесле һаналған. Шуның өсөн хөрәфәттәргә ышанған башҡорттар төндә йылҡы көтөүенә килгән ваҡытта, толпар йәйгән ҡанатын йыйып өлгөрһөн өсөн, уны тамаҡ ҡырып йәки тауыш биреп иҫкәрткәндәр. Шулай уҡ өйөрҙәге йылҡылар ҙа толпарға кешенең яҡынлашыуын иҫкәртә, тип уйлағандар. Бындай ҡараш, хөрәфәттәр бигерәк тә «Алатүлгән мороно»[1], «Турат сағылы», «Ҡейәүташ»[2] топонимик риүәйәттәрендә асыҡ сағылған. Мәҫәлән, «Алатүлгән мороно» риүәйәтендә былай тиелә: «Бо-

---

[1] «Алатүлгән мороно» риүәйәтен 1981 йылда Башҡортостандың Ғафури районы Ҡауарҙы ауылында Сиражетдинов Мөхәмәҙиә Сафа улынан (1894 йылғы) М. М. Сәғитов яҙып алды.

[2] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980, 97—99-сы б.

рон Асҡын ауылы янындағы тау морононда бер кеше үҙенең бик яҡшы, һолло ала атын лапасҡа индереп, бикләп ҡуйған була. Был ала ат ҡанатлы толпар булған икән. Төндә хужаһы, лапаҫка инеп, атын ҡарамаҡ була. Төндә ул аты янына тамаҡ ҡырып инергә тейеш булһа ла, был юлы йоланы үтәмәй, лапаҫка ҡапыл килеп инә. Килеп инһә, ни күҙе менән күрһен, ала ат йондоҙ кеүек йымылдап, ҡанаттарын йәйеп, ғәжәп матур булып ята икән. Хужа хайран ҡалып ҡарап тора. Ул ҡапыл килеп ингәнлектән, ала толпар ҡанатын йыйып өлгөрмәй ҡала. Хужа йоланы тотмауына үкенә, ләкин һуң була: ала толпар күҙ тейеүҙән һәләк була. Ала толпарҙы изге мал һанап, хөрмәтләп тау моронона күмәләр. Шунан бирле толпар күмелгән тау мороно «Алатүлгән мороно» тип аталып ҡалған». «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпик ҡомартҡыһында Күк толпар, батыр алдына килеп баҫҡан ҙур ҡурҡынысты күреп, Ҡуҙыйкүрпәскә ҡамсы менән уң ҡабырғаһына һуҡҡанда һул ҡабырғаһынан ҡан атылып сығырлыҡ итеп һуғырға һәм күҙен йоморға ҡуша. Хәүефле аралыҡты үткәс кенә ул батырға күҙен асырға ярағанлығын әйтә.

Төрки халыҡтарҙың эпик ижадында, шул иҫәптән башҡорт эпосында ла, батыр тарафынан атты тылсымлы юл менән саҡырыу мотивы киң таралған. Эпик герой, ғәҙәттә кеше телен белгән толпар атҡа атланып, батырлыҡтар ҡылып йөрөй. Ниндәйҙер ваҡытҡа аты менән айырылышып торорға тура килгәндә, герой аттың ҡойроғонан, ялынан өс бөртөк ҡыл йолҡоп алып ҡала. Толпар кәрәк булған саҡта оһо өс бөртөк ҡылды яндырыуы була, ат

уның алдына килеп тә баҫа. Был йоланы батырға ғәҙәттә толпар үҙе өйрәтә.

Мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосында Һәүбән батыр Аҡбуҙатты ҡыл көйҙөрөп саҡырып ала [1]. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа Күк толпар, телгә килеп, Ҡуҙыйкүрпәскә: «Минең өс бөртөк ҡылымды алып ҡал да үҙемде ебәр, мин кәрәк булғанда, ана шул өс ҡылымды өтөрһөң, мин һинең янына килеп етермен» [2],— ти. «Алтынҡойроҡ-Көмөшьял» әкиәтендә Ҡыҙрас батырға Алтынҡойроҡ-Көмөшьял айғыр: «Һин минең ҡойроҡтан өс бөртөк ҡылымды ал да үҙемде ебәр. Кәрәк булған сағымда шул ҡылдарҙы һыҙғыртырһың да, мин килеп етермен» [3], — ти.

Бындай типтағы миҫалдарҙы башҡа ҡобайырҙарҙан һәм әкиәттәрҙән дә бик күп килтерергә мөмкин. Атты ҡыл көйҙөрөп саҡырыу — төрки-монгол эпик ижадында традицион мотив. Ул боронғо мәжүсилек дәүерендә кешеләр ҡарашында киң таралған сәс, йөн, шулай уҡ тырнаҡ менән кешене йәки хайуанды бер тиң, йә бер бөтөндөң киҫәге тип ҡарау йолаһына бәйләнгән. Хайуандар йөнө, кеше сәсе менән бәйле боронғо магик ҡараш эҙҙәре хәҙерге көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, башҡорттарҙа йәрәшеүҙе «сәсе сәскә бәйләнгән» тип әйтеү бар. Әгәр ҙә ҡыҙ менән егетте ҡауыштырырға теләһәләр, ҡыҙҙың бер-ике бөртөк сәсен, берәй нәмәгә төрөп, егет йоҡлаған мендәр эсенә йәшереп һалғандар (йәки киреһен-

---

[1] БХИ. Эпос, 1972, 175-се б.

[2] Башҡорт халыҡ ижады. 2-се том. Өфө, 1959, 148-се б.

[3] Шунда уҡ, 63-сө б.

сә). Ҡыҙҙың сәсе егеттә мөхәббәт уятырға тейеш булған.

Башҡорттар, бүренең моронона ниндәй малдың йөнө ҡунһа, шул малды йығып ашай, тип ышанғандар. Бүре моронона йөн ҡунғанда олой, тигән ырым йәшәй. Шулай итеп, мал менән уның ҡойоп ҡалдырған йөнө тиң күреләэ.

Боронғо хөрәфәттәр буйынса, кеше, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар, ҡойолған һәм ҡырҡылған сәсен, алынған тырнағын теләһә ҡайҙа ташларға тейеш булмаған. Сәс, ерәй әйбергә урап, өй мөйөшөндә йәки кәштәлә һаҡланған. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ үлә ҡалһа, сәс һалынған төйөнсөктө лә бер үк ҡәбергә күмгәндәр. Туҙып йөрөгән сәс ен-шайтан ҡулына эләкһә, ул сәстең эйәһенә зәхмәт ҡағыла, тип уйланылған. Ошондай уҡ ышаныуҙар, ырымдар туваларҙа күҙәтелә. Мәҫәлән, бараан ырыуына ҡараған Балдан Сатчыкович Лузджук (1915 йылғы) мәғлүмәттәре буйынса, тува ҡатындары ҡойолған, киҫелгән сәстәрен бер ваҡытта ла ташламаған, утта ла яндырмаған, ә бер тоҡсайға йыйып барған. Сәс теләһә ҡайҙа туҙып йөрөһә, ауырыу ҡағыла, тип ҡурҡҡандар [1].

Элек башҡорттарҙа бәлә-ҡазанан һаҡлай торған, йортҡа-малға ҡот, бәрәкәт, ырыҫ килтерергә тейешле ырымдар булған, һәм уларҙың ҡайһы берҙәре хәҙерге көнгәсә һаҡланып ҡалған. Шуларҙың береһе — ҡот алыу ырымы. Ҡот алыу — ғәҙәттә мал һатҡан ваҡытта йәшерен рәүештә үткәрелә торған йола. Бо-

[1] 1979 йылда Тува АССР-ы Тоджа районы Азыр-Кижиг ауылында автор тарафынан яҙып алынды. Б. С. Лузджук — Тува республикаһының атҡаҙанған чабаны, персональ пенсионер, элек һунарсылыҡ менән дә шөғөлләнгән.

ронғо төрки халыҡтарҙа *йән, ҡот, тын* бер мәғәнәлә ҡулланылған. Шуның өсөн дә йәне сыҡты, ҡото осто, тыны сыҡты һүҙ бәйләнештәре бер үк мәғәнәгә эйә булған. Ҡот малдың именлеген, иң яҡшы сифаттарын символлаштырған. Мәҫәлән, берәй кеше һыйырын һатыр булһа, һыйырҙың елененән, ҡойроғонан, һыртынан, маңлайынан йөнөн, һатып алыусыға белгертмәй, йолҡоп алып ҡалырға тейеш булған. Шулай иткәндә, һатылған һыйырҙың ҡото, бөтә яҡшы сифаттары йортта, хужа ҡулында ҡалған. Кеше малды һатып алғанда һатыусынан нисек булһа ла ҡот алдырмаҫҡа тырышҡан. Ҡот алыу йолаһы ғәҙәттә малды сит кешегә биргәндә йә һатҡанда үтәлгән, ә үҙ туғандарына, яҡындарына ҡарата ҡулланылмаған. Шуныһы мөһим: башҡорттар өлөшлө малды һатмағандар, башҡа кешегә бирмәгәндәр. Өлөшлө атты тик хужа үҙе генә менеп йөрөй алған, был башҡа кешегә рөхсәт ителмәгән. Өлөшлө ат ҡул осонда тотолған. Ошоға оҡшаш йола тува ерлегендә лә урын алған. Өлөшлө атты тувалар ытыҡ ат (изге ат) тип йөрөтәләр. Изге атты хужа ҡәҙерләп, һаҡлап тотҡан, үҙе генә менеп йөрөгән. Ытыҡ ат бер кемгә лә һатылмаған һәм бирелмәгән, ял-ҡойроғо ҡырҡылмаған. Ытыҡ ат китһә, ҡот китә, бәхет ҡулдан ысҡына, тип уйлағандар. Туваларҙа күк ат изге төҫлө ат һаналған. Был атты ҡатындарға менеп йөрөү тыйылған. Ундай атта тик кейәүгә сыҡмаған, гөнаһһыҙ ҡыҙҙар ғына менеп йөрөй алған [1].

---

[1] Мәғлүмәтте 1979 йылда Тува АССР-ы Тодж районы Тоора-Хем поселогында Тамдын-оол Василий Санмаевичтан (1922 йылғы) автор яҙып алды.

Яҡуттар ҙа, өйөрҙә өлөшлө, изге ат (Ыдыҡ ат) була, тип ышанғандар. Бигерәк тә улар күк атты изгеләштергәндәр. Яҡуттар хәҙерге көндә лә Ысых (ҡымыҙ) байрамында күк төҫтәге атты, эйәр-өпсөнө менән матур итеп биҙәп, майҙан уртаһындағы сергегә (бағанаға) бәйләп ҡуялар, күк ат тирәләп йырлап йөрөйҙәр.

Ошондай уҡ ырым элек ҡаҙаҡтарҙа ла булған. Чокан Валихановтың күҙәтеүҙәренә ҡарағанда, ҡаҙаҡтар көтөүҙән айырып сбәргән ваҡытта йылҡының ялынан бер нисә ҡыл алғандар һәм уның һеләгәйсенә еүешләп, кеҫәгә һалғандар [1]. Ошо ырым буйынса, ат хужа ихтыярына буйһондороҡло ҡалған. Башҡа ырымдар буйынса, берәй кешегә күлдәк биргән саҡта хужа бер һиҙәбен йәки бауын, йылҡы һатһа — йүгәнен, дөйә һатһа — нуҡтаһын, ыласын һатһа — тышауын, эт һатһа, муйынсағын бирмәй ҡалдырған [2]. Ошоға оҡшаш ырымдарға миҫалдарҙы башҡорт фольклорынан да табырға мөмкин. Мәҫәлән, «Аҡыллы ҡарт менән иҫәр батша» әкиәтендә походҡа сыҡҡан йәш батша ғәскәре аслыҡтан бөтә булған атты һуйып ашап бөтә, эйәр-өпсөндәрен ташлай. Тик бер егет кенә, атаһы өйрәтеүе буйынса, эйәр, йүгәнен ташламай, күтәреп йөрөй. Һәм аҙаҡ бына тигән күк толпар егет алдына килеп баш эйә [3].

«Ҡейеҙбай менән батша ҡыҙҙары» әкиәтендә бер ҡарт өс улына көн һайын төндә туғайға таш тоҙҙо яларға килгән өс ҡырағай атты то-

---

[1] Валиханов Ч. Собрание сочинений в пяти томах, т. 1. Алма-Ата, 1961, 484-се б.

[2] Шунда уҡ.

[3] Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Дүртенсе китап. / Төҙөүсеһе Ә. М. Сөләймәнов. Өфө, 1981, 105-се б.

топ эйәләштерергә ҡуша. Кесе ул, Кейеҙбай, тимер күк атты һағалап тотоп ала. Тимер күк ат, бик нык алышҡандан һуң телгә килеп: «Егет, һин уң яҡҡа ятҡан ялымдан өс бөртөк ҡылымды ал да мине ебәр. Бик кәрәк булған сағымда ана шул өс ҡылымды тигеҙләп ҡарарһың да, ҡайһыһы ҡыҫҡа булһа, шуныһын дүңгәләк итеп, эсенән һыҙғырырһың — мин һинең янына тып итеп килеп тә баҫырмын», — тине. Кейеҙбай тимер күк аттың уң яҡҡа ятҡан ялынан өс ҡылын тартып алды, ә ат шунда уҡ юҡ булды, ти.

Иртәгеһен Кейеҙбай өйгә ҡайтҡас, атаһы унан:

— Йә, Кейеҙбай улым, нимә күрҙең? — тип һораны, ти. Кейеҙбай:

— Таң алдынан бер тимер күк ат килеп, тоҙҙо ялап китте; бына өс бөртөк ҡылын йолҡоп алып ҡалдым, — тип әйтте, ти. Ағалары унан:

— Ат һинән ҡойроғон тотторған икән! — тип, быуындары ҡатып көлдөләр, ти. Ә аталары уларға:

— Ауыҙығыҙҙы йырып көлмәгеҙ төптө юҡҡа, ҡылы булһа, аты үҙе килер! — тип, кинйә улының арҡаһынан ҡаҡты, ти [1].

Шулай итеп, фольклор геройы өсөн ҡылды ҡулға төшөрөү аттың үҙен ҡулға төшөрөү менән бер. Ат кәрәк булғанда, ул уны ҡыл ярҙамында үҙе теләгән ваҡытта саҡыра аласағы әкиәттең үҙендә үк әйтелә.

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Икенсе китап. / Төҙөүселәре М. Х. Минһажетдинов менән Ә. И. Харисов. Өфө, 1976, 124-се б.

Бөтә был миҫалдар элек башҡорттарҙың ышаныуҙарында сәс, ҡылдың ҙур урын алыуы хаҡында һөйләй. Сәс, йөндән кеше йәки хайуан буйһондороҡло була, тип уйлағандар. Төрки-монгол халыҡтарының эпик фольклорында киң таралған ҡыл һыҙғыртып ат саҡырыу мотивы, шулай уҡ тормош-көнкүрештә сәсте ихтирам итеү, бөтәһенән дә элек, боронғо заманда бөтөндө өлөш, киҫәк менән тиңләштерергә, алмаштырырға тырышыуҙан килә.

Башҡорттар араһында, йылҡы малы кеше күҙенә күренмәгән ен-шайтандарҙы ла күрә ала, күҙ бәйләүгә бирешмәй, тигән ҡараш йәшәгән. Мәҫәлән, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосында (Т. Беляев варианты) Ҡуҙыйкүрпәстең Йондоҙ юлаусы аты төндә лә дейеү-пәрейҙәр ҡаҙып ҡуйған тәрән соҡорҙарҙы, ендәрҙе күрә, батырҙы хәүефле урындарҙан имен-аман алып сыға. Хатта ат тиҙәге тотоп ултырған кешене лә күҙ бәйләүсе алдай алмай, тип уйлағандар. Байтаҡ ваҡыт буш торған өйгә эйәләшкән ен-пәрейҙәрҙе ҡурҡытып, ҡыуып сығарыр өсөн дә элек өйгә ат индерер, изге артыш ағасын яндырыр булғандар.

Башҡортостандың Дәүләкән районы Иҫке Мерәҫ ауылында йәшәгән Ғәйнуллин Фәтхулла Ғәйфулла улынан (1888 йылғы) яҙып алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Дим буйы башҡорттарында күҙ тейеүҙән һаҡлау өсөн яңы тыуған ҡаҙ бәпкәләрен ат ҡыубашының күҙ төбө аша үткәреү ғәҙәте булған [1]. Был йола фән өсөн шаҡтай ҡыҙыҡлы булһа ла, әлегә

---

[1] Авторҙың 1972 йылғы фольклор экспедицияһы материалдарынан.

уның этнографтар һәм фольклорсылар тарафынан өйрәнелгәне юҡ.

Башҡортостанда хайуандар культына бәйле боронғо таш һындар, ҡая-ташҡа төшөрөлгән йылҡы, үгеҙ һүрәттәре осрай. Мәҫәлән, хәҙерге Белорет районының Иҫке Бриш менән Муллаҡай-Төрөкмән ауылдары араһында бер ҙур ялан бар. Ошо яландың бер яҡ ситендә инәһенән аҙашып ҡалған ҡолонға оҡшаған, бер метр самаһы бейеклектәге яңғыҙ таш һын тора. Уны тамъян, ҡатай, ҡумырыҡ ырыуы башҡорттары «Ҡолоҡай таш» тип тә (ҡолонло ул яҡта шулай атайҙар), «Йәй ташы» тип тә йөрөтәләр. Бына ошо таш хаҡында бик күп легендалар тыуған. Ул изгеләштерелгән һәм культ ташына әүерелдерелгән. Йәй ташы (Ҡолоҡай таш) боронғо ҡараштар, мәжүсилек менән бәйле. Борон башҡорттар ошо таш ярҙамында теләгән ваҡытта ямғыр яуҙырырға, көндө аяҙытырға мөмкин, тип ҡарағандар. Был, һис шикһеҙ, тотем ярҙамында боронғо кешеләрҙең тәбиғәтте үҙ ихтыярына буйһондорорға, уның өҫтөнән хакимлыҡ итергә тырышыуҙары менән аңлатыла.

Элекке ышаныуҙарға ҡарағанда, «таш ҡолон»ға мал һуғылһа, йәки уға сыбыртҡы, сыбыҡ һәм башҡа нәмә менән һуҡһаң, йәшен атып, ҡойоп ямғыр яуа торған булған. Ямғыр оҙаҡҡа китһә, уны туҡтатыр өсөн яҡын-тирә ауылдарҙан, йәйләүҙәрҙән кешеләр ырыу аҡһаҡалдары менән килеп, ҡорбан салып байрам итеп, халыҡтан йыйылған май менән таш ҡолондо һылап, сатнаған таштарын йәбештереп, теләк теләһәләр, имеш, ямғыр туҡтар булған. Таш ҡолондоң рухын ризалаштырыу өсөн ҡорбан салыу, уның хөрмәтенә уйын-көлкө, бай-

рамдар үткәреү, һис шикһеҙ, боронғо башҡорттарҙың изгеләштерелгән ҡолон (ат) һынына табыныуҙары хаҡында һөйләй.

Шуныһын да әйтергә кәрәк, башҡорттарға Йәй ташына һуғыу ҡәтғи тыйылған булған. Уға һуҡҡан кешене мотлаҡ рәүештә йәшен атып үлтерергә тейеш һаналған. Легендалар буйынса, ямғыр яуҙырыу кәрәк булғанда, йәшен атып үлтереүҙән ҡурҡҡан башҡорттар ошо ҡәтғи һаналған тыйыуҙы (табуҙы) хәйлә менән боҙғандар. Улар ғәҙәттә Йәй ташының серен аңламаған үткенселәрҙе, сит халыҡтан булған кешеләрҙе аҡса йәки мал биреп яллап, иҫертеп һуҡтырыр булғандар. Был яҡтағы башҡорттар элек-электән Инйәр йылғаһынан ҡыуғын ҡыуғандар, һал ағыҙғандар. Йыл аяҙ килгәндә, Инйәр һайығып, ҡыуғын ҡыуыу ауырлашҡан. Бындай осраҡта ҡыуғынсылар Йәй ташы ярҙамына мохтаж булғандар. Башҡорттар, ямғыр яуыуын теләп, тыйыуҙы боҙоп, ваҡыт-ваҡыт изге һаналған таш һынды шулай йәрәхәтләгәндәр.

Тәбиғәттә төрлө хайуан, йәнлек һынына оҡшаш таштар осрай. Йәй ташының да тәбиғи һәйкәл булыуы мөмкин. Нисек кенә булмаһын, тау башҡорттары уны ниндәйҙер илаһи көс тарафынан тыуҙырылған изге таш тип һанағандар. Әлбиттә, ҡолон һынына оҡшаған ҡәҙимге таштың да изгеләштерелеүе ихтимал. Икенсенән, таш ҡолондоң боронғо оҫталар зиһене менән тыуҙырылған сәнғәт ҡомартҡыһы булыуы ла бик мөмкин. Боронғо башҡорттарҙың йылҡыны изге һанауҙары хаҡында Ибн-Фаҙландың мәғлүмәттәрен иҫкә алғанда, таш ҡолондоң боронғо башҡорттар ҡулы менән яһалған ат һыны булыуы бар.

Йәй ташы ярҙамында ямғыр яуҙырырға йәки көндө аяҙытырға ынтылыу күренеше башҡа төрки халыҡтарҙа ла булған. Шуныһы ҡыҙыҡ, инйәр-ҡатай ырыуы башҡорттарында ҡарағош, һуйыр берҙәтәүенән сыҡҡан таштарҙы Яҙа таш тип атау, уны им-томда файҙаланыу йолаһы бар. Туваларҙа ямғыр яуҙырыусы Жада таш ҡулланыу мәғлүм. Тува һунарсылары ҡарағош, һуйыр, ҡор аулағандар һәм уның берҙәтәүенән сыҡҡан таштарҙы шаманға, им-томсоға биргәндәр. Берҙәтәүҙән алынған Жада ташты өйҙә бик ныҡ һаҡлап тотҡандар, тышҡа сығармағандар, ҡояшҡа күрһәтмәгәндәр. Ҡоролоҡ ваҡытында ямғыр яуҙырыу өсөн генә Жада ташын өйҙән алып сыҡҡандар һәм, яҫы түңәрәк таш өҫтөнә һалып, өҫтөнә һыу һипкәндәр йәки үҙен һыуға һалғандар. Ямғыр етерлек яуғас ҡына шаман был ташты һыуҙан алып, өйгә индереп йәшереп ҡуйған, һәм ямғыр яуыуҙан туҡтаған [1].

Йәй ташы, Яҙа таш, «Джайтасы», Жада таш боронғо төрки халыҡтарҙың аң-ҡарашын, ышаныуҙарын сағылдырған һәм изге һаналған. Бына ошо йәһәттән Белорет районындағы Йәй ташы (Ҡолоҡай таш) башҡорттарҙың культураһын өйрәнеүҙә ҡиммәтле ҡомартҡы булып тора.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп китмәй ярамаҫ: үкенескә ҡаршы, хәҙерге көндә лә таш ҡолондо һуғып ямғыр яуҙырыу мөмкинлегенә ышанған ҡайһы бер кешеләр осрай икән. 1966 йыл миңә Инйәр буйы ауылдарында экс-

[1] 1979 йылда Тува АССР-ы Тодж районы Адыр-Кижиг ауылында коол ырыуына ҡараған тува кешеһе Максим Чигжиттан (1910 йылғы) автор яҙып алды.

педицияла йөрөгән сак̓та һалсыларҙың ямғыр яуҙырыу мак̓сатында таш к̓олондо таш менән сәпләүҙәре, хатта мылтык̓тан атыуҙары хак̓ында ауыл к̓арттарының зарланып һөйләгәндәрен ишетергә тура килде. Йәй ташы — культк̓а әйләндерелгән тәбиғи таш булғанда ла, кеше к̓улы ижад иткән сәнғәт к̓омартк̓ыһы булған хәлдә лә — иҫәпкә алынырға һәм һак̓ланырға тейешле.

Башк̓ортостанда хайуандар культына бәйле тағы бер уникаль тәбиғәт к̓омартк̓ыһы бар. Ул — хәҙерге Бөрйән районы территорияһында урынлашк̓ан һәм киң билдәле Шүлгән мәмерйәһе. Шүлгән мәмерйәһе диуарҙарында боронғо кешеләр төшөргән ат һәм башк̓а хайуан һүрәттәре бар. Халык̓ араһында таралған легендаларҙа һәм «Урал батыр» эпосында Шүлгән мәмерйәһе дейеүҙәр тарафынан күк һәм к̓оштар батшаһы толпары Ак̓буҙатк̓а һарай итеп һалынған, тиелә. Шулай ук̓ хайуан культына бәйле бик күп ер-һыу исемдәре Башк̓ортостанда, ынйы бөртөктәре кеүек, һибелеп ята.

Күсмә малсылык̓ менән көн күргән башк̓орттарҙа, ғөмүмән, төрки халык̓тарҙа хайуандар, бигерәк тә йылк̓ы культының элек киң таралған булыуы хак̓ында байтак̓ археологик материалдар тупланды[1]. Йылк̓ы культының күсмә халык̓тар тормошонда ҙур урын алған-

---

[1] Мажитов Н. А. Южный урал в VII—XIV вв. М.: Наука, 1977, 115—118-се б.; Кузьмина Е. Е. Распространение коневодства и культа коня у ираноязычных племен Средней Азии и других народов Старого Света. — Средняя Азия в древности и средневековье. М., 1977, 28—52-се б.; Ковалевская В. Б. Конь и всадник. М., 1977.

лығын Үҙәк һәм Урта Азия, Көньяҡ Себер, Ҡаҙағстан, Урал алды территорияларында өйрәнелгән һәм тупланған археологик материалдар дәлилләй. Шулай уҡ мал культы эҙҙәрен туғандаш төрки халыҡтарҙың эпик ижадында осраған сюжеттарҙа, мотивтарҙа күрергә мөмкин.

ЙОМҒАҠЛАУ

Ҡобайыр — башҡорт халҡы тормошон киң масштабта монументаль образдар аша һүрәтләүсе, халыҡтың уй-тойғоларын, ҡараштарын, йолаларын, көнкүрешен тәрән яҡтыртыусы, ҙур эволюция этабын үткән боронғо поэтик жанр. Уның ҡайһы бер мотивтары тәүтормош-община ҡоролошо дәүеренә үк барып тоташа. Шундайҙарға йәнһеҙ тәбиғәтте йәнләндереп ҡарауҙы, кешеләрҙең ҡош-йәнлектәрҙе тотем һанауҙарын, үҙҙәренең сығыштарын төрлө йәнлектәргә бәйләп аңлатыуҙарын, тәүтормош-община ҡоролошона хас төркөмләп өйләнеү, йәғни бер туған улдарҙың бер туған ҡыҙҙарға өйләнеү йолаһын (мәҫәлән, «Урал батыр» эпосында Урал менән Шүлгән апалы-һеңлеле Һомай менән Айһылыуға өйләнә) һ. б. индерергә мөмкин.

Эпос жанры, бигерәк тә ҡаһарманлыҡ эпосы, тәүтормош-община ҡоролошо тарҡалып, шәхси милекселеккә нигеҙләнгән ырыу ҡоролошо башланыу дәүерендә тыуа һәм үҫеш ала, тигән фекер совет фольклористикаһында ныҡлы урын алған.

Һәр халыҡтың үҙенең тарихи үҫешендә

«эпик осор» үткәреүе һәм шул осор ваҡиғаларын сағылдырыуы мәғлүм. Әммә «эпик осор» сиктәре, халыҡ үткән тарихи тормош шарттары үҙенсәлегенә ҡарап, бер төрлө генә булмаған. Мәҫәлән, башҡорт халҡының эпик осоро ырыу ҡоролошо емерелә башлауҙан алып Башҡортостанда феодализм ҡоролошо таркала һәм капиталистик мөнәсәбәттәр урынлаша башлауғаса киң дәүерҙе эсенә ала. Эпос шулай оҙайлы эволюция кисерә, унда төрлө ҡатламдар барлыҡҡа килә.

Боронғо дәүерҙә тыуған «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк һәм Һыуһылыу», мал культына нигеҙләнгән эпик әҫәрҙәр һәм XVIII быуат осорона ҡараған «Батырша», «Ҡараһаҡал», «Юлай менән Салауат» ҡобайырҙары «эпик осор» хронологик рамкаһының поляр сиктәрен билдәләй.

Һуңғы осорҙа яңы эпик әҫәрҙәр тыумаһалар ҙа, элгәре ижад ителгән эпик ҡомартҡылар быуындан быуынға, телдән телгә күсеп йәшәгәндәр, йәш быуынды тәрбиәләүгә ярҙам иткәндәр. Башҡорт халҡының эпик ижадын тикшереү шуны күрһәтә: эпос жанрының тыуыу һәм формалаша башлау дәүерендә, бигерәк тә уның тәүге үҫеш этабында мифологик ҡараштар кешеләр аңына ҙур йоғонто яһаған. Мифологик, тотемистик, этиологик ҡараштар, тормошто, образдарҙы фантастик планда һүрәтләү картиналары байтаҡ ҡына эпик әҫәрҙәрҙең, мәҫәлән, «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» һәм изгелекле хайуандар циклына ҡараған «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» кеүек архаик эпостарҙың нигеҙенә ятҡан. «Урал батыр» эпосы геройҙары алла, ярым алла рәүешендә. Урал

батырҙың ата-әсәһе — кеше ырыуын башлаусы үлемһеҙ йәндәр. Әҫәрҙең төп ҡаһарманы Урал — мифик батыр. Эпоста һүрәтләнгән күк аллалары, эйәләре Самрау, Ай, Ҡояш, Һомай, Айһылыу — үлемһеҙ заттар. Геройҙың, кешеләрҙең дошмандары — аждаһа, дейеү, йыландар, ендәр һәм башҡа мифик йәндәр. Кешеләр ҡулға эйәләштерелгән малды белмәйҙәр, сей ит ашап, йәнлек ҡаны эсеп йәшәйҙәр. Эпос геройҙары анһат ҡына бер ҡиәфәттән икенсеһенә инәләр. Эпос батырҙары донъя ҡоралар, тауҙар яһай, йылғалар йыра, йәнлектәрҙе ҡулға эйәләштерә, яуыз мифик йәндәр менән көрәшәләр, улар донъя ҡороусы «культур герой» образында һүрәтләнәләр.

Мифологик ҡараштар, фантастик һүрәтләүҙәр хайуандар хаҡындағы ҡобайырҙарҙа ла мөһим урын биләй. Уларҙа халыҡтың боронғо аң-ҡарашын сағылдырыусы йылҡыны, үгеҙҙе, һыйыр малын, боландарҙы һәм башҡа ҡошҡортто изгеләштереү, тотем һанау күҙәтелә.

Мифологик ҡараштар, мотивтар, фантастик һүрәтләүҙәр һуңыраҡ тыуған эпик ҡомартҡыларҙа («Күсәк бей», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алпамыша» һ. б.) сағыштырмаса аҙ урын ала, тормош-ваҡиғаларҙы, образдарҙы реалистик планда һүрәтләү көсәйә төшә. Ә «Батырша», «Юлай менән Салауат» кеүек колониаль һәм социаль иҙеүгә ҡаршы көрәште һүрәтләүсе ҡобайырҙарҙа фантастика элементтары, мифология мотивтары бөтөнләй сағылмай тиерлек. Уларҙа реаль тарихи ваҡиғалар һәм шәхестәр реаль тормош солғанышында һүрәтләнә.

Эпос боронғораҡ булған һайын, унда мифология, фантастика күберәк, һәм, киреһенсә,

һуңғыраҡ осор эпик ҡомартҡыларында мифология әҙерәк була, ә реалистик һүрәтләү өҫтөнлөк итә. Эпик ҡомартҡыларҙа һынландырылған образдар буйынса ла эпос жанрының эволюцияһын күҙәтергә мөмкин. Мифологияға нигеҙләнгән героик ҡобайырҙарҙа мифик батыр ыңғай герой итеп һүрәтләнә. Урал батыр кешеләрҙе дейеү, ен, аждаһа, йылан кеүек яуыз йәндәрҙән ҡотҡара. Ул, грек легендаларындағы Прометей кеүек үк, кешелек мәнфәғәте өсөн бөйөк ҡаһарманлыҡ эшләй, тәбиғәтте мәңге үлемһеҙ яһай. Йыш ҡына ыңғай герой образында изгелекле, өлөшлө малдар һүрәтләнәләр. Мәҫәлән, Ҡара юрға үҙенең эйәһенә кәләш килтереп бирә («Ҡара юрға»). Ҡыҙ артынан кейәү йортона инсе мал итеп ебәрелгән Ҡуңыр һыйыр, Ҡуңыр буға башҡорттар өсөн бик кәрәкле, мөһим юл һалалар, изге төҫлө, өлөшлө малдарҙың ишәйеүенә булышлыҡ итәләр. Был эпик ҡомартҡыларҙа күсмә малсылыҡ хужалығы менән шөғөлләнгән халыҡтар ижадына хас булған мал культы көслө.

Һәр осорҙа ла ыңғай геройға, дөрөҫөрәге, идеаль геройға талап бер төрлө генә булмаған. Мәҫәлән, феодализм йәмғиәтенең башланыу һәм нығыныу осоронда ырыуҙар берҙәмлеген, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап көрәшеүсе, илде дошман яуынан һаҡлаусы батыр идеаль юғарылыҡҡа күтәрелгән.

Феодализм осоронда ырыу ҡоролошона хас булған ҡарымта, ырыу-ара ыҙғыш ҙур ғәйеп һаналған, ырыуҙар берҙәмлеге темаһы үҙәк урынды алған. Колониализмға һәм социаль иҙеүгә ҡаршы халыҡ азатлығы өсөн көрәшеүселәр, восстание етәкселәре — XVIII быуатҡа ҡараған эпик поэмаларҙың идеаль геройҙары.

Ҡобайырҙарҙы ижад итеүсе һәм быуындан быуынға еткереүселәр — сәсәндәр. Сал тарих төпкөләндә тыуған эпик ҡомартҡыларҙың беҙҙең көндәргә тиклем килеп етеүенә беҙ, иң беренсе, халыҡ йырауҙарына, сәсәндәренә бурыслыбыҙ. Әлбиттә, эпик ҡомартҡылар күп быуатлыҡ йәшәү дәүерендә беҙҙең көндәргә үҙгәрешһеҙ килеп еткән, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Башҡорт халҡының тарихында булып үткән мөһим ваҡиғалар, һис шикһеҙ, эпик ижадҡа тәьҫир итмәй ҡалмаған. Башҡорт эпосында һәр мөһим осорҙоң ҡатламын, эҙҙәрен күрергә мөмкин.

Тикшеренеү шуны күрһәтте: башҡорт сәсәндәре, ҡырғыҙ манассылары кеүек, бер нисә циклдан торған Урал батыр һәм уның тоҡомдары хаҡында ҙур поэтик эпопея тыуҙырыуға ынтылыш яһағандар. Генеологик тәртипте һаҡлау принцибы менән ижад ителгән «Иҙел менән Яйыҡ», «Аҡбуҙат», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» (Т. Беляев версияһы), «Күсәк бей» эпик ҡомартҡылары «Урал батыр» эпосының логик дауамы булып тора.

Монографияла башлыса башҡорт эпосының боронғо осорона ҡараған ҡаһарманлыҡ һәм көнкүреш эпик ҡомартҡылары тикшерелде.

Боронғо мифологик ҡараштар нигеҙендә тыуған «Урал батыр», «Аҡбуҙат» ҡобайырҙары башҡорт халҡының ҡаһарманлыҡ эпосының алтын фондын тәшкил итәләр. Был эпик әҫәрҙәр юғары поэтикалы булыуы, ҙур оҫталыҡ менән донъяла ғәҙеллектең өҫтөнлөгөн раҫлауы, халыҡтарҙың ғәҙел тормош, идеаль йәмғиәт тураһындағы борондан килгән хыялдарын сағылдырыуы, гуманистик ҡараштарҙы алға һөрөүе менән әһәмиәтле. «Урал батыр»,

«Аҡбуҙат» героик эпостарына халыҡ тормошон киң сағылдырыу, һүрәтләнгән образдарҙың мөһабәтлеге һәм бөйөклөгө, сюжеттың һәм әҫәр композицияһының күп планлы булыуы хас.

Башҡорт халҡы Көньяҡ Уралда бик күп ҡәрҙәш төрки ырыу-ҡәбиләләренең һәм башҡа ҡәрҙәш булмаған ырыуҙарҙың бергә ойошоуы һөҙөмтәһендә формалашҡан. Әммә уның төп нигеҙен күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе төрки ҡәбиләләр тәшкил иткән. Башлыса күсмә малсылыҡ, һунарсылыҡ менән көн иткән башҡорттарҙың аң-ҡарашында, сәнғәтендә, фольклорында мал культының ныҡ үҫешкән булыуы, хатта айырым эпик сюжеттарҙың тыуыуы — тәбиғи хәл. «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» ҡобайырҙарының башҡорт эпик репертуарында һаҡланыуы һәм хәҙерге көндә лә популяр булып ҡалыуы — уникаль күренеш. Ул ҡомартҡыларҙа башҡорт халҡының боронғо ҡараштары, ыҙан-йолалары, тормош-көнкүреше, этик һәм эстетик ҡараштары ҙур оҫталыҡ менән һүрәтләнә. Башҡорт халҡының тарихын, рухи культураһын, сәнғәтен өйрәнеүҙә эпик ҡомартҡыларҙың әһәмиәте ҙур. Халыҡтың зиһене, аҡылы менән ижад ителгән боронғо ҡаһарманлыҡ һәм көнкүреш ҡобайырҙарын ентекләп өйрәнеү һәм пропагандалау башҡорт халҡының һынлы сәнғәтен, әҙәбиәтен, хореография һәм музыка сәнғәтен үҫтереү өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ илһам шишмәһе, ҡиммәтле сығанаҡтарҙың береһе буласаҡ.

«Аҡбуҙат» эпосы нигеҙендә С. Мифтахов яҙған либреттоға композитор Х. Заимов менән А. Спадавеккиа тарафынан 1942 йылда «Аҡ-

буҙат» операһы ижад ителеүе, Советтар Союзындағы иң ҙур ипподромдарҙың береһе — Өфө ипподромына «Аҡбуҙат» исеме бирелеүе, «Урал батыр» эпосы сюжетын файҙаланып яҙылған «Урал батыр» драмаһының (Ғ. Шафиҡов) ҡурсаҡ театрында ҡуйылыуы һ. б. — барыһы ла боронғо эпик мираҫтың беҙҙең бөгөнгө культурабыҙға емешле йоғонто яһауы хаҡында һөйләй.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш һүҙ 3
Беренсе бүлек. Башҡорт халыҡ эпосы һәм уны өйрәнеү мәсьәләләре 12
Икенсе бүлек. Мифологияға нигеҙләнгән героик ҡобайырҙар 44
Өсөнсө бүлек. Мифологияға, хайуандар культына бәйле көнкүреш ҡобайырҙары 112
Йомғаҡлау 216

Мухтар Муффазалович Сагитов

ДРЕВНИЕ БАШКИРСКИЕ КУБАИРЫ

Монографическое исследование

(на башкирском языке)

Редакторы *Р. Ф. Зәйнуллин*
Рәссамы *Х. F. Насыров*
Художество редакторы *А. А. Костин*
Техник редакторы *З. F. Чингизова*
Корректоры *В. М. Рәхимова*

ИБ № 3365

Наборға бирелде 8.04.87. Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.06.87. П00027. Ҡағыҙ форматы 70×90¹/₃₂. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Офсет ҡағыҙы № 1. Шартлы баҫма таб. 8,19. Шартлы буяу отт. 8,30. Учет.-изд. таб. 7,97. Тиражы 3000 экз. Заказ № 100. Хаҡы 70 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. 450000, Өфө-үҙәк, Совет урамы, 18. Башкирское книжное издательство. 450000, Уфа-центр ул. Советская, 18. Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

70 тип.